# Ағиҙел

Өфө,
декабрь
2009

12 (1041)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Зилә Йәнбәкова, Әлфиә Махийәнова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.12. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 100 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0177.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2009 (12, 1041)**

# БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Лилиә Сәғиҙуллина.** Беҙ уйнаған уйындар. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..............5
**Тамара Ғәниева.** «Үтәләйгә һуға был осор…» Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........13
**Сәрүәр Ғәләүетдинов.** Атайыма. Ш и ғ ы р ҙ а р . ............................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ишғәли Нурғәлиев.** Ҡарабаш турғай. Я ҙ м ы ш н а м ә . Аҙағы. ......23

*«Күңелемдә – донъя сере»*

«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ

**Әлфидә Ҡансурина.** Ҡуласа. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................88
**Айзилә Шәрәфетдинова.** Йыуанысым. Ш и ғ ы р ҙ а р . .................90

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ғайса Хөсәйенов.** Хәҙерге шиғриәтебеҙгә бер байҡау. ..................91

*Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала Сыңғыҙ Айытматов көндәре*

**Фирҙәүес Хисамитдинова.** Сыңғыҙ Айытматов һәм башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрендә мифологик мотивтар. ............................108
**Гөлназ Ҡотоева.** Сыңғыҙ Айытматов ижадының рухи донъябыҙға йоғонтоһо. .................................................................113

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибраһимов.** Кинйә. Т а р и х и р о м а н . III китап. Бүгәсәү батша һанаты. Аҙағы. .......................................................118
**Суфиян Поварисов.** Умырзая сәскә атҡанда… *(Ғәли Ибраһимовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата)* ................................165

СӘНҒӘТ

**Рәмилә Йәһүҙина.** Үткәндәргә һәм бөгөнгөгә бер ҡараш *(Башҡорт дәүләт академия драма театрына – 90 йыл)* ..............170

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2009 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Л. Сагидуллина, Т. Ганиева, С. Галяутдинов** *(стихи)*.

ПРОЗА

**И. Нургалиев.** Воробушка моя *(повесть). Окончание.*

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

*В душе – тайна мира*

**А.Кансурина, А. Шарафетдинова** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Хусаинов.** О современной башкирской поэзии.

*В Анкаре дни Чингиза Айтматова*

**Ф. Хисамитдинова.** Мифологические мотивы в произведениях Чингиза Айтматова и башкирских писателей.

**Г. Кутуева.** Влияние творчества Чингиза Айтматова на духовный мир башкир.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г. Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга). Окончание.*

**С. Поварисов.** Когда цветет подснежник... *(К 90-летию со дня рождения Г. Ибрагимова).*

ИСКУССТВО

**Р. Ягудина.** Взгляд на прошлое и будущее *(90 лет образованию Башкирского государственного драматического театра).*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

СОДЕРЖАНИЕ ЖУРНАЛА «АГИДЕЛЬ» за 2009 год

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтер — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Лилиә
СӘҒИҘУЛЛИНА

# БЕҘ УЙНАҒАН УЙЫНДАР

*Кеше йөҙгә етһә лә,*
*Кеше йөҙҙө утһә лә,*
*Бала саҡтағы уйындар —*
*Тыуар көнгә матрица.*

## Ҡарап

*Гөрләүектәргә һалдым мин*
*Ҡарап яһап ҡағыҙҙан.*
*Мин генәме балалығын*
*Даръяларға ағыҙған?*

*Кем — ҡағыҙҙан, кем — ағастан:*
*Һәр кемдең үҙ карабы.*
*Елкәнгә лә бераҙ — алды,*
*Бераҙ һайлай ҡараны.*

*Яҙғы боҙло йылғаларҙа*
*Күпме донъя сайҡала?!.*
*Ал елкәнле карабымды*
*Ниҙәр көтә даръяла?*

*Ҡарап ебәргән мәлемдең*
*Белмәһәм дә асылын,*
*Яҡынымды оҙатҡандай,*
*Күңел ҡалды баҫылып.*

*Артынан тороп йүгерҙем —*
*Китте, ахры, ғәзиз йән!..*

---

*Лилиә Сәғиҙуллина — Шаран ҡыҙы. БДУ-ла уҡыта.*
*Педагогика фәндәре кандидаты. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ә ул, ана, ал елкәнен*
*Офоҡтарҙа ҡабыҙған...*

*Гөрләүектәргә һалдым мин*
*Карап яһап ҡағыҙҙан.*
*Мин генәме балалығын*
*Даръяларға ағыҙған?!.*

## *Таған*

*Өс туғанға өс таған*
*Яһай атай ныҡ бауҙан.*
*Һәм беҙ орсоҡ түгел инде —*
*Беҙ бейек Сәсәктауҙан.*

*Әйҙә, таған, өс таған!*
*Ерҙән күккә күс, таған!*
*Бер мәлгә генә булһа ла*
*Зәңгәрлекте ҡос, таған!*

*Маймылланмай бит таған,*
*Ул — ҡанатлы ҡош-таған!*
*Тышаулы толпар кеүек тә...*
*Һиндә ҡайҙан көс, таған?*

*«Көс бар ҙа... Ерҙә — терәк.*
*Тағанға терәк кәрәк.*
*Күпме күккә ынтылһа ла —*
*Ер тартыуы көслөрәк...»*

*Ҡанатлана өс туған:*
*Ер — Күк әйләнгән заман.*
*Тирбәлдерә-түңкәлдерә*
*Ни өйрәтмәксе таған?*

*Хәҙер ҡыйыҡта таған —*
*Уяу күргән төш һымаҡ...*
*Беҙҙе көтөп ятмай микән?*
*Ҡарағыҙ, тип, көс һынап?*

## *Тәтәй йыйыу уйыны*

*Бала саҡта тәтәй йыя инек —*
*Сынаяҡ ватыҡтарын.*
*Аҙаҡ уйнай инек. Ә уйынсыҡ —*
*Үткән көн ярсыҡтары.*

*Сағыштыра инек: кемдеке күп?*
*Кем тапҡан иң матурын?*
*«Табын» ҡора инек шулар менән,*
*Күпләп «ҡунаҡ» саҡырып.*

*Бара ине шундай алыш-биреш!*
*Сотбиҙар* ситтә торһон!*
*Ә ҡаҙыныу?.. Иң шәп тәтәй менән*
*Тәтәй янсығы тулһын!..*

*Әллә беҙгә шунан ҡалды микән*
*Ярсыҡҡа ла ҡыуаныу?*
*Ерҙән тапҡан һәр бер ҡыйпыҡҡа ла*
*Бөтөн тиеп инаныу?*

*Күктән торна-ынйы эҙләгәнде*
*Хроник ахмаҡ тип һанау?*
*Тәтәй сәпсек күберәк ҡаптырғанды*
*Төкрөктәр сәсеп данлау?*
*Тәтәй тиеп йыйманыҡмы икән*
*Ваҡыттар ҡыйпылсығын?*
*Тормош-яҙмыш ҡайтауазы, ахры,—*
*Бала саҡ уйынсығы.*

## Ҡурсаҡ

*Ҡурсаҡ менән уйнаманым.*
*Бәлки, кәрәк булғандыр...*
*Ҡурсаҡ һорап иламаным.*
*Күңел тулһа тулғандыр...*

*Минең дә ҡурсаҡ бар ине:*
*Барбиҙарға тиңдәшһеҙ!*
*Башын бәргеләп ваттылар —*
*Табалманым яҡлар көс.*

*Бик бәләкәй инем шул мин:*
*Алынмаған бишегем.*
*Яуыҙлыҡ менән улем дә*
*Тәү ҡаға йән ишеген.*

*Әммә ғәйеп — ғәйеп инде:*
*Оломо һин, кесеме —*
*Яратҡаны өсөн һәр саҡ*
*Яуап тота кешелек.*

*Һораманым яңы ҡурсаҡ.*
*Яһаманым. Алманым.*
*Ташламаным сүплектәргә*
*Ҡул-аяҡһыҙ ҡалғанын...*

*Табылмаған табыштарҙы*
*Юғалтыуҙан һаҡланым.*
*Яҙылмаған һағыштарҙы*
*Ғүмерем буйы аҡланым.*

---

*Сотби — аукцион исеме.*

## Ҡасышлы уйыны

*Ҡасышлы уйнайбыҙ, ҡасышлы:*
*Һанашлы, эҙләшле, табышлы,*
*Һынашлы, күҙләшле, асышлы,*
*Алышлы, еңешле, ҡалышлы,*
*Көлөшлө, илашлы, ярашлы,*
*Ҡосошло, осошло, күсешле —*
*Ҡасышлы уйнайбыҙ, ҡасышлы...*

## Йөҙөк һалыу уйыны

*Тимер сыбыҡ киҫәгенән*
*Һин йөҙөк үрҙең.*
*Шуны уйында, һиҙҙермәй,*
*Һин миңә бирҙең.*

*Әммә: «Йөҙөк миндә!» — тиеп*
*Атылып сыҡманым.*
*Уртаҡ серҙе асмаҫ өсөн*
*Түҙҙем, сыҙаным.*

*Уйындың үҙ ҡағиҙәһе:*
*Һикереп сыҡ икән!*
*Бар донъяны яңғыратып*
*Саңдар һуҡ икән!*
*Уйындан тыш ысынлыҡҡа*
*Юлдар юҡ икән...*

*Алхимия закондарын*
*Һуңлап өйрәнәм:*
*Алтын балдаҡ ҡоймаҡсымын*
*Тутыҡ тимерҙән,*
*Усаҡ тергеҙәлһәм әгәр*
*Үлек күмерҙән...*

## Бесәй-сысҡан уйыны

*Бесәй ҡыуа сысҡанды,*
*Уйлай-уйлай: «Тотһаммы?!.»*

*Сысҡан да шәп йүгерә,*
*Йән-фарманға елдерә.*

*Еңеү-еңелеү — йән хаҡы,*
*Шуға көрәш бик ҡаты.*

*Хәл итә бер яңылышы*
*Бесәй, сысҡан яҙмышын.*

*Онотмайыҡ: бар ҡулса —*
*Был уйынға төп хужа.*

## *Сылбыр өҙөү уйыны*

**(Ал тирәк, гөл тирәк)**

Селтәр элдем ситәнгә
Елфер-елфер итәргә.
Беҙ килмәнек буш китәргә,
Ҡилдек алып китәргә.

*Һайлауҙар, һайланыуҙар,*
*Сылбырға ташланыуҙар,*
*Өҙә алмай ҡыланыуҙар*
*Йә өҙөп ҡыуаныуҙар.*

*Сит-ятҡа белдермәҫкә,*
*Үҙеңә һиҙҙермәҫкә:*
*Сылбырҙы өҙҙөрмәҫкә*
*Һәм һине ебәрмәҫкә!*

*Ныҡлап тот һин дә ҡулдан —*
*Ел үтмәҫ был быуындан!*
*Шулай, сығып уйындан,*
*Тормош башларбыҙ һуңынан.*

*... Ниәттәр елдә уңған.*
*Сылбырҙар хәҙер ҡомдан...*

*Бер заман килер берәү*
*Һәм һалыр ҡулға бығау.*
*Теләмәһәм дә теләү —*
*Уйынға тейеш түләү.*

*... Ул килмәй буш китергә,*
*Килә алып китергә...*

## *Һуҡыр тәкә уйыны*

*Күҙ бәйләш уйнамайыҡ!..*
*Килмәй бит бәреләһе,*
*Һуғылып, йығылаһы,*
*Тиктомал тапалаһы,*
*Күҙ быуып алданаһы.*

*Уйнаманым...*

*Ҡайтауаздай*
*Шул уйындың шәүләһе:*
*Тартҡылашам, булмаҫ өсөн*
*Илдең һуҡыр тәкәһе.*

## *Ағас атта...*

*Ағас атта*
*Ҡыҙыҡ ине*
*Сабый саҡта!*
*Бөгөн ҡабат*
*Мендерҙеләр*
*Шул уҡ атҡа.*
*Атһыҙҙар юҡ!*

*Әцерелдек*
*Һыбайлыъа.*
*Кцрсе, нисек*
*Ҡайъырталар*
*Беҙҙең хаҡта!..*
*Былдай бәхет*
*Мөмкин бары*
*Беҙҙең яҡта...*
*Аъас ҡына?*
*Дошман һцҙе!*
*Төптө хата!..*
*Әмер менән*
*Үҙгәрер, ти,*
*Ҡара — аҡҡа,*
*Йцкә аъастар —*
*Затлы атҡа —*
*Аръымаҡҡа...*

*Ҡыҙыҡ та ул*
*Бала саҡта*
*Аъас атта...*
*Ҡыҙыҡ тцгел*
*Әйләнецҙәр*
*Атһыҙ затҡа...*

## Энә һәм еп уйыны

*Кемдер — энә, ә кемдер — еп*
*Был донъя-ҡуласала...*

*Энә булып уйнаһам да,*
*Еп булып ҡыланһам да,*
*Епте ташлай алаһам да,*
*Өҙөлмәй сыҙаһам да;*
*Сигә-сигә, ямай-ямай*
*Ҡыуанһам да, илаһам да —*
*Әйләнгән һайын ныъыраҡ*
*Бәйләнәм ҡуласаъа...*

## Әбәк уйыны

*Ваҡыт-яҙмыш,*
*Тормош рәцешенә кереп,*
*Артымдан ҡыуа килә.*
*(Кцпме ъцмер шулай интектерә!)*
*Ә мин бар көскә йцгерәм.*
*Ул ҡоръан тоҙаҡҡа эләкмәҫ өсөн*
*Орсоҡ кецек бөтөрөләм,*
*Көтөлмәгән кәртәләргә төртөләм.*
*Эҙ яҙҙырмаҡ буламын, тик*
*Абынам да һөрлөгәм.*
*Һуҡтыраһы башым юҡ, тип*
*Таъын тороп йцгерәм.*
*Юҡ! Тоттормайым!*
*Йцгерәм!*
*Өлгөрәм?!.*
*Әбәк!..*

## Туп атыш уйыны-1

*Туп аталар ике яҡлап.*
*Туп аталар төҙәп, атап.*

*Мин — уртала: йәнде һаҡлап*
*Өйөрөләм. Хәлем — сак-саҡ.*
*Әгәр бер туп тотһам яйлап —*
*Запас йәнле булам!.. Эх, шәп*
*Булыр ине, тимен, шул саҡ!*

*Өлгөрмәйем уйҙы уйлап.*
*Тоталмайым тупты!.. Һайлап*
*Алырҙайын күрмәйем нишләп?*
*Аталар бит ике яҡлап?!.*
*Аталар шул шәпләп-шәпләп...*

*... Туплап оса ялған, ғәйбәт!*
*Мәкерлеккә хәйлә бәйләп,*
*Һәр бер аҡты таплап, сәйнәп,*
*Хәҡиҡәтте ваҡлап, яйлап,*
*Йән ҡыйырға һөсләп, әйҙәп —*
*Йәнлеләргә туп аталар:*
*Бөгөн тупҡа йән тоталар —*
*Һәм «туп» та «туп» йән һаталар...*

*Эх, хаталар!..*

## Туп атыш уйыны-2

*Шул уҡ уйын — башҡа аңлам.*
*(Уйындар ҙа ҡатлам-ҡатлам!)*

*Туп аталар беҙгә күптән,*
*Ерҙә генә түгел — Күктән.*

*Хәбәрҙәрен нурға туплап,*
*Яңы көндө ҡотлап, хуплап,*
*Ҡояш яна беҙһеҙ һыуһап —*
*Яҡын Күктә йылы усаҡ.*

*Йыраҡтараҡ булғандары —*
*Йондоҙ исеме алғандары —*
*Юҡһыныуҙан атылалар:*
*Өнһөҙ үрнәк ҡалдыралар.*

*Туп аталар беҙгә Күктән.*
*Бирелгәстен был туп өҫтән,*
*Алыр өсөн буйы еткән*
*Кеше кәрәк!.. Теүәл был фән.*
*Булмай бында алдап, майлап.*
*Күк бит үҙе ала һайлап!*
*Кеше-бәндә күптән көткән*

*Үҙе иңә уъа Кцктән.*
*Яһайһы тик бер ынтылыш —*
*Яңы кцсеш, яңы осош!..*

*Туп аталар беҙгә кцптән,*
*Ерҙә генә тцгел — Кцктән...*

## Кцҙ каплау уйыны

*«Таны! Таны!— тиҙәр.— Кемдең кулы,*
*Кемдең усы кцҙең капланы?*
*Иң якының, дуҫың, туъаныңмы?*
*Беҙ алмайбыҙ бында яттарҙы».*

*Төрлө сактар булды: бутаным да,*
*Вакыт-вакыт дөрөҫ атаным.*
*Үҙ тигәнем яңылыш булып сыкһа,*
*Төҙәттерҙе уйын хатаны...*

*Был уйында инде еңдем тигәс,*
*Япма-кулдар донъя капланы.*
*Туъан, таныштарҙы ни барланым!..*
*Кем икән һуң?.. Яуап тапманым.*
*Таный алалманым кцҙ йомдоръан*
*Таныш тцгел якын устарҙы.*

***

*Уйындар!..*
*Уйынды*
*беҙ*
*Уйнайбыҙ, тип*
*Уйланъан.*
*Уйын цҙе*
*Беҙҙең менән*
*Уйнаъан.*

*Уйнаъан...*

*Тик һаман да*
*Уйналыштан*
*Туймаъан.*
*Беҙ — уйынсык*
*Уйыныңда,*
*Эй, заман!*
*Курсак ебе*
*Кем кулында?*
*Әйт, йыһан!*



**Тамара**
**ҒӘНИЕВА**

# «ҮТӘЛӘЙГӘ ҺУҒА БЫЛ ОСОР...»

## *Башҡортостан*

*Хыялыма килде ирек биргем:*
*Остом!*
*Талды ҡанат остарым...*
*Ҡошсоҡ ҡына булып йыр сығарҙым —*
*Һоҡланыуҙан,*
*Башҡортостаным!*

*Төйәгемә сикһеҙ мөхәббәтем*
*Йәрем,*
*Балам ише мөҡәддәс*
*Бер кисереш ине...*
*Изге хистәр*
*Фиғелемде тотош биләгәс,*

*Һомайғоштай һауаланым,*
*Илде*
*Ҡурсалағым килде.*
*Илаһым...*
*Башҡортостан!*
*Ғәзизлегең ҡәҙерен*
*Төшөнөүҙән*
*Түгелеп иланым.*

*Тамара Ғәниева — ун китап авторы. Рәми Ғарипов, Фәтих Кәрим исемендәге премиялар лауреаты. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Бөркөт булып ҡараным мин бер саҡ*
*Һәм татыным үрҙәр ҡосағын.*
*Баш әйләнер ҡая,*
*Бейеклектән*
*Бөйөклөгөң дәүмәлдәрен үлсәп,*
*Тетрәндем мин,*
*Башҡортостаным!*

*Ер шарына,*
*Тимәк, тупрағыңа*
*Бәрелеп — булды — танау ҡанаттым.*
*Үсекмәнем,*
*Һөйгәненә тоғро*
*Йәр шикелле һине*
*Яраттым.*

*Тик һин шаһит:*
*Булды яңылышҡаным,*
*Абынғаным булды,*
*Осҡаным.*
*... Һин дә мине,*
*Үтенәм,*
*Үлгәс түгел,*
*Бөгөн ярат,*
*Башҡортостаным!*

## Ана ғына

*Беҙ яратҡан тауҙар — ана ғына!*
*Тик әйҙәмә мине — төңөлдөм.*
*Бейеклектең шөһрәт түгеллеген*
*Төшөндөрҙө ғүмер.*
*Бөгөлдөм.*

*Һинән әле һүрелмәнем дә ул,*
*Тик саҡырма бүтән тауҙарға.*
*Һин ошонда ғына ярат мине,*
*Итәгендә үрҙең,*
*Саңдауҙа.*

*Өлөш самалымы,*
*Даланмы юҡ,*
*Ҡойто булды яҙмыш яҙғаны.*
*Нисә һапырһам да, шыйыҡ өйрә*
*Һондо миңә Ғаләм ҡаҙаны.*

*Беҙ яратҡан тауҙар — ана ғына!*
*Үркәстәре һайын — эҙебеҙ.*

*... Ҡара, тышта муйыл сәскә ата,*
*Тупһабыҙҙа алсаҡ көҙөбөҙ.*

*Ымһынмайыҡсәле...*
*Шул тауҙарҙан*
*Тәпәшме ни хәҙер үҙебеҙ?..*

***

*Мөнбәрҙәргә баҫып ағай-эне*
*Хәбәр һөйләй:*
*— Уңдыҡ.*
*Туҡбыҙ, туҡ!*
*... Беҙ торабыҙ тыңлап, ауыҙ асыҡ:*
*— Туйҙылармы ысын*
*Шулай уҡ?*

*Ә ғәмәлдә*
*Беҙҙең өйрә һимеҙ,*
*Ҡуйы булды бары —*
*Хыялдан.*
*Анауҙарҙы әйтәм,*
*Тығыналар,*
*Ауыҙҙары микән арандан.*

*Кәйеф-сафа шулар кисергәндә*
*Аҡты беҙҙән бары һеләгәй.*
*Аһ, был ғүмер,*
*Кемдеке лә бераҙ,*
*Тик кем хәрәмләште теләмәй,*

*Уларына мөһөр һуға былар:*
*«Йүнсел булмағас ни!*
*Йүнһеҙлек*
*Нисек итеп мулға тейендерһен?*
*Ана шунан — яҡшы көнһөҙлөк!»*

*Ә беҙ барыбер,*
*Зинһар,*
*Өңшәймәйек*
*Ҡалдыҡ-боҫтоҡ затлы ҡабымға.*
*Әйҙүкләрҙәр ҡайсаҡ*
*Ҡалған ашҡа*
*Йә һығылып торған табынға.*

*Милләттәшем!*
*Эҙләмә лә ситтән,*
*Илдәшеңдә бәләң —*
*Түреңдә.*

*Ана шулар беҙҙе артҡа һөйрәй!*
*Мөнбәрҙәрҙән тороп хәбәр һөйләй —*
*Вәғәҙәләре бары теләндә.*

***

*Һин бар, беләм.*
*Сиселеп һүҙ ҡатырға*
*Ҡушмай ғорурлығың.*
*Ғәжәп түгел.*
*Минең һылыулығым*
*Һүрәттәрҙә хәҙер, иҫтәлектә.*
*Арбай бары һине һәм өркөтә*
*Минең ҡыйыулығым.*

*Һин бар. Беләм.*
*Тотош үтә күрәм*
*Тура ҡарамаҫҡа көсәнеүең*
*Барыбер һата.*
*Ҡырыҫыраҡ ҡыланаһың хатта.*
*Әммә ирлек сәмең игәй,*
*Ыҙалата.*
*Һин бар. Беләм.*
*Мин эсемдән көләм.*
*Һинән түгел,*
*Йүнһеҙ үҙ-үҙемдән*
*(Ниңә шулай ғәмһеҙ ҡыланамдыр?):*
*Белгән көйө*
*Имен сыҡмаҫыңды*
*Үҙең теләп алған халәтеңдән!..*

## *Мәкер*

*Ҡырын сыға,*
*Ҡыра һуға никтер...*
*Ниәттәрем әллә нахаҡмы?*
*Кем ғәйепле?*
*Түҙемемме*
*Тәләфләнде?*
*Уйым аҡһаҡмы?*

*Тиреҫ елен минме кисермәгән...*
*Үтәләйгә һуға был осор.*
*Дерелдеген сығам.*
*Ҡиблам тармы?*
*Хыялдарым зәғиф,*
*Уй ҡыҫыр.*

*Офоҡтарым, ай-һай, киң ине бит,*
*Аша атлаулы хәҙер —*

*Яп-яҡын.*
*...Ир-ат мәкеренән бирешеүҙән*
*Иңе өҙөлөп барған мин ҡатын.*

## *Иҫке бишмәт*

*Ярамаған беҙгә тағын —*
*Һырылған иҫке бишмәт.*
*Һаплайһы ла йылынаһы,*
*Затындамы ни хикмәт.*
*Көйә лә төшмәгән әле,*
*Өлбөрләп ҡабыҡмаған.*
*Беҙ ҙә әллә кем үк түгел, —*
*Дөлдөлдәр ҡороҡлаған.*

*Суртанға тип мурҙа ташлап,*
*Һөҙгән бар ыуаҡ-сыбыр.*
*Бәлки, ебәк үлдәксәндең,*
*Бишмәтле — бишмәтле шул, тип*
*Беҙгә лә күҙе ҡыҙыр.*

*Ярамаған беҙгә тағын!*
*Ямарым,*
*Ҡаҡҡыларым.*
*Түшәп ятырмын бер килке,*
*Ябынып ятҡыларым.*

*Ҡып итеп торған була ул,*
*Үҙемә — үҙемдеке.*
*...Көсәмәнем түгел дә ул...*
*Дошмандың күҙен ҡыҙҙырып,*
*Бәғерен өҙөрлөктө...*

***

*Был арала никтер күңелдәрем*
*Һытылырға торған алмалай;*
*Даға уйып киткән тамғалай,*
*Йөрәкһей ҙә мыжып ҡуйған була,*
*Илағыһы килгән балалай.*

*Был арала йәрем нисәмә рәт,*
*Яңыртҡандай йәшлек анттарын,*
*Берүк рәнйемә һин,*
*Булды, тине,*
*Ҡайыра бороп сәфәр аттарын,*
*Итәк елберләгән һәр ҡапҡаға*
*Дилбәгәмде тартҡан саҡтарым.*

*Был арала, һине яратам, тип*
*Тылҡыһа ла ихлас, үпһә лә,*

*Йәнемә оялаған үпкәгә*
*«Етәр!» тиеп тыйып төн сығарһам,*
*Һикерә лә тора иртәгә.*

*Мәңгегә тип ара өҙмә икән...*
*Һағыш — үжәт, ай-һай, үҙһүҙле.*
*Минән артыҡ түгел көндәшемдең*
*Күҙ алмамды һура һөмһөрө.*
*Эре генә йөрөп ятыуҙанмы?!*
*Рәнйеш бөккән арҡам — көмөрө.*
*Их, нишләп беҙ элек айырылыштыҡ?*
*Һин уҡ аттың...*
*Ә мин таш аттым.*
*Эҙәрлекләмәнем.*
*Һағындырҙым.*
*Тегенеңде тәки ташлаттым.*
*... Нишләп йәнде өйкәй иҫһеҙлеге*
*Һуңлап аҡыл ингән был баштың?..*

## ***Көтөү***

*Ай-һай, иркен ине йәнтөйәгем,*
*Сослоҡ һүрелеп, ойоп киттеме?*
*Өңшәңләшеп килеп инмәһенме*
*Туҡал, һөмһөҙ мөстән көтөүе.*

*Һоғоналар һутлы биләмәмде,*
*Лыпылдатып «ҡоймаҡ» ҡоялар.*
*Ҡинәнәләр мышнай-мышнай көйшәп,*
*Уя баҫып та бер булалар.*

*Һыуалышып бөткән.*
*Тыу үҙҙәре.*
*Ит тиһәң — ит,*
*Ней һөт — елендә.*
*Сыбыртҡылап ҡыуһаң...*
*Йәл мәхлүктәр...*
*Йөрөһөндәрсәле.*
*Күңелдә*
*Бол күп бит ул.*
*Болон-болон сәскә,*
*Улаҡ-улаҡ тере шишмәләр.*
*Бал тәмәйтә моңсол йүкәләрем,*
*Ҡурайҙарға ҡырау төшмәгән.*

*Бер үҙемә күп тә кеүек әле.*
*Ҡул һелтәнем.*
*...Күрҙем аҙаҡтан:*

*Һирәк-мирәк алабута ғына*
*Сәскә ата икән «ҡоймаҡ»тан.*

*Ҡотом китеп бара...*
*Әллә ҡалай*
*Тәләфләнде бит һуң йән түрем.*
*Ниндәй орлоҡ сәсһәм уңыр икән?*
*Әле саңдау борхой*
*Күҙ күрем...*

## Бар әле...

*Бер юнысҡы.*
*Ғаләм-океандың*
*Ҡаҙанында бәрелеп-һуғылған.*
*Хәтер тере әле:*
*Тамырым — ерҙә!*
*Ҡаушып ҡына булмай!*
*Дәште Дала*
*Ни гонаһым өсөн тыйылған?*

*Бер юнысҡы.*
*Туғыҙ баллы тулҡын*
*Сойорғота,*
*Әйҙә, ос, тиме?*
*Ағасыма балта сабылғанда,*
*Ҡауырыйымы ни,*
*Һауаланым...*
*Нишләп?*
*Үҙһүҙле йә йоҡаҡ инемме?*

*Бер юнысҡы.*
*Ғаләм океанында*
*Серемәй торған,*
*Батмаҫ заттан мин.*
*Унар ғына ундан аҡыҡ ятҡан*
*Эйәр ҡаштарында — минең ишем,*
*Ирҙәр илгә терәк саҡтан мин.*

*Бер юнысҡы.*
*Мәғрур ҡарағастан.*
*Бирешмәгән төҫө — Нух саҡтың.*
*Мәкер нишләтмәһен,*
*Мин — бар әле!*
*...Етһә етер башыма бер осҡоно*
*Үҙ заттарым яҡҡан усаҡтың.*



## Сәрүәр
## ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ

### *Атайыма*

Нахаҡҡа рәнйетелеп, Себергә һөрөлгән атайыма,
уның туғандарына һәм ауылдаштарыма бағышлайым.

*Биштән генә быуып билкәйеңде,*
*Билбауырҙан тәрән көрт кисеп,*
*Себер аҕастарын ҡырҡтың, атай,*
*Аслы-туҡлы, ҡай саҡ һыу эсеп.*

*Себер селләләре, ай-һай, зәһәр,*
*Үҙәктәргә үтә һыуыҕы.*
*Електәрҙе өтөр саҡкауҙары —*
*Түҙеп кенә торһон ҡыуыҕың...*

*Ҡисен ҡайтҡас һалҡын бараҡтарҕа,*
*Туң икмәкте булһа кимереп,*
*Көн иттегеҙ яҙмыш ҡушыуынса,*
*Быҕдаҕылар ятты һимереп.*

*Ике һыйыр, бер ат көткән өсөн*
*Кулак булдыҕыҙмы ҕүмергә?*
*Бер ҕаиләнән етәү киткәнһегеҙ*
*Хәсрәт иле — алыҫ Себергә.*

---

*Сәрүәр Ғәләүетдинов Әбйәлил районының Ҡолғана ауылында (хәҙер Бөрйән районына ҡарай) тыуып үҫкән. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын, Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлай. Ҡолғана мәктәбендә тарих фәненән укыта.*

*Ил буйынса барған был золом һис*
*Аямаған миллион яҙмышты.*
*Ҡайтҡанһың һин, атай, яңғыҙ ғына,*
*Үҙ иңеңә тейәп һағышты.*

*Олатай ҙа ҡалған, өләсәй ҙә,*
*Ҡусты, һеңлеләрең — Себерҙә.*
*Улар йәне һис тә тыныс түгел*
*Ятҡанға ла алыҫ сит ерҙә.*

*Себер селләләре, ай-һай, һыуыҡ,*
*Үҙәктәргә үтер зәһәре.*
*Һеҙҙе илдән һөргән яуыздарға*
*Төшә бөгөн Аллаһ ҡәһәре.*

## Ғүмер

*Үткән генә ғүмер — аҡҡан һыу шул*
*Күҙ иңләмәҫ кенә ерҙәргә.*
*Ниҙәр генә килеп, ниҙәр ҡалмай*
*Ирмен тигән аҫыл ирҙәрҙән.*

*Ҡай берәүҙән ҡалһа ат дағаһы,*
*Берәүҙәрҙән ҡала күк билғау.*
*Ҡай берәүҙән ҡалһа көмөш балдаҡ,*
*Берәүҙәрҙән ҡала күк беләү...*

*Ни ҡалһа ла ҡала — бәхәсем юҡ,*
*Йәшәй белеү үҙе — йыр бит ул.*
*Йәшәләсәк кеше ғүмерҙәре —*
*Асылмаған ғына сер бит ул.*

## Һин генә бит*

*Һине күргәс, йөрәк ярһып типте,*
*Һине күргәс, күңел ярһып китте,*
*Һин һиҙмәнең, йәнем, һиҙмәнең.*
*Нисә йылдар инде һине эҙләп,*
*Күргән һайын һаман һине күҙләп*
*Ҡай ерҙәрҙе генә гиҙмәнем.*

*Һин генәлер инде табышым да,*
*Һин генәлер шатлыҡ, һағышым да,*
*Һөйөүемде тик һин яулаған.*
*Һинән башҡа бер ни кәрәк түгел,*
*Һинән башҡа бер ни терәк түгел,*
*Һин генә бит мине аңлаған —*
*Тыңлаған...*

---

* *Композитор Нур Дауытов көйө.*

## *Ҡемдәр йыуатыр икән?*[*]

*Һиҙелмәй ҙә үтеп китте*
*Аҡ буранлы ҡыштарым.*
*Көткән яҙ килһә лә кукрәп,*
*Ҡайтманы аҡҡоштарым.*

*Ҡамышлы күл буйҙарында,*
*Юҡ аҡҡош тауыштары.*
*Йөрәккәйемде һыҙлатып,*
*Арта шул һағыштарым.*

*Ҡамышлы күлде һағынып,*
*Аҡҡоштар ҡайтыр микән?*
*Болоҡһоған күңелемде*
*Кемдәр йыуатыр икән?*

## *Тоҡтағол*[**]

*Күк Ирәндек итәгендә*
*Юл ситендә ҡәберлек:*
*Ҡәберлеккә сәскә һала*
*Бер ҡарт әбей ҡәҙерләп.*

*Бында ауыл булған, тиҙәр:*
*Нигеҙ таштары ҡалған.*
*Кешеләре ҡайҙа икән,*
*Ҡай тарафҡа юл алған?*

*Ниндәй афәт үткән бынан,*
*Булған мәллә ел-дауыл?*
*Ер йөҙөндә ниңә юҡ һуң*
*Хозур төйәк – Тоҡтағол?*

*Эй, замана... Әллә күпме*
*Ауылдар юҡҡа сыҡҡан.*
*...Хаҡ яҙмышты татығыҙ, тип*
*Йәшәргә Хоҙай ҡушҡан.*

---

*[*]Композитор Айрат Ғайсин көйө.*
*[**]Тоҡтағол – Батыр Вәлидтең тыуған төйәге*

Ишғәли
НУРҒӘЛИЕВ

# ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ*

Яҙмышнамә

## *Мәктәп тупһаһы*

*Кут белгуси — билиг*
*(Бәхет билдәһе — белем).*
**Мәхмүт Ҡашғари**

Мәктәпкә барырға миңә бер кем дә ҡушманы, үҙем барып индем. Тәүҙә бер һүҙ ҙә әйтмәй торҙом. Минең өсөн был урын бик сәйер, шикләнеү ҙә бар. Нисек итәһең, минең уҡырға килеүем кешегә оҡшамаған булһа кәрәк. Сөнки минең ҡулдарым буш: китап-дәфтәрем дә, ҡара һауытым да, ҡәләмем дә — ғөмүмән, бер генә уҡыу кәрәк-ярағым да юҡ. Яланаяҡмын, йыртыҡ күлдәк, алама ыштан кейгәнмен. Минеңсә, мәктәп — ҡыйын урын, бында минең кеүек бер генә кеше лә юҡ. Уҡыусыларҙың барыһы ла шат йөҙлө: шаяралар, көләләр, тартҡылашалар, йолҡҡолашалар. Һәр кем үҙен шәп күрһәтергә тырыша. Күптәр мәктәпкә мәжбүри уҡытыу нәтижәһендә генә килһә, улар өсөн мәктәп — ҡарар үтәү. Уҡырға ла тырышып ятмайҙар. Ә мин бында ниңә килгәнемде яҡшы беләм. Шуныһы ла хөрт: уҡыусыларҙан барыһы ла миңә ҡарағанда ҙурҙар. Ярай әле, класта бер дуҫым бар — Сынтимер, миңә шул булғас еткән инде. Беҙ сәңгелдәктән үк бергә үҫкәнбеҙ, ул — иң яҡын иптәшем.

Әлбиттә, минең әсбаптарым юҡ, ләкин икенсе класта уҡығандарҙың белемен тулыһынса үҙләштергәнмен. Белемемде артабан арттырыр өсөн һуңғы ҡабымымды бирергә әҙермен. Уҡыуҙан ҡайтҡандарҙан өйрәтеүҙәрен ялынып һорайым, ә мәктәптә инәлмәһәң дә өйрәтәләр, күп өйрәтәләр, белеп өйрәтәләр. Шулай итеп, минең мәктәпкә өмөтөм бик ҙур. Сөнки мин һәр ваҡытта ла яңынан-яңыны белергә, күрергә ашыҡтым.

Ауыл халҡы өсөн уҡытыусы (өләсәйсә — мөғәллимә) бик абруйлы кеше һаналды, уға ихтирам ҙур булды. Минең өсөн дә ул ябай кеше түгел, ә юғарынан, күктән ебәрелгән шәхес ине.

*Аҙағы. Башы 11-се һанда.

Әптек ауылындағы башланғыс мәктәп – ике бүлмәнән торған ағас бина. Совет дәүеренә тиклем ул мулла йорто булған. Ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған, таҡталарҙан яһалған соланы ла бар. Ике бүлмәнең дә ишектәре көнбайыштан асыла, икеһенең дә көньяҡ стенаһына ҡара таҡта эленгән, улар алдында уҡытыусы өсөн өҫтәл менән ултырғыс ҡуйылған. Бүлмәләрҙең күп өлөшөн парталар алған һәм өс рәткә теҙеп ҡуйылған. Араларында бер нисә асылмалы, матурыраҡтары ла бар, һәм һәр кем шуларға ултырырға тырыша. Мин генә ҡайҙа ҡушһалар, шунда урын алам. Шуға ла, ғәҙәттә, артта, ябай таҡтанан эшләнгән партала, ултырып йөрөйөм, сөнки минең өсөн урын түгел, дәрестәр ҡәҙерлерәк, әһәмиәтлерәк. Ике бүлмәнең дә йылытыр өсөн мейестәре бар, әммә, утын етмәү сәбәпле, уларға бик һирәк яғыла. Шуның өсөн дә класта уҡыусыларҙың ҡара һауыттарындағы ҡаралары туңа. Минең иһә дүрт класс бөткәнсе ҡара һауытым булманы. Унын ҡарауы, яланаяҡ булғас, ҡаты һыуыҡтарҙа мәктәпкә бара алмайым, өйҙә ултырам. Дөйөм алғанда, мин дәрестәрҙең өстән бер өлөшөн генә үҙләштерә алдым. Ни эшләйһең, «дәрес ҡалдырыусы» ҡушаматы миңә ныҡлап йәбеште.

Мәктәптә мине аптыраштa ҡалдыра торған ике нәмә бар. Береһе – төньяҡ бүлмәнең стенаһына эленгән ҙур һүрәт. Ул һүрәттә аяғүрә Сталин баҫып тора, алдында ҡыҙыл галстук таҡҡан малай баҫҡан, икеһе лә алыҫҡа ҡарағандар. Ҡаршыларында дүрт мөйөшлө иген баҫыуҙары, улар ултыртып үҫтерелгән ағастар менән билдәләнгән. Бик йәмле күренеш. Һүрәттәге малай бәхетле, кейемдәре лә таҙа, шыма, әйтерһең дә, ул яланда түгел, ә ожмахта. Аслыҡ күргәнгә лә оҡшамаған. Моғайын, ул тере булһа, беҙ унын менән дуҫлаша алмаҫ инек. Бер нисек тә: беҙ – төрлө донъя кешеләре. Шуғалырмы, был һүрәт минең өсөн тиҫкәрелек билдәһе булды. Мин уға яҡшы ҡараш ташлай алманым. Ярай ҙа, ул артта эленеп тора, дәрес ваҡытында күренмәй.

Икенсе бүлмәлә тағы ла бер һүрәт эленгән. Быныһы – бәләкәйерәк һәм ишектән ингәс тә көнсығыш стенала урын алған. Шуныһы ғәжәп: әгәр ошо класҡа дәрес барғанда һуңлап килеп инһәң, үҙеңде һүрәттәге малай кеүек тояһың. Мин был аптыратырлыҡ хисте бер нисә тапҡыр кисерҙем. Һүрәттә мәктәп бүлмәһе күрһәтелгән. Парталар артында – уҡыусы балалар, йөҙҙәре шат һәм бөтәһе лә ишеккә ҡараған. Ә унда алама кейемле хәйерсе малай ҡарап тора. Һүрәттең исеме – «У порога школы». Мин уны бик оҙаҡ яҡындан ҡарай алманым. Класс бүлмәһендә башҡалар булғанда яҡын килергә лә тартындым, сөнки: «Картинанан үҙеңде ҡарайһыңмы?» – тип әйтерҙәр кеүек. Ә класта бер үҙемә генә ҡалырға бер нисек тә тура килмәне. Икенсе класҡа күскәс кенә бындай мөмкинселек тыуҙы, һәм, ниһайәт, мин күптәнән хыял итеп йөрөгән уйымды тормошҡа ашырҙым. Аллаға шөкөр, әлдә һүрәттә беҙҙең мәктәп түгел икән. Хәйерсе лә миңә оҡшамаған. Ә мин, ысынлап та, бик оҙаҡ ҡурҡып йөрөнөм, сөнки, күп уйлап тормайынса, әйтеп ысҡындыра торған малайҙар: «Бына был һин», – тиерҙәр. Ундағы башҡа уҡыусы балалар ҙа беҙҙең ауылдыҡыларға оҡшамаған, күңелдәре көр. Киреһенсә, беҙҙең ярты ауыл малайҙары кейем яғынан теге хәйерсе малайға тартҡан. Күпселеге иҫке сабата кейгән, һәр кемдә тиерлек ҡырҡ ямаулы иҫке ыштан, йыртыҡ өҫтөндә йыртыҡ. Әлбиттә, һүрәттәге сифаттар ҙа юҡ түгел. Беҙҙең малайҙар ҙа көләс йөҙлө, шаярырға ярата. Бала саҡ бит. Тик мин генә ниңәлер башҡаларҙан айырылып торҙом. Көлөү тойғоһо миңә һирәк килде.

Уҡытыусылар беҙҙе дөрөҫ тәрбиәләргә тырышты. Сталин темаһы дәрестең тос өлөшөн алды. Унын тураһында шиғырҙар ятларға ҡуштылар, йырҙар өйрәндек. Мин генә бер шиғыр ҙа ятламаным, ә класс йыр йырлаһа, ауыҙымды асып, ниҙер мығырҙаным. Минең өсөн Сталин бәлә билгеһе булды.

Һәр көн, тәүге ике дәрес үткәс, ҙур тәнәфес була. Был ваҡытта һәр кем кеҫәһенә һалып килтергән аҙығын ашап ала. Миңә икмәк һирәк эләгә. Бер көн мин дә ҡара икмәк сығарып ашай башлағайным, эргәлә ултырған класташым: «Бының кеүек икмәкте беҙҙең ҡаҙҙар ашай», – тине. Мин бер һүҙ ҙә әйтә алманым. Өйгә ҡайтып шым ғына иланым. Ә ул малайҙың атаһы һуғышҡа барманы, налог йыйыусы булып эшләне. Ҡайһы берәүҙәрҙе: «Недоимкаң бар», – тип бер налогты ике тапҡыр түләткәне булды, үҙ кеҫәһенә лә һала белде. Шулай булғас, әлбиттә, уның ғаиләһе аҡ икмәк сәйнәп йәшәне. Атаһы үҙе кешеләр ашарға таба алмағанда араҡы ла эсеп йөрөнө. Хоҙай эше, ул кешенең ғүмере фажиғәле өҙөлдө: үҙенә үҙе ҡул һалды, кеше ҡарғышы төштө, буғай. Ә улы уңышлы юлға сыҡты. Бик сибәр егет булып үҫеп етеп, минең кеүек үк, Өфө нефть институтында уҡыны. Тик минең кеүек киске уҡыуҙа түгел. Уға ысын студент булыу бәхете тейҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уның яҙмышына шатландым ғына, беҙҙең аранан да йүнле кеше сыға, тип көттөм. Көтөүҙәрем бушҡа булды. Сибәрлеге лә ҡамасауланы, шикелле. Ҡатын-ҡыҙ менән күп буталды, эскегә бирелде, тора-бара тормоштан юйылды.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин беренсе класҡа, башҡа балалар кеүек, беренсе сентябрҙән бара алманым, бары октябрь айында ғына мөмкинселек таптым. Өҫтә кейем юҡ, уның ҡарауы, өйҙә минең өсөн эш күп. Өйҙәгеләр ҙә мәктәпкә барыуымды хуп күрмәне. Унда яңылыш кеүек барып индем.

...1948 йылдың октябрь аҙағы. Мин класс бүлмәһенең тупһаһында баҫып торам. Дәрес бара. Мин күренеү менән, барыһы ла бер тауыштан:

– Ул күсмәне, икенсе класта ҡалды, дәрестәрҙе күп ҡалдырҙы, – тип ҡысҡырҙы. Ә уҡытыусы – яңы кеше, бик матур "абый". Миңә класҡа инергә ишара яһаны ла, таҡта алдына килеп баҫҡас, ҡулыма китап тоттороп, уҡырға ҡушты. Мин ҡысҡырып уҡып бирҙем. Шунан ул аҡбур бирҙе лә китаптан миңә һөйләм яҙырға ҡушты. Мин тырышып ҡына, хатаһыҙ итеп был эште лә үтәп сыҡтым. Ағай арифметиканан да белемемде һынап ҡараны. Мәсьәлә уҡыны ла, мин яуабын сисеп бирҙем. Белмәйем, класта кем шулай булдыра алыр ине икән? Улар тын ғына ултыра. Уҡытыусы ла башҡаса һүҙ оҙайтып торманы. Бармағы менән партаға күрһәтте лә ултырырға ишара яһаны. Был уҡытыусы Әмир ағай Дауытов ине. Уны беҙҙең Әптек ауылына уҡытыусы итеп Әрмет ауылынан ебәргәйнеләр. Ул мине дүрт класс бөткәнсе уҡытты. Ни эшләйһең, мин яҡшы уҡыусы була алманым, ә Әмир ағай бик яҡшы уҡытыусы һәм кеше булды.

**Парсалар**

*Ҡышҡы һуҡмаҡтан атлайым. Һыуыҡ көн. Ҡар өҫтөндә үлек ҡарабаш турғай ята. Был ҡош үлек килеш тә матур, ҡанаттарын йәйеп ҡатҡан. Ҡулыма алып ҡарап торҙом, йөрәгем әрнене. Матур урынға алып барып һалдым.*

***

*... Ауылдағы өй алдында утын ярам, һирәк ҡайтам. Күберәк ярып, соланға индереп китергә кәрәк. Әсәй бер үҙе генә йәшәй. Мин ярған утын – иҫке өйҙөң бүрәнәләре. Эшкә мауығып, эргәмдә ҡарабаш турғай сырҡылдағанын ишетмәгәнмен. Үртәнеп сырҡылдағас, туҡтайым. Мин маңлай тирҙәрен һөрткәндә аңлап өлгөрҙөм: ҡарабаш турғай тырышып эшкә тотондо – ярылған бүрәнәнән эре ҡорт ҡурсаҡтары күренеп тора. Турғайҙар өсөн иң тәмле аҙыҡ. Стенаға арҡамды терәп бик оҙаҡ ҡарап торҙом, иҫем китте. Эйе, ҡарабаш – иң тәүәккәл, иң егәрле ҡош. Ҡараңғы төшә башланы, турғай ашауынан туҡтап, сырҡылдап, ҡанатын һелкеп рәхмәтен белдерҙе лә осоп китте. Оҙаҡ эшкә тотона алмай торҙом. Эйе, ҡарабаш турғайҙан да аҡыллы ҡош күргәнем юҡ әле.*

# Һулаҡай

*Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса*
*Ожмах табам тиеп уйлама.*

**Шәйехзада Бабич**

Минең өсөн мәктәп өләсәй алып барған мунса кеүек, сөнки мин унда һәр саҡ шатланып барам, кинәнеп йыуынам. Шуныһы ла бар: мунса инеү һис ҡасан мин теләгәнсә булмай. Өләсәй мине ләүкәгә мендерә лә мунса ташына күп итеп һыу һибә һәм мине миндек менән сабырға керешә – түҙерлек түгел. Хәлем бөтә башлай, тын алыуы ҡыйынлаша, ләкин өләсәй туҡтарға уйламай ҙа. Сыҙар хәлем ҡалмай. Ә өләсәй мине маҡтай, имеш, минән дә түҙемле әҙәм юҡ. Ул маҡтағас, түҙәһең инде.

Мәктәптә өләсәй юҡ, ул мәктәпте яратмай ҙа. Ул һүҙҙе әйткәне лә юҡ, «һабаҡҡа йөрөү» тип һөйләй. Мәктәптең дә минең өсөн мунсаға оҡшаған яғы бар: нисек кенә булмаһын, мәктәп минең ауыртҡан еремә һуға. Сөнки бында булған хәлдәрҙе ауылдағыларҙың «бәләкәй копияһы» тип атарға була. Уҡытыусының «яҡшы» уҡыусылары бар, насарҙары күберәк, ә мин урталыҡта булырға тырыштым. Телдәре тик тормағандар ҙа осрай, ҡулдарын күп бутағандар ҙа күренә. Ҡыҫҡаһы, мәктәп дәрес кенә бирмәй, дәрестән тыш ваҡыт балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен асыҡлар өсөн дә тәғәйен булып сыға.

Был йәһәттән күп ҡыйынлыҡтар кисерҙем. Төртмә теллеләр һәр саҡ етешһеҙлегемдән көлөргә тырышты, көслөрәктәре көстәрен күрһәтергә ынтылды, имеш, улар ғына йыға ала. Шулай итеп, мәктәп «өйөр системаһы»н үҙләштерергә мәжбүр итә, йәки ниндәйҙер башҡа альтернатив вариант таба белергә кәрәк. Мин тиҙ уйлай, фекер йөрөтә белдем. Эйе, бындай кешеләр төртмә телгә лә, көслөрәк ҡулға ла яуапты тиҙ таба. Тик барыбер башҡа ҡаршылыҡтары тыуа торҙо. Класта минән бер нисә йәшкә өлкән уҡыусылар бар. Уларҙың уҡыуҙа эше лә юҡ – мәктәпкә уҡырға түгел, кеше һанын арттырырға килеүсе мәжбүри уҡыу «себештәре». Әлбиттә, ундайҙар менән мин һүҙ көрәштерә алмайым, сигенеүҙән башҡа сара ҡалмай. Дәрес башланғас, власть «алмашына»: ҡулдары тик тормағандар шым була, киреһенсә, яҡшы уҡыусыларҙың ҡулдары күтәрелә башлай. Минең өсөн дә дәрес барышы яңы ҡыйынлыҡтар аса. Бына уҡытыусы мине таҡтаға саҡырта һәм, аҡбур алып, таҡтаға яҙҙыра башлай, тик мине үҙе тағы ҡыҫҡырып туҡтата. Мин – һулаҡай, шуға ла ул минән уң ҡул менән яҙыуымды талап итә. Тәнәфес ваҡытында яҙып ҡарағаным бар инде: һул ҡул менән яҙған яҙыуым уң менән яҙғанға ҡарағанда күпкә матурыраҡ. Ә дәрес ваҡытында ҡушылғанса яҙһам, хәрефтәрем зәғиф һәм йәмһеҙ булалар. Етмәһә, бар класс минән «һулаҡай» тип көлә. Мин бик көйөнәм, сөнки иптәштәрем араһында башҡа берәү ҙә һулаҡай түгел, шуға ла бер үҙемә бигерәк ҡыйын. Шулай ҙа таҡтаға ҡарағанда иң ҡыйыны – дәфтәргә яҙыу. Минең ҡәләмем дә, пероһы ручкам да юҡ. Ә уҡытыусының дәфтәргә яҙғанымды күргеһе килә, шуға ла башҡа берәүҙән ҡәләм йәки ручка ала ла миңә бирип яҙырға ҡуша. Һул ҡулым менән яҙһам, яҙмам һис шикһеҙ матур сығыр ине, тик уҡытыусы, нәфрәтләнеп, уң ҡул менән яҙыуымды талап итә. Ул буйһонорға теләмәй, ә мин тырышам, һөҙөмтәлә ҡәләм осланған башынан шарт итеп һынып та сыға. Шулай итеп, бер нисә тапҡыр кеше пероһын да кәкрәйтергә, хатта һындырырға тура килде. Ә инде зыян күргән уҡыусы минең ҡан дошманыма әйләнә, имеш, әсәһенән уға эләгәсәк, давай, тап перо. Ул ваҡытта бер дәфтәрҙе лә бер нисә кешегә бүлеп бирҙеләр, дәреслек уҡытыусыла ғына. Башҡа уҡыу әсбаптары тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Ысын ҡара һауытын йөрөтөүселәрҙе иһә һыңар ҡул бармаҡтары менән һанарға мөмкин.

Нисек кенә ауыр булмаһын, дәрес – минең өсөн иң ҡыҙыҡлы ваҡиға. Һәр алған белем киҫәге – минең өсөн ҙур табыш. Дүртенсе класта инде мин һулаҡайлыҡтан да, уҡыу кәрәк-яраҡтары булмауҙан да ҡыйынһынманым. Уҡытыусы ла хәлемде аңлай башланы. Уҡыуҙа башҡаларҙан ҡалышманым, ә отличник булырға үҙемә маҡсат ҡуймағайным. Мине пионерға ла алманылар. Ярай инде, барыбер галстугым юҡ ине.

Һулаҡайлыҡ миңә башҡа урында ла ҡамасауланы. Ололар, һул ҡул менән ашағанды күрһәләр, һәр ваҡыт тәтәй ҡулым менән ашарға ҡушып, киҫәтә килделәр. Малай-шалай араһында һулаҡайлығым уларҙың өҫтөнлөгөнә әйләнә. Үҙем дә һиҙмәҫтән, был үҙенсәлегемдән көлгән кешеләрҙе – айырым хәтергә, ә бының бер зыянын да тапмағандарҙы икенсе хәтер тоҡсайына һала башланым. Тора-бара тәүгеләрҙең – насар яҡтарын, ә икенсе төркөмдәгеләрҙең яҡшы яҡтарын күберәк таптым. Әйтәгүр, кемдең кем икәнлеген белдем.

Китаптар уҡый башлағас, һулаҡайлыҡ үҙенсәлегенең башҡа кешеләр өсөн зыянһыҙ булыуын асыҡланым. Бөйөк кешеләр араһында ла улар байтаҡ булған. Шуның өсөн дә мин ошо үҙенсәлегем менән иҫ китмәле бөйөк рәссам Леонардо да Винчи, полководец Александр Македонскийҙар менән бер таҡтала тороуыма ғорурланам ғына. Был дәлилдәрҙе ишеткән кешеләр ҙә мине башҡаса кәмһетмәй.

Шуны ла әйтергә кәрәк: нисек кенә һулаҡайлыҡты онотторға теләһәң дә, ул хужаһын ташлап китмәй. Мин уң ҡул менән матур итеп яҙырға өйрәндем, әммә чертеж-һыҙмаларымды барыбер һул ҡул менән һыҙам. Былай күпкә уңышлы килеп сыға. Кешеләр араһында ҡалаҡты уң ҡул менән тотоп ашайым, әммә өйҙә һул ҡулым менән тотоп ашаған ризығым татлыраҡ тойола. Хоҙай Тәғәлә шулай ҡушҡандыр...

**Парсалар**

*Быйыл ҡыш үҙенсәлекле булды: һыуыҡ менән йылы көндәр йыш алышынды. Өс ҡарабаш турғай имгәнгән килеш килделәр, һыңар аяҡтары баҫырлыҡ түгел. Күрәһең, һыуҙа туңған аяҡтарын суҡып, имгәтеп ҡотолғандар. Яҙ еткәнсе тәҙрәгә көнбағыш ашарға килделәр. Йөрәгем һыҙланы. Ҡарабаш турғай медицина ярҙамын ҡабул итмәй.*

## Ер әйләнә

*Биликлик эр өлти, аты олмэту,*
*Биликсизэсэн эркэн, аты – олук*
*(Белемле ир үлһә – исеме ҡала,*
*Белемһеҙ иҫән булһа ла, исеме – үлек).*

**Әхмәт Йүгәнәки**

Әптек башланғыс мәктәбендә һуңғы дәрес үтте, беҙ дүртенсе класты тамамланыҡ. Барыбыҙ ҙа шатланабыҙ, тик уҡытыусының: «Иртәгә Сәлихкә имтихан бирергә бараһығыҙ», – тип әйтеүе генә бер аҙ аптырата төштө. Имеш, имтихан бирмәгәндәрҙе ете йыллыҡ мәктәпкә алмайҙар. Ә Сәлих ауылына алты саҡрымдан артыҡ ара. Яҙғы өҙөк ваҡыт. Иртән иртүк тороп, әсәйгә күрше ауылға барырға кәрәклекте, юғиһә, икенсе йылға дүртенсе класта ҡалдырыуҙарын әйттем. Ашау яғы самалы, миңә ашап китергә аҙыҡ юҡ. Әсәй күршеләрҙән үтескә һорарға сыҡҡайны ла, булманы, ас ҡарындан ғына юлға сығып кителде.

Сәлих ете йыллыҡ мәктәбе беҙҙеке кеүек түгел икән, ике ҙур бина гөрләп тора. Дөрөҫөн әйткәндә, гөжләй. Уҡыусылар күмәк. Ә Сәлих малайҙары беҙҙең алда һәр төрлө «зирәклектәр» күрһәтергә тырыша. Тик мине уларҙың ҡыланышы түгел, төптә башҡа нәмәләре аптыратты. Әйтәйек, коридорҙа донъя картаһы эленгән,

унының янынан китеп тә булмай. Магеллан юлы ла, океандар, йылға-тауҙар һәм бик күп төрлө ҡыҙыҡлы нәмәләр күрһәтелгән.

Имтихан тигәндәренән тиҙ ҡотолдом. Биргән һорауҙарына ҡысҡырып яуап бирҙем, ҡара таҡтала яҙҙым, хисап сығарҙым.

— Ярар, барығыҙҙы ла йыйып, һөҙөмтәләрегеҙҙе әйтербеҙ, — тинеләр ҙә беҙгә сығып торорға ҡуштылар. Мин әлеге картаны ҡараштыра башланым. Магеллан юлын ентекләп тикшерҙем, океандар, диңгеҙҙәр тураһында белештем, Европанан Азияға, Азиянан Африкаға күстем, тауҙар, йылғалар исемдәрен ҡараным. Ә беҙҙе һаман йыйырға уйламайҙар ҙа. Картаға ҡарап асығыуҙы ла онотҡайным, нисектер, иҫемә килеп төштө. Төш ваҡыты үтте, уҡытыусылар беҙҙе йыйған ваҡытта ҡарын бушлығы ныҡ һиҙелә башлағайны.

Беҙ хәҙер бишенсе класс уҡыусылары булабыҙ икән. Бында тәртип тә Әптектәге кеүек түгел, икенсе, имеш. Тағы ла әллә ниндәй ҡағыҙәләр тураһында һөйләнеләр, янанылар, ә мин ниңәлер, бындағы тәртип беҙҙекенә ҡарағанда ла хөртөрәк, тип уйлап өлгөрҙөм. Сөнки Әптектә юҡҡа-барға ҡысҡырышыу юҡ, оят һүҙҙәрҙе лә малайҙар бик һирәк ҡуллана. Ә беҙгә һаман тәртип боҙоу тураһында һөйләнеләр. Мин ишеккә генә ҡарап ултырҙым, тамам асыҡтым. Ниһайәт, ҡотолоп, ҡайтыу юлына төштөк. Мин төркөм менән китмәнем. Көн матур. Йәшел үләндәргә кинәнеп баҫа-баҫа, тау аша киттем. Хәлем бөтә, атлағы килмәй. Башым әйләнә башлағас, үләнгә ятып ял итергә, хәл йыйырға булдым. Юғиһә, танау ҙа ҡанарға мөмкин, күп ваҡыт шулай булғылай. Бындай ваҡытта мин салҡан ятам да болоттарҙы күҙәтәм. Улар ниндәй генә төҫкә, ниндәй генә формаға күсмәй: хайуан рәүешенә лә инәләр, кешегә лә оҡшайҙар, бер-береһен ҡыуалар, юҡ булалар, яңынан барлыҡҡа киләләр. Асығыуҙы оноторға тырышам, мәктәптә күргән донъя картаһын хәтергә төшөрәм. Эйе, Ер әйләнә икән, ул бит йоморо. Магеллан да, һәр саҡ бер яҡҡа ҡарап бара торғас, үҙе башлаған юлға килеп сыҡҡан, бына әкәмәт. Малайҙар ерҙең йоморолоғона ышанмай. Ә мин хәҙер бөйөк сәйәхәтсе юлын күрҙем инде, аңланым, башҡаса минең менән бәхәсләшеүсе булмаясаҡ. Йоҡлап киткәнмен, ахырыһы. Тағы күккә ҡараным. Болоттар әйләнә кеүек. Аяғыма баҫырға тырыштым, ер ҙә әйләнә. Бына һиңә кәрәк булһа, ысынлап та, ер әйләнә. Ярай әле, танау ҡанаманы, юғиһә, оҙаҡ ҡына салҡан ятырға тура килер ине.

Танау ҡанағанды малайҙарға күрһәтмәҫкә тырышам, сөнки улар бөтә нәмәнән дә көлөргә әҙер. Шуға юлда ла үҙем генә йөрөргә тырышам, ни булһа ла, үҙем генә беләм.

...Шулай итеп, мин Сәлих мәктәбендә белем ала башланым, һәр көн ун ике саҡрым араны йәйәүләп үтеү еңел түгел, әлбиттә. Күп ваҡыт эсем ауырта, түҙеп булмаҫлыҡ ваҡыттар була, ә башҡаларға белдерергә ярамай. Шуға ла мин күберәк яңғыҙым йөрөйөм. Үҙем өсөн Сәлихтә уҡыуҙың яҡшы яҡтарын табырға тырышам. Ысынлап та, унда китапхана бар, минең өсөн был бик мөһим. Миңә китап уҡыуҙан да мөһим эш юҡ, ә Әптектә был шатлыҡ эләкмәй торғайны. Үҙемсә, иҫемдән генә уҡырға теләгән китаптарымдың исемлеген төҙөп ҡуйҙым. Уҡылған әҫәрҙәремдең эстәлеге юлда миңә ярҙамға килә, ундағы геройҙарҙы уйлап атлаһаң, ауыртыуҙар кәмей, тиҙерәк тә атлана, юл да ҡыҫҡара.

Өләсәй миңә: «Ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, кешегә белгертмә, төкөрөр булһаң — кеше күрмәгән ергә төкөр», — тип өйрәтте. Мин быны бер ваҡытта ла иҫемдән сығарманым. Эйе, минең сиремдән көлөргә әҙер тороусылар аҙ булманы.

Тик мин үҙ юлымды һайланым, яңғыҙ йөрөүҙән ҡурҡманым. Ә минең юлда ҡурҡырлыҡ урындар күп. Иртәнге ҡараңғыла уҡ сығып китәм, ауылдан һуң юл зыярат эргәһенән уҙа, артабан инде — урманға, бүреләр сығып, һөжүм итергә лә

күп һорамаç. Малайҙар ҡараңғыла ут яндырып бара: таяҡ башына сепрәк урайҙар ҙа кәрәсингә маналар, зыярат янына етһәләр — ут төртәләр.

Оҙаҡ яна. Бүре уттан ҡурҡа икән. Ә мин бер үҙем утһыҙ атлайым, сөнки башҡалар кеүек йүгерешә, төрткөләшә алмайым. Ут яндырып йөрөүҙәр ҡышҡы оҙон төндәр килгәс башлана. Әммә минең өсөн ҡышҡы уҡыу үҙенсәлекле лә. Сөнки дәрестәрҙең яртыһынан күберәген ҡалдырам. Минең өсөн өйҙә эш күп: ҡап һуғам, бәләкәй сана менән яҡын урманға утынға йөрөйөм. Хатта уҡырға барған көндәрҙә лә ун ҡап һуғырға өлгөрәм. Мин өйҙә дәрес әҙерләмәй инем, сөнки уҡығанымды яратманылар, ҡайһы ваҡыт ата-әсәйемде мәктәп директоры силсәүиткә саҡырта, уҡырға йөрөмәгәнем өсөн тауыш сыға, иçкәрмә яһала. Мин уҡырға йөрөүемде йышайтам. Ваҡытлыса.

**Парсалар**

*Ҡарабаш турғай һандуғас кеүек моңло һайрамай, әммә тауышы (минең өсөн) — иң матур тауыш. Ҡарабаш яҙға табан, үҙенә кәрәккәндә генә һайрай, ныҡ тырыша. Мин мауығып тыңлайым.*

***

*Инде ағастар йәшел, ә бер ҡарабаш турғай һаман һайрай, күрәһең, үҙ парын тапмаған. Бинокль алып сығып, офоҡтар араһын ҡараным. Эйе, һыңар аяғы зәғиф ҡош үҙенә пар таба алмаған. Йөрәгем әрнене.*

## Әкиәт тоҡсайы

*Куз келичи яҙын бэлгурэр*
*(Көҙҙөң ниндәйлеген яҙ белдерер).*

**Мәхмүт Ҡашғари**

Йәйге көн оҙон да, йәмле лә, ә төн ҡыçҡа. Ул шуға бигерәк тә ҡәҙерле. Йондоҙҙарға ҡарап ятыу ниндәй генә хистәр уятмай, башҡа ниндәй генә уйҙар килмәй. Үҙенде әкиәттәге кеүек тояһың.

Йәйге төндә беҙ, малайҙар, күмәкләшеп һарай башында йоҡларға яратабыҙ. Йәшел бесән өçтөндә бигерәк рәхәт. Беҙҙең өйгә яҡын Муллаҡтау итәгендә, ситәндән үреп, һарай яһап ҡуйҙылар, ул “Пожарный” тип атала. Эсендә янғынсы арбаһы, өçтөндә һыу тултырылған мискә, ҡул көсө менән эшләй торған насос; һарайҙың башы һалам менән ябылған, ҡыйыҡ эсенә йәшел бесән түшәлгән — был беҙҙең төнәй торған урын инде. Ә ҡайһы ваҡыт, көн болотло булһа, бесән түшәгебеҙҙе һарай эсенә күсерәбеҙ.

Хуш еçле бесән өçтөнә теҙелешеп ятҡас, малайҙар минең әкиәт һөйләүемде һорай. Бәй, улар мине «Әкиәт тоҡсайы» тип йөрөтә ләһә. Сөнки үҙем ишеткән йәки уҡыған әкиәттәрҙең йөкмәткеһен һис онотмайым, һәр саҡ иçемдә. Малайҙар һораһа, бер инәлтеп тормайым, улар һорағандарҙы килештереп һөйләп бирәм. Әкиәттәрҙе мин, тыңларға яратҡан кеүек, һөйләргә лә яратам. Өләсәйҙең, әсәйҙең һәм башҡаларҙың белгән әкиәттәрен барыһын да һөйләтеп отоп алғанмын. Быны өсөн миңә бер тыңлау ҙа етә. Билдәле, ололарҙан әкиәт һөйләттереү еңел түгел. Мәçәлән, өләсәйҙән ишетеү бигерәк тә ҡыйын: «Әкиәт ҡайғыһы юҡ әле», — ти ҙә ҡуя. Бик ялынып һораһаң ғына һөйләргә мөмкин. Уның һөйләгәне бик үҙенсәлекле, һәр әкиәт — өләсәй өсөн боронғо заманда булған хәл, һәм барыбер әкиәттәге хәлдәрҙе «булған, имеш» тип тамамлай. Әсәйгә оҙаҡ инәлергә кәрәкмәй, үҙе белгән әкиәттәрен иренмәй һөйләп бирә. Шуғалырмы, уның бар белгәндәрен дә тыңлағанмын инде мин. Атай бәйән иткән әкиәттәр икенсе төрлө. Ул «үҙем күрҙем» тип һөйләргә ярата. Мәçәлән, ул йәш сағында ҡуян ауларға йөрөгән.

Имеш, бер нисә кирбес ала ла ҡуян юлдарына һалып сыға, һәр береһенең өҫтөнә тәмәке һибә. Ә икенсе көндө йәки шул уҡ көндө ҡуяндарҙы йыйып алырға ғына ҡала. Сөнки ҡуян кирбесте килеп еҫкәй ҙә, сөскөрөп, башын кирбескә бәрә һәм иҫен юғалта. Уны салып алып ҡайтаһы ғына ҡала. Атайҙың бындайҙарға оҡшаған әкиәттәре күп, теләһәң — ышан, теләмәһәң — юҡ. Улар йәш сағында урманда маймылдар ҙа тотҡан, айыуҙы ла аулаған. «Ә ниңә хәҙер урманда маймылдар юҡ?»— тигән һорауға ла уның яуабы әҙер. Имеш, баҙарға алып барып һатып бөткәндәр.

Китап уҡый башлағас, минең әкиәттәр донъяһы шаҡтай киңәйҙе. Башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрен дә уҡып белдем. Ҡыҙыҡлы, фәһемле, аҡыллы әкиәттәр күп икән.

Йоҡларға ятҡас, малайҙар минең һөйләгән әкиәттәрҙе тыңлайҙар, тағы ла һөйләүҙе һорайҙар. Әкиәттәрҙән тыш, һуғыш тураһында уҡығандарҙы ла тыңларға яраталар. Шулай ҙа төн әкиәт өсөн генә бирелмәгән. Мин, һөйләй-һөйләй, йоҡлап та киткеләйем. Тик иң ныҡ тыңларға яратҡан Ишмөхәмәт дуҫым мине шунда уҡ төрткөләп уята ла тағы һөйләүҙе һорай. Һөйләйем. Төн уртаһы уҙа, таң беленгәс кенә йоҡлап китәбеҙ.

Таң менән мине уятырға киләләр. Йышырағы әсәй килә. Минһеҙ эш бармай шул. Нисә тапҡыр әсәйемә зарландым, аңлатып булманы. Иртәнге йоҡо татлыларҙан-татлы булһа ла, миңә барыбер эләкмәне.

Бына был төн дә шулай уҙҙы, таң атыр алдынан ғына йоҡлап кителгән. Һыйыр һауырға сыҡҡан әсәй мине уята ла башланы.

— Тор. Бәрәңге күмергә кәрәк, — тине.

Эйе шул. Утыҙ сутый бәрәңге баҡсаһына минән башҡа тәпке-матик тотоп сыҡҡан кеше юҡ. Утау ҙа, күмеү ҙә минең өҫтә. Өйҙәгеләрҙең барыһы ла бәрәңге эшләмәҫ өсөн сәйер сәбәп таба, минең генә сәбәп юҡ. Минең эшләгән эштең сифаты ла яҡшыраҡ, күмелгән рәттәр ҙә матурыраҡ. Сөнки тырышып эшләйем. Әсәйемдән тик шуны ғына үтенәм:

— Иртән иртүк уятма, барыбер минән башҡа бәрәңге күмеүсе юҡ, — тимен. Ул ризалаша. Ләкин иртәгәһенә был турала онота ла тағы мине уятырға килә. Ошо ғәҙәтен ташлай алмай. Имеш, ул торғас, башҡалар ҙа йоҡлап ятырға тейеш түгел. Бына бөгөн дә килеп уятты. Ләкин мин, йоҡома баш була алмайынса, кире урыныма тәгәрәгәнмен. Тик, ни рәүешлелер, яңылыш дуҫым Юнир менән урындарыбыҙ алмашынған. Торған ваҡытта уның урынына ятҡанмын, ул минекенә ауған. Баҡсала күренмәгәнгә, әсәй сыбыҡ тотоп тағы ла беҙҙең йоҡо урынына килгән. Күрәһең, мин тәрән йоҡола булғанмын. Әсәйҙең тәүге һуғыуы менән үк эштең нимәлә икәнен төшөнөп, һарайҙан сығып тайҙым — миңә эләкмәне. Ә әсәй, хатаһын аңлаһа ла, барыбер: «Яңылыш һуҡтым, яңылыш һуҡтым», — тип Юнирҙы туҡмауын дауам итте. Әсәйҙең үҙен тыя алмай торған сифаты бар ине шул. Бәрәңге түтәлдәре араһында иртәнге таңда йоҡлап киткән саҡтар ҙа булды. Бер ваҡыт, минең ошондай «гонаһым» ваҡытында, әсәй килеп матигы менән бар көсө менән билемә һуҡты. Ауыртыуҙан тороп булмай, ә ул өҫтәй генә бирә. Бына һиңә иртәнге ҡәҙерле йоҡо! Аҙаҡ белдем йоҡлаған кешегә һуғырға ярамағанлығын. Был турала башҡалар ҙа белһәләр икән.

Был «яңылыш туҡмаҡ» тураһында Юнир менән күп тапҡырҙар көлөшөп иҫкә алдыҡ. Нисек кенә булмаһын, беҙ йәйге ҡыҫҡа төндәрҙең ҡәҙерен белдек. Йондоҙҙар тураһында йондоҙҙарға ҡарап һөйләштек, һәр кемдең үҙ донъяһы булһа ла, бөтәбеҙ өсөн дә уртаҡ шатлыҡлы ваҡыттар булды. Әкиәт тыңлау ваҡыты тиҙ үтә.

Беҙ, балалар булһаҡ та, ололар эшен дә күп үтәнек. Ишмөхәмәт, Ихсан һәм мин йәй көнө бәләкәй арбаға егелеп, ҡыш көнө сана һөйрәп утынға йөрөнөк. Утын

ауыр, шуға ла тау үренә менгәндә үҙебеҙҙе, трактор тауышы сығарып, т-р-р-р тип ҡеүәтләр булдыҡ.

Беҙ, ҡәһәрле һуғыш осоро балалары, һәр беребеҙ үҙ шатлығыбыҙҙы үҙебеҙ табырға тейеш булғанбыҙ. Шулай ҙа беҙ шатлана ла белдек, тормош йөгө беҙгә ауырыраҡ эләкһә лә, сыҙаныҡ, уйнау-көлөү ваҡыттарының да ҡәҙерҙәрен белдек.

...Ихсан менән Ишмөхәмәт бик иртә донъя ҡуйҙылар. Ҡышҡы көндәрҙә яланаяҡ йөрөгән Ихсан ревматизмға тарыны. Үҙе барыбер аяҡтан яҙғансы колхозда эшләне. Аяҡтары баҫа алмаһа ла, колхоз малын көттө. Иртән атҡа атландырып сығарып ебәрәләр, төшкө ашҡа һәм кисен –төшөрәләр. Бер нисә йыл шулай эшләне. Янғантауға барып дауаланып та ҡараны, файҙаһы сыҡманы. Эш баҫты. Тамам аяҡһыҙ ҡалып, донъя ҡуйҙы. Ишмөхәмәт тә матур ғаилә ҡорҙо, балалары булды, тик оло йәшкә етә алманы. Бәләкәй ваҡыттағы ауыр тормош үҙенекен итте, сөнки сабый саҡта уҡ һәр кем бер нисә сир алып өлгөргәйне.

Беҙ мәктәптә уҡығанда, уҡытыусылар һәр көн беҙгә: «Мул тормошта йәшәйбеҙ», – тип һөйләнеләр, тик “имеш” һүҙен ҡушманылар. Сөнки, ул һүҙҙе ҡушһалар, уҡытыусы була алмаҫтар ине. Беҙ – һуғыш алдынан тыуған балалар. Яҙмышыбыҙ береһенекенә лә оҡшамаған. Беҙҙең турала яҙыусылар ҙа булманы. Хәйер, ниңә кәрәк инде? Уның ҡарауы, беҙҙең быуынды Ғазраил яратты, арымай-талмай сүпләп торҙо.

Ихсан менән Ишмөхәмәт – ҡыҫҡа ғүмерлеләр, тинем. Раҫ, Совет хөкүмәте ундайҙарҙы һәр саҡ урап үтергә тырышты. Ғүмер буйы бәхетлеләр генә һүрәтләнде, гәзит-журнал, китап биттәре ударниктар, алдынғылар менән тулды, сәхнә һәм радио маҡтаныуҙан туйманы. Ваҡыты шундай, тинеләр. Шулайҙыр шул. Тик тормош ябай түгел ине. Кеше барыһына ла түҙә, күнегә. Мин үҙем дә түҙемлелеккә мохтаж булманым, әммә түҙә алмаҫлыҡ мәлдәр ҙә бар ине шул. Эйе, һуғыш заманын һөйләргә яратыусылар күп, ветерандар күп, һәм улар барыһы ла бер һүҙ һөйләй.

– Беҙ (имеш) ниндәй аслыҡ-ялանғаслыҡ күрҙек, нисек түҙҙек, – тиҙәр. Мин ундай кешеләрҙе туҡтамай күҙәттем. Һуғыш ваҡытында ҡорһаҡтары тулып, кикергәнсе ашап йөрөгәндәр:

– Беҙ аслыҡтан саҡ үлмәй ҡалдыҡ, – тип маҡтандылар. Ғәмәлдә аслыҡ-яланғаслыҡты үҙ елкәһендә татыған кеше был турала хәтеренә төшөрмәҫкә тырыша. Бына шундай аксиома.

Юҡ, мин Ихсан менән Ишмөхәмәтте бәхетһеҙ кешеләргә һанамайым. Икеһе лә шатлана белде, ҡыҫҡа ғүмерҙәрен дә бик ихлас йәшәнеләр. Өйләнешеп, яҡты донъяла ғүмерҙәрен дауам итер малайҙарын ҡалдырҙылар. Улар өсөн тормош дауам итә. Ҡыҫҡа ғүмер – барыбер ғүмер.

Әкиәттәр балалар өсөн ҡыҙыҡлы. Минең өсөн дә әкиәт һәр ваҡытта ла ҡыҙыҡлы булды. Сөнки һәр әкиәт – билдәле бер халыҡтың ижад емеше, һәр береһе тарих менән бәйле. Тарихсы булараҡ, был йәһәттән мин төрлө кисерештәргә дусар булдым

Тәү сиратта, мин – башҡорт. Милләтем – Көньяҡ Уралдың иң боронғо халҡы. Шул боронғолоҡто хәҙергеләр менән әкиәттәр бәйләй. Шулай итеп, балалыҡтан үҫмерлеккә атлаған кеүек, мин әкиәттәрҙән тарихҡа атланым. Үҙем генә беләм. Атлау ҡыҙыҡһындырғыс булһа ла, бик күңелле булманы. Сөнки тарих биттәрен минең өсөн ысын тарихсылар яҙмаған булып сыҡты. Шуға ла миңә, ысын-барлыҡты асыр өсөн, тарихтың ҡараңғы шырлыҡтары аша үтергә тура килде.

Тарих яҙыусылар тураһындағы һүҙ бик оҙон, ә бына әкиәттәр тураһында асыҡлайһы һүҙ бар. Профессор Смирнов (Тюркологический сборник, 1973, стр. 228) беҙҙең әкиәттәр тураһында бына нисек яҙа: «А при подвижной кочевой

жизни не могло вырабатываться разнообразных, ни форм государственного быта... кибитка кочевника – не то, что постоянный дом или двор соседнего жителя, кочевая смена окружающей обстановки не давали почти никакого материала для творчества фантазии». Төрки әкиәттәре башҡорт әкиәттәренә оҡшаш, сөнки төрки халыҡтары башҡаларға ҡарағанда йышыраҡ, тәрәнерәк, төрлө формаларҙа аралашҡандар. Быларҙың һөҙөмтәһе халыҡ ижадында сағылған. Иҫәргә лә аңлашылалыр: ижад, киреһенсә, байыған ғына. Шулай, профессор Смирновтың был фекерен уҡығанда, көлгөм килә. Эйе, тарихты ошо ысул менән яҙҙылар ҙа беҙгә уҡырға ҡуштылар.

Әйткәндәй, урыҫ әкиәттәренә ҡағылһаҡ, ҡыҙыҡлыраҡ килеп сыға түгелме? Юҡ, көлкө килмәй, ә шулай ҙа: «Терем-теремок»та «терем» һүҙе беҙҙең «тирмә» һүҙе лә баһа. Башҡа рус әкиәттәрендә лә беҙҙең «ҡағылыш» тулып ята. Яҡшылабыраҡ ҡараһаң, аңлашыла: Смирновҡа бер нисә быуатҡа һуңыраҡ ижад ителгән әкиәттәр оҡшай. Ул, үҙе лә абайламайынса, Останкино башняһын Константин колоннаһы менән сағыштыра; Кощей аждаһанан яҡын, ни эшләйһең инде.

Шулай итеп, беҙҙең заман тарихты боҙоу яғынан да беренсе урынға сыҡты. Беҙ әкиәт тыңларға яратабыҙ бит.

**Парсалар**

*Бәләкәс ҡыҙым ҡолап төшкән ҡош балаһын күргән. Алып инергә ҡуштым. Ҡарлуғас балаһы оянан ҡолап төшкән икән. Сепрәктән оя яһаныҡ, һөт эсерҙек. Ул беҙҙе аптырашта ҡалдырҙы: үҙ гигиенаһы бар, тиҙ эйәләште, музыка ишетелһә, һайрап маташа. Ә көҙ еткәс, беҙ күрмәгәндә, форточканан сығып осто. Ҡарлуғас беҙҙә ҡышлай алмай. Иҫ киткес егәрле ҡош.*

## Йөрөп уҡыған йылдар

Дәрес башланды. Тәүге дәрес. Мин ултырған парта алғы мөйөштә, ишек яғында. Күҙемде тәҙрәнән ала алмайым. Башта аңламаным. Тик тиҙ асыҡланды: тышта ябалаҡлап ҡар яуа, ел көсәйә. Ни эшләйһең, ултырған урыным уңайһыҙ ерҙә шул. Барыһы ла миңә ҡарай кеүек, сөнки класта мин генә яланаяҡ. Ә миңә хәҙер дәрестән һуң ошо ҡар өҫтөнән алты саҡрым араны йәйәү үтергә кәрәк. Был, әлбиттә, минең өсөн ят эш түгел, тик уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың миңә ҡарауы ғына йәнемә тейә. Минең турала ниндәй һүҙҙәр барғанын да беләм. Көлгәндәренә яуап бирергә күптән өйрәнгәнмен инде. Ә бына йәлләүселәрен яратмайым, сөнки уларға әсе һүҙ әйтеүе ҡыйын.

Тәүге тәнәфестә коридорға сыға алманым, эргәмдә әйләнеүселәр булды. Ҙур тәнәфестә лә бер ни ҙә килеп сыҡманы. Нисек тә дәрестән ҡасырға ҡарар иттем. Ә ҡар яуа ла яуа, буранлап яуа. Ер өҫтө ап-аҡ. Октябрь айында шулай булыр, тип кем уйлаған. Һуңғы дәрес аҙағынаса көтөргә ярамай, ул ваҡытта барыһы ла мәктәптән сыға. Уларға күренергә бер ниндәй ҙә иҫәбем юҡ. Һуңғы тәнәфестә ҡастым. Тик юл менән китмәнем. Ул ваҡытта теләһә кем күреп телгә алыр, шуға тауҙар аша тураға йүгерҙем. Ҡарҙы тәрән генә һалып өлгөргән, епшек. Тәүге ҡар бит. Аяҡ өшөү иң ҙур бәлә түгел. Бер ҡат алама ыштан менән йоҡа ғына күлдәк тәнгә йәбеште. Бөтә тәнем әрней. Еле үҙәккә үтә. Йүгереүҙән туҡтамаҫҡа тырышам. Юҡ шул, алты саҡрымын да йүгерерлек хәлем юҡ. Буран аша барған юлды күреү мөмкин түгел. Барыһы ла аҡ төҫтә: күк тә бер, ер ҙә бер. Эйе, был донъяла мин бер үҙем. Күрәһең, һиҙгерлек ярҙам итте – тәгәрәмәнем, аҙашманым. Өйгә ҡайтып ингәндә, тамам хәлдән тайғайным. Илап та алырға тура килде. Тик өшөүҙән түгел, асыуым килеүҙән.

Ошо көндән башлап һауа торошо менән ҡыҙыҡһына һәм буранлы көндәрҙә уҡырға йөрөмәй башланым. Өләсәйем әйтмешләй, һабаҡ ҡасмаҫ. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәт күренештәрен күҙәтергә әүәҫләндем. Сатлама һыуыҡтарҙа ла, буранлы көндәрҙә лә юлда булырға тура килде. Шулай ҙа минең ҡурҡыу китте. Кеше барыһына ла түҙергә, барыһына ла өйрәнергә тейеш. Миңә ярҙам ҡулы һуҙыусы юҡ, үҙ хәлемде үҙем ҡарайым. Нисек кенә булмаһын, Сәлих мәктәбен уҡып сығырға кәрәк! Шунһыҙ булмай, сөнки ете йыллыҡ белем алыу – мәжбүри, һинең аяҡ кейемең йәки баш кейемең булмауҙа түрәләрҙең эше юҡ; нисек уҡыйһың, тамағың туҡмы, тип һораусы юҡ, ә уҡырға йөрөргә тейешһең.

Сәлих мәктәбе минең өсөн мәрхәмәтле булды, тип әйтеүе ауыр. Класта минән бер нисә йәшкә олораҡ уҡыусылар бар. Уҡырға йөрөйҙәр, ә белем алырға тырышмайҙар. Колхоз эшендә “глагол”ды белеү мөһим түгел, тиҙәр. Ә уҡытыусылар үҙҙәренекен һөйләй:

– Совет власы һеҙҙе уҡыта, яҡты юлға алып бара, һеҙҙең өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙыра. Ә һеҙ тырышмайһығыҙ. Ашатҡан өсөн генә лә 4-5-кә уҡырға тейешһегеҙ.

«Һаҡаллы» уҡыусылар ҙа ал бирмәй:

– Юҡ, власть ашатмай. Беҙ таш сығарабыҙ, шунын аҡсаһына ашайбыҙ, кейенәбеҙ, – тиҙәр.

Шулай, колхозда эшләүҙең файҙаһы юҡ. Сәлих, Әптек халҡы таш сығарып тамаҡ туйҙыра. Был эшкә партия үҙе ҡамасаулай алмай. Сөнки таш ҡаланың бөйөк төҙөлөштәренә кәрәк. Ә мәктәптә күренеү... колхоз эшенән ҡотолорға ярҙам итә. Бына нисек.

Сәлих мәктәбендә дәрес барышын һүрәтләү ҡыйын. Бында барыһы ла буталған. Хулигандар донъяһы, ығы-зығы, шау-шыу. Йәшерәк уҡытыусыларға Алла түҙем бирһен. Аптырап булмай, сөнки ҡайһы бер уҡыусылар уҡытыусыларға тиңдәш. Бәләкәйҙәргә лә түҙеү рәхәт түгел. Етмәһә – беҙ күрше ауылдан, һәр уҡыусы мәктәпкә тамаҡ ялғап алыр өсөн икмәк киҫәге алып килә. Был турала Сәлих малайҙары белеп ҡалды. Уларҙың әптектәрҙән икмәк һорауы – ғәҙәти күренеш. Шуныһы: малайҙар килтергән икмәктәрен тәүге дәрестә үк ашап бөтөрә лә, ҡайтыр юлға сыҡҡас, ашағылары килә. Мин һаҡсыл булдым. Ҡайһы бер малайҙар, шуғамылыр, үҙҙәренекен ашап бөткәс, минән икмәк таптыра башланылар. Сөнки ҡайтып китер алдынан тамаҡ ялғаһаң, күңелле булып ҡала. Сәлих малайҙары үҙҙәрен һәр нәмәлә лә өҫтөн итеп күрһәтергә тырышты, ә ысынында иһә кенәсел, ваҡ күңелле булдылар, маҡтанырға яраттылар.

Мәктәптәге тәртип беҙҙең холоҡҡа ла үҙгәреш индерҙе. Бына бер көн дәрес бара. Уҡытыусы миңә:

– Ни өсөн яҙмайһың?– ти.

– Ҡара һауытым ватылды, ҡарам юҡ, – тип ҡотолорға тырышам.

Уҡытыусы парталаш малайҙарҙың ҡаралары менән яҙырға ҡуша. Ул әйткәс, теге ауылдаш малай ҡараһын уртаға ҡуя, тик уҡытыусы үҙ урынына китеү менән кире тартып ала. Мин тағы ла яҙмайым. Был ҡабатлана. Уҡытыусы тауышын көсәйтә, шелтә яһай. Ә әлеге малай һаман үҙенекен итә. Мин ҡаралы перо менән уның битенә һелкәм, ул да пероһы менән миңә һелтәнә. Был буталышҡа өсөнсө малай килеп ҡыҫыла – ҡара уның битенә лә эләккән, һөҙөмтәлә өсөбөҙ ҙә коридорға ҡыуылып сығабыҙ. Унда оҙаҡ тапанып тороу юҡ, тиҙерәк тышҡа ашығабыҙ. Хәҙер май аҙағы, тышта йылы. Һөйәп ҡуйылған баҫҡысты күрҙек тә мәктәп башына үрмәләнек. Ә унан инде уҡытыусының өҫтәле тапҡырында һикереп, өҫтөнә тупраҡ ҡойҙоҡ. Тәнәфескә звонок булғас, бар мәктәп халҡы директор етәкселегендә беҙҙең арттан сыға, тик беҙҙән елдәр иҫкән. Ярай әле, таш тейәргә килгән самосвал беҙҙе ултыртып алып китте. Улар беҙҙең кеүек малайҙарҙы ихлас

ултырта торғайны, сөнки таш тейәшергә кешеләр кәрәк. Кәмиттең ҙурырағы алда ине әле. Бер аҙна мәктәпкә йөрөмәгәс, икебеҙ уҡырға килде, ә өсөнсөбөҙ ташланы. Беҙҙе бик «күркәм» ҡаршы алдылар. Мәктәп алдына, борғолар ҡысҡыртып, барабандар һуғып, бар мәктәп халҡын теҙҙеләр. Тантаналы рәүештә пионер дружинаһы байрағын алып сыҡтылар. Барыһы ла әҙер булғас, уҡытыусылар бүлмәһенән беҙҙе сығарып, күп итеп телмәрҙәр һөйләнелде. Аҙағында беҙгә иң ҡаты шелтә белдерҙеләр. Шулай итеп, уҡыуыбыҙҙы дауам иттерҙек.

Башта һөйләп киткәнемсә, мин малайҙар менән күмәкләшеп йөрөргә яратманым. Юлда күберәген яңғыҙлыҡты һайланым. Бының менән һәр төрлө сәбәптәр арҡаһында килеп тыуған ваҡытлыса кәмселектәремде йәшерергә теләнем. Әммә кеше бер ваҡытта ла яңғыҙы булмай. Тәбиғәт күренештәре генә ни тора! Ә уларҙы, яңғыҙың булһаң, иғтибарлап ҡарай алаһың. Яңғыҙ кеше күберәк күрә, күберәк аңлай, иғтибарын үҙенә генә ҡыҙыҡлы булған нәмәләргә төбәй. Минең юл йөрөгәндә иң мауығып “башҡарғаным” — уҡыған китаптарымдың йөкмәткеһен барлау булды. Ундағы ваҡиғаларға, геройҙарына үҙемсә ҡыуанам йәки борсолам, кемдәрендер маҡтайым, икенселәрен шелтәләйем. Ғөмүмән, үҙемсә баһаларға тырышам. Мин китаптар тураһында берәйһе менән сикһеҙ әңгәмәләшә алыр инем. Тик малайҙар был ҡыҙыҡһыныуымды аңламай. Улар өсөн һәр төрлө шуҡлыҡтар ҡылыу ғына күңелле. Бына бер миҫал.

Күмәкләп мәктәптән ҡайтып киләбеҙ. Таш ташыусы самосвалдар туҡтамайынса үтеп китә. Асыуы килеп кемдер «ҡыҙыҡ» яһарға тәҡдим итте. Малайҙар бербереһен ҡеүәтләп ризалашты. Бер кемдең дә ҡурҡаҡ булып күренгеһе килмәй шул. Беҙ атлаған юл аҫтынан торба һалынған. Уның аша Ҡаранйылға аға. Беҙ шул торбаның баш яғына, һыу юл өҫтөнән аҡһын өсөн, кәҫ тултырҙыҡ та үҙебеҙ тау башына күҙәтер өсөн барып яттыҡ. Әммә оҙаҡ ятырға берәүҙең дә теләге юҡ. Һәр кемдең дә ҡайтып тамаҡ туйҙырғыһы килә. Беҙ кәҫтәрҙе шул көйө ҡалдырып ҡайтып киттек. Ә кисен һатыусы бер нисә йәшник араҡы тейәп Сәлих сельпоһынан ҡайтырға сыҡҡан, һәм, беҙ «ҡыҙыҡ» яһаған ерҙә арбаһы ауып, араҡылары ватылған. Оҙаҡламай ауылға бер нисә кешенән торған комиссия килеп, өй һайын һорашып йөрөнө, беҙҙең өйгә лә килделәр. Мин, алдан һиҙеп, ҡасып өлгөргәйнем. Беҙҙең торбаға кәҫ тултырғанды ҡыҙҙар күреп ҡалғайны. Исемдәребеҙҙе тикшереүселәргә шулар әйткән булып сыҡты. Ярай әле, түләтеү булманы.

Бына шулай, Сәлих мәктәбендә уҡыу алама буранды кисереү кеүек хәтеремдә уйылып ҡалды. Күңел өшөүе һыуыҡта өшөүҙән ҡыйыныраҡ. Тик беҙгә башҡаса юл булманы. Беҙгә тормоштоң ҡуйған был һынауын да үтергә тура килде. Белемһеҙ ҡалыу мөмкинселеге лә бар ине шул. Уныһы бигерәк тә ҡурҡыныс. Хәйер, был мәктәптә белемде беҙ тамсылап ҡына ала алдыҡ. Ваҡыты шундай ине.

## Ауыҙ менән eләк йыймайҙар

Йәйҙең йәмле көндәрендә күрше-тирә еләккә йөрөй. Өләсәйем һуңға ҡалыусыларҙан түгел, тик ашыҡмай, тамам бешкәнен көтә. Әммә был оҙаҡҡа барманы, бер көндө иртәнге эштәрен бөтөргәс, миңә лә әҙерләнергә ҡушты. Ә мин һәр саҡ әҙер. Икебеҙгә ике биҙрә тотоп, Бүләк урманы яғына киттек. Юлда уҡ үлән араларын ҡараштыра башланым, еләк күп, ә өләсәй туҡтамай.

— Белеүемсә, бындағы еләк ваҡыраҡ, балам. Бүләк артына барайыҡ. Эре еләк ырамсыл була. Башҡаларҙа эшең булмаһын. Улар яҡындан тиҙ генә йыялар, етмәһә, ҡайтып еткәнсе яртыһын ашап бөтәләр.

Бүләк артына барып еттек тә йыя башланыҡ. Еләктәр, гүйә, үҙҙәре үк ауыҙға ынтыла. Өләсәй минең ни уйлап йөрөгәнемде һиҙҙе, ахырыһы, туҡтап әйтте:

– Балам. Еләкте ауыҙ менән йыймайҙар, ҡулың менән биҙрәңә һала бар. Буш ҡайтһаң, үҙеңә оят бит.

Тырышып, ике ҡуллап йыям. Ашау тураһында уйламайым да. Һәр кемдең дә белекле булғыһы килә бит, мин дә үҙем күргәнде өләсәйгә әйтергә булдым.

– Өләсәй, үлән тапалған. Тимәк, бында беҙгә тиклем үк йыйғандар инде.

– Тапағандар, балам, тапағандар. Ә күберәген беҙгә ҡалдырғандар. Еләкте лә йыя белергә кәрәк. Бер генә тапалған урындан еләкте күпкә мулыраҡ йыйырға була. Ана, һин тапалмаған ерҙе барып ҡара. Эре еләге лә бешеп етмәгән. Ә кисә-геләр беҙгә еләктәрҙе ҡояшҡа асып ҡына киткәндәр.

Тырышып йыйҙыҡ. Минең биҙрә яртылаш булғансы, өләсәй үҙенекен тултыра яҙҙы. Ә үҙе, белгән кеүек, миңә һиҙҙермәй генә йыйыу юлын ҡайтыу яғына борған. Эйе, Бүләк урманы бәләкәй булһа ла, мин юлдарҙы абайламайым, ә өләсәйҙең белмәгәне юҡ. Бына беҙ тағы ла еләк күп урынға килеп сыҡтыҡ. Кәрәк икән – ултырып, ятып йый. Юҡ шул, өләсәй атларға ҡуша. Сағыл буйлап имәнлек аҫтынан ҡайҙалыр барабыҙ.

– Өләсәй, өйгә ҡайтмайбыҙмы ни?

– Әллә арыныңмы?

– Юҡ, арыманым. Ә беҙ ҡайҙа барабыҙ?

– Арымағас, атла, балам. Күп ҡалманы инде. Колония аша ҡайтабыҙ. Түҙгәнгә түш тейә, тигәндәр, түҙ, балам.

Бына беҙ Сағыл моронон урап үттек тә сәнскеле тимер сыбыҡтар һуҙылған ҡоймаға килеп терәлдек. Эске яҡта барыһы ла бер төрлө кейенгән ирҙәр йөрөп ята. Һәр саҡ музыка уйнай йәки радио һөйләй. Ә беҙҙең Әптектә радио юҡ, тыныс. Мин, туҡталып, ҡойма эсен күҙәтергә тырышам.

– Әйҙә, балам, бында ҡарап торма.

Бынһы ирҙәр төрмәһе икән. Өләсәй мине һаман ҡайҙалыр әйҙәй. Ярай әле, юл түбәнгә табан бара, атлауы ҡыйын түгел. Ҙур ҡапҡа алдына килеп туҡтаныҡ та, биҙрәләребеҙҙе ҡуйып, үләнгә ултырҙыҡ. Бында ла күп кешеләр күренә, тик бөтәһе лә бисәләр. Бисәләр төрмәһе. Өләсәй белә шул ул. Бында кеше күп йөрөгәс, бәлки, беҙҙең еләкте һатып алыусы табылыр. Өләсәй стакан да алған. Әле генә өҙөлгән еләкте ауыҙ итергә теләүселәрҙең береһенең дә буш киткеһе килмәй. Күптәре беҙгә өҫтән генә тәкәббер ҡарап уҙа. Былары – төрмәнең түрәләре, ҡарауылсыларҙың башлыҡтары. Ҡара кейем кейгән бисәләр ҙә йөрөп ята. Былары иректә йөрөүсе тотҡондар. Үҙ алдарына бер инеп, бер сығып йөрөйҙәр. Бына бер көтөү бисәне теҙеп, атлатып килтерҙеләр. Ялан эшенән килгәндәр икән. Ҡапҡаны асып, эскә индерҙеләр. Уларҙы ҡарауыллап йөрөгән мылтыҡлы һалдаттар – йәштәр, барыһы ла казактар. Быларын беләм. Беҙҙең ауыл магазинына киләләр, ҡайһы саҡта араҡы алып эсәләр: төрмә магазинында һатылмай икән. Эсеп алғас, ауыл урамынан үҙҙәренсә йырлап уҙалар. Ә беҙ, малайҙар, уны отоп алып, үҙебеҙсә йырлап маташабыҙ, ҡайһы ваҡытта казакса йырлап, уларҙы үсекләйбеҙ.

Беҙҙең еләкте маҡтаусы күп, ә алыусы бик юҡ. Әҙ-мәҙ генә һаттыҡ.

– Әйҙә, балам, ҡуҙғалайыҡ.

Биҙрәләрҙе күтәреп ҡуҙғалдыҡ Әптек юлына. Бына һиңә, ҡайтыу юҡ икән әле, өләсәй аҫ яҡҡа, Нахаловка урамы яғына, борола. Эйе, шул төрмәнең бер биҫтәһе Нахаловка тип атала. Кулактарҙы ҡыуып килтереп, беҙҙең ауыл ерендә ошо биҫтәне төҙөгәндәр. Ауылыбыҙҙың иң яҡшы ерҙәрен тартып алып, колхоз ойоштор-ғандар, ә биҫтә өсөн уңайлы урын һайлай алмағандар. Сағылдың икегә айырылған көньяҡ моронона ултырғандар. Шәп урын түгел. Тик килтерелгән кулактарҙың баштары эшләгән, күрәһең. Совхозға тейеш булмаған Һәләүек буйындағы тигеҙ урынға, Әптеккә тип ҡалдырылған ерҙә, төрлө ысул менән һәр кем үҙенсә

өйҙәр төҙөгән. Бына шул ҡыҫҡа ғына урам Нахаловка тип атала ла инде. Был урын Сағыл башынан бигерәк тә асыҡ күренә. Әптек ере Сағылдың уртаһынан туп-тура киҫеп алынған, Һәләүекте лә тураға киҫә был һыҙыҡ, Ҡара һыйыр урманына тиклем. Урманға етер алдынан һыҙыҡ ҡапыл көнбайышҡа борола. Урман буйҙарындағы ундырышлы ерҙәр ҙә кулактар совхозы өсөн киҫеп алынған. Олатайҙың сәсеүлек ере — Ҡара һыйыр урманы аҫтындағы ҙур ялан. «Сывайтал» тигән атамаһы ла бар ине, тора-бара онотолдо. Өләсәй был урынды миңә бер нисә тапҡыр күрһәтте. Элек матур урын булған, хәҙер бөткән инде. Биҫтә бер мөйөшө менән ул яланға килеп терәлгән.

— Бына, балам, күр. Ниндәй кешеләр инек. Беҙҙең иген заманында гөрләп үҫте. Ярлылыҡ күрмәнек. Ни эшләйһең, Хоҙай шулай ҡушҡандыр... — тине өләсәйем, моңһоу ҡарап.

Нахаловканың һәр ҡапҡаһында туҡталып, еләк алыусылар эҙләйбеҙ. Ҡайһылары бер-ике стакан ала, берәүҙәре аҡса юҡлыҡҡа һылтана, кемдәрҙер үҙҙәре барып йыйған.

Нахаловкала йөрөү оҙаҡҡа һуҙылманы. Беҙ Һәләүек буйлап ауылға атланыҡ. Бер саҡрым ғына ара, ә ниндәй матурлыҡ һыйған. Был ерҙәрҙән дә күркәмерәк урындар бармы икән?! Күрәһең, өләсәй минең нимә уйлағанымды һиҙә:

— Әллә, балам, һыу инген киләме?

— Килмәй ни, көн эҫе бит.

— Бар һуң. Тик теге ярға йөҙмә, тәрәнгә барма. Бер-ике сумып сыҡһаң, етер, балам. Көн кисләй. Өйҙә эш күп.

— Ярай, өләсәй, мин, ана-а-у, һай урында ғына...

Бар донъямды онотоп, ҡырсынға төштөм. Йәйге көндә Һәләүектә һыу инеүҙән дә рәхәт нәмә юҡ. Уның һыуы бала күңеле кеүек саф, балыҡтары ла, төбөндәге таштары ла ап-асыҡ күренә. Мин көндәр буйы ла был һыуҙан сыҡмаҫ инем дә бит, юҡ шул. Өләсәйҙе һуҡрандырырға ярамай, сығып кейенә һалдым. Мин суптырҙағансы, өләсәй биттәрен генә арлы-бирле йыуған да үҙенә кәрәкле дарыу үләндәре йыйып алған. Үләндәр серен белә ул.

Өйгә беҙ арып ҡайтып индек. Өләсәй әйтә:

— Һәр кеше лә арығансы эшләргә тейеш, шул ваҡытта ғына ял итеүе рәхәт була, — ти. Ҡайтҡас, ул миңә сеүәтәгә ҡатыҡ һалып бирҙе:

— Бына, балам, йыйған еләктәреңдең дә тәмен бел. Ә еләк һатҡан аҡсаңды алып ҡуй. Үҙеңә йыйырһың. Иртәгә тағы ла барырбыҙ, — тип тә өҫтәне.

Бешкән генә еләктәрҙе һайлап ҡатыҡҡа һалдым да ҡалаҡ менән бутап эсеп ебәрҙем. Бик тәмле ризыҡ, теленде йоторлоҡ. Үҙегеҙ ашап ҡарағыҙ, алдамайым.

Ә тинлек аҡсаларҙы үҙем генә белгән ергә йәшереп ҡуйҙым. Алла бирһә, үҙемә күлдәклек аҡса йыясаҡмын.

## *Фауст*

*Күлдә йөҙгән өйрәк ҡыр ҡәҙерен белмәҫ,*
*Ҡырҙа йөрөгән дуғаҙаҡ һыу ҡәҙерен белмәҫ.*

**Асан-Ҡайғы йырау**

Минең уйымса, һәр кем, ниндәй генә ауыр шарттарҙа йәшәмәһен, үҙенә яраш-лы, күңеленә оҡшаған мауығыу таба. Минең дә, ниндәй генә эш эшләмәйем, ҡайҙа ғына бармайым, уйымда китап булды. Аҙ ғына уҡып алыр өсөн ниндәй генә хәйләләр ҡорманым. Сөнки минең был шөғөлөмдө атай-әсәй ҙә, туған-тыумаса ла яратманы. Ни эшләйһең, һәр кемгә — үҙенеке.

Китап табыу — минең өсөн ҡатмарлы эш. Ә теләгәнең тураһында әйтеп тораһы

ла юҡ. «Ҡорос нисек сыныҡты»ны бер йылдан артыҡ эҙләнем. Ә инде ҡулыма теләгән китабым килеп эләкһә, бер минутымды ла әрәмгә уҙғармаҫҡа тырыштым. Мин башланғыс мәктәптә уҡығанда, Әптектә китапхана астылар. Тик шатлығым оҙаҡҡа барманы. Китапханасы Хәлилов Әмир ағай минең бик йыш китап алыуымды үҙһенмәне шикелле. Һуңғы алған китабымдың иң аҙаҡҡы бите юҡ ине, уҡып сыҡҡас, мин шул китапты тапшырырға килдем. Әмир ағай уның һуңғы битен таптырып бөйләнде лә башҡаса китап бирмәне. Ысынында иһә ул китап та түгел, бер йоҡа ғына, таушалған, күпте күргән брошюра ине. Балалыҡ бит. Үҙем теләмәһәм дә: «Мә, ал ошоно», – тип көсләгәс, алып ҡайтҡайным.

Минең атай ҙа китап алып ҡайтҡыланы, буш ваҡыттарында уҡыштырҙы ла. Билдәле, ул алып ҡайтҡан китап минең ҡулға ла эләгә. Тик шуныһы: латин хәрефтәре менән баҫылған. Сөнки атай, мин тыуырҙан алда өс айлыҡ курстарға йөрөп, уҡыу-яҙыуға өйрәнгән. Колхоз бригадиры булып эшләгәндә лә шул яҙма менән файҙаланды. Ул өйҙә юҡта латиница менән яҙылған китаптарҙы иркен генә уҡый башлағанда, бер көн атай бәләкәй генә бер китап алып ҡайтты. Әлбиттә, атай китап уҡыусы түгел, уҡыштырыусы ғына ине. «Фауст» тип аталған китап минең ҡулға эләкте. Уҡый торғас, был минең баш сиренә әйләнде. Эйе, уның йөкмәткеһе һис тә аңлашылмай. Бигерәк тә Мефистофель тигән образдың кем икәнен, ни эшләгәнен бер нисек тә аңлата алмайым, һорашыр кеше лә юҡ, үҙем дә һорашырға яратмайым. Атайҙан һорауҙың файҙаһы юҡ. Үҙемде генә әрләйәсәк: имеш, уҡыған китабымды ла аңлай алмайым. Тамам аптырағас, ҙурайғас был китапты яңынан уҡып сығырға һәм эстәлеген аңларға, тип үҙемә һүҙ бирҙем. Ни эшләйһең, үҙем дә аңламаным, аңымда ла «баш сире» тороп ҡалды, һәр аңлашылып етмәгән осраҡ күҙ алдыма «Фауст» китабын килтереп ҡуйыр булды, һәр аңлашылмаған образ ҡаршыма Мефистофель булып баҫты. Ул мине һәр саҡ көтөп тора, белемһеҙлегемде үлсәй.

Дүртенсе класта уҡығанда, тағы ла бер кескенә китапҡа юлыҡтым. Эйе, миңә һайлау эләкмәне, күберәгән китап мине үҙе һайланы. Рус телендә баҫылған. «Витязь в тигровой шкуре» тип атала ине. Авторы – грузин, Шота Руставели. Уны ла ентекләп уҡыным. Тиҙ генә башҡа китаптар эләкмәгәс, ҡабат-ҡабат уҡыным, ятлап алдым, тиһәң дә була. Шиғыр юлдары менән яҙылған, әкиәткә ныҡ оҡшаған. Малайҙарға ла һөйләй башланым, уларға ла оҡшаған кеүек. Әйҙә әле, шул «тигровой», «шкуровой»ҙы һөйлә, тип маҙаға тейә башланылар. Бишенсе класта уҡығанда, мин был китапты тәнҡитләргә лә өйрәндем. Эйе, география менән танышҡас, Грузияның ҡайҙа икәнлеген белдем, тарихты уҡығас, китап геройҙарының ҡайһы ваҡытта, ниндәй урында булғандарын төҫмөрләйем, һөҙөмтәлә Руставели яҙмаһы тарихҡа ла, географияға ла тап килмәй. Индия Грузия менән йәнәш булып сыға, төрлө осор геройҙары бергә йәшәй. Юҡ, китап яҙыусыны ғәйепкә алмайым, башым бутала, тип шикләнәм.

Нисек кенә булмаһын, был китаптың миңә бик ҙур файҙаһы тейҙе, күпте белергә кәрәклеге аңлашылды. Эйе, китаптарҙың да төрлөһө була, улар ҙа, кешеләр кеүек, ҡылыҡ күрһәтәләр. Төн йоҡлатмағандары, геройҙары өсөн борсолдорғандары осрай, тулҡынландырғандары, төшкә ингәндәре була.

Лев Толстой менән «танышыуым» да ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты. Әлеге китап эҙләүҙең бәләһе инде. Ҡулға иң башта «Анна Каренина» йәки «Һуғыш һәм солох» эләкһә, Толстой минең өсөн дә башҡа кешеләргә күренгән кеүек күренер ине. Юҡ шул, булманы: ҡулыма иң башта «Кавказ тотҡоно» эләкте. Билгеле, автор баҫып алыусы һалдат өсөн янып-көйә. Ә минең күңел ҡаршы яҡты эҙләй, әсир миндә асыу хистәре уята.

Икенсе булып ҡулыма авторҙың башҡорт ерҙәре тураһындағы әкиәте килеп

юлыҡты. Быныһы инде миңә күп төндәр йоҡларға ирек бирмәне, имеш, башҡорттарҙың ерҙәре күп, ал, күпме теләйһең. Китап тәрән нәфрәт уятты. Сөнки мин үҙемсә унын эстәлеген, башҡорт ерҙәрен тартып алыуға саҡырыу, тип аңланым. Үҙемде күп тапҡырҙар өгөтләнем: «Толстойҙың бурысы башҡа, ул гуманист кеше». Барыбер тәүге хис башымда һеңеп ҡалды, «Һуғыш һәм солох» романын да уҡырға мөмкинселек булды, әлбиттә, тик өҫтәлдә оҙаҡ туҙанланып ятты. Уҡырға ваҡыт таба алманыммы, уҡығым килмәнеме – белмәйем.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: беҙҙең ысынбарлыҡ үҙенсәлектәре менән һәр саҡ шаҡ ҡатырырлыҡ. Әлбиттә, Толстойҙың эре әҫәрҙәрен уҡып сыҡманым, әммә шул әҫәрҙәрҙәге күренештәрҙе, геройҙарын һүрәтләргә кәрәк икән, башҡаларҙан ҡалышмаясаҡмын. Сөнки, теләйһеңме-теләмәйһеңме, унын романдарынын йөкмәткеһен беләһең, Толстой – гений. Мин унын өс романынын да эстәлеген һөйләп бирә алам. Тормошобоҙ шулай ҡоролған. Ата-бабаларыңдың исемдәрен онота алаһың, ә Толстойҙың әҫәрҙәрен оноторға хаҡың юҡ. Онотһаң, бер ҡайҙа ла инә алмайһың. Мин дә шулай булдым, унын әҫәрҙәре тураһында һүҙ сыҡһа, белгәнлегем яғынан бер кемде лә отторманым. Ярай, нисек кенә булмаһын, Толстой минең өсөн – колонизация өгөтләүсеһе, пропагандалаусыһы. Башҡорт ерҙәрен тартып алыу тарихын яҙыу өсөн Әптек ауылы тирәһен байҡау етә. Ә был Толстой әкиәте түгел. Тик һәр үҙгәреш, һәр күсенеш ҡан ҡойоуҙы хәтерләтә.

Әптеккә яҡын ғына бер нисә утар бар. Тәүгеләре Ивандар заманында уҡ төҙөлгән. Кәрәк һаҡаллы староверҙар килгәндәр. «Хутор» һүҙе – үҙе бер мәҙәк. Ул бер нисек тә урыҫ һүҙе түгел, ә беҙҙең «ултыр» һүҙенән киткән. Күрәһең, башҡорт Толстой тыумаҫ элек үк «ултырырға» рөхсәт биргән.

Икенсе тулҡын: Башҡортостанда баҡыр эретеү заводтары төҙөлөү осоро, иң дәһшәтле осор. «Рөхсәт» өсөн башҡорттоң яртыһы ҡырылған, ә гений был турала ишетмәгән. Бына һиңә «гений». Әптек тирәһендә хутор түгел, ә бер нисә ҙур урыҫ ауылы барлыҡҡа килә. Ана, Тимашевка ауылынын да икенсе исеме Вятск, әйтәгүр, Вятка губернаһынан килгәндәр.

Тағы ла бер тулҡын: Столыпин реформаһы. Йәнә бер нисә хуторға нигеҙ һалына, Украина, Белоруссия халыҡтары ағыла. Бөйөк Ленин да Әптек тирәһен буш ҡалдырмаған: Кронштадт восстаниеһы баҫтырылғас, фетнәселәрҙең атылмағандарын Әптек еренә һөргәндәр – Военмор хуторы бар. Был ерҙәрҙә иң «матур» иҫтәлекте Сталин менән Берия ҡалдырҙы.

Сөнки коллективизация башланғас, кулактарҙы һөрөргә урын кәрәк булып сыға. Ә Әптек ауылынын ере күп, урын киң, тыныс урын. Толстой әйтмешләй, башҡорттоң күңеле киң – кулак ғаиләләре килтерелә. ГУЛАГ киҫәге – төрмә төҙөлә, һуғыштан һуң ул икәүгә әйләндерелә. Йәпле урын. Һуғыш башланғас, Волга буйы немецтарын килтерҙеләр, ә һуғыш бөткәс, пленда булған үҙебеҙҙең һалдаттарҙы килтереп тултырҙылар. Бына ошо урында минең Лев Толстойға әйтәһе һүҙем бар. Мин шаһитмын. Әптек урамынан тотҡондарҙың ҙур колоннаһы килә. Йәйге эҫе көн. Колоннаны һыу эсергә туҡтаттылар. Һалдаттар, ҙур-ҙур эттәр уларға бер кемде лә яҡын ебәрмәй. Мин әле сабый. Шулай ҙа атайҙың төрмәлә икәнен беләм, шуға күрә әсирҙәргә яҡын уҡ килеп ҡарап торҙом. Аҙаҡ белдем: былар пленда булған совет һалдаттары икән. Мин уларҙың йөҙҙәрен, ҡараштарын хәтеремдә ҡалдырырға тырыштым. Ныҡ итеп ҡарауымдың һөҙөмтәһе булды, ахыры. Оҙон буйлы, үткер ҡарашлы бер тотҡон ауыл өйҙәрен күҙенән үткәрҙе лә миңә: «Как вы плохо живёте...» – тине. Был һүҙҙәрҙе ул беҙгә теләктәшлек белдереп, йәлләп әйтте. Ул ваҡытта беҙҙең ауыл халҡы тотҡондарға ҡарағанда ла насарыраҡ көн күрҙе, валлаһи.

Бына шулай, граф Толстой, башҡорт – йомарт! Күрәһең, йомартлыҡ бурлыҡтан хурлыраҡ.

Мәгәр китап менән мауығыуым мине күп уйларға мәжбүр итте. «Фаус»ты мин яңынан уҡый алманым. Кәрәге юҡ, тип тә уйланым. Сөнки тирә-яғымдағы мефистофелдәр ҙә еткән. Күптәр маҙаға тейә, төндәрен йоҡларға ирек бирмәйҙәр. Минең өсөн аҡ батшалар ҙа, мәкерле Ленин да, абрек Сталин һәм башҡалар ҙа – барыһы ла мефистофелдәр.

Һәр уҡыусының яратҡан авторы булырға тейеш. Күп китап уҡыу мине лә яратҡан авторға алып килде, ул – Виктор Гюго. Мин әле лә тетрәнеп ҡуям, сөнки уның әҫәрҙәрен табыу минән иҫ киткес тырышлыҡ талап итте. Ә мин тырыштым, таптым. Толстой әҫәрҙәре тулып ятты, Ленинды уҡыһаң, маҡтау алаһың, күберәк уҡыһаң, үҙеңә лә юл астылар, ә миңә Гюго оҡшаны. Мин үҙемде Гаврош менән сағыштырҙым, үлеменә лә көнләштем, буғай. Ни эшләйһең, Гаврош – Парижда, мин – Әптектә.

**Парсалар**

*Ҙур тәҙрәгә көнбағыш һалғас, үҙем кухняла булашам, ә ҡарабаш турғайҙар кухня тәҙрәһе алдында сырҡылдашып оса, тимәк, ябай турғайҙар килгән. Мин уларын ҡыуып ебәрәм. Ҡарабаш турғай ярҙам һорай белә.*

## Өмә

*Өмәләрҙә тула баҫалар.*

**Халыҡ йырынан**

Иртәнсәк атайыма өмәгә әйтеүсе килде: мәктәпкә утын ташырға кәрәк икән. Атай тиҙ генә кейенеп сығып киткәйне лә, бер нисә минуттан кире ҡайтып инде.

– Улым, мәктәп өмәһенә һиңә барырға тура килер. Әҙер утынды арбаға тейәп алып килергә һин дә булдыра алаһың. Ә мине Ғәлиулла бабайың өй күтәреүгә саҡыра. Кеше таба алмай. Бармаһам – үпкәләр.

Атай миңә башҡа өмәселәрҙән ҡалмаҫҡа ҡушты, сөнки мин мәктәп өсөн әҙерләнгән утындың ҡайҙа икәнлеген белмәйем.

Сәй ҙә эсеп тормайынса, ат һарайына төштөм, тик барыбер һуңлағанмын. Башҡа өмәселәр яҡшырак аттарҙы, арбаларҙы, сбруйҙарҙың һәйбәтерәктәрен һайлап алып бөткәндәр. Миңә Йөбәй урманына почта бейәһен алама арбаға егеп юл тотоуҙан башҡа сара ҡалманы. Тәүге йөктәрҙе алып ҡайтҡас, утын ташыусылар, төшкө ашты ашап тормайынса, икенсе йөктө лә килтереп, мәжлескә бер юлы ултырырға кәңәшләшкәндәр. Билгеле, был мәсьәлә буйынса минән бер кем дә кәңәш һораманы. Икенсе йөктө тейәргә килгәс, әҙерләнгән утындың барыбыҙға ла етмәҫе асыҡланды. Арбаһы буш ҡалған өс кешегә утынды киҫеп тейәргә кәрәк икән. Ярай әле, балтамды алғанмын, нисек булһа ла киҫеп тейәрмен. Ҡайһы урындан утын киҫергә уйлап та өлгөрмәнем, минең кеүек утынһыҙ ҡалған «Кәтей» Ғәйфулла миңә:

– Ҡустым, аптырама, мин әҙер һөйән ятҡан урынды беләм. Бараһың да тейәйһең, киҫеп торорға ла кәрәкмәй, – тине. Мин оҙаҡ уйлап торманым, атымды Кәтей арбаһы артынан ҡыуҙым. Йыраҡ барҙыҡ. Бара торғас Шыуашйылға башына барып еттек. Бер урында Ғәйфулла туҡтаны ла:

– Ҡустым, һин аттарҙы ҡарап тор, мин ҡарап сығам, – тип балтаһын алып, ағастар араһына инеп китте. Балта тауышы ишетелде, ниңә был оҙаҡ булаша икән, тип мин тауыш сыҡҡан урынға индем. Кәтей тырышып-тырышып балта менән һөйән баштарын өҙә лә ағастарҙы бер урынға өйә. Мине күргәс: «Ҡустым, һөйәндәрҙең яртыһын алып киткәндәр, икебеҙгә етмәй. Миңә лә киҫергә кәрәк булыр әле», – тине.

«Кеше Кәтейгә ышанамы ни», – тигән һүҙҙе ишеткәнем бар, ә башҡа сара юҡ. Мин дә утын киҫә башланым. Етмәһә, хата яһаным: атты бороп, юлды ҡыҫҡартырға кәрәк булған икән, утынды Бишимән урманынан киҫеп алып ҡайтһаң, атҡа еңелерәк булыр ине. Тағы ла бер хата: кешеләр көлмәһен тип, имән утын киҫергә тырыштым. Аҙаҡтан күреүемсә, мәктәпкә утын әҙерләүселәр күберәк йүкә утын киҫкәндәр. Эйе, Кәтей тулмаған йөгө менән ҡайтып китте, ә мин тырышып утын киҫәм. Етмәһә, минең балта ҡулайһыҙыраҡ, үтмәй. Ә яҡшыраҡ балтаны атай үҙе менән өмәгә алып киткән. Атты ла йәлләйем. Эре күгәүендәрҙең һаны юҡ. Бер ағас киҫкән һайын аттың ҡорһағы аҫтындағы күгәүендәрҙе үлтереп алам. Башҡа урындарынан ат үҙе ҡыуып маташа. Асығыу тураһында әйтәһе лә юҡ, быуындарым ҡалтырай, күҙ алдарым ҡараңғыланып китә. Тырыша торғас, бер йөк утын булды. Йөктө бәйләп, ҡайтыу юлына сыҡтым. Мәктәп урамына килеп ингәндә, кис булғайны. Өмәселәр, эш кейемдәрен алмаштырып, мәктәп урамына йыйылған. Мин көлкөгә ҡалыуҙан ҡурҡам. Тик берәү ҙә уйламаны ла: «Һай, уңған икәнһең, ниндәй һәйбәт утын киҫеп килтергәнһең, – тинеләр. – Бар, атыңды туғар ҙа Шаһырбан әбейҙең өйөнә кил. Шунда һый була», – тип өҫтәнеләр.

Мин кире килгәндә, өмәселәр өҫтәл артына ҡунаҡлағайнылар инде. Өҫтәл уртаһында – бал тәпәне. Ныҡлабыраҡ ҡараһам, мәжлестәгеләрҙең һаны өмәселәргә ҡарағанда икеләтә артыҡ. Ә минең артымда, өҫтәлдең арғы башында, утын ташыуға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмаған Ғәйшә ултыра. Ферма мөдире, имеш, өмәгә колхоз итен бирә. Күрәһең, колхоз итен өйөндә ашауы ғына етмәгән. Минең алдыма ла ҙур тәрилкәгә тултырып аш һәм ҙур киҫәк ит ҡуйҙылар. Ашайһы килә. Ләкин бер ҡалаҡ ҡабырға ла ирек бирмәнеләр:

– Һин егәрле малай, әйҙә, берҙе тот. Тик, ҡустым, бөткәнсе. Ҡурҡма, Шаһырбан инәйеңдең балы шәп ул, – тинеләр.

Тулы, һырлы стаканды бөткәнсе эстем, эшләгәс, эсергә тейешһең. Етмәһә, ҡаршымда ултырған Ғәйшә үҙе эргәһендә ултырған ирҙәргә минең турала һөйләй. Имеш, мин ауырыу, эсә алмайым. Асыуымды ҡабартыр өсөнмө, миңә ишетелерлек итеп һөйләй. Тәүгеһенән һуң икенсеһен дә бөткәнсе эсергә кәрәк икән, тағы эстем. Ғәйшә миңә ҡарап ултыра. Ә мин үҙемә килгән һәр бер стаканды бөткәнсе эсергә тырышам, шулай уҡ ашап өлгөрөргә лә кәрәк. Асмын. Мәжлестең нисек барғанын күреп булманы, иҫемде юғалтҡанмын. Иртәнсәк әсәй уятты. Баҡһаң, кисә өйгә ҡайтып етә алмағанмын, тыҡрыҡ уртаһында тәгәрәп йоҡлағанмын. Уятып алып ҡайтҡандар. Шулай үтте минең беренсе өмә.

«Өмәләрҙә тула баҫалар». Шундай йыр бар. Күрәһең, өмә – башҡорт йолаһының бер төрө. Күмәк эште өмә ойоштороп, күңеллерәк башҡарырға тырышҡандар. Ә уның аҙағы тантаналы рәүештә күңел асыу менән тамамланырға тейеш.

Совет дәүерендә аҡсаһыҙлыҡтан интеккән ауылдарҙа өмә бигерәк тә киң ҡолас алды. Колхоз системаһы менән тамам ярлылыҡҡа ҡалған халыҡ күп эштәрҙе хаҡ түләп эшләтә алманы. Өмә тол ҡатындар, яңғыҙаҡ әбейҙәр өсөн берҙән-бер терәк булды, бар төҙөлөш өмәселәр ҡулы менән эшләнде. Өй төҙөү, йүнәтеү, утынбесән әҙерләү, килтереү. Ә ойоштороусы өмәселәрен ашатырға тейеш, эш тамамланғас, мотлаҡ мәжлес ҡорола. Һый тәмлерәк булырға тейеш, ә уның иң мөһим өлөшө – иҫерткес эсемлек. Өмә үткәреүсе, ғәҙәттә, – ярлы кеше, шуға ла өмәселәргә араҡы һирәк эләгә. Эйе, хәлле кешеләр ҙә өмә яһай, әммә улар бал менән һыйлаһалар, был инде – һаранлыҡ билгеһе. Әптек ауылында ла өмәгә барыусылар һәр хужаның ниндәй эсемлек ҡуйырын алдан белде. Әлбиттә, эш тә һыйына ҡарап үтәлә. Ҡайһы бер әбейҙәргә кәкре-бөкрө утын да тейәп килтерәләр: «Ярамағанмы уның ҡомалаҡлы балына», – тиҙәр.

Нисек кенә булмаһын, өмә йылдан-йыл холҡон үҙгәртә бара, икенсе төрлө әйткәндә, эволюцияға дусар ителә. Тик шуныһы: был яҡшылыҡҡа килтермәй,

һәр ауылда «өмәселәр синыфы» барлыҡҡа килде. Улары иһә, үҙ сиратында, күберәк эскеселек менән ҡыҙыҡһына булып сыкты. Өмәнең ауыл өсөн һөҙөмтәһе бик күңелһеҙ, ауылдарҙа эскеселектең көсәйеүенең бер сәбәбен өмәнән күреү ҙә урынлы. Шулай итеп, өмәнең башланғысы изге – бер-береңә ярҙам ҡулы һуҙыу булһа, ахыры – шайтан аҙығы менән бәйле булыуы – эскеселекте көсәйтеү ине. Хәҙерге ваҡытта өмә ойоштороусы өмәселәрҙе һирәгерәк эҙләй, киреһенсә, өмәселәр өмә итеүсене ҡарап йөрөй. Эскесе өсөн эсергә эҙләү хәстәрен эш эҙләү хәстәре менән алыштырыу – күҙ буяуҙың бер төрө ул.

Рәсәй күләмендә өмәләр үткәреү ҙә – шаҡтай билгеле факт. Хаҡ түләмәй халыҡты эшләтеү киң ҡолас алды. Ленин бүрәнә күтәреп барған мәл «субботник» тип аталды, воскресниктар ҙа йышайҙы. Шуныһы асыҡлана: нисек кенә өмә системаһы менән барма – һөҙөмтә кире яҡты күрһәтә. Хаҡ түләнмәгән эш затлы сифат тыуҙырмай. Арзан эштең сифаты ла арзан.

Бына шулай, изгелек сығанағы булып һаналған, берҙәмлек күрһәткесе булған «өмә» эскелек тантанаһына килтереүсе һөҙөмтә ысынбарлығына әйләнде. Ә һуңғы ваҡытта «өмәселәр» үлсәүҙең «зыянлыҡ» яғына тағы ла бер ауыр өлөш һалдылар, икенсе төрлө әйткәндә, өмә эшенең ҙур өлөшөн урлашыу тәшкил итте. Төҙөлөш, йүнәтеү, төҙәтеү эштәрендә урланған материалдар, кәрәк-яраҡтар киң ҡулланыла. Тимәк, өмәсе эш күләме өсөн бер мәжлес ҡорһа, урланған әйберҙәр өсөн ике-өс мәжлес ултырта.

Хәҙер өмәлә тула баҫмайҙар, туланың кәрәге лә юҡ. Өмәселәр ҙә бүтән хәҙер. Тормош та ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Ҡулынан эш килгәндәргә аҡса эшләү мөмкинселеге лә бар.

## *Тарзан*

*Серенде ныҡ тот, кеше белмәһен,*
*Һүҙеңдән үҙеңә үкенес килмәһен.*

**Әхмәт Йүгнәки**

...Бөгөн клубҡа кино килтергәндәр. Магазинда ҙур белдереү элеүле тора: «Тарзан» тигән киноның яңы серияһы... Малайҙар өсөн ҙур шатлыҡ. Улар, бер-береһен уҙҙырып, Тарзан булып ҡысҡыра. Һәр кем килештерергә тырыша. Фильмдың йөкмәткеһен һөйләү буйынса ла малайҙар бер-бере менән тырышып ярышалар, бәхәсләшәләр, еңешәләр. Миңә ҡалһа, Тарзан тураһында малайҙарҙың һөйләүен тыңлау етә. Юҡ, мин Тарзан булып ҡысҡырырға уйлағаным да юҡ, ә киноһын ҡарарға теләгем ҙур. Бөгөнгө серияһын һис шикһеҙ ҡарарға үҙемә һүҙ бирҙем, сөнки бөтәһе лә ошо турала һөйләгәндә, өндәшмәй генә тороу ҡыйын. Эйе, миңә ул фильмдың бер генә серияһын да ҡарау етә, ҡалғандарын малайҙарҙың һөйләүе буйынса күҙ алдына килтерә алам. Ул яҡҡа минең һәләт етерлек.

Киноға барыр өсөн илле тин аҡса кәрәк. Тәүҙә әсәйгә ялындым, файҙа юҡ. Үҙем дә беләм: булһа – бирер ине. Әсәйем зарланып та алды: «Инде яҙ булды, тауыҡтар һаман күкәй һалмай». Кино күрһәтеүсе аҡсаһы булмаған кешенән күкәй ҙә ала, ә минең уныһы ла юҡ. Юҡ инде, малайҙарҙың: «Һин Тарзанды күрмәнең», – тигән һүҙен тағы ла ишетәһем юҡ. Ҡыйын булһа ла, өләсәйҙән һораным. Тик ул, аҡсаның нимәгә икәнен һорап та тормайынса: «Юҡ, шайтан кәмите ҡарар өсөн аҡса бирмәйем», – тине. Ғәҙәттә, ул һүҙен ҡабатламай, ҡырҡа киҫә. Тик минең башҡа барыр ерем булмағас, ныҡлап инәлергә тотондом: «Йомоштарыңды үтәрмен, ҡап һуғырға килермен», – тип ялындым.

– Ярай, алдамайһың, алдап һораһаң, барыбер бирмәҫ инем, – тип өләсәй миңә бер тәңкә аҡса тотторҙо. Мин ҙур шатлыҡ менән клубҡа йүгерҙем. Клуб шығырым тулы, ҡайһы берәүҙәр хатта ғаиләләре менән килгән, шуға урын етмәй.

Малайҙар өсөн урын эскәмйәләр алдында, иҙәндә: теләһәң – ятып ҡара, теләһәң – ултырып, тик иҙән бысраҡ, батҡаҡтан ғибәрәт. Яҙғы бысраҡ башланғайны. Мин колхоз клубының таҙа булғанын бер ҡасан да күрмәнем.

Халыҡ күтәренке күңел менән ҡарай, фильм ҡыҙыҡлы. Ҡайһы бер малайҙар сәхнәгә эленгән экрандың артына урынлашып алған. Был күренеш мине аптырашта ҡалдырҙы. Баҡһаң, экрандың артҡы яғынан да шул уҡ фильмды күреп була. Эргәмдәге малайҙар ваҡиғаларҙы алдан белеп тора. Фильм ун ике бүлектән тора икән. Киносы һәр бүлектең таҫмаһын тимер ҡумтанан алып, аппаратҡа ентекләп ҡуя. Шул ваҡытта залда ут яндыралар. Яҡтыла халыҡ шау-гөр килеп кинолағы ваҡиғаларҙы тикшерә, уларҙы һәр кем үҙенсә аңлай, бәхәс ҡуба. Миндә бәхәс ҡайғыһы юҡ. Киносы ут ҡабыҙғас, яҡтыла минең күҙҙәрҙән туҡтауһыҙ йәш аға, йәшерә алмайым.

– Ниңә илайһың? – тиҙәр. Мин аңлатып булашам:

– Мин иламайым. Тарзан илата торған кино түгел.

Ни эшләйһең бит, күҙҙәрем ауырығанын аса алмайым бит инде. Мин был турала бер кемгә лә һөйләмәйем, шуға өндәшмәй ҡалыуҙан башҡа сарам юҡ. Күҙ йәштәремде еңем менән һөртәм дә тиҙерәк киләһе бүлектең башланырын көтәм.

Ниһайәт, фильм тамам. Барса халыҡ ишеккә ашыға, һәр кем кино тураһында һөйләнеп ҡайтыр юлға сыға. Кешеләрҙең был фильмдан һуң кәйефе күтәренке, ҡыҙыҡ, һәр кемдең уйында – Тарзан мажаралары. Ә минең уй – ҡайтыу. Мин хатта яҡын кешеләргә лә күҙҙәрем ауыртҡаны тураһында һөйләргә яратмайым. Күпселек, киреһенсә, сирен йәшермәй, кешеләргә һөйләй, кәңәш, ярҙам өмөт итә, дауаланырға теләй. Уларға күптәр, йәлләп, ярҙам итергә тырыша, кәңәш бирә. Ә ауырыған кешенең туған-тыумасаһы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Минең хәл икенсерәк. Шулай, киноға барыр алдынан уҡ, үҙемсә сара күрергә уйлағайным. Ҡараңғы төшкәс, урамда минең күҙҙәр бер ни күрмәй. Ә был турала бер кемгә лә әйтмәнем, сөнки «тауыҡ күҙ» тигән ҡушамат түҙә алмаҫлыҡ йәберләй. Ә малайҙарҙың был ҡушаматты миңә оҙаҡҡа тағыуҙары мөмкин. Әйтмәгәнең мең яҡшы. Тик ҡайтыу мин уйлағанса килеп сыҡманы.

Клубтан сыҡҡас, мин күршеләр артынан атланым. Үҙемдең уйымса, тыҡрыҡҡа етһәм, ҡалған юлды күрмәһәм дә табам. Унда етер алдынан һаман да шул Тарзан тураһында бәхәс барҙы. Минең дуҫым Ишғәле барыһын да аңлап бөтмәй, барыбер үҙенекен иҫбатлай. Әңгәмәгә әүрәп, тыҡрығымды уҙып киткәнмен, күршеләрҙән тороп ҡалғанмын. Ярай, тыҡрыҡты Имәнғол бабайҙың ситәнен һәрмәп табырмын әле, ләкин был эш тә килеп сыҡманы. Һуңғараҡ, бер аҙна үткәс кенә, аңлашылды: Имәнғол бабай ситәнен һүтеп, икенсе төрлө кәртә ҡорған икән, шуға яңылышҡанмын. Урам тынды, кешеләр ҙә ҡайтышып бөттө. Берәм-берәм тәҙрә уттары ла һүнде. Ә минең күҙҙәр шул тәҙрә уттарын ғына шәйләй ине. Тырыша торғас, өләсәйҙең тыҡрығын таптым, өйгә юл алыҫая төшһә лә, исмаһам, хәҙер нисек ҡайтырға беләм. Бына һиңә кәрәк булһа: тыҡрыҡты сығып ҡына боролғайным, аяҡтарым тәрән ҡарға батты. Яҙғы ҡар, аҫты һыу, ике аяғым да тубыҡҡа етә яҙғансы һыуға сыланды. Тиҙерәк сығырға тырышам, сыҡтым, тик һуң инде. Аяҡтарыма баҫып булмай, быуындарым тотмай. Сөнки минең өсөн яҙғы бәлә – аяҡ быуындары шешкәйне. Өләсәй әйтеүе буйынса, «һары һыу йыйыла» – ҡышҡы көндәрҙә яланаяҡ йөрөүҙең бәләһе. Нисек кенә тырышһам да, баҫып булманы. Ауыртыуға сыҙай алам, әммә аяҡтарымды тыңлата алмайым. Инде бер кемдә лә ут янмай. Ауыл йоҡланы. Мин тын-тауыш сығармайынса имгәкләп ҡайтып еттем. Өйгә ингәс, әсәй самауырҙың эҫе һыуында сепрәк еүешләп, аяҡ быуындарыма ураны, мин шул килеш йоҡлап киткәнмен. Минең «Тарзан» менән танышыуым шулай тамамланды. Йөкмәткеһен күп малайҙарға ҡарағанда яҡшыраҡ аңланым, тик улар кеүек Тарзан булып ҡысҡырып ҡына йөрөмәнем. Минең

«тауыҡ күҙе» менән интеккәнде лә бер кем белмәне, ә ҙурайғас ул сир тураһында тамам оноттом.

Оҙаҡ ваҡыт Сәлих ауылы духтырҙары, минең күҙҙәр трахома менән сирле тип, бик тырышып дауалау саралары күрҙе. Күҙҙәремә көсләп йәшел һәңгәр (медный купорос) тыҡтылар, имеш, ул – трахомаға ҡаршы дарыу. Бик ғазаплы ысулдары ла бар ине: күҙҙе әйләндереп, эстәге ҡыҙыл урындарын пинцет менән һыталар, ҡыралар, ҡанға туҙҙыралар. Ә күптәрҙе, тик ултырһын өсөн, ултырғысҡа бәйләп ултырталар ине. Донъя ярып ҡысҡырыусылар булды. Был яза, вәхшиҙәрсә ҡаты яза ине. Миңә трахоманың һуңғы стадияһын ҡуйҙылар, һәм армияға бармаҫҡа тейеш булдым. Ә мине алдылар. Өсөнсө йыл хеҙмәт иткәндә, Ашхабад ҡалаһының күренекле госпиталенә эләктем. Шунда күҙ врачына ла мөрәжәғәт иттем. Ул миңә:

– Һиндә конъюктивиттың айырым формаһы, ашау етешмәгәнлектән булған. Трахома ауырыуы түгел, – тине.

Сәлих докторы белемһеҙ «самоучка» Рауза апай Ҡолмәтова булды. Тик Әптек ауылында минең өләсәйгә килделәр, күрәһең, ул күберәк белгәндер. Ә Ашхабад докторы иһә врач-подполковник ине.

Аяҡ быуындарым менән дә оҙаҡ ҡына яфаланырға тура килде. Был турала ла бер кемгә һөйләмәнем, ә үҙем ҡурҡыныс хәл алдында торғанымды һиҙҙем, бигерәк тә ун ике йәшемдә ныҡ борсолоуға төштөм. Сөнки атлаған ваҡытта минең быуындарым ҡарт кәзәнең аяҡтары кеүек шарт-шорт килә, ныҡ ишетелә. Аяҡ ауыртыуҙа ҡайғым юҡ, аяҡ шартлауын бөтөрөү – төп маҡсатым. Кәңәшләшергә бер кешем дә юҡ, ә хәл ҡот осорлоҡ, бер генә ысул да белмәйем. Әгәр берәйһе минең аяҡ быуындарының тауышын ишетһә, ни эшләрмен? Сараһын табырға булдым. Аяҡ мускулдарының бар көсөн йыйып, кешеләр күрмәгән урында көсөргәнешле итеп атлап йөрөй башланым. Быуындарымдың бер тауышы ла сығырға тейеш түгел. Күп, күп саҡрымдар үттем. Көн һайын яландарға, урмандарға сығып йөрөнөм. Ҡайһы ваҡыт тәгәрәгәнсе, иҫтән яҙғансы атланым һәм ҡотолдом был сирҙән. Ҡыҙҙар менән йәнәш атларға ла оялмай башланым.

Армияға алынғас, Ҡараҡом сүллегенә эләктем. Сүл ҡомонда йәйге эҫелә яланаяҡ йөрөһәң, аяҡ сирҙәрен дауалай икән, тип ишеттем. Форсат булғанда яланаяҡ йөрөнөм һәм һыҙланыуҙарым бөтөнләй бөттө. Бына шулай мин үҙемдән полиартрит сирен ситкә этәрҙем.

Ете-һигеҙ йәшем менән барғанда, мин ныҡ йүтәлләй инем. Хатта туҡтай алмаған көндәрем дә була торғайны. Бигерәк тә һыуыҡтан йылы урынға инһәм йәки йылынан һыуыҡҡа сыҡһам, тонсоға яҙып ыҙаланам. Иптәш малайҙарым «кәшкелдәк» тип көлдө, яҡындарым «сихут» тип мыҫҡылланы. Йүтәл мине бер минутҡа ла тыныс ҡалдырманы, үҙем тураһында бик насар уйҙар менән йөрөнөм. Бынан ҡотола алыу уйы миндә юҡ, хатта башыма ла инеп сыҡмай. Тик, кеше алдында кинәт йүтәлләмәҫкә, тигән ҡәтғи ҡарарға килдем. Кеше күрмәгәндә аулаҡта, тыштан өйгә инеп, өйҙән тышҡа сығып, бар көсөмдө йыйып йүтәлләмәҫкә тырыштым. Тын алыуҙы туҡтатыу менән үҙемде күнектерҙем. Бындай күнекмәләр менән бер нисә ай тырышып үҙ-үҙемде яфаланым. Тәгәрәп киткән саҡтарым да булғыланы. Ә ун йәштәр тирәһенә еткәс, аптыраште ҡалдым: йүтәл мине бөтөнләй ташлап китте.

Бына шулай. Ҡырҡ йәштән уҙғас, бер журналдан ошо алым менән бронхиттан ҡотолоу ысулы бар икәнлеген белдем. Ә йүтәлләгән ваҡытта мин был һүҙҙең ни икәнлеген дә белмәнем бит. Миндә «сихут» тип уйланым, Аллаға шөкөр, үпкәм таҙа, ғүмер буйы иркен итеп тын алдым. Ә үҙемде йәлләгән булһам, астмаға ла юлыҡҡан булыр инем.

# Байраш

— Байраш ағай! Бындараҡ кил әле.

Мәсет урамында, күпереп үҫкән йәшел үлән өҫтөндә, Сатан Ғәйфулла тора. Кешенән көлөргә ярата ул. Юҡҡа ғына саҡырмайҙыр. Үҙенән көлөү ҙә ҡыйыш китмәҫ ине, тик башҡалар әҙәп һаҡлай белә. Шуға ла күберәк был ауыҙ йыра. Үҙе ныҡ сатанлай, күрәһең, бер аяғы байтаҡҡа ҡыҫҡараҡ. Буйға бәләкәй, ҡаҡса, ғөмүмән әйткәндә, сибек, һәр кем көлөрлөк. Ә кешенән ул көлә. Шуға ла унының көлөүенән ҡурҡып, бер генә етешһеҙлегенә лә күҙ һалмайҙар. Юҡ, унан көлөүсе юҡ.

Бына бөгөн дә Сатан Ғәйфулла Байраштан көлөү маҡсаты менән мәсет урамындағы йәшел сиҙәмлеккә баҫҡан. Ай-һай, ул кешегә эсерә торғандарҙан түгел, белмәйем шул, салбар кеҫәһенә күрһәтеп маташа. Имеш, шөрлөйө бар. Булһа, үҙе эсер ине. Үҙе лә ҡәһәр һуҡҡанды эсергә ярата. Әллә шул, юҡтыр. Байраш инәлтеүсе түгел, тәгәрмәс кеүек йүгерә-атлай килеп тә етте. Өмөт менән Ғәйфулланың кеҫәһенә ҡарап алды, тик өндәшмәне.

Сатан Ғәйфулла менән Байраш булған ерҙә кәмит көт тә тор. Мәсет урамында һәлберләшкән малай-шалай, эшһеҙ йөрөгән үҫмерҙәр, бер-ике ҡарт йыйылып та өлгөрҙө. Был икәүҙе берәүҙәр теҙелеп, уралтып баҫты, икенселәре йәшел үләнгә урынлашты.

— Байраш ағай, тәкмәс атһаң, хәҙер үк һалып бирәм, — Ғәйфулла салбар кеҫәһенән ҡағыҙ бөкө тығылған шешә сығарҙы.

— Һалып бир һуң.

— Юҡ шул, Байраш ағай, тәкмәс ат, шунан ғына һалып бирәм.

— Һәй! — Байраш бик йәһәт артҡа сигенеп, бер-ике аҙым алға ынтылды ла тәкмәс атып күрһәтте. Йыйылған халыҡҡа ҡыҙыҡ булғанын күреп, был һөнәрен тағы ла ҡабатланы. Шунан ерҙә ултырған килеш Ғәйфуллаға өмөт менән ҡараны. Ә ул иһә, үҙен хужа итеп тойоп, ҡулы менән үләндә ултырған малайҙарға ишара яһаны, улары тиҙ генә күсеп ултырҙылар.

— Байраш ағай, йүгереп килеп, туҡтамай бер юлы өс тапҡыр тәкмәс атырға кәрәк, шунан һалам.

Байраш ҡыйынһынып торманы, тиҙ генә кесерткәндән башлап биш-алты аҙымдан тиҙлек алып, бер юлы өс тапҡыр тәкмәс атты. Тамамлағас, эш бөтөргән кешеләй, Ғәйфулла алына килеп баҫты.

— Маладис һин, Байраш ағай, — Ғәйфулла икенсе кеҫәһенән сығарған стаканға шешәнән хәмер һалып, уға һондо. Тегеһе һә тигәнсе стаканды тотоп алды ла, тиҙ генә тирә-яҡтағыларға ҡарап, ашығырға кәрәк, тип уйлаған кеүек, стаканды ауыҙына түңкәрҙе.

Мәсет урамындағыларҙың күбеһе, кәмит бөттө, тип ҡуҙғалырға ла уйлағайны, буғай, тик был башы ғына булып сыҡты. Байраш йотоп бөткәс, ныҡ эҫелекте татырға әҙерләнгәйне бит. Эйе, ул сырайын артыҡ ныҡ һытты. Шунан артына сигенеп, үләнгә ултырҙы ла илап ебәрҙе. Аҙ ғына мәлгә яҡындағылар аптырап ҡалды. Мәл тиҙ үтте, ҡыҙыҡ көткәндәр шарҡылдап көлөп ебәрҙе: һай, Ғәйфулла, һай, Сатан, араҡы урынына һыу һалып килтергән. Ярты стакан һыу эсер өсөн Байраш нисә тапҡыр тәкмәс атты. Иламай ни эшләһен?

Байраш бүҫер сире менән интегә, тинеләр. Ҡайһы ваҡыт аҫҡы янсығы бәләкәй баш ҙурлығы булып шешә икән. Был ваҡытта ирҙәр эшен эшләй алмай, теләһә кемдең ары-бире йомошон ғына үтәп тамаҡ туйҙыра, ти. Ғаиләһе бар, эйәрсән ике улы, үҙенә ҡайҙандыр балалы бисә табып алып ҡайтҡан. Аптырарлыҡ түгел, Әптектә ярлы ғаиләләр күп. Ситтән ҡарағанда, Байраш бына тигән ир, төҫкә лә

Сатан Ғәйфулланан арыу, сатанламай. Тик шуныһы: Ғәйфулла кеүек ваҡытында уҡый алмаған. Байтаҡ ваҡыт балта оҫтаһы булған, тик хәҙер тотоп та ҡарамай. Әгәр бер-ике стакан әсегән бал эләктерһә, үҙен был көндә бәхетле һиҙә. Һуңғы ваҡыт ул тәкмәс атыу һөнәрен үҙләштерҙе. Юҡ, башҡалар уға һыу һалып бирмәй. Был тиклемгә Ғәйфулла ғына барып етә. Ҡайһы берәүҙәр Байрашты иҫерткәнсе һыйлай. Тора-бара ул эскесегә әйләнде. Ә эскеһе килгән кешенең ғәҙәте билдәле: аҙ ғына эске өсөн барыһына ла риза. Байрашҡа ла шул етә ҡалды. Ҡайһы саҡта һыу йыйылған соҡорға ла тәкмәс атып йығылырға әҙер. Көҙгө һалҡында ла батҡаҡта тәкмәсләй. Ҡышҡы көндә үҙенең алама тунын кейеп тәкмәсләй. Тик һәр нәмәнең дә аҙағы бар. Байраштың кәмитенең дә аҙағы булды. Мәжлес барған өйгә барып ингән, һиңә йәл түгел, тип бал эсергәндәр, һый еткәс, ул соланға сығып йығылған. Ҡыш уртаһының селлә һыуыҡтары. Солан да һыуыҡ. Байраш йоҡоһонан уяна алмайса донъя ҡуйған.

Башҡорттоң исемдәр теҙмәһендә Байраш тигән исем тапманым. Күрәһең, ул — ҡушамат. Әптек ауылында ҡушаматһыҙ кеше булманы, улар хатта балаларына күсә килә. Ҡушамат – ҡушамат инде, уға күнегеп була. Ә ҡайһы берәүҙәр үҙ тырышлығы менән үҙенә ҡушамат менән һүҙ ҡушмаҫҡа мәжбүр итә. Ысынлап та, уҡымышлыға йәки эш оҫтаһына ҡушамат менән һүҙ башлау уңайһыҙ. Байраштың малайҙары ла ҡушаматҡа эйә булып ҡалды. Уларҙы юҡ итергә тырышлыҡ та күрһәтмәнеләр, мөмкинселектәре лә наҡыҫ булды.

Үгәй малайы был йәһәттән Байраштың үҙен дә уҙҙы. Бәләкәйҙән эшһөймәҫ булды. Уңышһыҙ урлашып, сәнскеле тимер сыбыҡ артында ла ултырып ҡайтты.

Ҡара эш туйҙыра, тигән һүҙҙе күптәр әйтте. Ҡара эш эшләп Байраш-Зиннур ҙа яҡлауға әйләнде. Ә, дөрөҫөн әйткәндә, унын ғаиләһенән егәрле кешенең сығыуы шикле. Зиннур ҡарап торғанда арыу ғына ир-егеткә оҡшаған: тос кәүҙәле, төҙөк, йүнлерәк кейендерһәң, күптәрҙе уҙырлыҡ. Йыр-моңға ла бер аҙ һәләте булды шикелле. Бер саҡ малайҙар уны клубта концерт ҡуйырға өгөтләп ризалаштырғандар. Кем белә, бәлки, кемдер ысын күңелдән кәңәш иткәндер, ә кемдер «Байраш» мәсьәләһен ҡуҙғатҡандыр. Әммә клуб мөдире, тағы ла бер Зиннур, клуб ишеген йоҙаҡлап юғалған. Байраш-Зиннур ҙа сер бирмәҫкә булған, клуб күтәрмәһенән тороп концерт бирәм, тигән. Үҙе яратҡан «Балыҡсы йыры»н арыу ғына йырланы, тинеләр. Ни эшләйһең, яҙмыштыр инде. Һуңғы көндәре лә «байраш»са уҙҙы. Мин уның Ишембайҙа Ленин урамында хәйер һорашып ултырғанын күрҙем. Ул мине таныны, ә мин күрмәмеш булып үтә һалып киттем. Шул урынында ятып үлгән, тиҙәр. Ауыр тупрағы еңел булһын.

Йә, Хоҙай, ниңә мин бындай күңелһеҙ темаға яҙам һуң әле?

Ысынлап та, күптәр беҙҙең халыҡты, үҙҙәре ғәрип көйө, Байраш урынына тәкмәс аттырырға теләй түгелме һуң? Халыҡҡа тәкмәс атырға яҙмаһын, бер ваҡытта ла.

Әптектә хәҙер мәсет урамы юҡ. Был урынды сүп үләне ҡаплаған. Ә таш ҡойма мәсеттән элек үк һүтелгәйне.

**Парсалар**

*Бәләкәй саҡ. Дуҫым Сынтимер менән Һәләүек ярында уйнайбыҙ. Ағас араһында ҡош ояһын күрҙем, дуҫыма әйттем: ҡара әле, ниндәй матур ҡош балалары... Дуҫым уйлап торманы, ояны урынынан йолҡоп алды, Һәләүеккә ағыҙҙы. Эйе, минең, ояға теймә, тигәнгә иғтибар итмәне, ә мин бер ни эшләй алманым, һыуға йүгереп төшөп, меҫкендәрҙе ҡотҡарырға тырышып ҡараным. Булманы, дуҫым ағып барған ояға таш менән бәрҙе. Мин бик оҙаҡ үртәлдем, эйе, ҡарабаш турғай ояһылыр, тип уйлап һыҙландым.*

# Бәрәңге баҡсаһы

*Беҙ ҡапсыҡта ятмай.*

**Халыҡ һүҙе**

— Эй, шул уҡыуың! — Мин был һүҙҙе бик йыш ишеттем. Мәктәпкә уҡырға йөрөүем дә өйҙәгеләрҙең береһенә лә оҡшаманы. Шулай, өйҙәге һәр эште миңә йөкмәтергә тырышалар. Йәйге көндәрҙә малайҙар менән һыу инергә бараһы килә, мәтәл уйнарға ла саҡыралар, ә минең һәр саҡ ваҡыт тар.

Әйтәйек, бәрәңге утау, күмеү — минең генә эш, утыҙ сутый баҡсаға мин генә хужа булған ваҡыт та була.

Эйе, тәүге йыл, яңы урында өй һала башлағас, атай был баҡсаға тары сәсергә булды. Тары шул тиклем уңып үҫте — һоҡланмаған кеше ҡалманы, ә миңә ҡалһа, һоҡланыуҙың кәрәге юҡ, тары минең өсөн бығауға әйләнде, сөнки тары, өлгөрә башлаһа, кешеләр ҡарашын ғына түгел, ә турғайҙарҙы ла үҙенә тарта икән. Атай миңә ағастан шылтырауыҡ яһап бирҙе, әйләндереп күрһәтте, мәслихәт, һыңар ҡул менән әҙ-мәҙ һелкетһәң, шалтыраған тауыш сыға. Ә мин иртәнән кискә тиклем, тарыға турғайҙар ҡунмаһын өсөн, шул шалтырауыҡты һелкетеп йөрөргә тейеш. Ярар инде, был эште мин тейешенсә үтәнем. Тары урыу ваҡыты етте, ураҡ менән урҙыҡ. Үҙебеҙ сыбағаш менән һуҡтыҡ, уныһын да атай үҙе яһаны, байтаҡ тары сығарҙыҡ. Ҡышҡы көндәрҙә тары оно тамаҡ туйҙырыр өсөн бик һәйбәт булды, асыҡманыҡ.

... Миңә һигеҙ йәш самаһы. 1947 йыл, мин икенсе синыфта уҡып маташам.

Бәрәңге утауҙы, күмеүҙе мин әллә ни ҡыйын эшкә һанаманым, бер үҙем тотонған эш миңә һәр саҡ оҡшай, үҙемдең уй-хыялдарым үҙем менән.

Бәрәңге баҡсаһы минең өсөн ҡәҙерле урын да булып алды, эйе, был турала мин бер кемгә лә һөйләмәнем, иптәш малайҙарға ла белгертмәнем. Баҡсаның ике башында ике ҙур ҡырмыҫҡа иләүе бар. Урам яҡ баштағы ҡырмыҫҡалар һарыраҡ төҫтә, эрерәктәр, баҫыу яҡ баштағы иләүҙекеләр сөм-ҡара, ә үҙҙәре вағыраҡ. Һәр иләүҙән бер нисә юл китә, шулай инде, бәрәңге утарға әсәйҙең йәки апайҙын сығыуы ла миңә оҡшап етмәй, сөнки улар, ҡырмыҫҡа юлдарын абайламай, күмеп тә китәләр. Ә мин ул юлдарҙы таҙартам. Минең өсөн ҡырмыҫҡаларҙың көнкүреше үтә ҡыҙыҡлы. Эшләп арығас, мин ҡырмыҫҡа иләүенә яҡыныраҡ килеп ултырырға яраттым, хәрәкәттәрен күҙәттем, себен, күгәүен тотоп, юлдарына һалдым. Ниндәй берҙәм бөжәктәр, һәр эште күмәкләп эшләргә яраталар, улар өсөн һәр нәмә үҙ урынында ятырға тейеш. Ә нисек көслөләр, үҙенән ҙурыраҡ күгәүендe ҡырмыҫҡа иркенләп алып китә, ә күтәрә алмаған әйберҙе этәрә йәки тәгәрәтә белә. Мин һәр яҙ, баҡса һөргәндә, һөрөүсе алдынан йүгереп сыҡтым, ҡырмыҫҡа иләүҙәрен һаҡлау минең изге бурысым булды, һабансының көлөүе минең өсөн бер ни түгел.

Һалдаттан ҡайтҡас, яҙ, бәрәңге баҡсаһын ҡараным, ҡырмыҫҡа иләүҙәре юҡ ине шул, баҡса ла минеке түгел, өс йыл хеҙмәт иткәнсе минән биҙеп өлгөргән.

Эйе, шул уҡ йылдарҙа атай баҙарҙан ике кролик алып ҡайтты, улар минең ҡарамаҡҡа бирелде, үрсетергә ҡуштылар. Үкенескә ҡаршы, үрсемәнеләр, күрәһең, аталы-инәле булмағандар. Ҡуяндар миңә һәм баҡсаға эйәләште, бәрәңге араһынан үлән ашарға яраттылар, саҡырһам, йүгереп килеп еттеләр, эт өргән тауыш ишетһәләр ҙә йүгереп килделәр. Эйе, туҡтап тормай, тура ҡулыма һикереп менә торған ғәҙәттәре лә булды. Мин уларҙың икеһен тотоп, урамға ла алып сыҡҡыланым. Көҙ еткәс, атай кроликтарҙы һуйырға булды, минең ҡаршылыҡҡа иғтибар итмәне. Һуйғас, мин кролик итен ашауҙан баш тарттым, атай нисек кенә аҡырып ҡарамаһын, ашалған һауыттар йыуылмайынса өйгә инмәнем.

Бәрәңге баҡсаһы миңә серҙәрен дә һөйләне, эйе, мин күмгән бәрәңге түтәле башҡаларҙыҡынан айырылып тора, мин һәр эште үҙемсә эшләргә тырыштым, башҡалар һәр үҫентене уралтып күмә. Ә мин һәр теҙмәне бер яҡлап күмеп сығам да, бөткәс, икенсе яғынан күмергә тотонам – миненсә, матурыраҡ та, уңайлыраҡ та.

Бәрәнге күмгәндә бик йыш атылған еҙ гильзалар килеп сыға, ҡайһы саҡта пулялар ҙа табыла, ә ике тапҡыр атылмаған пулялы гильза килеп сыҡты. Миңә, бала кешегә, был ҡыҙыҡлы күренде. Мин ул нәмәләрҙе йыйҙым, гильзаларҙың ҡайҙан килеп ятҡандарын белгем килде, һораштым.

Әсәйҙең «әллә, белмәйем» тип әйтеүе ғәжәп түгел, атайҙың «башымды әйләндермә» тигәненә лә аптыраманым. Ә өләсәй минең һорауҙарға яуап бирҙе. Эйе, беҙҙең баҡса – Муллаҡ тауы итәгендә, элгәре шул тирәле Муллаҡ исемле кеше йәшәгән, ә шул тау эргәләп күрше Тимаш ауылынан юл килеп төшә.

Өләсәй һөйләүе буйынса, Тимашевкала 1918 йылда «ҡыҙыл отряд» ойошторола. Бик алама йылдар булған икән, кис етһә, атыш башланыр, өләсәй дүрт малайын баҙға йәшерер булған, ә ҡайһы саҡта яҡтынан туғайға алып киткән. Тимаш ауылы Әптектең төньяғында булһа, көньяҡта, шул уҡ алыҫлыҡта, тағы урыҫ хуторы бар. Тимашта ҡыҙылдар булһа, хуторҙа аҡтар булырға яратҡан, ә атышыр өсөн Әптеккә килгәндәр. Ниңә түгел, Әптектә ат һорарға мөмкин, ит һәм башҡа ашамлыҡ талап була, бесәнде лә әптектәр бирергә тейеш. Ҡыҙылдар Тимашты талай алмай, хуторҙы аҡтар таламай. Эйе, Әптек күп ирҙәрен юғалтҡан. Мәҫәлән, бына нисек тә булған: өләсәйҙең бер туған энеһе Бирғәле шул хуторға йомошҡа килгән. Ә хуторҙа ҡыҙылдар булған, самогон эсеп ултырғандар. Ат менән килгән сит кешене күреп, урамға сыҡҡандар, Бирғәлене туҡмай башлағандар. Ниңә килдең, имеш. «Знаком»ға килгәнен ишетергә лә теләмәгәндәр, «знаком»ын да тыңлап тормағандар. Он алырға килдеңме? Бына һиңә он тип, өйҙән үлсәү герҙәрен алып сығып, Бирғәленең итеген һалдырып, табандарына гер менән һуҡҡандар. Эйе, Бирғәле бабай шунда донъя ҡуйған, ҡәбере лә шул тирәлә. Атын да, арбаһын да «ҡыҙыл партизандар» үҙҙәренә алған. Өләсәй был турала бик әсенеп һөйләр булды, ул шуның өсөн ҡыҙылдарҙы ғүмере буйына яратманы.

Бәләкәй саҡта мин тағы бер күренешкә аптыраным. Мин бәрәңге утайым, ә тыҡрыҡтан Тимаш яғына иҫәпһеҙ-һанһыҙ урыҫ әбейҙәре, бисәләре ағыла, һай, күптәр. Күберәге яланаяҡ, арҡаларына тоҡ аҫҡандар. Нинә шулай? Мин ололарҙан һорашам, табынырға барыусылар икән, ә тулы яуап биреүсе юҡ. Бына тағы бер һорау: беҙҙең ауылда Һәләүек аша матур итеп эшләнгән күпер бар, ә был әбейҙәр шул күпер аша үтә. Күпер йыуан ҡарағай бүрәнәләрҙән яһалған. Мин аптыраштa. Ни өсөн башҡа ауылдарҙа шундай күперҙәр юҡ? Эйе, ҙурайғас, был һорауҙарға яуап табам, тип уйлап ҡуйҙым. Ә мин ысынлап та күп китап уҡыным, яуаптар ҙа табылды. Эйе, һис шикһеҙ, Әптек ауылы аша оло юл үткән. (Табын-Верхотор юлы, булһа кәрәк.) Ә йөҙәрләгән әбей Верхотор, Татьяновка, Воскресенск һәм башҡа урыҫ ауылдарынан йыйылып, Табынға барған. Ә унда табыныу урыны ғына булмаған, дауаланыу ҙа шунда. «Табын» һүҙенең дә үҙ сере бар, эйе, был – башҡорт һүҙе, тимәк, был урын урындағы халыҡта, урыҫтар килеүҙән элек, табыныу урыны һаналған. Тимәк, шифалы һыуҙан да файҙалана белгәндәр. Ә урыҫтар һуңғараҡ, бында Алла үҙе килгән, тигән хәбәр тaратҡан: «Богоявленск» иконаһы табыла, йәнәһе.

Бына шулай, Богоявленскиҙа баҡыр заводы төҙөлә, һуңғараҡ шундай уҡ завод Верхоторҙа төҙөлә. Ә иң тура юл беҙҙең ауыл аша үтә лә инде.

Верхотор заводы бик оҙаҡ эшләгән, ул ҡара иҫәп буйынса ике миллион ботҡа яҡын саф баҡыр иретеп биргән. Эйе, ул ваҡытта баҡыр иретеүсе байҙар хөкүмәтте алдай ҙа белгән, тимәк, баҡыр сығышы байтаҡҡа күберәк тә булған.

Иҫ китерлек: Башҡортостанда егерменән артыҡ баҡыр заводы эшләгән, был заводтарҙың баҡырын ҡушып иҫәпләһәң, Ер шарына балдаҡ та кейҙереп булыр ине. Ә ҡайҙа һуң ул тиклем байлыҡ? Мин иҫәп-хисап менән дә маташтым, ысынлап та, аптырарлыҡ. Әйтәйек, Мәскәүҙәге иң матур йорттарҙың береһе «Пашков йорто» Башҡортостан баҡыры аҡсаһына төҙөлгән – бәхәсһеҙ. Әгәр иҫәпләп ҡараһаң, был йорттоң хаҡы Башҡортостанда барлыҡ етештерелгән баҡыр хаҡының меңдән бер өлөшөнөң яртыһына ла етмәй. Бына шулай. Әгәр ул ваҡыттағы Мәскәү һәм Петербург ҡалаларындағы төҙөлөштәрҙең хаҡтарын иҫәпләп ҡараһаҡ, тағы аптыраш. Ә аҡсаның күп өлөшө ҡайҙа булған? Килемдең ҡайҙа киткәнен аңлау ҡыйын түгел, эйе, ул ваҡытта Рәсәй байҙары Көнбайыш Европала типтерергә ятраҡкандар ҙа баһа. Аҡсаның да күп өлөшө шул илдәрҙең ҡаҙнаһын байыткан. Бына нисек: Лондон, Париж, Женева йәки һәр төрлө Баден-Баден кеүек урындар үҫеш алыу аҡсаһын беҙҙең яҡтан да көтөп алғандар булып сыға.

Эйе, бөгөн дә Верхотор тирәһендәге урын иҫ китерлек. Хозур тәбиғәт ҡосағы – Швейцарияң ары торһон. Ә ниңә һуң теге байҙар был тирәлә үҙҙәренә Баден-Баден ҡороп маташмаған? Һорауға яуап бик өҫтә ята: дөрөҫөн генә әйткәндә, Урал эшселәре ул ваҡытта ҡоллоҡта булған. Ә ниңә байҙар ҡолдар йәшәгән урында үҙҙәре өсөн Баден-Баден ҡорһон?!

Барып типтергәнең яҡшы, тигәндәр.

Петербург ҡалаһында елле һәйкәл бар, ул «Баҡыр һыбайлы» тип атала. Моғайын, Башҡортостан баҡырынан ҡойолғандыр. Эйе, Петр Беренсе – Европаға тәҙрә асыусы. Был турала белмәгән зат юҡтыр. Һорау бар. Ә Петр Беренсе тәҙрәне ҡайһы яҡтан асҡан? Эске яҡтанмы, тыштанмы? Ә күптәр, өйҙән, эске яҡтан асылған, тип уйлайҙар. Юҡ, туғандар. Тәҙрә тышҡы яҡтан асылған, Көнбайыш Европа илдәрендә тын алыу еңелләшкән. Әлеге заманда ла шулай, Мәскәү түрәләре һаман шул Көнбайыш Европа мәнфәғәте өсөн тырышып ята. Березовский, Абрамовичтар тураһында әйтеп тораһы түгел – бынан көрәйҙәр, ә тегендә һылайҙар. Инде нисә быуат тауыҡ законы буйынса йәшәйбеҙ. Эйе, эйе шул, һәр зат үҙенә көрәй, ә тауыҡ үҙенән тибә; беҙҙекеләр ҙә шулай, тауыҡ башы, тауыҡ аҡылы уларҙа.

Ни эшләйһең, яҙмышыбыҙ шундай.

Ә бөгөн Әптек ауылынан юл үтмәй, онотолған. Халыҡ хәлен һорашып тормағыҙ, эштәре мөшкөл. Һәләүек тә ярым ҡоллоҡта, һыуҙарының ҙур ғына өлөшө торба эсенән Стәрлетамаҡҡа аға. Баҡыр ҡайғыһы ла юҡ, хәҙер башҡорт халҡының ғорурлығы һаналған Шәке тауын бөтөрөп баралар, ә килем ҡайҙа китәлер – этем белә. Бәлки, иртәгә Торатауҙы шартлата башларҙар? Юҡ, башлағайнылар, туҡтатып торҙолар. Ваҡытлыса ғыналыр, тим.

## Келәт

*Эй Хоҙайым, Хоҙайым,*
*Колхоз булып ҡуймайым.*
*Келәт алдарына барып,*
*Тоҡсай тотоп тормайым.*

**Әптектәр таҡмағы**

Иртәнсәк Сания инәй килеп әйтте: олатайға ике кило онға яҙыу бирелгән. Эйе шул, олатай үҙе йөрөй алмай, ауырый, ныҡ йүтәлләй. Кәнсәләрҙән ул ҡағыҙҙы алғас, кемдер келәттән он барып алырға тейеш, ә өләсәй ҡырт киҫте:

– Хәйерсе булһам да, колхоз келәтенә бараһым юҡ.

Ике кило он – үҙе бер байлыҡ, ауылда ондан баш тартыусы юҡ. Был эш Әксән абзыйға йөкмәтелде, ә ул тартынып торманы.

– Әйҙә, эйәрәһеңме? Алып барам, келәтте күрерһең.

Мин шатланып риза булдым, беләм, келәттәр беҙҙең тәҙрәнән күренә, ауылдың түбән осондалар. Беҙҙең өйҙә ул келәт тураһында күп һөйләйҙәр. Шулай, күрәһем килә, бармай ни, барам. Икәүләп киттек. Ҙур урамға төшөп, кәнсәләрҙән ҡағыҙын алғас, ауыл осона йүнәлдек.

Был яҡ оста ла малай-шалай күп икән, миңә йоҙроҡ күрһәтеп алғандары ла булды. Ауыл башындағы баҫыу ситәненә барып еттек, ә баҫыу ҡапҡаһы төбөндә тағы ике-өс малай, әлеге лә баяғы мине ҡурҡыталар. Ярар әле, беҙ келәткә боролдоҡ. Колхоз келәттәре барыһы ла тип әйтерлек бер төрлө бүрәнән һалынған, һәр береһе Ибраһим бабайҙың мунсаһы кеүек, егермеләп келәт ике рәткә теҙелгән, ә ике арала ырҙын икән.

Аҙаҡ һорашып белдем: һәр хужаның үҙ келәте булған. Олатайҙың да келәте һүтелеп, бына ошонда килтерелеп, яңынан һалынған. Бына нисек, мин һанарға өйрәнгәс, асыҡлап та алдым: ауылда өйҙәр йөҙҙән артыҡ, ә келәттәр һаны егермеләп кенә. Тимәк, колхозға ингәндәрҙең барыһы ла келәт биреп инмәгән, тимәк, элек келәтһеҙ хужалар күберәк булған. Бына шулай. Келәттәр мөдире Нурғәле ағай, беҙҙе күргәс:

– Ниндәй йомош? Был бала-саға урыны түгел, – тип аҙарынды.

Мин өндәшмәйем, Әҡсән ағай артына баҫам, яуапты ул бирә.

– Нурғәле ағай, олатайға он яҙғандар, шул ондо алырға килгәйнек.

– Ана, урталағы келәт алдына барығыҙ, бында буталып йөрөмәгеҙ.

Үҙебеҙ ҡурҡа-ҡурҡа йөрөгәнлектән, һүҙ әйтеп торманыҡ, әйткән урынға барып баҫтыҡ. Келәттең асылыуын көтөп тороусылар ҙа бар икән. Бына келәт мөдире үҙе килде, ҡулында – бер ус шылтырап торған асҡыстар, береһен һайлап, ҙур йоҙаҡты асып, келәт ишеген шар асып ҡуйҙы. Келәткә индек. Мин иң башта келәт эсендәге кәштәләргә күҙ һалдым. Кәштәләрҙә йоморо икмәктәр ята, күп.

Ә ишеге асылғас, келәт алдында кеше күбәйҙе, беҙ ситкәрәк баҫтыҡ.

Ә-ә... Келәттән икмәк, он алыусылар байтаҡ булып сыҡты, күрәһең, колхоз келәтенән тамаҡ туйҙырыусылар аҙ түгел икән. Икмәк йәки он алыусылар – үҙҙәрен өҫтөнөрәк тотҡан кешеләр. Бына береһе:

– Нимә ҡарап тораһығыҙ, килеп баҫҡанһығыҙ, колхоз келәтен һағалап,– тип һуҡранды.

Ә үҙе ҡағыҙын һуҙып он үлсәтте, күберәк тә алды, ат егеп килгән, онон арбаһына һалғас, тағы килеп баҫты:

– Икмәгең һәйбәт бешерелгән, ярто кило ғына үлсәп бир, ҡағыҙын иртәгә килтерермен.

Нурғәле мөдир, бер һүҙ әйтмәй, икмәк киҫеп үлсәне лә был бәндәгә бирҙе. Теге кеше икмәктең бер яғынан ҙур булмаған киҫәк һындырып алып ауыҙына ҡапты, сәйнәй-сәйнәй, арбаһына ултырҙы. Дилбегәһен һелкетеп, атына ҡуҙғалырға ҡушты. Келәт алдындағылар, икмәк ҡабыусының ауыҙына ҡарап, ауыҙҙарында нимәлер йотоп маташты. Уйлап ҡуйҙым: миңә лә бәләкәй генә икмәк киҫәге бирһендәр ине. Юҡ, мин ауыҙымды асырға ла ҡурҡам. Ә бына һуңғараҡ килгән Сәғиҙә инәй, мөдиргә ҡулдарын һуҙып:

– Зинһар, тип әйтәм. Бер генә телем булһа ла үлсәп бир, бәләкәй ҡыҙым хәлдән яҙҙы, хәлһеҙләнде, зинһар өсөн...

– Әндрәй ҡаҙнаһы юҡ бында, ҡағыҙың ҡайҙа?

– «Яҙырбыҙ» тигән булғайнылар, яҙманылар шул, ҡыҙҙарым шешенде. Ни эшләйем икән һуң?

–Ни эшләһәң дә эшлә, һиндә диалам юҡ.

– Йә Хоҙай, кеше хәлен аңлаусы юҡ.

Сәғиҙә инәй туҙған яулығы менән күҙ йәштәрен һөртөп маташа.

– Аталары һуғышта үлде, ни эшләйем һуң?

– Мине икмәк өләшергә ҡуймағандар, ишектән кит. Кемдең ҡағыҙы бар?

Әҡсән ағай ҡурҡа-ҡурҡа ҡағыҙын мөдиргә һуҙҙы.

– Бир тоҡсайынды.

Тоҡсай мөдир ҡулына эләкте, ул стена буйындағы тоҡтарҙың береһенән һоҫҡо менән он һалып үлсәне лә:

– Мә, ал. Ә башҡа ҡағыҙлылар юҡмы? Булмаһа, китеп тороғоҙ, үҙемдең эшем етерлек.

Беҙгә әйтеү кәрәкмәй, тиҙерәк ҡайтыу яғын ҡараныҡ. Ә Әҡсән абзый, келәт артына сыҡҡас, тоҡсайҙы ҙур таш өҫтөнә һалып, ике ҡулы менән өҫтән ҡыҫып баҫты.

– Бына шулай, күберәк күренһен.

Күрәһең, ул ике кило ондо өс-дүрт кило итеп күрһәтергә маташа. Әллә шул, күп булһа ла, был ондоң икмәге беҙҙең ауыҙға эләкмәҫ, өләсәй үҙ һүҙле кеше. Эйе, ҡайтып еттек, тоҡсайҙы ҡулына алғас, өләсәй әйтеп һалды:

– Үҙенә яҙылған онон үҙе ашаһын, миңә кәрәге юҡ.

Ни эшләйһең, ике кило он бер кеше өсөн күпкә етмәй. Юҡ, беҙҙең өйҙә таҙа ондан икмәк бешереү бөттө. Он хәҙер – ыумас өсөн. Өләсәй әйтә: «Он, балам, хәҙер дарыу урынына ҡалды».

Олатайға башҡа он яҙманылар, ул һуғыш бөткәнде көтөп ала алманы, 1944 йылдың яҙында астан интегеп үлде. Беҙ ҙә колхоз келәтенә ҡабат барманыҡ.

Беренсе синыфҡа уҡырға төшкән уҡыусы балаларҙы башаҡ йыйырға көсләп алып барҙылар. Йыйылған башаҡтарҙы келәткә алып килеп тапшырҙыҡ. Келәт мөдире һаман шул Нурғәле ағай ине.

Хәҙерге Әптек келәттәре күптән юҡ. Кәрәге лә юҡтыр, күрәһең.

## Бикеш

– Малайҙар! Бикеш ярған!

Бына ҡыҙыҡ, бына һөйөнөс. Бикеш ярған. Бикеш – йылға түгел, шишмә лә түгел. Бикештең сығанағы ла юҡ. Бикеш – ҡыҫҡа ғүмерле яҙғы ҡар һыуының "балаһы". Ҡыҙыл тауҙың ауыл яҡ битләүендәге яландың ҡарҙары ҡояш нурында ирегәс, Бикештең донъяға килгәнен көт тә тор. Һыртҡы урамдың тапалған ҡары байтаҡ ваҡыт ҡар һыуын өләсәй баҡсаһына ебәрмәй тота. Ҡар һыуының үҙ тәртибе. Мин иҫәр, бына быйыл Бикеш ярғанын ҡарап торам, тигәйнем. Ә Бикеш үҙенсә, кеше күрмәгәндә, үҙенә юл ярып ала ла Һәләүеккә ашыға. Эйе, өләсәй баҡсаһында уңға борола, икенсе баҡсаға инә, тағы бер баҡсаны арҡырылап үткәс, һуңғы ситәндең бер-ике бағанаһын йыуып, тыҡрыҡтан аға. Тыҡрыҡтан ҙур урамға төшөп, уңға борола. Ҙур урамды һулға боролоп үтер алдынан ял итеп алыр өсөн, бәләкәй генә һай күл йораты яһай. Ҙур урамды үткәс, бала ғәҙәте менән, колхоз канцелярияһының артҡы яғынан уҙып, Һәләүеккә йүнәлә. Һәләүеккә ул шатланып, һыуҙарын сәсрәтеп төшә.

Ҡыҫҡа Бикеш ғүмере, юлы ла ҡыҫҡа. Бикеш хәлен беҙ генә, малайҙар ғына, аңлайбыҙ, Бикеш менән уйнап ҡалырға тырышабыҙ. Беҙ дүртебеҙ: Иҡсан, Ишмөхәмәт, Юнир һәм мин. Дүртәүләп быуа быуабыҙ, был мауығыу беҙҙең өсөн үтә мәслихәт. Әле ҡарҙың яртыһы иреп өлгөрмәгән, ә беҙ яланаяҡ, ҡарындар буш икәнлеген дә онотабыҙ. Яҙғы батҡаҡ беҙҙең аяҡтарға һынау яһай. Аяҡтарыбыҙ ҡап-ҡара булып ҡата башлағас, тиреләре ярыла, көсөкләй, ҡанһырай башлай. Бына шул ваҡытта ололар беҙҙән көләләр:

– Нишләрһегеҙ инде, аяҡтарығыҙ көсөкләй башлаған. Көсөктәрегеҙ үҙегеҙгә эйәреп йөрөйәсәк.

Эйе шул, аяҡтарҙың шешкәнлеген беҙ кис кенә аңлайбыҙ, әрнейҙәр. Ярар әле, ололар тракторсыларҙан сәлиҙур тигән майҙы һорап алып, беҙҙең аяҡтарға һөртәләр. Әҙ генә еңеллек тойола. Ә иртәгәһенә беҙ тағы быуа быуабыҙ, өләсәйҙең баҡсаһы сиҙәм түгел – тиреҫ, ә тиреҫтән быуа яһау ҡыйын түгел. Кәрәкле таш киҫәктәрен, сыбыҡ-ботаҡты услап ташыйбыҙ, ә көрәк һәр беребеҙҙә юҡ. Бикеш һыуға бай түгел, урғып аҡмай, бына быуа быуылды – һай, матур! Һыу менән тулды. Иң ҡыҙыҡлы мәл, мин – быуаның оҙағыраҡ көн күргәнен теләүсе. Ә бына Сынтимер дуҫым килһә, быуаға көн юҡ. Ул ҙурыраҡ таш киҫәген алып быуаның иң бейек урынына, Бикеш юлына, бәрә. Беҙ быуаны ошо мәл өсөн быуабыҙ. Бикештең дә шашып аҡҡанын күргебеҙ килә. Шулай шул, ауылдың түбәнге осонда Ҡарыу аға, ул ҙур йылғаға оҡшаған, йәйгә тиклем аға. Ә ҡайһы бер йыл ул йәй уртаһына тиклем йылтырап ята, сөнки Ҡарыуҙың башы урманда, бер нисә ҡойоһо ла бар. Ә Бикеш башы баҡсалар артында, тамсылары ағас тамырҙарын сылатмай, шуның өсөн ғүмере ҡыҫҡа.

Бер көн, Бикеште быуғас, беҙ икенсе уйын менән мауыҡҡанбыҙ. Миңнәстау башына туп уйнарға киткәнбеҙ. Бына шул көн Бикеш беҙгә ҡаты “шелтә” яһаны. Йыбанмай таш, сыбыҡ-сабыҡ ташып, туҙ киҫәктәре һалып быуҙыҡ. Тау башында уйнап бөткәс, мин өләсәй йортона йүгереп ҡайттым. Иҫ китәрлек: Бикеш быуаны йырмаған, үҙенә тигеҙ урындан юл ярып, өләсәй соланына ингән. Соланда иҙән юҡ, ситән соланға иҙән һалмайҙар. Иҙән – тапалған ер, түбәнерәк. Бәр-рәкәт! Солан эсендә күл, күлдә өләсәйҙең соҡолоп яһалған ағас ялғашы, табағы йөҙә. Усаҡҡа яғырға әҙерләнгән ҡоро утындары йөҙә. Күп нәмәләр һыуҙа ята. Ә солан мөйөшөндә был хәлгә бер ҙә аптырамаған киле тора. Киленең хәҙер кәрәге юҡ, килелә төйөргә тары юҡ. Киле өҫтөндә – ағас тәпән. Тәпән эшһеҙ. Элек ҡыш булғас, ҡар яҡҡас ҡунаҡ йыйғандар. Ҡунаҡтар ашап бөтмәгән һалмалы ит киҫәктәрен тәпәнгә тултырып, һыуыҡ соланға ҡуйғандар, һыуытҡыс булмаған. Ә хәҙер ҡунаҡсыллыҡ юҡ, тәпән буш. Нишләргә? Өләсәй был хәлде күрһә?! Миңә эләгә. Ҡыҙыҡ-мыҙыҡҡа һәр саҡ мин ғәйепле. Тиҙ генә быуаны ебәрҙем, нишләйһең, аҙ-маҙ ғауға булды.

Бикештә уйнаған малайҙар – Иҡсан, Ишмөхәмәт, Сынтимер бер-бер артлы донъя ҡуйҙы. Барыбыҙ ҙа ауыр тормош әсеһен татыныҡ. Беҙҙең һөйөнөс – яҙҙы ҡаршылау, Бикештә уйнау булды. Хәҙер Бикеш юҡ. Бикеш тә донъя ҡуйҙы. Баҡсалар артынан ауылды ураҡҡан юл да һалдылар, Бикеш юлын яптылар. Бикеш юҡ, үлде. Ә хәҙер Әптек ауылында Бикеш атамаһын иҫендә тотҡан бер кем дә юҡ. Мин бер үҙемме?

## Еңеүселәр

*Эйе, Герман тилмереп, мәңге*
*Тыныслыҡ – мир көтә.*
*Ғазраил, һин тәңреңә ҡайт:*
*Ил илап Ябраил көтә.*

**Шәйехзада Бабич**

– Йүгер, атайың һуғыштан ҡайтҡан! – Был тауыш минең ҡолағымда күп йылдар буйы яңғырап торҙо. Был һүҙҙәрҙе кем әйткәндер – барыбер иҫемә төшөрә алманым. Ҡайһы яҡҡа йүгерергә икәнде лә әйтеүсе булманы, буғай, ә мин барыбер дөрөҫ йүгергәнмен. Ә бына атайҙың мине күтәреп алғаны ныҡ иҫемдә ҡалған. Был урын Әптек башланғыс мәктәбе алдындағы ҙур урамда ине.

Атай мине күтәреп ҡайтты. Мин инде алты йәшлек малай. Ҡыйынлыҡтар бөттө, атайһыҙ малай түгелмен, рәхәт булыр инде хәҙер, тип уйлағанмындыр. Бәлки, бер нәмә лә уйламағанмындыр. Осрашыу шатлығынан тыш был ваҡытта тағы ниндәй уй булһын! Кем белгән инде атайҙың мине беренсе тапҡыр алып күкрәгенә ҡыҫҡанын, ә һуңғыһы икәне көн кеүек асыҡ. Фронттан минең атайҙан да элек ҡайтыусылар булды. Уларҙың балалары, туған-тыумасалары шатлыҡтарын бар кешегә лә күрһәтергә тырышты. Шуға күрә мин дә атайҙың ҡайтҡанын түҙемһеҙлек менән көттөм. Ә фронтта һәләк булғандарҙың балалары? Ундайҙар ҡайтыусыларҙың балаларына ҡарағанда бер нисә тапҡырға күберәк. Аҙаҡ шуныһы ла асыҡланды: фронтта һәләк булғандарҙың малайҙары, минең әшнәләр, миңә яҡшы ҡараш ташламаны. Атайлы булыуым ниндәйҙер айырмалыҡтар тыуҙырҙы. Бәхәс сыҡһа: «Ә һинең атайың бар»,– тинеләр. Ысынлап та, бала кеше һәр саҡ шатлыҡ өмөт итә. Мин дә шундай көндәр көтһәм, үҙем дә һиҙмәҫтән, ҡыйынлыҡтар күбәйеүен тойҙом. Үҙем дә һиҙмәҫтән, балалыҡ йылдарының тамамланғанын күрә башланым. Балалыҡ бөттө, эш, ауыр эштәр көтә. Тик мин генә был турала әлегә белмәйем.

Белмәгәнең яҡшы. Ауырлыҡтар килерен алдан белһәң, тормоштоң бер йәме лә булмаҫ ине бит. Һәр кем шатлыҡ ҡына көтә, ә унын урынына яңынан-яңы хәстәр, эш, бәлә тыуа. Балаға бәлә күренмәй. Был – ололар хәстәре, ул мине урап үтте.

Атай ҡайтты. Ул көндәрҙә беҙ ас булманыҡ. Ниһайәт, 1945 йыл башланғас, беҙгә паек бирҙеләр. Ул карточкаға лагерь магазинынан барып икмәк, шәкәр һәм башҡа ризыҡтар алабыҙ. Был, әлбиттә, үлән йыйып йәки серек бәрәңге ашап йәшәү түгел. Хөкүмәт икмәге таҙа, ҡайһы бер ваҡытта пряник йәки печенье бирәләр. Атай ҡайтҡас, әсәй лагерь эшенән сыҡты, беҙгә карточкалар биреү тағы ла туҡтатылды. Тамаҡ туйҙырыу еңел түгел. Мал-тыуарыбыҙ юҡ. Шулай ҙа, һуғыш бөткәс, халыҡтың тын алышы иркенләнде. Ә түрәләр кинәт үҙгәрҙе. Сөнки һуғыш ваҡытындағы түрәләрҙең күпселеге төрлө сәбәптәр табып тылда ҡалған ҡурҡаҡтар ине. Ауылда фронтовиктар күренә башлағас та, ҡойроҡтарын тиҙ ҡыҫтылар. Хәлде беҙҙең танауҙар ҙа һиҙеп алды. Элек колхоз ерендә башаҡ йыйырға рөхсәт юҡ ине, ә һуғыш бөткәс, тыйыусы табылманы. 1946 йылдың яҙын да, көҙөн дә беҙ күп итеп башаҡ йыйҙыҡ. Был, әлбиттә, – балалар эше. Беҙ тырыштыҡ, ҡараңғынан ҡараңғыға тиклем йыйҙыҡ. Мин үҙемдең алдыма маҡсат ҡуйып, дәртләнеп йыйҙым. Башаҡтан яһалған он сифатлы була, уны аҡсаға әйләндереүе еңел. Үҙемә мәктәпкә барырлыҡ кейем алырға өмөт иткәйнем, өҫтөм мәктәпкә барырлыҡ түгел, ә бараһым бик килә. Башаҡтар онон атай баҙарға алып китте, миңә кәмендә аяк кейеме булһа ла алырға һүҙ бирҙе. Уның ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтөп алдым. Баҙары уңышлы булған: үҙенә костюм, пальто, штиблет (быныһы – күн итек менән галуш), етмәһә, әҙерәк һалып та алған. Ә минең өсөн бер нәмә лә юҡ. Мин, тауышымды йәлләмәй, ризаһыҙлыҡ белдерҙем. Эскән атай быны үҙенсә аңланы һәм миңә лә «өлөш» сығарҙы. Быға түҙеп була, әммә: «Быйыл мәктәпкә бармайһың»,– тигәне минең иң ауыртҡан еремә тейҙе. Мин үҙемдең «атайлы атайһыҙ» малай икәнлегемде һиҙҙем. Аҙаҡ күптәрҙән: «Һинең кеүек атайлы булғансы, атайһыҙ булғаның яҡшы»,– тигәнде ишетергә тура килде.

Әйтеүемсә, колхоз, сельсовет түрәләре лә үҙгәрҙе, һуғыш ваҡытында тыштан ҡалтырап, эстән ялтырап йөрөгән ғәрип-ғөрәбә йәки һантыйҙар власта ултырһа, хәҙер уларҙың көнө бөтөп, фронтовиктар үҙҙәренә тейешле урындарҙы ала башланы. Һөйөнөслө мәл ине был. Ҡайҙа барма, шинель, гимнастерка кейгән кешеләр, үҙҙәрен һалдаттарса тотҡандар өҫкә сыға. Күкрәктәрендәге орден, миҙалдары балҡып тора.

Шулай итеп, атай ҡайтҡан көн шатлығы ғына иçтә ҡалды. Ярай әле, шатланып ҡалғанмын. Донъяға тыуғас, шатлыҡтың да тәмен белеп ҡалырға кәрәк. Ә бала шатлығы – иç китерлек яҡты күренеш.

Ғөмүмән, еңеүселәр шатлыҡ алып ҡайтты. Еңеү, әлбиттә, – байрам. Шул йылдарҙа бер хәйерсенең йырлағаны иçемдә ҡалған: «Байрам, байрам, байрам, көн дә күктән рәхмәт яуа». Күптәргә яуҙы, ә кемгәлер тамсыһы ла тамманы. Өләсәйем әйтмешләй, бәхет кемгәлер алдын, кемгәлер артын күрһәтә.

Ирҙәре фронта үлгән ҡатындар күберәк булып сыҡты, ә минең атайҙы колхозда бригадир итеп ҡуйҙылар. Ауыл ике бригадаға бүленгән, һөҙөмтәлә ике бригадир тол ҡатындарҙы ла бүлешеп алырға тейеш икән. Шулай булды ла инде. Атай беҙгә ҡунаҡҡа ғына йөрөй башланы. Ошоға оҡшаш төрлө хәлдәр күп осраны. Бына тағы бер миçал. Йыйылышта бер фронтовик, ашарға табыуы ҡыйын, тип зарланған. Ә залдан Әхмәҙулла исемле икенсе фронтовик уға аҡыл өйрәткән:

– Һин ниңә минең кеүек булдыра алмайһың? Бына бит мин... сумғас сумдым.

Эйе, Әхмәҙулла, үҙ ғаиләһен ташлап, мал-тыуарлы Шаһырбан инәйгә барып инде. Шул көндән уға «Сумған» ҡушаматы мәңгелеккә йәбеште, балаларына ла ҡалды.

Бына шулай, минең өсөн еңеү һөҙөмтәһе шаҡтай әсе булды, ә ҡайһы берҙәргә бигерәк тә ауырға тура килде. Ире фронттан ҡайтып, икенсегә киткәс, аçылынып үлгән ҡатындар ҙа булды. Шулай, кеше фронтта ғына ҡырылманы. Һуғыш аслыҡ тыуҙырҙы. Астан үлеүсе балалар күп булды. Тере ҡалғандарҙың да күптәре әсе яҙмышлы ине. Атайһыҙ етемдәр менән донъя тулды. Күрәһең, был ғына аҙ, атайлы етемдәр артты.

Бәләкәй кешенең бер өçтөнлөгө бар: ул һәр ваҡыт алдын-артын уйламайынса, тартынмайынса һорау бирә ала. Ниңә шулай? Ни өсөн шулай? Быңдай һорауҙарҙы мин дә бирҙем. Тик бер генә оло кешенең дә яуабы мине ҡәнәғәтләндерә алманы. Тынысланманым, был турала оҙаҡ уйланым, яуап эҙләнем. Ә уйлап ҡараһаң, бер кемдең дә ғәйебе юҡ, тәбиғәттең үҙ ҡағиҙәһе бар. Әгәр һуғыш башында иң нескә яҙмышлы балалар үлеп бөткән икән, ул быуындың тамыры ҡаҡшаған булып сыға. Ә киләһе быуын был хәлде төҙәтергә тейеш. Ире фронтта һәләк булған, дәрте һүнмәгән ҡатын бала табырға тейеш. Ауылда был эш ябайлаштырыла. Барыһы ла күренеп тора. Һәр кем үҙенә тейешле урынды биләй. Отолоусылар ҙа була.

Ә фронтовиктар? Ҡаты һуғыштан тере ҡайтыусыларҙың барыһын да күтәп алдылар. Беҙҙең күрше Ғәбит ағай атайҙан элегерәк ҡайтты, хәтерләүемсә, посылкаларҙы ла йышыраҡ ебәрә торғайны. Фронттан ҡайтҡас, тәкәббер йөҙ менән йөрөнө, активист булырға тырышты. Бына беҙ, малайҙар, колхоз баҡсаһына килдек. Бында ҡыяр күп, өйөлөшөп ята. Өҙөп, йыйып өлгөртә алмайҙар, ҡайҙа ҡуйырға белмәйҙәр. Ә Ғәбит беҙҙе аҡырып ҡыуҙы. Ә миңә бөтә көсөн һалып һалдат итеге менән типте. Үҙе лә баҡсала эшләмәй, ҡыяр ашарға килгән. Үҙен ҡыуыусы юҡ?!

Ғәбит, ялҡау кеше булараҡ, юлдан тиҙ төшөп ҡалды. Онотолдо. Ауыл бисәләре уға иғтибар ҙа итмәне.

Фронтовиктарҙың күбеһе Әүхәҙи ағайға оҡшаған. Ул фронтта бик ҡыйын хәлдә ҡалған: күп иптәштәре һәләк булған, тик позициянан китергә приказ булмаған. Окоп яртылаш һыу эсендә, етмәһә, көҙгө һыуыҡтар ваҡыты. Ярҙам килеп еткәндә, Әүхәҙи ағайҙың хәле бик мөшкөл булған. Сигенмәгән өсөн маҡтағандар, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены биргәндәр. Шулай итеп, ул награда менән бергә туберкулездың асыҡ формаһын да алып ҡайтты. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар күрмәһен, ул үҙе тураһында һөйләргә яратманы, күберәген һәләк булған иптәштәрен маҡтаны.

— Ятып ҡалыусылар булмаһа, еңеүселәр булмаҫ ине,— тине. Иң ҡыҙыҡлы фронтовиктар — күкрәк тултырып орден, миҙал таҡҡандары. Бындайҙар тураһында күп һөйләп булыр ине. Аптыратырлыҡ кешеләр. Был һуғыштың иң ғәҙелһеҙ һөҙөмтәһе — еңеүселәр бүлеше.

Наградаларға туя белмәгәндәрҙең иң күренеклеһе – Леонид Брежнев. Биллаһи, ғүмере оҙонораҡ булһа, арҡаһына ла ордендар тағыр ине. Беҙ инде көлөп арыныҡ, әйтер һүҙ ҡалманы. Брежнев атай менән йәштәш. Мин атай алдында уны күп тапҡырҙар тәнҡитләнем, ә ул, мине бүлеп:

— Улым, һүҙең дөрөҫ түгел, Брежнев бик яҡшы кеше. Карпат тауҙарындағы бер һуғыштан һуң мине маҡтап ҡулымды ҡыҫты. Кеше ҡәҙерен белә ине ул,— тине.

Кем белә, бәлки, шулай ҙа булғандыр. Икенсерәк һығымта яһарға ла мөмкин. Кеше ҡәҙерен белеү һирәк сифат булған. Күп әһелдәр еңеү тантанаһын ифрат оҙаҡҡа һуҙҙылар. Еңеүҙән файҙаланыусылар, файҙаланырға тырышыусылар кәмергә уйламаны ла. Ә «ветеран» һүҙе тамам кәсеп һүҙенә тиңләште йәки профессияға әүерелде. Анализлап ҡараһаң, сәйер генә факттарҙы асыҡларға мөмкин: һуғышта иле өсөн һәләк булғандарҙың балалары ҡыйынлыҡ күреп, үҙҙәренә юл аса, интегеп йәшәй. Ә тере ҡалған орденлы ветеран балалары теләгән ишеккә аяҡ тибеп инә. Эйе, был Бөйөк Ватан һуғышының иң насар һөҙөмтәләренең береһе булды. Был хәлде беҙ үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек һәм түҙҙек. Ябай халыҡ араһында ла «ветеран» һөнәре таралды, бар туған-тыумасаһына сиратһыҙ колбаса-фәлән алып йөрөүселәр күбәйҙе. Ветерандар магазинда үҙҙәрен һуғыштағы кеүек хис иттеләр, сираттағылар менән тартҡылашыу юлдарын эҙләнеләр. Бына нисек булғыланы:

— Мин һеҙҙе фашистарҙан яҡланым,— ти бер бәндә.

— Беҙҙе яҡлаусылар күптән был донъянан китте, ә һеҙ һуғыш ваҡытында беҙҙең үлөштө ашанығыҙ, хәҙер ҙә ынтылаһығыҙ,— тинем дә танытмаһын алып ырғыттым. Мине яҡлаусы булманы. Атай һуғыштың ахырынаса һуғышты, ә мине яҡлай алманы.

Медик булмаһам да, кеше психологияһын төшөнөргә тырыштым һәм ғүмерем буйына атайымды күҙәттем. Ул яу яланында бик ҡаты баш яраһы һәм өс контузия алған. Әгәр ҙә Мәскәүҙә йәшәгән булһа, I йәки II группа инвалиды булыр ине. Ә атайға бында бер врач та йүнләп иғтибар бирмәгән. Уның башы ташландыҡ карьерҙы хәтерләтә ине. Күрәһең, ышаныс юҡ, тип, тиреләрен текмәй бәйләгәндәр.

Оло йәшкә еткәс кенә, атайға бер тамсы ла эсергә ярамағанлығын аңланым. Сөнки аҙ ғына араҡы ла был хәлдәге кешене аҡылһыҙ яһай. Исмаһам, бер генә врач та атай менән әңгәмәләшмәгән. Хөкүмәт иһә еңеү парадтарына күберәк иғтибар бүлгән.

Яҡшылыҡ һәм мәрхәмәтлелек бер юлда йөрөргә тейештәр.

Ас кешегә ике ысул менән ярҙам итеп була: икмәк биреп йәки икмәкте нисек табырға өйрәтеп. Хөкүмәт һәр саҡ беренсе юлды һайланы. Ә миңә икенсе юл оҡшай.

**Парсалар**

*Тәҙрә алдында көнбағыш булмаһа, үҙ ваҡытын белеп килгән турғай иҫкәртергә лә белә: йыш-йыш быяланы суҡый.*

***

*Ҡарабаш турғай һәр кемде ихтирам итә белә. Үҙен ашатҡан кешене таный, ә мине күлдәктән танайҙыр инде.*

# Март, 1953 йыл

*Туйманың һин ҡан эсеп үҙ ғүмереңә,*
*Осраның түгелме тәңре кәпәренә?*
*Күпме ҡан эстең, беләһеңме уны?*
*Тотто бит үҙеңде, күр, инсан ҡаны.*

**Шәйехзада Бабич**

Мин һәр ваҡыт иртә торам. Кисә мәктәптән ҡайтҡанда быйманың рәте бөткәйне тип әйтерлек. Тиҙ генә ямап алырлыҡ түгел. Иртүк тороп, шуны ямап булаштым. Мәктәпкә бармаҫҡа кистән уйлап ҡуйғайным. Көн асылыуға быйманы кейерлек хәлгә индерҙем дә кейеп ҡараным. Март айы бит инде, яҙға тиклем етергә тейеш.

Шул ваҡыт күрше ҡатыны килеп керҙе:

– Ишеттегеҙме, Сталин үлгән. Бар халыҡ дыу килә. Нимә булыр икән?– ти.

Минең ҡолаҡ бик һаҡ. Беҙҙең өйҙә радио юҡ, ә көнсәләрҙә бар. Йүгерҙем оло урамға. Бында кеше күп, илашалар, аптырашалар. Ауыл яңғыратып радио һөйләй. Кино күрһәтеүсе аппараттың динамигын тышҡа элеп ҡуйғандар, тауышы алыҫҡа ишетелә. Бер аҙ музыка уйнай ҙа, хәсрәтле тауыш хәбәр һөйләй, тағы матәм музыкаһы, тағы ҡайғылы хәбәр...

Тырышып-тырышып илаусылар күп, илағанын күрһәтергә тырышыусылар күп. Ҡайһы берәүҙәргә ҡараһаң, ахырзаман еткән, тип уйларға була. Бигерәк тә беҙҙең уҡытыусылар мәктәптә һәр көн туҡыйҙар ине:

– Сталин булмаһа, һеҙ был тормошто күрә алмаҫ инегеҙ,–тип.

Эйе шул, был тиклем этлекте беҙгә Сталин ғына күрһәтте. Был тиклем аслыҡ-яланғаслыҡты батша заманында ла күрмәгәндәр.

Оло урамда трактор менән юл ярғандар. Мин әле бала кеше. Шул киҫәктәрҙең береһенән икенсеһенә һикерәм. Минең өсөн мәрәкә. Иртүк радионан мәктәптәрҙә дәрестәрҙең булмаҫы тураһында әйткәндәр. Ә мин мәктәпкә барманым. Тимәк, минең класташтар һәм башҡа уҡыусылар мәктәптән ҡайтырға тейештәр. Билгеле, миңә уларҙы көтөү ҡыҙыҡлы, улар бит ун ике саҡрым араны бушҡа атлап йөрөнөләр. Бына шулай, бар халыҡ йотлоғоп радио тыңлай, ә мин Сәлихтән ҡайтҡан малайҙарҙы көтәм. Имеш, бушҡа йөрөйһөгөҙ. Иҫ китерлек хәл: Әптек ауылында Сталин заманаһы һәр ғаиләгә тип әйтерлек үлем ҡазаһы бирҙе, бигерәк тә астан үлеүселәр күп булды. Ә аслыҡ – Сталиндың яратҡан шөғөлө, кеше ҡырыу ине. Өләсәйем бер ваҡытта ла Сталин тип әйтмәне, ул уның өсөн – боҙоҡлоҡ сығанағы, боҙоҡлоҡ батшаһы. Бына шулай, Сталин арҡаһында интегеүҙең һуңғы сигенә еткән халыҡ, уның үлем хәбәрен ишетеп, ысын күҙ йәше менән илай. Ә мин беләм: күптәр өләсәй кеүек уйлай, тик ҡурҡыу — һәр кемдең юлдашы. Сталин үлгән көндө лә күптәрҙең илауы ҡурҡыуҙан ине. Әлбиттә, бер кем дә күҙенә һуған төртөп иламай, ысын күҙ йәшен сығарып илаусылар күп. Ә минең күңел башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда ла йомшағыраҡ, тиҙ илайым. Тик был көн минең өсөн аяҙ күк кеүек саф. Көн дә ысынлап аяҙ, болотһоҙ, елһеҙ, шуға урамда оҙаҡ итеп йөрөнөм. Күңелемдә ҡайғының әҫәре лә юҡ.

Кешеләрҙең һөйләшеүенә ҡолаҡ һалам. Юҡ шул, ауыҙ йомоп бер кем дә аралаша алмай. Нимә тураһындалыр һөйләшергә кәрәк. Ә әңгәмә барыбер Сталин тураһында бара. Кеше уйында ла инерция бар, һәр кем ишетелерлек итеп хафалана. Имеш, Сталинһыҙ ни эшләрбеҙ, донъя менән ни булыр, кем ҡулына ҡалырбыҙ? Сталинды маҡтаусылар ҙа бар. Нисек хаҡтар кәмегәйне – хәҙер артыр инде, тиҙәр. Эйе, икмәк ашай башланыҡ. Тик колхоз уны барыбер етерлек бирмәй, Ишембайҙан барып алабыҙ.

Аңлайым, сталинизмды яҡлаусылар һәр ваҡыт буласаҡ. Әлбиттә, күп заттар ул заманда үҙ теләгенә иреште. Илдә йотлоҡ, ә улар туйғандан һуң да ашанылар. Уныһы ғына ҙур бәлә түгел, кешеләрҙең ғүмерҙәренә лә ҡул һуҙҙылар. Миңә ситтән бер ниндәй ҙә мәғлүмәт кәрәкмәй. Әптек ауылының яҙмышы – үҙе йән үртәрлек миҫал.

Сталинизм тураһында ләкәп һатыусылар ифрат күп, тик барыбер хаҡ һүҙ ишетелмәй, сөнки күптәр үҙ сарҙағынан һөйләй. Мин үҙем бала саҡтан уҡ үҙем йәшәгән осорға баһа бирә башланым. Шуны ла аңлайым: сталинизмды дошман күреүселәр ҙә – ысынбарлыҡтары менән үҙҙәре үк сталинсылар. Фекеремде асыҡлабыраҡ үтәйем. Әйтеүемсә, Әптек халҡын монголдар ҙа, батшалар ҙа шул дәрәжәгә тиклем таламағандар, ерҙәрен, малдарын бер сәбәпһеҙ тартып алмағандар. Иң ҡәбәхәт батша ла, хан да был тиклем оятһыҙлыҡҡа барып етә алмаған. Гитлер ҙа үҙе яҡлыларҙы таламаған, үлемгә дусар итмәгән. Әптектә астан үлеүселәр һан буйынса беренсе урында торһа, һуғышта үлеүселәр икенсе урында булдылар, төрмәләрҙә вафат булғандар ҙа байтаҡ ине.

Шулай итеп, вәхшилек яғынан сталинизм гитлеризмды артта ҡалдырҙы. Мин шаһит: тик нисек кенә ауыр булмаһын, беҙҙең нәҫелдән хөкүмәткә ҡаршы көрәшкән, бер генә һүҙ әйткән зат булманы.

«Бей своих, чтобы чужие боялись» – бына сталинизмдың беренсе ораны. Эйе, әле хәҡиҡәт бер кемгә лә хәжәт түгел. Мин Рәсәйҙең ҙур кешеләренә һүҙ ташламайым, сөнки уларға сталинизмдың ысынбарлығын фашлау файҙалы түгел. Ә фашламайынса Рәсәй алға китә алмаясаҡ.

Эйе, Әптек ауылындағы ҡырын эштәр өсөн бер кем дә бер ҡасан да яуап тотманы ла, бирмәне лә. Бирергә йыйыныусы ла юҡ, көтөлмәй ҙә. Тимәк, сталинизм дауам итә.

Шулай итеп, мин Сталин үлгән көндө иларға түгел, шатланырға тейеш инем. Икенсе яҡтан ҡарағанда, шатланырға ла тейеш түгел инем, сөнки кеше ҡайғыһына шатланыу – башҡорт ғәҙәтенә ҡаршы.

Сталинсылар ҡайғы кисерҙе, илашты, митингыла күкрәк һуғырға ла онотманылар. «Оплотимся, понесём твоё знамя достойно. Твоё дело бессмертно», имеш. Шулай булмай ни, юлбашсының керҙәрен йыуырға теләүсе юҡ, булмаясаҡ та. Әптеккә килеп ҡараһаң, бөйөк абректың байрағы әле лә элеүле икәнлегенә ышанырға була.

Аллаға шөкөр, алты йәшемдә сталинизмды аңларға, тип һүҙ бирҙем һәм һүҙемдә торҙом. Сталинизм психологияһын тамам аңланым. Юҡ, туғандар, сталинизм әле күмелмәгән, беҙ әле лә ул ҡороп ҡалдырған ҡапҡандарға эләгәбеҙ, ҡасып та ҡотола алмайбыҙ. Ярай, төпкә төшмәй торайыҡ.

Әле беҙгә өҫтә яткан күренештәр ҙә еткән. Шулай итеп, аптырарлыҡ түгел, тейешенсә сыҡты. Сталин алдында иң күп бейегән, иң күп ҡул сәпәгән кеше үҙ хужаһын хурларға мәжбүр булды. Имеш, гонаһтары үлгән хужа менән китһен. Китерме икән, сөнки кеше зары үҙе менән ҡәбергә китмәй, донъя гиҙә. Мин байтаҡ уҡыным, арыу ғына уҡыным, был турала әйтәһем килмәй. Бары өләсәйемдең һүҙҙәрен ҡабатлағым килә: «Кеше ҡәһәре ерҙә ятмай, барыбер кемгәлер төшә». Шулай, Рәсәйҙә һаман ҡәһәр яуа.

Сталин үлгәс, әҙ-мәҙ үҙгәрештәр булды. Эйе, амнистия булды, атай төрмәнән ҡайтты. Минең өсөн бик ҙур шатлыҡ, эйе, атай ҡайтҡан көндө генә булды.

**Парсалар**

*Ағастан ҡолап төшкән сәүкә балаһын алып ҡайттым. Үҙе портфелдә күренмәй. Троллейбуста тауышына халыҡ аптыраны.*

# Һәр ауылға бер кәсеп

*Беҙҙең бәхет — бик ҙур бәхет,*
*Типкеләһәң, китмәйҙер.*

**Халыҡ йырынан**

Етенсе класты бөткәнсе мин өйҙә дәрес әҙерләй алманым. Өй эштәрен бары дәрес алдынан йәки тәнәфес ваҡытында ғына эшләнем. Үтәмәгән саҡтар ҙа етерлек булды, барыбер алдынғылар рәтендә булманым. Өйҙәге бар эш – минең эш. Әгәр ҙә дәрес әҙерләргә ултырып маташһам: «Ҡуйып тор уҡыуынды – ҡасмаҫ»,– тигән һүҙҙе көт тә тор. Тотонмағаның яҡшы.

Өйҙәге иң ҡыйын эш тураһында һөйләмәй булмай, был эш – ҡап һуғыу. Колхозға бушҡа эшләү башланғас, ауыл халҡы үҙенең тормош кимәлен мал аҫрау менән тотоп килә. Тормош ауырлаша, ә халыҡ ас түгел. Халыҡтың бирешмәгәнен күреп, өҫтәге түрәләр малсылыҡҡа ауыр һалым системаһын уйлап табалар. Шәхси малсылыҡ башҡорт ауылдарында тамаҡ туйҙырырлыҡ булмай башлай. Бына шул мәлде һәр ауыл үҙенә күрә кәсеп табырға тырыша. Әптектә лә был киң ҡолас алды: арҡан иштеләр, балаҫ һуҡтылар, һәр төрлө ҡорамалдар яһай башланылар. Мәҙәк кенә һөнәрҙәр ҙә күренде. Әйтәйек, ауылда һәр өйгә тип әйтерлек Хәмзә лампаһы килеп инде. Эшләнеше бик ябай. Консерва банкаһынан башҡа быяла ҡыуыҡ та, абажур ҙа кәрәкмәй, кәрәсинең булһа, төнө буйы яна. Тик күп ҡором йоторға тура килә инде. Ни эшләйһең, ҡыуыҡлы шәмгә аҡса юҡ. Сабата үреүселәрҙең дә һаны кинәт артты, сөнки йүнле аяҡ кейемен түрәләр генә кейә алды, хатта ҡайһы бер активистар ҙа сабата кейергә оялманы. «Сабата шәп атлата»,– тип йыр ҙа сығарҙылар. Әлбиттә, башҡа һөнәрҙәр ҙә булды, тик ҡайһыһын ғына алма, Әптек халҡы өсөн килемле түгел. Сөнки ауыл халҡында аҡса юҡ, ә ундай кеше сабатаны ла һирәк алырға тырыша. Ниһайәт, Әптек халҡы өсөн ышаныслы кәсеп табылды – ҡап һуғыу. Партия етәкселәре был кәсепте иҫәпкә алып өлгөрмәне, шуға ҡап һуғыусылар налог түләмәне. Был һөнәрҙең иң яҡшы яғы – һуғылған ҡаптар ситкә китә, тимәк, аҡса ситтән килә, ауыл халҡының кеҫәһенән түгел. Әптек өсөн экспорт. Шулай итеп, ауыл халҡының һәр өйөндә (етәкселәр һәм уҡытыусылар был иҫәпкә инмәй) ҡап һуғыу ыстандары ҡоролдо. Ул ябай ғына. Ауылда ул ҡорамалды яһар өсөн бер нисә оҫта бар. Тик шуныһы: ыстан ҡорола торған өй ҙур булырға тейеш. Сөнки иң кәмендә лә 9-10 кв. метр урын кәрәк. Ҡапты ике кеше һуға, береһе – ҡапаҡсы, өлкән, икенсеһе – һоҫасы, ярҙамсы. Бер ҡап һуғыу өсөн бер сәғәт самаһы ваҡыт китә. Мин, бәләкәй булараҡ, һәр саҡ һоҫасы булдым. Ҡап һуғыу – һәләтле кешеләр эше, ике кеше һуға икән, көнөнә егермене өлгөртөргә була. Ә эш көнө һигеҙ сәғәт менән генә сикләнмәй. Беҙ апай менән көнөнә егерме биш ҡап һуҡтыҡ, бының өсөн һәр көн ун алты – ун һигеҙ сәғәт эшләнек. Ҡапты ултырып һуғып булмай, һәр саҡ аяғүрә, һәр саҡ тиҙ хәрәкәт менән. Үҙ ғүмеремдә күп эшләнем: таш сығарҙым, ер ҡаҙҙым, бетон түшәнем, ташсы эшен дә башҡарҙым, ауыр йөктәр бушаттым, тейәнем, әммә ҡап һуғыуҙан да ауырын күрмәнем. Эйе, һигеҙ йәшемдән башлап көнөнә егерме – егерме биш ҡап һуҡтым. Сеймал булмаһа (йүкә), күршеләргә, таныштарға, өләсәйгә һуҡтым. Күршеләр миңә һәр ҡап өсөн егерме биш тин аҡса бирҙеләр, ә ашау – ҡап һуҡтырыусы иҫәбенән. Әгәр кемгәлер ҡап һуғырға барам икән, эшләү шартын алдан беләм.

Әгәр өләсәйгә һуҡһам, борсолоу юҡ, ул ҡарун түгел, көнөнә ун биш ҡаптан артыҡ һуҡмайбыҙ. Ашарға ла йәлләмәй, мул итеп, тәмлерәген ҡуйырға тырыша, ял итергә лә мөмкинселек була, аҡсаһын да көнөндә биреп ҡайтара.

Ибраһим бабайҙарға һуҡһам, төптө икенсе хәл. Ашарға күберәк алабута ҡатыш икмәк ҡуялар. Башҡа ашамлыҡтары ла наҡыҫ. Әлбиттә, минең өсөн артыҡ ҡыйынлыҡ юҡ, сөнки мин ҡыйынлыҡҡа өйрәнеп бөткәнмен. Шулай булһа ла, мин уларға ҙур теләк менән барам, сөнки дуҫым менән һуғабыҙ, һәм минең өсөн тағы ла иң ҡыҙығы: Ибраһим бабайҙың һөйләгән тарихын тыңларға яратам. Ул Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан, шуға күпте белә. Ул үҙе лә килештереп, матур итеп һөйләргә ярата. Ике-өс көн эшләгән һайын Ибраһим бабай мунса яғырға ҡуша, ныҡ эшләгән кешегә был һәйбәт булып ҡала – бөтә арығандарың бөтә.

Нәғимә апайға ла ҡап һуғырға барырға әҙер мин. Ул егерме дана һуҡҡанға риза, тәгәрәгәнсе эшләргә түгел, ашау ҙа яҡшы, һәр көн ҡаймаҡ ҡуя, аҡ икмәк ашайбыҙ. Ул миңә ҡарата яғымлы. Сирле икәнде белә, ауыр һүҙ әйтмәй, тыныс эшләйбеҙ.

Иң ҡыйыны — үҙебеҙҙә апай менән һуғыу. Был – минең өсөн яза. Етмәһә, өйҙәгеләр минең эсем ауыртҡанға ышанмай, алдаша, тип уйлайҙар. Ҡайһы бер ваҡыт хатта тәгәрәр хәлгә етәм. Ҡап һуҡҡанда үҙемде уй менән йыуатырға өйрәндем. Минең эсем ауыртмай, тип үҙемде үҙем ышандырырға тырышам. Ҡайһы ваҡыт әкрен тауыш менән белгән йырҙарҙы йырлайым, таҡмаҡлайым. Ысынлап та, үҙеңде ышандырыуҙың файҙаһы бар икән. Ҙур йәшкә еткәс, бындай ысул барлығын уҡып белдем.

Колхоз һәм партия етәкселәре ҡап һуғыуҙы яратманы, тыйырға тырышты. Шуныһы ҡыҙыҡлы: тикшерә башлаһалар, тыйып булмағанлығы асыҡлана. Сөнки ниндәй генә өйгә инмә, ҡапты бала-саға һуға, ә улар колхозда эшләргә тейеш түгел. Шулай итеп, беҙ, балалар, Совет власын оттоҡ. Үҙебеҙ ҙә асҡа үлмәнек, ололарҙы – колхозда эшләгәндәрҙе лә ашаттыҡ-эсерҙек. Әптектә ҡап һуғыу һуғыштан һуң иң файҙалы кәсепкә әйләнде. Аҡса, ашауҙан тыш, кейем-һалым, кәрәк-яраҡ алыуға ла арта башланы. Эйе, ҡайһы бер дуҫтарым ҡаланан велосипед та алып ҡайтты. Мин үҙем ҡапты һәр малайға ҡарағанда бер нисә тапҡырға күберәк һуғам, ә үҙемдең велосипед түгел, йүнле кейемем дә юҡ. Минең һәр саҡ эш мөшкөл. Ярай әле, китап уҡырға ваҡыт табам. Бишәр йөҙ ҡап тапшырған ваҡыттарыбыҙ булды. Беҙҙең өсөн ҙур аҡса, тик миңә генә өлөш сығарыусы булманы.

Минең алда Мирза Муллағоловтың «Башҡорттарҙың урман кәсебе» тигән китабы ята. Шуның 153-сө битендә ҡап һуғыу тураһында һүҙ бара. Ҡап һуғыусының нормаһы ун ҡап булған, шулай булғас, мин ике ярым норма үтәгәнмен инде. Эйе, әүәлгесә әйткәндә, ударник булғанмын да баһа, етмәһә, ныҡ ауырыу килеш. Ә балалар нормаһы күпкә аҙыраҡ була ла инде. Уҡыусы инем, бишенсе кластан етенсене бөткәнсе алты саҡрым алыҫлыҡтағы Сәлих мәктәбенә йәйәүләп йөрөп уҡыным. Унан ҡайтҡас, ҡайһы берҙә ун дана ҡап һуғып өлгөрә торғайным. Бындай көндәр күп булды.

Атайымды күп тапҡырҙар мәктәп директоры ҡатнашлығы менән сельсоветҡа ла саҡырттылар, өйгә лә килделәр. «Малайығыҙ уҡырға зирәк, ниңә иғтибар итмәйһегеҙ?»,– тинеләр, хәстәрлек күреүҙе талап иттеләр. Ә атайҙың ике генә хәсрәте булды: бисәләр һәм эсеү.

Ҙурыраҡ үҫеп, колхозда атлы эштә эшләй башлау менән үҙем, атайҙан йәшереп, һалабаш һалдым. Йүкәһен һыҙырғас, ҡап һуғып кейем алырға уйым бар ине. Тик килеп сыҡманы. Нисек кенә йәшермәйем, нәмәләрем, тапҡан аҡсам атай тарафынан табылды һәм эскегә тотонолдо: «Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс». Минең арығансы эшләүемдең һөҙөмтәһе үҙем өсөн тамуҡҡа әйләнә. Ҡаршы бер ниндәй ҙә сара юҡ.

Ҡышҡы сатлама һыуыҡ. Ике йөҙ ҡап һатылған – атайҙа аҡса бар. Төн уртаһы. Бына хәҙер ҡайтыр. Түбән яҡтан иҫерек йыр ишетелә. Ҡайтты. Ыҙғыш. Атайҙың

ҡаты яралы башы, контузияһы эсеүгә ярамай. Мин был турала күп йылдар үткәс уҡып белдем. Ә ул, күрәһең, ике норма алған. Өйҙәгеләр ҡасып сығып бөттөләр. Икәүҙән-икәү ҡалдыҡ. Миңә ун бер йәш. Тыйып булашам. Киреһенсә, тыйыу эште боҙа. Үҙем ҡаты ҡурҡыныс аҫтында ҡалдым. Ярай әле, етеҙлек бар. Ҡулыма ҡалаҡ эләкте. Ашай торған түгел, ҡап һуға торған ҡалаҡ: киноларҙа күрһәткән тура ҡылыс кеүек, шыма осло, саған ағасынан эшләнә. Шул ҡалаҡ менән һаҡланып өлгөрҙөм, киҙәндем. Ҡалаҡ атайҙың усынан үтә сыҡты, өй ҡанға туҙҙы. Әлбиттә, минең өсөн бынан да ҡурҡынысыраҡ осраҡтар булды, ҡайһы берҙәре һөйләрлек тә түгел.

Өләсәй әйтмешләй, һәр сиргә дауа бар. Үҙенә күрә мин дә дарыу таптым — йотлоғоп, мөкиббән китеп китаптар уҡыным. Уларын да һайлап алып уҡыу эләкмәне.

Ә хаҡтар нисек, хаҡтар һуң? Был һорауға яуап кәрәктер, ҡыҫҡа яуап. Һәр бер ҡап ул ваҡытта 4 һум 50 тиндән 5 һумға тиклем хаҡҡа һатылды. Ҡайһы бер ғаиләләр айына бишәр йөҙ ҡап һатырға өлгөрә ине. Ике мең ярым һум, беҙҙең өсөн ғәжәп күп аҡса, ҡайҙа ҡуйғанбыҙҙыр — белмәйем. Әгәр Ибраһим бабайға йәки кемгәлер һуҡһам, миңә һәр ҡап өсөн 25 тин түләнеләр. Ул ваҡытта бер шешә араҡының хаҡы 21 һум 20 тин тора ине. Тимәк, атайға бер ярты алыр өсөн мин дүрт көндә 16-шар сәғәт эшләп, 85 ҡап һуғырға тейеш булам. Русса әйткәндә, «не густо». Нимә була ул «ҡап», тип һораусылар ҙа табылыр. «Ҡап» икенсе һүҙ менән әйткәндә — «тоҡ», русса — «мешок». Уны русса бер кем дә «мешок» тимәй, барыһы ла «кули» ти. Хужалыҡта ҡаптың ҡулланышы киң булды. Ҡойола торған ҡоро әйберҙәрҙе тултырып йөрөтөргә уңайлы, ҡиммәт булмаған йомшаҡ һауыт. Йүкә ағасының ҡабығы һыуҙа сереткәс йомшара, нәҙек таҫмаларға бүленә. Шул таҫмаларҙан ҡап һуғыла. Бына шул. Тормош беҙҙән «таштан йүкә лә һуйҙыртты», йүкәнән ҡап та һуҡтыртты.

**Парсалар**

*Һандуғас һайрау оҫтаһы ғына түгел, ул төйәкләгән урыны менән маҡтанырға ла белә. Эйе, урынды ла һайлай белә. Ҡарабаш турғай иһә торған урынын һиҙҙертмәй.*

## Һәләүек

*Ҡырҙа йөрөгән дуғаҙаҡ*
*Һыу ҡәҙерен белмәҫ.*

**Асан-Ҡайғы йырау**

Боронғо башҡорттар танышҡан ваҡытта хәҙергеләр биргән һорауҙы бирмәгәндәр, йәғни: «Һин ҡайһы ауылдан?»,— тип һорамағандар, ә икенсерәк белешкәндәр: «Һин ниндәй һыу эсәһең?»— тигәндәр. Боронғоларса әйтһәң, мин тыуған көндән алып Һәләүек һыуын эскәнмен.

Һәләүек – ниндәй матур исем. Был атама тураһында кескәй сағымдан ук фекер йөрөтә башланым. Тик ололарға биргән һорауым һәр саҡ яуапһыҙ ҡалды:

— Һәләүек булғас Һәләүек инде,— тинеләр.

Әптек ауылы Һәләүектең урта ағымында урынлашҡан. Йылғаның башындағы Һәләүекбаш, йылға тамағындағы Ишәй ауылдары Әптектән бер сама алыҫлыҡта. Шулай булғас, Әптек ауылы эргәһендә аҡҡан йылғаға ҡарап Һәләүек тураһында фекер йөрөтөргә була.

Мин бәләкәй саҡта Һәләүек уҫал холоҡло, мул һыулы, шарлауыҡтары, ятыуҙары булған йылға ине. Ысынлап та, ул элек көслө булды. Яҙғы көндәрҙә ташып, ағымдарын үҙгәртеп, үҙенә яңы юлдар һалды. Ә иҫке юлдарында бик матур күлдәр яһап ҡалдырыр ғәҙәте булды. Шуға ла Һәләүек туғайҙары киң, йәмле ине.

Сабый саҡ. Һәләүек ярына беренсе тапҡыр килеүем хәтеремдә ҡалған. Ололарға эйәреп килгәйнем, дөрөҫөн әйткәндә, етәкләп алып килгәйнеләр. Яр буйындағы ҡырсында ҡатын-ҡыҙ күмәкләп самауыр ағарта. Ул ваҡытта самауыр ялтырап торһон өсөн сепрәкте мәтегә бупп, ышҡып йыуа торғайнылар. Күңелле, матур күренеш, һөйләшеп, йырлашып, гөр килеп эшләйҙәр.

Мине иң беренсе аптыраштa ҡалдырған күренеш: Һәләүектә сабаҡтарҙың күплеге, һай урындағы ҡырсынға аяҡ менән ингәс тә сабаҡтар аяҡҡа килеп йәбешәләр. Ул балыҡтарҙың исеме беҙҙә «сатырый». Сатырый ҡоморойҙан ваҒыраҡ, ашаған нәмәләре лә ҡоморойҙоҡо кеүек. Ауыҙына ни эләкһә, шуны йота. Шуға күрәлер ҙә инде, химик ашламалар, ағыуҙар ҡулланыла башлағас, Һәләүектә сатырый тамам бөттө. Ә элек бит теләһә ниндәй урындан ус менән бер нисә сабаҡты һирпеп алып була ине. Һыуға инһәң, аяҡты һырып алырҙар ине, күрәһең, аяҡтарҙың аҫҡы өлөшөндәге тире киҫәктәре улар өсөн бик тәмле аҙыҡ булған.

Һәләүеккә йыш ҡына атайға эйәреп йөрөнөм. Йылғаның балыҡҡа бай булыуы иҫ китерлек. Балыҡ ҡарпыуынан да матур күренеш юҡ. Мин балыҡ тоторға бөләкәй инем әле, шуға уйнағанына ғына ҡарап һоҡландым.

Әптек халҡы өсөн балыҡ һөҙөү – бик мәҙәк эш. Минең атай иһә һөҙөүселәрҙең «башлығы», балыҡ тотоу «белгесе». Мин, бала кеше, балыҡ һөҙөүселәрҙең эшен ярҙан күҙәтәм. Ә ҙурая төшкәс – балыҡлы биҙрә тотоп йөрөүсе йәки кейем йөрөтөүсе. Минең бер кем дә ҡушмаған тағы ла бер һөнәрем бар: ул да булһа – йылымды ҡырсынға һөйрәп сығарғас, ваҡ балыҡтарҙы ҡотҡарыу. Эре балыҡтарҙы биҙрәгә тултырғанда был эште ашығып эшләйҙәр, сөнки һәр кем эрерәк балыҡты үҙ ҡулы менән биҙрәгә һалырға тырыша. Ә йылым менән байтаҡ селбәрә балыҡ та ярға сыға. Улар тырышып һикерешә, үҙ донъяһына, һыуға ҡайтырға тырыша. Ә мин ашыға-ашыға шул балыҡ балаларын ҡулым менән Һәләүеккә ебәрәм. Эй, нисек шатланып йөҙөп китәләр! Был эшемә мин дә шатмын. Беләм, селбәрә араһында ажау балаһы ла, бәрҙе балаһы ла, хатта ҡыҙыл (таймень) балаһы ла булғылай. Иҫән-һау ғүмер итһә, бына шул ҡыҙыл балыҡ йотойо бер бот үлсәмгә еткән ҙур балыҡҡа әйләнә лә баһа. Ә ололар миңә:

– Булашма шул ваҡ балыҡ менән, ҡоштар ашар әле,– тиҙәр.

Мин береһен дә тыңламайым, йүгереп-йүгереп йотойҙарҙы һыуға ебәрәм. Ә ҡоштар өсөн сатырый ҙа еткән. Шулай уҡ ваҡ ҡоморой йәки күкендәрҙе лә һыуға төшөрәм.

Балыҡ һөҙөү тамамланғас, иң ҡыҙығы – балыҡ өләшкәндә ҡарау. Өләшеүҙең ике ысулын беләм. Беренсеһендә өләшеүсе (ғәҙәттә, минең атай) балыҡты һәр кемдең «эш урыны»на ҡарап өләшә: иң беренсе төпкө яҡтан йылым таяғын тотоп йөрөүсегә – атай үҙе – эрерәк балыҡ һалына, икенсе – таяҡты тотоп йөрөүсе икенсе урынға, артабан ярҙамсылар – өшкөтөүселәр, йылым ҡойроғон тотоп йөрөүселәр. Аҙаҡтан инде кейем, тупланған балыҡ тотоп йөрөүселәргә лә өлөш сыға. Йылымға төрлө балыҡ эләгә шул, ғәҙел итеп бүлеү ҡыйын, ә һәр кемдең матурыраҡ, эрерәк балыҡты алғыһы килә.

– Был балыҡ миңә тейеш, мин өйөрөлмәгә төштөм,– тигән кешеләр ҙә булғылай. Бындай ваҡытта икенсе ысулды ҡулланалар. Балыҡтарҙы бер нисә өйкөмгә бүлеп һалалар ҙа кемдеңдер күҙен бәйләйҙәр. Өләшеүсе, өйөмдәргә күрһәтеп: «Был кемгә?» – тип һорау бирә бара, күҙе бәйләнгән кеше берәйһенең исемен әйтә, өйөм шул кешенеке була. Ғәҙәттә, балыҡ тотоу күңелле тамамлана. Эйе, мин бәләкәй саҡта Һәләүек балыҡҡа бай булды, үтә ялҡауҙар ғына ашай алманы.

Бына беҙ яр буйынан киләбеҙ. Атай минең ярға яҡын килгәнде яратмай:

– Балыҡты ҡурҡытаһың, ярға яҡын атлама,– ти.

Мин аптырап ҡалам. Нисек инде мин, бөләкәй булһам да – балыҡты ҡурҡытам, ә улар, ҙур булһа ла, ҡурҡытмайҙар? Баҡһаң, ғилләһе минең атлай белмәүҙә икән. Балыҡ киҫкен хәрәкәтте һиҙә һәм тиҙ генә юҡ була.

Яр буйында йөрөп өйгә ҡайтҡас, атай миңә Исмәғил ағайға барып килергә ҡуша. Ул кискәрәк ат егеп килеп тә етә. Беҙ, йылымды тейәп, Һәләүек буйына китәбеҙ. Атай барып еткәс, атты туғарып, үлән ашарға ебәртә лә, үҙе сисенеп, һыуға төшөргә әҙерләнә. Исмәғил ағай ризаһыҙлыҡ белдереп:

– Был өйөрөлтмәктә ниндәй балыҡ булһын инде,– ти, төшкөһө килмәй. Атай үҙе төпкә төшөп китә, ә Исмәғил ағайға йылымдың бер таяғын тотоп торорға ғына ҡала, һыу уның күкрәгенән генә. Атайым өйөрөлтмәне йылым менән айҡатып ярға сыға ла, икәүләп йылымды ярҙағы ҡырсынға һөйрәйҙәр. Тик бер балыҡ та эләкмәгән. Атай ашығып тағы ла шул уҡ юл менән һыуға инә, тағы ашығып йылымды һөйрәп сығаралар. Үкенескә күрә, балыҡ тағы ла эләкмәгән. Исмәғил ағай тамам ҡыйыуланды.

– Әйттем бит, Шириаздан ағай, был өйөрөлтмәлә балыҡ булмай, тип. Юҡ бит, сабаҡ та юҡ.

– Булмаған өсөн дә тағы төшәбеҙ инде.

Атай өсөнсө тапҡыр һыуға төшөү яғын ҡарай, ашыҡтыра. Исмәғил ағайға таяҡты дөрөҫ тоторға ҡуша. Үҙе һыуға сәсәй-сәсәй, йылым таяғын турараҡ тоторға тырышып, өйөрмәне урап ярға ынтыла. Йылым тағы ла ярға һөйрәп сығарыла.

– Әйттем бит, Шириаздан ағай, был урында түмәрҙән башҡа ниндәй балыҡ булһын! – Исмәғил ағай тамам үҙенең һүҙенә ышанып өлгөрҙө. Ә атайым ҙур тиҙлек менән шул «түмәр»гә ташланды. Йылымдан аралап күтәреп алғас, түмәр көслө хәрәкәткә килде. Исмәғил ағай телен йотҡандай булды. Атайым ҙур ҡыҙыл балыҡты Һәләүек аша алып сыҡты ла арбаға һалды. Эш бөттө. Атты егеп ҡайтырға сыҡҡанда, тамам ҡараңғы төшкәйне.

– Ҡара әле, Шириаздан ағай,– Исмәғил тамам аптыраны,– бер боттан да артыҡ тартыр был. Вәт әй, Һәләүектә лә балыҡ була икән!– Өйгә ҡайтып еткәнсе һүҙ балыҡ тураһында барҙы. Ҡайтып еттек тә, күршеләрҙән бизмән килтереп, балыҡтың ауырлығын үлсәнек: егерме килоға саҡ ҡына тулманы. Балыҡты өс өлөшкә бүлделәр ҙә берәүһен лагерға алып барып һатып, араҡы алдылар. Балыҡты «йыуған» ваҡытта Исмәғил ағай ҡыҙыл балыҡ тураһында ғына һөйләне.

– Ҡыҙыл балыҡ, русса – таймень, бик тәмле балыҡ һанала, һурпаһы ла тәмле.

Балыҡ итен «түрәләр ашы» ти атайым.

Бай йылға булды ул Һәләүек, балығы ла үҙе кеүек атаҡлы булды, ағын шарлауыҡтарында бәрҙеләре ҡайнаны, ятыуҙарҙа ажауҙар эркелеп йөрөнө. Беҙ атай менән балыҡҡа йыш бара торғайныҡ. Тирмәнсенең кәмәһен алып тирмән быуаһында, ҙур күлдә ау ҡороп, дөмбөр менән өшкөтөп, ауҙы кәмәгә тартып сығарып, ҡайһы ваҡыт ундан артыҡ суртан тотоп алып ҡайтҡан саҡтарыбыҙ булды, ә ауға ваҡ балыҡ эләкмәй. Тотҡан суртандарыбыҙҙың күберәген һаттыҡ, үҙебеҙгә лә етте, туған-тыумасаға ла эләкте.

Атай балыҡ тотоуҙың барса серҙәрен белә, миҙгелен дә иҫендә тота. Яҙ еткәс, Һәләүек туғайынан йәш тал сыбыҡтары киҫеп алып ҡайтып, мурҙа үрә. Ул уны үҙенсә «нурҙа» тип атай. Һәр яҙ ун дана самаһы яһай. Яҙғы ташҡын ваҡытында мурҙаларҙы үҙе генә белгән урындарға һала, һыуға батыра. Мурҙа һалырға ла оҫталыҡ кәрәк. Сөнки һалған урынды йәшереп тотоу, бауын йәшерә белеү – үҙе бер һөнәр. Мурҙаны һәр кем үҙе өсөн яһай бит. Ә оҫталар ауылыбыҙҙа өсәү генә, башҡалар өсөн мурҙа яһау юҡ. Мурҙаны һыуҙан тартып сығарыу – бик ҡыҙыҡлы мәл, бигерәк тә ҙур балыҡ эләкһә. Әгәр ҙә суртан эләкһә, вағыраҡтарын йотоп өлгөрә лә, бер үҙе генә ҡала. Йыртҡыс – төрмәлә лә йыртҡыс, туя белмәй.

Һәләүек (мин сабый саҡта) Әптек халҡы өсөн изге һыу һаналды, һәр кем, теленә килгәндә, уны маҡтап һөйләне. Ысынлап та, был йылғаның шаршылары, ятыуҙары, киң туғайҙары, тыныс күлдәре, ялан эргәһендә торналар бейеүе генә ни тора! Һәләүек туғайҙары әкиәтте хәтерләтә ине шул. Шаршы — һыуҙың шаулап-гөрләп аҡҡан урыны, ағымы тиҙ, ә ятыу иһә — йылғаның тәрән урыны, төбөндә ҡом йәки балсыҡ, яры һикәлтәле, һикәлтә һәр саҡ һары мәтенән тора. Элекке ваҡытта һәр ятыуҙың үҙ исеме булды. Ятыуҙарҙа кешеләр батып үлгеләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: ятыуҙа фажиғәле рәүештә батып үлеүсе булһа ла, халыҡтың ул ятыуҙы ҙур ихтирам менән телгә ала торған ғәҙәте бар ине. Әптек ауылының ҡап уртаһында, мин әле сабый саҡта, Мәрзиә ятыуы бар ине. Ул урында Мәрзиә исемле ҡарсыҡ ярҙан йығылып төшөп, шул урында батып үлгән, ә уның менән бергә беҙҙең күрше Хөсниямал инәй ҙә булған. Инәйҙе ҡотҡарырға тырышып ҡарағандар, тик һуң булған. Хөсниямал инәй ярҙан:

— Мәрзиә апай төпкә китте,— тип ҡысҡырып торған.

Ә беҙ, балалар, аҡыл етмәгәндер инде, ни аңлатыусы булмаған, урамда Хөсниямал инәйҙе: «Мәрзиә апай төпкә китте»,— тип үсекләр булдыҡ. Ул беҙҙе таяҡ менән ҡыуа торғайны.

Һәләүек туғайҙары кеүек бай туғайҙарҙы мин бер ерҙә лә күргәнем юҡ. Муйыл сәскә атҡанда еҫе менән дә, төҫө менән дә һушты алырлыҡ. Туғайҙа балан, ҡарағат, бөрлөгән бихисап. Тик үкенесле: һуңғы йылдарҙа был матурлыҡ ныҡ үҙгәрҙе, емеш ағастары, ҡыуаҡлыҡтар кәмегәндән-кәмей.

Минең ғүмеремдә Һәләүек туғайының әкиәтте хәтерләтеүен раҫлаған бер ваҡиға булды. Уҡыу юлында йөрөгән сағым. Туғайҙа бер тауыш ишеттем дә, ара алыҫ ҡына булһа ла, шул яҡҡа табан киттем. Ваҡытымды ла, аяҡтарымды ла йәлләмәнем, оҙаҡ барҙым. Тураға юл да юҡ ине. Ысынлап та, үкенесле булманы, был күренеште үҙ ғүмеремдә бер генә тапҡыр күрҙем. Был тамаша торналар туйы булып сыҡты — иҫ китмәле күренеш, һүҙ менән әйтеп, ҡағыҙға яҙып тасуирлап булмайҙыр, быны үҙ күҙҙәрең менән күрергә кәрәк. Торналар туйы балет та, опера ла, концерт та түгел, ул барыһынан да өҫтөнөрәк, тип уйлайым. Торналар, минең яҡын килеүемә иғтибар бирмәй, үҙҙәренең ритуал туйын дауам иттеләр, иҫем китеп бик оҙаҡ ҡарап торҙом, һай, минең өсөн бик шатлыҡлы булды был көн. Башҡорт халҡы юҡҡа ғына торнаны изге ҡош иҫәбенә индермәгәндер. Шулай, халҡым электән тәбиғәттең ҡәҙерен белгән.

Мин үҙем Һәләүектә ике тапҡыр батып үлә яҙҙым. Беренсеһе — сабый сағымда, мине ниндәйҙер көс ҡотҡарып ҡалды, икенсеһе — дуҫым «батырға» ярҙам итте. Ярай әле, ысын ярҙам итеүселәр табылған. Мине алып сығып, дөрөҫ һалғандар. Үпкәләге һыу ҡан ҡатыш ағып сығып, һулыш ала башлағанмын. Беҙҙең халыҡ һыуға, йылғаға үпкәләй белмәй, күрәһең, башҡорттоң йолаһы шул. Ер-һыу башҡорт өсөн — Алланың кешегә биргән иң ҙур бүләге.

Һәләүек тураһында күп яҙырға була. Йылғаның яҙмышы шул йылға янында йәшәгән халыҡтың яҙмышына оҡшаған. Элек Һәләүек буйында башҡорт ауылдары ғына булған, халыҡ йылғаға ҙур ихтирам менән ҡараған. Совет осоронда йылға күҙгә күренеп үҙгәрҙе. Элек, беҙ бәләкәй саҡта, йылғаның үҙебеҙ теләгән өлөшөндә яланаяҡ йөрөнөк. Янында хәтфә үләнле туғайҙар ине.

— Әгәр ожмах булһа, ул беҙҙең Һәләүек буйы кеүектер,— тип уйлай инем. Ә хәҙер уны сүп үләндәре баҫты, шайтан таяҡтары яланаяҡ баҫыр урын ҡалдырмаған. Күңелем әрнеһә лә, туғайҙарҙа йөрөйөм. Күрәһең, һәр замандың үҙ үләне. Хәҙерге кешеләр кеүек, үләндәрҙең дә үҙ аламаһы өҫтөнлөк ала. Улар еңәләр ҙә маһайып үҫәләр.

Мин бәләкәй саҡта ололар иң аҡылһыҙ кешене «һыуға сысҡан» тип атайҙар

ине. «Эскән ҡойоңа төкөрмә» тигән һүҙ ҙә булды. Ә хәҙер колхоз-совхоздар һыу буйында мал көтә. Туғайҙарҙы тапаталар. Бына шуға ла инде ҡәҙерле үләндәрҙе әрһеҙ сүп үләндәре алмаштырҙы. Минең күҙәтеүемсә, бигерәк тә иң боронғо үсемлектәр юҡҡа сыға, тамам юғала. Әйтәйек, беҙ бәләкәй саҡта, аслыҡ йылдары ярап ашаған ҡымыҙлыҡ хәҙер Һәләүек бассейнында бигүк күренмәй.

Хәҙерге ауыл хужалығының агрономия «уңыштары» Һәләүек туғайының бөгәренә һуҡты. Ә химик ашламалар, ағыуҙар затлы балыҡтарҙы тамам бөтөрҙө. Бәрҙе (хариус) Һәләүектә генә түгел, ҡушылдығы Ҡашалаҡта ла эркеүләп йөҙә ине.

«Бөйөк индустрия» ла Һәләүектең йөрәгенә һуҡты. Уның Берҡамыт исемле ҡушылдығы бар. Эйе, тау араһынан саф һыулы шишмә аға. Ул бәләкәй генә күлгә ағып төшә лә шунда юғала. Күлдән ағып сыҡҡан һыу юҡ, ә ошо күлдән өс саҡрым самаһы алыҫлыҡта шул уҡ һыу фонтан булып атылып сыға. Шул сығанаҡ Берҡамыт тип атала ла инде. Боронғолар һөйләүе буйынса, был бәләкәй күлгә бер үткенсе арбаһы менән ҡолаған һәм күл төбөнә киткән, имеш. Күпмелер ваҡыт үткәс, уның ҡамыты ғына һуңғы сығанаҡтан килеп сыҡҡан. Шул ваҡыттан ул Берҡамыт исемен алған.

1969 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһы Берҡамыттың һыуын үҙенә алырға була. Бер метр йыуанлыҡ торба эсенән Һәләүек һыуы ҡалаға аға башлай, йылға кәметелә, кәмһетелә. Берҡамыт — Һәләүектең өстән бер өлөшө, һыуҙың хаҡы ла билгеле булһын. Эйе, Стәрлетамаҡ бер нисә ауылға һыу үткәрҙе, һәм халыҡ Берҡамыт һыуын өйҙәренә яҡын колонкаларҙан алыу көнөнә иреште. Ә Һәләүек кәмһетелеү хәлендә ҡалды. Әлбиттә, һыу кимәлен һаҡлау өсөн ике дамба төҙөлдө. Тик был ваҡытлыса, күҙ буяу ғына булып сыҡты. Туғайҙарҙы яҡлау өсөн Стәрлетамаҡ аҙмаҙ сығымдарын да йәлләне. Мин 1989 йылда Һәләүек һәм уның кеүек бәләкәй йылғалар тураһында ун ике биттән торған әсенеү ҡатыш уйланыуҙарымды «Стерлитамакский рабочий» гәзитенә илткәйнем. Ул ваҡытта баш мөхәррир булып шулай уҡ Һәләүек һыуын һыулаған Һаҙи ағай Арыҫланов эшләне. Уның менән киләсәк быуындарыбыҙ яҙмышы, тәбиғәтебеҙҙең һәләкәткә барыуы тураһында байтаҡ ҡына әңгәмәләшеп ултырҙыҡ, кәңәштәр ҙә беркеттек. Ул минең күтәргән проблемаларҙы асыҡлап, матбуғат биттәрендә лә яҙҙы, шулай итеп Арыҫланов призы донъяға килде. Минең яҙмаларым күп гәзит-журналдарҙа донъя күрҙе, байтаҡҡа ҡыҫҡартып булһа ла «Йәшлек», «Тәбиғәт», «Стерлитамакский рабочий» гәзиттәре лә был мәсьәләләрҙе яҡтыртып сыҡты, ә башҡалар, исмаһам, ҡырын күҙ ҙә ташламанылар.

Стәрлетамаҡ түрәләренең миңә ярҙам итергә ризалашҡандары ла һүҙҙән артыҡ китә алманы, ҡыҫҡаһы, йүнле эш сыҡманы.

Ә Һәләүек әле лә ярайһы таҙа һыуы менән кешеләрҙе шатландырырға ашыға. Әлегә ...

## Ҡыҫҡа ғүмер

*Мең төрлө уй, ҡатты баш,*
*Ни эшләргә лә аптыраш,*
*Яртым яна, яртым туңа,*
*Йәнем үлде яртылаш.*

**Шәйехзада Бабич**

«Аптыраған минуттар»ҙа дәрестән һуң Әптеккә ҡайтырға булдым. Этҡолдан үҙ ауылыма аҙна һайын ҡайтам, тамаҡ йөрөтә. Этҡол менән Әптек араһы егерме саҡрымлап булыр. Йәйәүле кешегә еңел юл түгел, ә минең өсөн — һәр ваҡытта ла ҙур һынау. Етмәһә, һауа торошо насар, һыуығы бар, буранлап та тора. Мин, ғәҙәттә, ҡыҫҡараҡ юл табырға тырышам. Тик ҡарлы буран сыҡҡас, юлды ҡыҫҡартып

булмай. Ҡышҡы көн ҡыҫҡа, тиҙерәк атламаһаң, төнгә ҡалырыңды көт тә тор.

Бөгөн дә мәктәптән Түбәнге Этҡолға тура юл менән сыҡтым. Ауылдан һуң — бейек тауға менергә. Йәһәтерәк атланым, күрәһең, хәлем бик яҡшынан түгел. Тауҙың башына еткәндә, ҡабырға аҫтында ут яна башланы, һәр аҙым ҡыйынлыҡ менән атлана. Түҙеп булмаҫлыҡ булып ауыртҡан еремә ҡар ҙа ҡуйып ҡарайым, барыбер файҙаһы юҡ. Һыуыҡ нәмә ҡуйыу тыйылғанын да беләм, ни эшләйем, аптырағандан инде. Инде урманды үттем, Ҡарлар ауылына ла етеп киләм. Ҡараңғы төштө. Күңелемә ҡыйын. Этҡол — Әптек юлының һәр аҙымын, һәр бер соҡорон беләм, һәр бер ҡалҡыулыҡ, һәр ҡыуаҡ, хатта юлдағы һәр ағас таныш. Был юлда минең ял итеп китер өсөн билгеле урындарым да бар. Бер кемгә лә күренмәй ултырып йәки ятып ял итеп алам. Тик бөгөн ял итергә лә форсат юҡ, атлай һалырға кәрәк. Ҡарлар ауылын сыҡҡанда тамам хәлем бөттө, ә Биксәнгә тиклем алты саҡрым ара бар әле. Бөтә түҙемлегемде егеп, һаман алға атлайым.

Биксән урамына килеп ингәндә, аяҡтарым тыңламай башланы. Эсем яна, ҡайһы ағза ауыртҡанын да белеп булмай. Иң ҡыйыны, иң хәтәрерәге алда икән әле — аяҡтарымды көҙән йыйыра башланы. Беҙҙең ауылда мускулдарҙың тартышҡанын «көҙән йыйыра», «корошҡаҡ тота» тиҙәр. Етмәһә, Биксән урамында эттәрҙән тынғы юҡ: өрәләр, өҫкә менеп киләләр, тештәре ыржайған. Башҡа ваҡытта мин был ауылдың баҫыуы артынан үтәм дә бит, бер эт тә осрамай торғайны. Ә бөгөн артҡы юлда тубыҡ тиңенән ҡар, атларлыҡ түгел.

Урам боролошона еткәндә, тамам хәлем бөттө. Мин бер ҡасан да кешенән ярҙам һорарға тырышманым. Ә бөгөн кемгәлер инеп, хәл йыйып, йылынып сығырға уйланым. Тик кемгә керергә? Бай күренгән өйгә инергә ярамай, ундайҙар күп һорашырға ярата. Ә мин һорашҡанды яратмайым. Йәнәһе лә, ҡайһы ауылдан, ҡайһы урамдан, кем малайы... Һорашҡанға яуап бирерлек хәлем дә юҡ, аяҡтарым тартыша, эсем тотошлайы менән яна, башым әйләнә. Эт булған өйгә лә инеп булмай, һүҙ әйтерлек тә хәл юҡ. Боролошто үткәс, бер ихатаның асыҡ ҡапҡаһын күрҙем. Өйҙөң мөрйәһенән төтөн сыға, бай кешеләр йәшәгәнгә оҡшамаған. Эттәре лә күренмәй. Ишектәрен шаҡып та торманым, эскә индем. Ыҡсым ғына бәләкәй өй. Эсендә мейес яҡтыһы, уның иң матур янған сағы. Мейес алдында ике кеше ултыра, минеңсә, инәле-ҡыҙлы йәки апалы-һеңлелеләр. Хәлемде аңлатырға тырыштым, әҙерәк йылынып, хәл алып сығырға рөхсәт һораным. Ниндәй яуап биргәндәрҙер, яҡшылап ишетмәнем. Тиҙерәк урындыҡҡа, иң алыҫ тәҙрә төбөнә барып ултырҙым.

Ҡышҡы һалҡын мәлдә янған мейес алдында ултырыуы — үҙе бер ҙур ләззәт. Ул — күптәрҙең теләге. Был икәү ҙә рәхәтләнеп ултыра, буғай. Мейестәге утын күңелле итеп шартлап яна. Күрәһең, мин кәйефтәрен боҙҙом, сөнки, күпмелер ваҡыт үткәс, улар бышылдашып, ашығып һөйләшә башланы. Мин ул икәүгә хәүефле тойолам, ахырыһы. Ни эшләргә? Тағы ла аҙ ғына ултырғым килә лә ул, ярай инде, кеше ҡурҡытмайым. Бар көсөмдө йыйҙым да, рәхмәт әйтеп, сығып киттем. Миңә үҙ өйөмә етер өсөн тағы ла өс-дүрт саҡрым үтәһе бар әле. Ни булһа ла булыр, тип уйланым да урамдан баҫыу ҡапҡаһына табан атланым. Ауыртыуҙар, аяҡтағы тартышыуҙар көсәйә төшһә лә, бик тырышып атлап урамдан үттем. Баҫыу ҡапҡаһына ла күп ҡалманы, ә тартышыуҙар хәҙер билемде лә ҡоршап алды. Эстәге ниндәйҙер мускулдарым ҡороша. Йә, Хоҙай, аяҡтарым бөтөнләй тыңламай. Башым ғына эшләй. Юлда тәгәрәп ятыуҙан ҡурҡып, бар аҡтыҡ көсөмдө йыйҙым да ситкәрәк йығылырға уйланым. Иң яҡшы урын — баҫыу ситәне буйында, һепертмә буран тиҙ күмеп китер. Тапһалар, һуңыраҡ тапһындар. Минеңсә, тиҙ арала табылыу насар хәбәрҙәр таралыуға булышлыҡ итер. Ә ваҡыт үткәс, яҙға табан тапһалар, хәбәрҙәр, минеңсә, еңелерәк булыр кеүек.

Бына шул уй менән мин юл ситенән бар көсөмдө йыйып атларға тырыштым. Баҫыуға йүнәлергә була, юл ситенә боролдом. Ҡышҡы сана юлы ҡаты, ҡалҡыу, ә юл эргәһе йомшаҡ ҡар, етмәһә, түбәнерәк. Башыма бер генә уй килеп ҡунды:

– Ғүмер ҡыҫҡа булды!

Мин ҡайҙалыр ҡараңғылыҡҡа остом.

Йомшаҡ ҡына итеп битемде ҡытыҡлайҙар. Ҡайҙалыр музыка уйнай, яҡтылыҡ килә. Мин ҡайҙа икән, ниндәй йомшаҡ урында ятам – аңларға теләйем. Ә музыка яҡтылыҡ төшкән яҡтан ишетелә икән. Әкрен иҫкән ел иһә ҡар бөртөктәрен битемә бәрә. Шулар ҡытыҡлай икән. Ҡулдарымды ҡыбырлатып ҡарайым – тыңлайҙар, бармаҡтарым иҫән. Аяҡтарымды ҡуҙғатам – тереләр, тартышмайҙар. Эсемдәге ут та һүнә биргән, түҙергә мөмкин. Шулай булғас, ниңә мин ятам әле? Тырышып аяҡҡа баҫтым да юлға мендем һәм музыка ишетелгән, яҡтылыҡ килгән яҡҡа атлап киттем. Бер саҡрым самаһы ара үткәс, тамам иҫемә килдем. Барыһы ла аңлашылды: яҡтылыҡ төрмәнән килә. Эйе, уның тирә-яғын яҡшы яҡтырталар. Әптектә ике төрмә бар: береһе – ҙур сроклы тотҡон ирҙәр өсөн төрмә, икенсеһе – ҡатындар өсөн. Ә музыка ҡапҡалар башына эленгән динамиктарҙан яңғырай. Музыка тауышын ишеткәс, күҙгә яҡтылыҡ төшкәс, мин шунда, йылы төрмәлә, ятҡан тотҡондарға көнләшеп тә алдым. Бының өсөн аҙаҡтан үҙемде әрләп ташланым. Мин яҡшы беләм: тотҡондарҙы көнөнә өс тапҡыр ашаталар, ашаған ризыҡтары ла насар түгел. Туйырлыҡ таҙа икмәк бирәләр. Ә миңә ундай ашау төшкә лә инмәй. Уларҙың ашаған икмәгенең яртыһы ла юҡ, ә башҡа ризыҡ тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Тотҡондар үҙҙәре лә әйтәләр: «Беҙҙең бөтә нәмәбеҙ ҙә етерлек, иркебеҙ генә юҡ».

Биксәндән һуң бер-ике саҡрым араны үткәс, мин иң ҡыйын урынға килеп еттем. Был – сусҡа фермаһы, әлеге төрмәнеке. Ике йөҙ метр самаһы ара. Хәлем шәп саҡта был араны йүгереп үтәм, аҙ генә тын алырға тырышам, сөнки һаҫыҡ еҫкә түҙерлек түгел. Ә бөгөн йүгереү түгел, шәберәк атларға ла хәл юҡ. Шулай ҙа, тырыша торғас, Һәләүек йылғаһына килеп еттем. Еҫ бөттө, ләкин үҙенекен эшләп тә өлгөрҙө – ҡоҫҡом килә. Ҡайтып еткәнсе түҙергә тырышам. Юҡ шул, икенсе төрмәне үткәс тә ҡоҫа башланым. Бик ҡыйын, әйтерһең дә, ут ҡоҫам. Баш әйләнә, тәгәрәп барам. Услап алып ҡар ҡабам, шулай итеп ауыҙымды сайҡайым.

Әптеккә килеп еткәндә ысын төн еткәйне. Күптәр йоҡларға ятҡан, уттары юҡ. Тик беҙҙең өйҙә һүрән генә ут ләүкей. Ҡайтып еттем. Өйгә инһәм, мәжлес бара икән. Атай иптәштәре менән араҡы эсә. Һирәк була торған хәл. Ғәҙәттә, ул араҡыһын түбән яҡ урамда эсә. Ә бөгөн ниңәлер үҙебеҙҙә һемерә.

Мине уҡыған өсөн маҡтап алдылар, шуның өсөн һырлы ҙур стаканға һалып араҡы бирҙеләр. Тулы килеш ҡулыма тотоп торам. Минең иҫәп һөт йәки ҡатыҡ таптырырға ине лә, әйтергә хәлем юҡ. Йәнем ҡыл өҫтөндә, эсемдә ут дөрләй. Ярар, ни булһа ла булыр. Өс оло ирҙең өгөтләүен дә ишетмәй, стакан эсендәген ауыҙға ҡойҙом. «Молодец, молодец»,– тип ҡысҡырҙылар, мин әсәйгә: «Һөт»,– тип әйтеп өлгөрҙөм...

Иҫемә килгәндә, миңә һөт эсерергә тырышалар ине. Күршеләрҙән алып ингәндәр.

– Ҡайһы ерең ауырта?

Был һорау дөрөҫ түгел. Минең бөтә ерем дә ауырта.

– Бер ерем дә ауыртмай, хәлем юҡ,– тинем. Ә иртәнсәк иһә минең һаулыҡ тураһында иҫенә төшөрөүсе лә булманы.

«Ярай, ғүмер дауам итә, бәлки, ҡырҡҡа етермен әле», – тип уйлап ҡуйҙым.

Аллаға шөкөр, инде нисәнсе тиҫтәне ваҡлайым. Бары менән генә килешмәйенсә, тырышып-көрәшеп йәшәһәң, алға барһаң, барыһы ла мөмкин икән.

# Эткол

*Белем нәҙерен белемле белер,*
*Гәүһәр ҡәҙерен сауҙәгәр белер.*

**Йософ Баласағунлы, «Ҡутадгу билиг»**

— Әсәй! Мин бөгөн Эткolға китәм.

Ғүмеремдә беренсе тапҡыр тәүәккәллек күрһәттем. Әйткән һүҙем һорау түгел, шуға яуап көтмәнем. Тик әйтмәйенсә лә булмай. Нисек кенә булмаһын, йәйге эш ваҡыты. Минең өсөн юлға әҙерләнеү хәсрәте юҡ. Кейемдең ҡәҙерләһе лә, әрһеҙе лә өҫтөмдә. Юл белмәгәс, кешеләргә эйәреп киттем. Егерме саҡрым араны йәйәүләп үткәнсе байтаҡ ҡына ваҡыт үтте. Төш етер алдынан ғына барып еттек. Юҡҡа ҡурҡҡанмын икән, уҡыу буйынса мәктәп директоры урынбаҫары мәктәп алдында йөрөй ине. Миңә алдан әйттеләр: ул Маннанов ағай, математиканан уҡыта. Завучтың тәүге һүҙен дә онотмағанмын:

— Шау «өслө»гә уҡығандарҙы алмайбыҙ.

Мин был һүҙҙәрҙән ҡурҡманым, сөнки алған билдәләрем сит кешеләр алдында йөҙ ҡыҙартырлыҡ түгел.

Эткол мәктәбе бер күреүҙән үк күңелемде биләп алды. Эйе, бинаһы Сәлих мәктәбенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған. Сөнки ҡасандыр ул да Сәлихтеке кеүек мәсет булған. Ә мәсеттәрҙе, билдәле, бер үк оҫталар һалған. Әйтерлек тә түгел, мәктәп тәбиғәттең мөғжизәле бер матур урынында урынлашҡан. Яҡында ғына урман менән ҡапланған күркәм, бейек тау — Ҡыҙҙар тауы. Уралтып Һәләүек йылғаһы аға. Ә мәктәп баҡсаһының икенсе яғында — ҡамышлы ике күл. Һис шикһеҙ, был күренеш күңелгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ еңеллек килтерә. Шул уҡ көндө ҡанатланып, яңы хыялдар диңгеҙендә ауылға ашыҡтым.

Беренсе сентябргә тиклем нисек тә булһа уҡырға барыуҙы тормошҡа ашырыу сараһын күрҙем. Уҡыу түләүле, беренсе ярты йылға 75 һум табырға, аҙ-маҙ кейем алырға, уҡыу кәрәк-яраҡтары хәстәрләргә кәрәк. Аҡса табыу еңел түгел. Колхоз эшенән бөтөнләй файҙа юҡ. Мин бар хәлемсә үҙем төрлө юлдар табырға тырыштым.

Уҡыуҙар башланғас, тағы ла бер ауыр мәшәҡәт тыуа. Быныһы — ифрат та ҡыйын эш. Ярай әле, Сынтимер миңә иптәшкә барырға ризалашты. Шулай итеп, икәүләп фатир мәсьәләһен хәл иттек. Йәшәргә Мырҙабулат бабайҙарға төштөк. Әйтергә кәрәк, минең кеүек фатирҙан уңыусы булмағандыр. Төрлө ауылдарҙан килеп кешелә йәшәүселәр күп, тик береһенең дә хужаһын маҡтағанын ишеткәнем булманы. Ә Мырҙабулат бабай һәм уның ғаиләһе мине үҙ туғаны кеүек яҡын күрҙе. Эйе, мин фатир өсөн бер тин дә түләмәнем. Йәғни фатирға уҡыусыны индереү — һәр хужаның изгелек күрһәтеү миҫалы ғына. Дуҫым, ҡышҡа кергәс, Этколға уҡырға йөрөүен ташланы, мин бер үҙем ҡалдым. Мырҙабулат ғаиләһе ашарға ултырғанда, мин дә бергә ултырып ашарға тейеш, ҡунаҡ йыйһалар — улар менән, ғөмүмән, сит малайға була торған ҡараш булманы. Мин һәр аҙна үҙ ауылыма ҡайтып, икмәк кенә алып киләм, башҡа мөмкинлектәрем юҡ. Һәр саҡ тартынырға мәжбүрмен. Ә Мырҙабулат бабай ҡышҡы буранлы йәки сатлама һыуыҡтарҙа ҡайтмаҫҡа ҡуша:

— Аллаға шөкөр, беҙҙең ашарға етерлек,— ти.

Үҙем дә уның һәр йомошон үтәргә тырышам, бер эштән дә баш тартмайым. Мырҙабулат бабайҙың туған-тыумасаһы күп, күрше ауылда ла барҙар. Ҡыш етһә, ҡунаҡҡа йөрөшөү башлана. Минең хужалар ғаиләләре менән өсәр көнгә ҡунаҡҡа киткеләй, ә өйҙә мал-тыуар күп, эш тә етерлек. Мине өйрәтеп торорға кәрәкмәй, һәр эште ваҡытында эшләйем, шуға ла ышаналар.

Һигеҙенсе класты тамамлағанда, мин бында тамам ғаилә ағзаһы булып өлгөрҙөм. Тик туғыҙынсы класта уҡығанда Мырҙабулат бабайҙың улы Рәхимйән ғәскәри хеҙмәттән ҡайтты ла, минең йәшәү урыным тураһында һүҙ сыҡты. Үҙебеҙҙең малайҙы ситкә ебәрмәйек тип, мине өйҙәге килендең, Зөһрә еңгәнең, әсәләренә фатирға күсерҙеләр.

Латиф бабайҙың өйө иҫ китмәле матур урында. Тирә-яғы ағаслы баҡса. Утыҙҙан артыҡ умарталары бар. Умарта баҡсаһы Һәләүеккә барып терәлә. Баҫма аша сыҡҡас, тағы ла ҙур баҡса — бесәнлек. Минең өсөн ожмах, китап уҡыу урыны, ҡайһы бер дәрестәрҙе лә шунда әҙерләйем.

Латиф бабай Шәрипов минең өсөн хөрмәтле, өлгө алырлыҡ кеше булып сыҡты. Унан күп нәмәгә өйрәндем.

Латиф бабай — умартасы. Ә ҡорт ҡараған кешенең холҡо бөтөнләй башҡа булғанлығын аңланым. Умартасы ашыҡҡанды яратмай, һәр нәмәнең, һәр бөжәктең ҡәҙерен белә. Был өйҙә лә мин малайҙарына әйләндем, үҙем дә уларҙың ышанысын аҡларға тырыштым. Латиф бабайҙы ла ҡунаҡҡа саҡырыусы күп булды. Улар күрше ауылдарға өсәр көнгә китәләр. Бына шундай көндәрҙең береһендә умарта күс айырҙы. Ә мин айырылған күсте тотоп, бикләп ҡуйҙым. Был хәл бер генә булманы. Латиф бабайға минең тырышлыҡ бик оҡшаны.

Бабайҙың өйөндә үҙенсә тәртип. Өҫтәлдә һәр саҡ ҡайнап торған самауыр. Килеп ингән һәр бер кешегә сәй эсереү ғәҙәте бер ваҡытта ла боҙолмай, кем булыуына ҡарамаҫтан, тейешле хөрмәт күрһәтелә. Сәй эсергә кәрәҙле йәки айыртылған бал ултыртыла. Латиф бабай, шифаһы күберәк булһын өсөн, бал менән сәйҙе нисек итеп дөрөҫ эсергә лә өйрәтте. Ә беҙ һәр көн баллап сәй эстек.

Минең иң яраткан шөғөлөм — Латиф бабай яһаған баҫманан Һәләүек аша сығып, сиҙәмгә ятыу. Кинәнеп һандуғас моңон тыңлайым, китап уҡыйым. Был хәлдәргә үҙем дә ышанмаған ваҡыттарым булды. Латиф бабай өйөндә миңә тамам күңел тыныслығы килде. Донъяла яҡшы кешеләрҙең дә барлығына ышана башланым. Унынсы класты бөткәндә мин аяғыма ныҡ баҫып торған, үҙемә ышанған кеше булып үҫеп еттем.

Мәктәп тормошо күңелемде тулыһынса яулап алды. Эйе, бында дәрес биреү менән генә сикләнмәйҙәр, һәр уҡыусының айырым һәләтлектәрен белергә тырышалар. Асыҡлағас, уны үҫтереү юлдарын эҙләйҙәр, төрлөсә ярҙам күрһәтәләр. Һәр фәндән дә махсус түңәрәктәр ойошторолған. Йыш ҡына ҡыҙыҡлы кисәләр, ярыштар, конкурстар үткәрелә. Үҙен күрһәтә алғандарға бүләктәр булмаһа ла, һәр береһенә ысын йөрәктән сыҡҡан йылы һүҙҙәр табыла. Беҙҙе вальс, краковяк, фокстрот һ.б. бейергә өйрәттеләр. Беҙ был бейеүҙәрҙе элек киноларҙа ғына күрә инек. Әҙәби кисәләр, үҙешмәкәр концерттар, драмаларҙы сәхнәгә ҡуйыу — барыһы ла беҙҙең зиһенебеҙҙе арттырҙы.

Мәктәптең ҙур тәнәфесе үҙенсәлекле булды. Ул ваҡытта магнитофон түгел, радио ла юҡ. Ә мәктәптең патефоны бар, пластинкалары етерлек. Беҙ уларҙы тарелка тип атай инек. Бына шул патефон менән ҙур тәнәфестә тансы ойошторабыҙ. Мәктәп коридоры бейеү залына әйләнә.

Белмәйем, Яңы йыл байрамын берәй уҡыусы мәктәптән тыш үткәрҙеме икән, юҡтыр. Үҙебеҙҙең уҡытыусы Иҫәнгилдин кеүек Яңы йыл кисәһен ойоштороусы тағы ла ҡайҙа бар икән? Мәктәптә үткән ваҡыт һәр уҡыусыға файҙалы, шул уҡ ваҡытта күңелле булһын өсөн уҡытыусылар ифрат күп көс һалды.

Мәктәпте тамамлағас ҡайҙа барырға? Кем булырға? Уҡытыусылар был һорауҙарға яуапты ла беҙҙең менән бергәләп эҙләне, кәңәштәр бирҙе, һәр кемдең һәләтлеген самалап, дөрөҫ өйрәтте.

Беҙҙең класс етәксеһе тураһында айырым һөйләргә кәрәк. Ә беҙ уңдыҡ ундай

кешенән. Һигеҙенсе кластағы Вера Зиновьевна булмаһа, мин Диккенсты ла, Гюгоны ла уҡый алмаған булыр инем. Улар беҙҙең заманда ат хаҡы тора ине. Ҡайһы бер китаптарҙы йылдар буйы эҙләп тә таба алманым. Ә уҡытыусым табып бирҙе.

Туғыҙҙа саҡта класс етәксебеҙ Ниса апай Рәхмәтуллина булды. Мин уның көләс йөҙөн, мәрхәмәтлелеген һис ҡасан да онота алмаясаҡмын. Беҙгә ул химиянан белем бирҙе, һәр дәресте тәжрибәләр менән, спиртовка яндырып, реактивтар ҡыҙҙырып үткәрә торғайныҡ. Киләһе дәрестә кәрәк буласаҡ нәмәләрҙе лабораториянан килтереү — минең эш, класс өҫтәлендә тәжрибәләр уҙғарыу ҙа миңә йөкмәтелгән. Ә һәр төрлө эштәр өсөн яҡшы сифатлы медицина спирты бирелә. Малайҙарҙы көлдөрөр өсөн, спирттан 40 градуслы яһап (араҡы була бит инде), пробирканан эсәм. Ниндәй уҡытыусы бының өсөн асыуланмаҫ икән? Хатта дәрестән ҡыуып сығарырҙар ине. Ә Ниса апай көлә:

— Ни эшләтәйем инде һине? Мин бит һине үҙемдең улым кеүек яратам.

Ниса апай был һүҙҙәрҙе күп ҡабатланы. Ә кем һуң улдары? Улар өсөһө лә беҙҙең мәктәптә уҡыны, бөтәһе лә башҡаларға үрнәк инеләр. Уҡыу алдынғылары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре булды.

Химия минең яратҡан фәнем була алманы. Уҡытыусыға иркәләнеү ҙә файҙа бирмәй. Тик, аптыратып, Ниса апай миңә «дүртле» билдәһе сығарҙы. Ә Өфө нефть институтына килгәйнем, артымдан тағы ла минең һай йөҙгән химия фәне ҡыуып етте. Бына һиңә кәрәк булһа, һуҡырҙың теләгәне — ике күҙ, тигән кеүек, бында ла миңә Ниса апай кеүек уҡытыусы тура килде. Бер ни ҙә белмәгән килеш, имтихандағы билет урынына Ниса апай тураһында һөйләп «дүртле» алдым. Институттың уҡытыусыһы Некрасова минең хәлемде аңланы, булһа кәрәк. Бына шулай, Ниса апай мине унда ла ташламаны, ҡотҡарҙы. Рәхмәт һиңә, Ниса апай!

Тарих һәр саҡ минең иң яратҡан фәнем булды. Ә был дәрестәрҙе, ғәҙәттә, мәктәп директорҙары алып бара. Эҫкол мәктәбендә директор булып Мөхәмәтшин ағай эшләне, һәм мин уның дәрестәрен һәр саҡ түҙемһеҙлек менән көтөп алыр булдым. Директорҙың тарих һөйләүе минең өсөн үтә мауыҡтырғыс. Тарихты китапса һөйләргә була. Ә ул дәрестәрҙе булған ваҡиғалар тураһында фекер йөрөтөп, һәр төрлө һығымталар сығарып, аңлатмалар биреп уҙғарҙы.

Тарих һәр ваҡытта ла ҡаршылыҡтар менән тулы. Тарих яҙыусыларҙың хата ҡараштары ла ҡайһы берҙә китап биттәренә төшөп, аҡылға әйләнеп киткеләй. Мин тарих фәнен бишенсе класта уҡ үҙемсә аңларға тырыша башланым. Аналитик метод менән һөйләгән уҡытыусыны көттөм һәм Эҫкол мәктәбендә шундайҙы тап иттем. Тарихи мажараларҙы «былай булған», «тегеләй булған» тип кенә һөйләү аҙ. Тарихсыларҙың күптәре «Ни өсөн шулай булған?» тигән һорауҙы ниңәлер урап үтергә тырыша. Ә Мөхәмәтшин ағай бөтә шул етешмәгәнлектәрҙе бөтөрөп, беҙгә тарихтан күҙебеҙҙе асты. Ул уҡыусыларҙың белемен дә үлсәй белде, ваҡытында был турала әйтергә лә онотманы. Тарихты дөрөҫ аңлау беҙҙең заманда еңел булманы. Сталинизм үҙе сығарған тарих менән йәшәргә ҡуша ине әле.

Мөхәмәтшин ағай — буйға бейек, таҙа кәүҙәле кеше. Һуғышта разведчик булған. Яралары күп, бер ҡулы юҡ. Һуғыштың иң киҫкен урындарында уға йыш булырға тура килгән, үлем ҡурҡынысы менән күп тапҡырҙар күҙгә-күҙ осрашырға тура килгән.

Ул мәҙәк һүҙ яратты, үҙе лә көлкөлө итеп һөйләй белде. Комсомол йыйылыштарында һөйләгәндә беҙ ауыҙына ғына ҡарап ултырыр булдыҡ. Эйе, беҙҙең директорға ихтирамыбыҙ бик ҙур ине. Ул ярҙам ҡулы ла һуҙа белде. Хатта үҙ кеҫәһен дә йәлләмәне. Был, ысынлап та, һирәк миҫал.

... Эҫколда уҡый башлағанда минең хәл мөшкөл ине әле. Дауаланыу өсөн мөмкинселек юҡ. Миндә бер генә сир түгел — оло бер «гөлләмә», һөйләргә лә кешем юҡ. Башыма: «Ғүмерем ҡыҫҡа булыр», — тигән алама уйҙар ҙа ояланы.

Эткәолда уҡый башлағанда ике ауыл араһын ҙур ҡыйынлыҡ менән үттем. Ә туғыҙынсыға күскәс, тиҙлегем арта төштө. Юлға сығыр алдынан була торған борсолоуҙарымды ла ташланым. Юл минең өсөн ғазап сығанағы түгел, ә ҡыҙыҡлы күренештәр теҙмәһе булды. Ниҙәр генә осратманым мин: торналар туйын да күҙәттем, үгеҙ мышы менән дә осраштым, ғөмүмән, тәбиғәт менән һоҡланыуым артты, матурлыҡта йәшәнем. Тормошҡа ҡарашым үҙгәрҙе, хәүефһеҙ йәшәй башланым. Эткәол ауылында уҡыу минең өсөн тән генә түгел, йән йәрәхәттәрен, ауырыуҙарын да дауалаған шифалы дарыу булды. Төшөнкөлөктө юғалттым. Мәктәп миңә был донъяла изгелекле, яҡшы кешеләрҙең күберәк булыуын раҫланы. Йәшәүгә дәртем артты.

Мәктәбемдән дә, тормош мәктәбемдән дә уңдым.

## Башҡорт аты

Бәләкәй арба һөйрәп, өләсәй менән Бүләк урманынан утындан ҡайтып киләбеҙ. Көн ямғырлы. Юлдағы батҡаҡ арба тәгәрмәсенә йәбешә. Шуға ла бигерәк ауыр.

— Көндәр көҙгә тартты. Балам, беҙ бөгөн урманға тағы бара алмабыҙ.

— Бармаһаҡ бармаҫбыҙ инде, иртәгә иртүк китербеҙ,— ә үҙем эстән генә шатлыҡлы ниәт ҡороп өлгөрҙөм: малайҙар менән мәтәл уйнарға сығам. Сөнки йәйге көндәрҙә уйнау миңә бик эләкмәй. Тик өләсәй ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел, миңә өйҙә лә эш табыуы ихтимал. Мин тағы һүҙемде ҡабатлап ҡуйҙым:

— Өләсәй, һин һыйыр һауғанда... мин арба күсәрен майлап ҡуйырмын. Әтеү тәгәрмәстәр ауыр әйләнә, — тинем.

— Ярар, балам, һиңә лә ял кәрәк, мин һиңә бөгөн эш ҡушмам.

Шатлығымдан ни эшләргә белмәгәндә, беҙ Миңнәс тауы битенә килеп еттек. Тау битендә аттар көтөүе үлән ялмай, яндарында ҡолондары ла бар. Үргә менеүе ауыр булғанға күрә, өләсәй туҡтап ял итергә булды. Елкәһендәге бауын ысҡындырып, яулығы менән тирен һөрттө. Мин дә арба тартҡан бауымды ысҡындырып, ҡолондарҙы мауығып күҙәтә башланым.

— Күрәһеңме, балам, бынау туры бейә беҙҙең йылҡы нәҫеле. Үҙе лә беҙгә ҡарап тора. Әллә беҙҙе таный, ҡолоно ла үҙенә оҡшаған.

Өләсәй тағы ла нимәлер әйтергә уйлағайны ла, әйтә алманы, яулығы менән күҙ йәштәрен һөртә башланы. Уның илағанын мин бик һирәк күрәм. Илаһа ла, йылына бер тапҡыр, башҡалар күрмәҫлек урында ғына илай. Ә бөгөн, күрәһең, өләсәйҙең иҫенә бик ауыр хәтирәләр төштө. Күҙ йәштәрен һөртөп, өләсәй елкәһенә бауын элде:

— Әйҙә, балам, өйҙә лә эш күп. Ҡайтып етәйек.

Тиҙ ҡайтып еттек. Утынды һыйыр аҙбары эргәһенә бушатып, арба тәгәрмәстәрен һурып алып, соланға индерҙек. Киске намаҙға тиклем өләсәйҙең өйҙәге эштәренә ярҙамсы кәрәкмәй, буғай. Мин ireккә, урамға йүгерҙем. Малайҙарҙы саҡырып сығарып, бура уйнарға йәки ҡыйыҡ һуғырға була. Тик минең башҡа икенсе уй төштө лә, Миңнәстау битенә йүгерҙем. Ҡолонло бейәләр һаман шунда үлән утлай. Ә туры бейә миңә башын күтәреп ҡараны, ҡолаҡтарын шымартты. Тик асыуы оҙаҡҡа булманы, ҡолаҡтары кире ауышты. Ныҡ итеп миңә бер ҡарап, үлән ашарға тотондо. Ҡолонона имеҙергә һөт кәрәк бит. Ҡыбырҙамайынса оҙаҡ ҡына ҡолондо күҙәттем. Бигерәк матур, йүгереп кенә барып ятаҡҡы килә. Эйе шул, юҡҡа түгелдер: күптәрҙең әсәйҙәре балаларын яратҡан саҡта «быҙауым» йәки «бәрәсем» тимәй, «ҡолонсағым» тиҙәр. Оҙаҡ ҡына торғас, мин ҡолонға яҡын киләлдым, ул да минән ҡурҡмай, күрәһең. Күпмелер ваҡыттан һуң муйынын һыйпатырға рөхсәт итте.

Минең өсөн ҡолонға ҡул тейҙереү — ҙур шатлыҡ, инәһе лә борсолмай ғына үлән ашауын дауам итә. Өләсәйҙең туры бейә өсөн йәш түгеүе минең өсөн яңылыҡ түгел. Олатай колхозға ингәндә, алты егеү атын биргән, ә үҙенең ихатаһында ат тоторға рөхсәт булмаған. Һөҙөмтәлә, утын-бесән еткереү атһыҙ башҡарылырға тейеш булып сыға. Колхоз аттары менән файҙаланыусылар күп, тик беҙҙең баҡсаға... егелгән ат ингәне юҡ. Өләсәй был турала әсенеп әйтә:

— Хәҙерге ваҡытта колхозға буш тоҡсай тотоп ингәндәр генә ат егә. Ә алты ат биреп ингәндәрҙең бер ниндәй ҙә хаҡы юҡ. Ғәрлек...

Бәләкәй арба һөйрәп утын ташырға өйрәнгән өләсәй, бер һыйырлыҡ бесән әҙерләү ҙә уның өсөн ҡаты эш түгел. Ә илауының сере икенселә.

— Беҙҙең аттар ер һелкетеп атлар ине. Өс-дүрт бейә ҡымыҙы менән генә лә ҙур мәжлес йыйып була торғайны. Ә хәҙер беҙҙең колхозға киткән аттарҙың ҡабырғаларын алыҫтан да һанап була. Ярай, үҙенә оҡшамағас, сәүит хөкүмәте беҙгә көн бирмәй, ә атта ни үсе бар икән?

Эйе, өләсәй колхоз аттарын йәлләп илай.

Борон-борондан башҡорт ғаиләһе атһыҙ йәшәмәгән. Әгәр хужа кеше (оло аттарҙы ғына иҫәпләгәндә) алты баш ат тотһа, ул абруйлы кеше булған. Атһыҙ кеше исемһеҙ кешегә тиң күрелгән. Эйе, боронғо башҡорттар «Исемең кем?» тип һорамағандар, «Атың кем?» тигәндәр. Мин сабый саҡтан ололар һүҙенә ҡолаҡ һалырға өйрәндем. Олатай тере ваҡытта дуҫ-иштәре менән һөйләшеп ултырыр, ярты әңгәмәләре ат тураһында булыр ине. Күрәһең, башҡорт үҙенең тормошон атһыҙ күҙ алдына килтерә алмаған.

Батша ваҡытында Әптек халҡы йылҡы малын күпләп аҫраған. Ул осорҙағы иң бай кеше — Ильяс байҙың аттарын һыу эсерергә ҡыуһалар, көтөүҙең һуңғы осо һарайҙан сығып бөткәндә, көтөү башы Һәләүектән һыу эсеп, һарайға әйләнеп ҡайтаулар булған. Һо-о, һарайҙары урынындағы тиреҫте колхоз тракторҙар менән ун йылдан ашыу ваҡыт яландарға ашлама итеп ташытты. Ул тиреҫ үҙе бер яу ине. Таш кеүек ҡатып өлгәргән, балта менән киҫеп тейәнеләр. Был эшкә ярты ауылды ҡыуҙылар. Мин тиреҫ киҫеүселәрҙе ҡарап торорға яраттым. Мәҙәк һөйләй торған урын булды ул.

Колхоз ойоштороу эшсән кешеләрҙе иректе эштән мәхрүм итте, эшһөйәр ирҙәрҙең эшкә дәрттәре һүнде. Ә аттар өсөн колхоз ҡаты трагедияға әйләнде. Әгәр ул көндөҙ колхоз эшен эшләһә, кисен егеүсенең эшен башҡарҙы. Ә ашау хәлен һөйләп тораһы ла түгел. Әҙерләнгән бесән һыйыр, һарыҡ малына етмәне. Яҙға табан колхоздың күп аттары «күтәртә» торғайны — хәлһеҙлектән тора алмай башлайҙар.

Һуғыш ваҡытында аттарҙа ҡорсаңғы күбәйҙе. Аттың тиреһе лишай менән ҡаплана, ат хәлһеҙләнә. Район белгестәре етәкселәрҙең ҡушыуы буйынса «дауалау» ысулын таба: «газокамера» яһайҙар. Ерҙә оҙон, тәрән соҡор ҡаҙып, өҫтөн ҡаплайҙар ҙа унда насар еҫле газ ебәрәләр. Артабан шул газлы соҡор аша аттарҙы ҡыуып үткәрәләр, имеш, шул ысул менән ҡорсаңғыны бөтөрөп була. Ахмаҡтар, уны бөтөрөр өсөн аттарҙы ашатырға һәм һәр атҡа бер генә ат эше бирергә кәрәк. Был турала хатта наҙан башҡорт та белә, ә түрәләр белмәне лә, белергә лә теләмәне.

Ауыл малайы булараҡ, күп көндәрем аттар менән үтте. Ат менән ниндәй генә хәлдәргә осраманым. Минең уйымса, донъяла иң аҡыллы хайуан — ат. Күптәрҙең әйтеүенсә, ат барыһын да аңлай, тик әйтергә теле генә юҡ. Күп тапҡырҙар сабып барған ат өҫтөнән ҡолап төштөм. Ә ат үҙе тәгәрәһә тәгәрәй, тик ҡолаҡкан кешеһенә тояғы менән баҫмай, һәр бер аттың да, кешенеке кеүек, үҙенә күрә холҡо була. Эйе, һыйыр, һарыҡ һәм башҡа малдарҙың холоҡтары оҡшаш, ә аттыҡы — үҙенә бер төрлө. Һуйған ваҡытта аттың күҙ йәше лә сыға, тиҙәр, күргәнем юҡ. Ат һуйған ерҙә тора алмайым, ситкә ҡасам. Минең өсөн был — ҡыйын ваҡиға.

Ат тураһында әҫәрҙәр күп яҙылған. Кинофильмдарға килгәндә инде, ат – күренекле артист та, һуғышсы ла, төрлө трюктар үтәүсе лә. Мин ат тураһында күп уҡырға яраттым.

Аттарҙың иң шәп тоҡомо – ғәрәп тоҡомо икән. Төркмән халҡының да данлыҡлы ахалтекин тоҡомо бар. Ғөмүмән, ирек яратҡан халыҡтар ғына ат ҡәҙерен белгән, күрәһең. Башҡорт атын да мин шул иҫәпкә индерәм. Ул ахалтекин аты кеүек мөһабәт түгел, әлбиттә, ә шулай ҙа данлыҡлы. Күпте күргән, алыҫ походтарға йөрөгән. Минеңсә, иң сыҙам, аҡыллы ат.

Мине йәш ваҡытымда аптыраашта ҡалдыра торған бер ысынбарлыҡ йөҙәтте: элек, батша ваҡытында, Башҡортостан ерендә баҡыр иретеү заводтары төҙөгәндәр. Уларҙың һаны егермегә еткән. Улар төрлөһө төрлө урында, тик береһе лә баҡыр сеймалы сыҡҡан урында түгел. Баҡһаң, заводтарҙы утын күп булған урындарҙа төҙөгәндәр, ә руданы ат менән ташығандар. Бына нисек башҡорт атының кәрәклеге асыҡланған. Ул ваҡытта Рәсәйҙең күп атлы башҡа өлкәләре булмаған, ә баҡыр иретеү бик килемле һаналған. Әйтәйек, Мәскәүҙәге иң матур йорттарҙың береһе – Пашков йорто тулыһынса Башҡортостандағы баҡыр аҡсаһына төҙөлгән. Ә дөйөм алғанда, Мәскәүҙең, Санкт-Петербургтың күп өлөшө Башҡортостан байлыҡтарына таянып төҙөкләндерелгән. Былай ғына ла түгел, иҫәпләй башлаһаң, тағы аптыраш: беҙҙең Верхотор заводы ғына миллион ярым бот баҡыр биргән. Ә ҡабатлаһаҡ? Юҡ шул, аҡса төҙөлөштәргә генә китмәгән. Был ике ҡаланың туймаҫтары Парижға, Женеваға, Баден-Баденға йөрөргә яратҡан. Тимәк, башҡорт аттары Наполеонды ҡыуып ҡына бармаған, ә эшләгән эштәре менән ул ҡалаларҙы төҙөкләндерергә лә ярҙам иткән. Бына шулай, туғандар.

...Йәйҙең йәмле көндәренең береһендә Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәленә килдем. Тәүҙә үҙем иғтибар менән ҡараным да, аҙаҡ башҡа кешеләрҙең ҡарағанын күҙәтә башланым. Шул саҡ минең янға Киевтан килгән бер бәндә килеп баҫты ла һорау бирҙе:

– Что он сделал такого, чтобы воздвигнуть ему такой памятник?

Мин күп уйлап торманым:

– Да, он достоин того, и его лошадь заслуживает этого. Долго объяснять, книги надо читать,– тинем.

Белмәйем, бәлки, Петербургтағы атлы Петрҙың һәйкәле лә башҡорт баҡырынан ҡойолғандыр. Бик мөмкин.

**Парсалар**

*Ҡарабаш турғайҙар үҙ-ара һуғышмай. Ә бер-береһен ҡурҡытыу ғәҙәттәре бар (ритуал). Үҙ-ара һыйыша алмаған ҡоштар – сәүкәләр.*

## Уңмаған юл

– Бөгөн ҡалаға китәбеҙ, арбаны ҡараштыр...

Атайҙың иртәнсәк әйткән һүҙе минең өсөн яңылыҡ түгел, ә шулай ҙа эсемдә ҡыуаныс өҫтәлә. Эйе, ҡалаға барыу һәр кемгә эләкмәй. Ишембайға күптәр бара, ә бына Стәрлетамаҡҡа барыу ҡатмарлыраҡ, алыҫ. Ә арбаны, тейәлгән йөктө рәтләү – минең эш. Арба күсәре майланған, тейәлгән һөйәндәр яҡшылап бәйләнеп тартылған. Һөйән өҫтөнә йәшел бесән дә һалынған. Мин әҙер, ә иртәрәк китеп булмай, сөнки көпә-көндөҙ колхоз аты менән юлға сығыу хәүефле. Кискә табан ғына юлға сығабыҙ.

Атты шәп ҡыумайым. Сәлихты тиҙ үтәбеҙ.

Стәрлетамаҡҡа ҙур теләк менән барам. Ә сәйәхәт ҡыуаныстан ғына тормай, ни тиһәң дә, дилбегә минең генә ҡулда. Бына урманға боролдоҡ, минең күңелемде

борсолоу ялмап алды. Үткәүелгә яҡынлашабыҙ. Үткәүел – бәләкәй генә йылға, ул Торатау аҫтынан ағып сыға ла Һәләүеккә барып ҡушыла. Йәйәүле кеше Үткәүелде һикереп сыға ала, ә ат арбаһы менән сығыу... Ҡырсын өйөлгән күләүекте үтеү колхоз аты өсөн анһат түгел, етмәһә ярға сыҡҡан урыны текә. Атай арбанан төшә лә Үткәүелде һикереп сыға. Ә миңә арбанан төшмәҫкә ҡуша. Ә мин төшмәй булдыра алмайым, әҙ генә булһа ла атҡа ярҙам итергә тырышам, арбаны этәм. Үткәүелде уҙғас, йәнә бер бәлә – Мәлгәш. Уның һыуы Үткәүелдән дә тарыраҡ, ә ат өсөн сығыу урыны уңайһыҙ. Тәрән, батҡаҡлы һыуға тубыҡтан батып йәнә арбаны эткесләйем. Атай мине әрләй, имеш, мин арбанан төшмәҫкә тейеш.

Бына Мәлгәште лә үттек. Тамам кис булды. Торатау биленә килеп еттек. Беҙ бында һәр ваҡыт туҡтайбыҙ. Атайым арба аҫтына тормоз һала. Тормоздың ике төрө бар. Тәүгеһе ябай: атай бер артҡы тәгәрмәсте ныҡ итеп арба йәшәнкәһенә бәйләй, тәгәрмәс әйләнмәй. Икенсеһендә инде атай оҙон ғына ағас киҫеп алып, күсәр аҫтынан үткәрә, әлеге арбаның ағасына бәйләй, бер тәгәрмәс юлға теймәй бара. Эйе шул, Торатау биле текә, бейеклеге лә етерлек. Ә бөгөн миңә атай тормозһыҙ төшөргә ҡуша, үҙе балта тотоп, арбанан төшөп ҡала. Миңә ҡурҡырға ярамай, атайым һиҙеп ҡалһа, йоҙроғон төйөп әрләй башлай. Ҡурҡыу мине ташламай, нишләйһең, беҙҙең аттың сбруяһының ышлыяһы юҡ, ә һөйән тейәлгән арба яҡшы этәрә, тауҙың яртыһына еткәндә, ат йән-фарман саба. Мин ҡотом осоп һөйәндәр бәйләнгән арҡанға йәбешкәнмен, тәгәрәп төшмәм. Ә бына һөйәндәр аттың арт һанына етә. Ҡот осорлоҡ тиҙлектә арба менән үҙәндең тигеҙ урынында үргә тәгәрәй. Аллаға шөкөр, ҡотолдоҡ... Туҡта!

–Тпру!

Ә быныһы нисек? Ат башын урта йәштәрҙәге бер ир матҡып тотҡан.

– Ты откуда?

Ә үҙе үҙ күҙҙәренә ышанмай – ат өҫтөндә сибек кенә алты-ете йәштәрҙәге малай йораты.

– Из Аптика...

Шулай тинем, килгән яғыма бармаҡ менән төртөп күрһәтеп.

–А-а...

Был ир ат башын ҡулынан ысҡындырып, икенсе ҡулындағы балтаһын буш ҡулына күсерҙе лә һәнәк тотоп торған иргә буш ҡулы менән күрһәтте.

Атайым ҡулына балта тотҡан килеш тауҙан төшөп килә. Мин атты ҡыуа һалдым.

Эңер. Урыҫ ауылы. Бер өй алдында бер нисә малай-шалай, ике-өс ҡыҙ уйнап йөрөй. Береһенең ҡулында балалайка. Йырлайҙарҙыр инде, күрәһең. Өй тәҙрәләре шомло ялтырай. Был ауыл түгел – хутор. Шихан тип атала. Ауылды уҙғас, атты үлән ялмарға ебәрәм. Атайҙы көтәм. Бына атай балтаһын иңбашына һалып килеп етте.

– Әйҙә тиҙерәк, ҡараңғы төшә.

Беҙ ҡырсын юлға сыҡтыҡ.

Һәр яҙ яҡын-тирәләге башҡорт ауылдары йәштәре Торатауға менә. Уйынкөлкө, күңел асыу тау башында үткәрелә. Күңел асыусылар янына ошо ауылдың урыҫтары ла менә. Ыҙғышһыҙ булмай, ә ыҙғыш йоҙроҡлашыуға килтерә. Йоҙроҡтар менән эш бөтмәй, күҫәктәр күтәрелә. Күпселек өҫтөнлөк ала. Урыҫтар туҡмалыуҙары өсөн үткенселәрҙән үс алыу маҡсатын ҡуя. Ә беҙҙең йәштәр Торатауға менмәй, беҙҙә Сағыл бар, шунда күңел асалар. Тегеләргә атай шулай аңлатҡан.

Бына беҙ Ҡарайған зыяратына килеп еттек, ҡунаһы урыныбыҙ ошонда. Мин атты туғарам, тышаулап, дилбегә баулап утларға ебәрәм.

Ҡараңғы. Йоҡо баҫа. Эх, һорауҙар күп, бынау зыярат тураһында ғына әллә күпме легенда бар. Атайым берәүһен генә булһа ла һөйләһен ине... Атайға инәләм.

– Ярай, иртәгә һөйләрмен. Йоҡла хәҙергә.

Бик тиҙ йоҡоға китәбеҙ. Иртәнсәк тегендә-бында төнәүгә ҡалған кешеләрҙе шәйләйем. Кисә ҡараңғыла күрмәгәнмен икән. Атты егеп ҡуҙғалабыҙ. Алда – Ағиҙел күпере, ә атайым атты туғайға борорға ҡуша. Туғарылмаған килеш үлән ашарға ебәрәм.

– Улым, һин күпергә барып кил әле. Кемдәр күренә икән? Оҙаҡ йөрөмә.

Ә мин күпергә яҡын бармайым, ситтәнерәк барып ҡарап торам. Өс-дүрт кеше, береһе хәрби кейемдә. Бына күпергә арбаһына бүрәнә тейәгән юлсы үрмәләй. Көтөп тороусылар арбаны туҡтатты. Бына һиңә мә, бүрәнәләрен бушаттыралар инде әллә? Атайға бара һалып барыһын да һөйләп бирҙем.

– Улым, һөйәнгә документ юҡ, һин хәҙер мине тыңла.

Ул минең ҡулыма арыу ғына муйыл сыбығы тоттора. Һөйән өҫтөнә менеп, атты юлға сығарам, күпергә юл тотам.

Ағиҙел аша күпер Белорет яғынан килгән юлға һалынған, күпер – ағастан. Ул яҙғы ташҡын алдынан һүтелә. Май айында яңынан төҙөлә. Бына минең арба оло юлға сыҡты. Күпер алда. Күпер алдында өс ағас йорт, юлсыларҙыҡы. Бына ошо йорт алдында туҡтаталар ҙа инде. Береһе миңә иғтибар итте, буғай. Ә мин, бар көсөм менән атҡа сыбыҡ менән һуғып, алға ҡыуам. Ат юртмай, саба тип әйтерлек. Арба дөбөр-шатыр килеп күпер таҡталарына һуғып үтә. Артыма әйләнеп ҡарайым – ҡыуыусы юҡ. Ярты саҡрым тирәһе сапҡас, атты туғайға борам да үлән ашарға ебәрәм. Бер аҙҙан атай килеп етә. Ул арбаға ултыра ла, беҙ артабан китәбеҙ. Кирбес заводында машиналар күбәйә. Эх, ошо урындарҙа, исмаһам, атай йүгәнде минең ҡулдан алһа ине... Машиналар арба күсәрен эләктереп алып китер кеүек. Ағиҙелдең икенсе күперендә лә, Ашҡаҙар күперендә лә туҡтатыусылар юҡ – быныһын атай белә. Бына беҙ баҙар эргәһендәге төрмә ҡоймаһы янында туҡтаныҡ. Мин ат алдына үҙем әҙерләп килтергән йәшел бесәнде һалам. Арығанға күрә, ат туҡ булһын инде.

Йөгөбөҙҙө баҙарға индерәбеҙ, атай ниңәлер кәйефһеҙ.

– Сәғит булаша, йәнәһе, ул маклер. Һатып булырмы, юҡмы?..

Көтәбеҙ, ә теге Сәғит исемле татар, кешеләрҙе ситкә алып китеп, ниҙер бышылдай. Имән ағасы һорайҙар, ә беҙ һөйән менән.

– Беҙҙең колхоз аты менән имән ағасы килтереп булмай, юл да алама,– ти атай. Көтәбеҙ. Һатып алыусылар ағастарҙы ҡарап-ҡарап китә.

– Уңманы юл былай булғас...

Атай тәрән көрһөнә. Ҡайһы саҡта кешеләр ағасты баҙар эсенә индермәҫ үк һатып алып бөтә. Ә бөгөн – юҡ.

Атай менән икәүләп Совет урамына йүнәләбеҙ, унда атайымдың яҡшы танышы йәшәй. Һөйәндәрҙе ишек алдына ауҙарабыҙ. Теге татар атайға үтескә бер аҙ аҡса бирә, һөйәндәрҙе лә һатырға ризалаша. Осһоҙ була инде. Беҙ атайҙың баҙар эргәһендәге тағы бер танышына барабыҙ, атты туғарып, уға һыу эсерәбеҙ. Мине ҡыҙыҡһындырғаны – ҡапҡа янындағы хәйерселәр ултырған мөйөш. Хәйерселәрҙең һүҙҙәрен, ҡыланыштарын, йырҙарын отоп алырға тырышып бер булам. Ҡайтҡас, малайҙар, һөйлә лә һөйлә тип, быуынды алалар бит юғиһә. Уларға һөйләү генә түгел, күрһәтеү ҙә кәрәк. Мин, ҡыҙыҡҡа әүрәп, артта ҡалам, атай мине ҡаты

әрләй. Әҙ-мәҙ ашамлыҡтарҙы алғас, ҡайтырға сығабыҙ. Их, бынау матур өйҙәрҙе оҙағыраҡ текләп ҡарап тораһы ине! Дилбегә форсат бирмәй шул.

— Алдыңа ҡара!

Атайым бер нисә тапҡыр ҡысҡырҙы инде. Миңә бигерәк тә ҡыҙ баштары төшөрөлгән йорт оҡшай. Күҙҙәремде ала алмайым, ниндәй матурлыҡ.

— Күҙең тондомо әллә?— тип аҡыра атай.

Ҡайтыу юлына боролабыҙ. Ә ҡайтҡанда атты ҡыуырға ла, дилбегәһен тартҡыларға ла кәрәкмәй. Ат юлды үҙе белә, үҙе ашыға. Бына Торатау биленә менәбеҙ. Тау үренә менгәс, атты ял иттерәм. Колхоз аты ял итә белмәй, һаман мороно менән үләнгә ынтыла.

Беҙҙең халыҡ элек-электән ат менән ҡалаға йөрөгән. Ә был юл ҡурҡыныс. Әлеге беҙ тормозлап төшә торған урында баҙарҙан ҡайтҡан башҡорттарҙы талағандар. Эйе, үргә менгәндә тиҙ ҡасып булмай. Ә яҡын-тирәләге урыҫтар үҙҙәре таларға сыға, үлтереү-фәлән дә булғылаған. Баҡтиһәң, Талбазы яғында ла талау урыны булған икән, Ҡанлы Йылға тип атала икән. Раевкала ла кеше талау өсөн йәтеш урын — урман, юл соҡор аша үтә. Урыҫ хуторҙары талау урындарына яҡын урынлашҡан. Бына шулай, ул ваҡытта ла талап байыѓыусылар булған.

Талау юлда ғына булһа... НЭП заманында әсәйемдең Сәлих ауылында йәшәгән бер туған ағаһы ҡышҡы көндә Стәрлетамаҡ баҙарына бесән һатырға барған. Һатып алыусы бесәнде ишек алдына илтергә ҡушҡан. Зәйнулла бабай, ул-был булып ҡуймаһын тип, дуҫын иҫкәрткән. Ул арба менән — алдан, дуҫы арттан барған. Зәйнулла бабай ҡапҡа эсенә инеп киткән дә ғәйеп булған. Дуҫы, бабай сыҡмағас, тауыш ҡуптарған, ярҙам һораған. Бер кем дә ярҙамға килмәгән. Шулай итеп, Зәйнулла бабайҙы Сайгановка урамы урыҫтары үлтергән. Ул ваҡытта ла закон кеше талаусылар яғында булған. Бына шулай.

## Мәсет

*Алкин йәмһеҙ, мәсетһеҙ...*

**Бөйөк Ватан һуғышына**
**китеүселәрҙең йырынан**

Өйҙәрҙең күбеһе йүкә ҡабығы менән ябылған, бер нисә генә тимер башлы йорт бар. Ҡайһы берҙәренең түбәһе таҡта менән ҡапланған, тик һалам менән ябыу ғәҙәте юҡ. Өйҙәрҙең күбеһе — уҫаҡтан, ҡарағайҙан һалынғандары бер нисә дана ғына, улары ла иҫкергән. Әптек ауылында ҡоймалар юҡ, һәр өй ситән менән уратып алынған. Шулай уҡ ситәндән әтмәләүле өйҙәр ҙә байтаҡ. Эйе, хәлһеҙерәк ғаиләләргә ауыл халҡы күмәкләшеп өмә яһап, ситән өй төҙөп бирә. Колхоз былдай эшкә ҡыҫылмай, уның ярлылыҡта эше юҡ, ул бит халыҡты коммунизмға алып бара.

Шулай ҙа Әптектә мөһабәт, матур бер бина бар: ул — мәсет. Мәсет эре ҡарағайҙан һалынған, ике ҡатлы, манараһы ла бейек, ҡупшы. Уның һәр урыны, һәр өлөшө еренә еткереп эшләнгән: иҙән таҡталары булһынмы, түбә таҡталарымы, баҫҡыстары — барыһы ла йышылған ҡарағай таҡтанан яһалған. Таҡталар араһындағы ярыҡты ла күреүе ҡыйын.

Мин белгәндә мәсет таш ҡойма менән уратып алынғайны. Ҡойма эсенә типтигеҙ йәшел сиҙәм үҫкән. Беҙгә, яланаяҡ малайҙарға, бик тә уңайлы. Иркенләп йүгерешәбеҙ.

Беҙ бәләкәй саҡта мәсет клуб ролен башҡарҙы, бер өлөшө балалар баҡсаһы

булды. Беренсе ҡатында иген киптереү ҙә ойошторолдо.

Тик, дөйөм алғанда, Әптегебеҙ, Һәләүектең хозур ярында ултырыуына ҡарамаҫтан, үткән-сүткәндәргә күркәм ауыл булып күренмәгән, әлбиттә. Беҙ был турала Әптек төрмәһендә ултырып сыҡҡандарҙан ишеткеләй инек.

Мәсет иһә ауылға ҙур йәм өҫтәй, күпкә күркәмерәк күрһәтә. Мин бала саҡта ауылдан ситкә сыҡһам, уның күренештәре менән ҡырҙан һоҡланырға яраттым. Мәсет тә булмаһа, был күренеш шаҡтай фәҡирлекте аңлатыр ине. Ә бер манараһы ғына ауылға ни тиклем күркәмлек өҫтәй! Мәсеттең өҫкө ҡатына менеү ниндәйҙер шатлыҡ уята, тулҡынландыра торғайны. Тәүге киноны ла беҙ мәсеттә ҡараныҡ. Исеме лә хәтеремдә ҡалған: «Это было на Донбассе». Ул ваҡытта кинолар тауышһыҙ була торғайны. Әле лә хәтерләйем: фильм бара, ә тамашасы экранда яҙылған һүҙҙәрҙе ижекләп уҡый. Ә мин ижекләмәй уҡый алам, тик ҡысҡырып түгел, үҙ алдыма ғына.

Әптеккә килтергән һәр бер киноны ҡарау минең башыма ла инеп сыҡманы. Ә «Салауат Юлаев» фильмын килтергәс, бөтә ауыл зыҡ ҡупты. Әптек байрам кисерҙе, мәсет алдына көндөҙ үк халыҡ йыйылды, һәр кем яҡшыраҡ кейемендә сығырға тырышты, һәр ғаилә тулы килеш киноға эркелде. Был хәл август башында булды. Йәйге йәмле көн. Эйе, башҡалар өсөн байрам, ә миңә иң ауыр көндәрҙең береһе. Сөнки мин киноға инергә аҡса таба алманым. Шулай булһа ла, мәсеткә килдем. Аҡсаһыҙ малайҙарҙың мәсеттәге кино залына инә торған бер нисә ысулы бар. Тик мин улар менән файҙаланырға яратманым, аҡсам булмаһа, барманым. Ә «Салауат Юлаев» фильмы – минең өсөн дә, башҡалар өсөн дә ҙур ваҡиға. Мин, аҡсаһыҙ булһа ла, был юлы мәсеткә килдем.

...Киносы ишек эргәһенә бер генә кеше үтерлек итеп өҫтәл ҡуя. Билет алғандар шул аралыҡтан уҙа. Мин дә киносы менән уҙған кешенең аяғы араһынан дүрт аяҡлап залға үттем. Эстә кешеләр ултырған ширлек аҫтына йәшерендем. Ләкин киносы, билет һатып бөткәс, һәр ширлек аҫтын тикшереп сыҡты ла мине ҡыуып сығарҙы. Кино башланды, ә ишектәр бикле. Мин бүрәнәләрҙең ярығына йәбешеп икенсе ҡатҡа мендем дә быялаһыҙ тәҙрә аша залға уҙҙым. Фильмдың бер катушкаһын ҡарап бөткәс, киносы мине тағы ла килеп тапты һәм тағы ла типкеләп сығарҙы. Өсөнсө тапҡыр манараға бара торған баҫҡыс аша мәсет түбәһенә мендем. Мөрйә төбөндәге таҡта алына. Шуны ситкә шыуҙырып, залға түбәнән һикерҙем һәм тағы ла бер катушка ҡарап өлгөрҙөм. Тик артабан ғауға сыҡты: «Пожар, пожар»,– тип ҡысҡырҙылар, кино күрһәтеү туҡтатылды. Бар халыҡ пожар һүндерергә йүгерҙе: иген баҫыуы яна икән. Янғын сыҡҡан урын ауылдан йыраҡ. Беҙҙең кеүек йәйәүле малайҙарға барырға тура килмәне. Янғын һүндереп ҡайтҡас, мәсет алдында тиҙ генә йыйылыш булып алды. Түрәләр, янғын сығарыусыны табырбыҙ һәм ул тейешле яҙаһын алыр, тип янаны. Аҙаҡ киноны ҡарап бөтөргә булдылар. Бар кешене лә билетһыҙ индерәләр, имеш. Мин дә башҡалар менән эскә уҙырға теләгәйнем дә, кино күрһәтеүсе мине уҙғарманы. Шулай итеп, тәүге килгән «Салауат Юлаев» фильмын тулыһынса ҡарай алманым. Ни эшләйһең, был минең өсөн күңелһеҙ ваҡиға булып хәтеремә һеңде.

Колхоз клубы булараҡ, мәсет бинаһы ҡәҙер күрмәне: бысраҡҡа батты, ремонтланманы, аҫҡы ҡаты серей башланы. Матур манара ла ҡурҡыныс тыуҙырыу урынына әйләнде, сөнки ямғыр һыуы таҡталарын сереткән. Колхоз хужалары үҙҙәре лә шөрләй башланы. Илленсе йылды мәсетте һүтергә ҡарар ҡабул иттеләр. Ә Әптек кешеләре матурлыҡ биреп торған, изгелек урыны булған йортто һүтергә ризалашманы. Шуғалырмы, идара Биксән ауылы балтасыларын алып килде.

Улары арыу ғына эсеп алғандар икән. Арҡан менән манараның уртаһынан бәйләп ергә тарттырҙылар. Беҙ, бигерәк тә малай-шалай, ауыҙыбыҙҙы асып ҡарап торабыҙ. Күп көтөргә лә тура килмәне, төбөнән киҫелгән манара ергә килеп тә төштө. Халыҡ күп йыйылғайны. Тик бер һүҙ әйтеүсе лә юҡ. Хатта беҙ ҙә өндәшмәнек.

Мәсеткә иң яҡын өй Яҡуп бабай Хәйбуллиндыҡы булды. Ул ҡапҡаһынан ҡарап торған, манара ауғас: «Йә Хоҙай...» – тип кенә әйтте. Шунан манаранан мәсеттең айын барып алды ла, иң ҡәҙерле нәмә кеүек ҡуйынына ҡыҫып, өйөнә инеп китте. Былай ҙа йәмһеҙ Әптек ауылы ҡотһоҙ, динһеҙ булып ҡалды. Ә ситтән ҡарағанда, ауыл йәтим кешегә оҡшаны. Аҙаҡ етемлегенә лә күнекте.

## Билдәмә

Әсәй тәҙрәгә күҙ һалып, аптырай төштө.

– Ғәҙелбаныу әбей килә ята. Беҙгә килә, ниндәй йомошо барҙыр, белмәйем.

Был һорауҙы әсәй үҙенә төбәне, күрәһең. Ғәҙелбаныу инәй беҙгә килеп йөрөмәй шул. Әсәйҙә борсолоу ҙа бар: Ғәҙелбаныу инәйҙе сәй эсерергә ултыртырға беҙҙә бер нәмә юҡ, түрбашта таҡырсыҡ. Ә һирәк килгән оло кешегә ҡәҙер-хөрмәт мотлаҡ.

Ишектән ингән инәй, улай-былай ҡаранып, иҫәнлек һорашты, урындыҡҡа ултырғас, тағы тирә-яҡты байҡап алды.

– Арыу тораһығыҙ, буғай, Хоҙай бирһә, киләһе йәйгә үҙегеҙ ҙә өй-ҡуралы булырһығыҙ.

– Әллә шул, өйгә өйөм кәрәк, ә беҙҙең хәлде күрәһең, ашарға еткереп булмай,– тип әсәйем үҙенең хәлен аңлата.

– Эй Алла, кемгә һөйләйһең, бына беҙ ҙә донъя көтәбеҙ, ә етешеп булмай. Хөкүмәт һаман налог һорай, заем алырға ҡуша. Ә аҡсаны ҡайҙан табырға юлды күрһәтмәй.

Улар, һәр кемеһе үҙ уйына бирелеп, байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы.

– Ә, Кинйәбикә! Һеҙҙең һуғымығыҙ юҡ, шикелле, ит-фәләнде ҡайҙан алаһығыҙ?

– Итте һирәк күрәбеҙ, үткән аҙна бешерҙек, аталары колхоз һуғымынан әҙ генә өлөш алып ҡайтҡайны.

– Эйе шул, итһеҙ ҡыйындыр, йөрәк тала. Балалар итле аш күрергә тейеш, үҫәһеләре бар.

– Нишләйһең, беҙҙең балалар әрһеҙгә өйрәнгән инде.

– Эйе шул, донъяһы шулай булғас, кеше әрһеҙгә өйрәнә. Колхозға ышанып ни эшләмәк кәрәк...

– Колхоз бушҡа эшләтә, ә бына совхозда эшләгәндә тамаҡ туҡ ине лә.

– Ярар, Кинйәбикә, оҙаҡ ултыра алмайым, бабай ебәргәйне, бөгөн һарыҡ һуйҙы, һуғым һәйбәт, һимеҙ һарыҡ, теләһә кемгә бирергә түгел, һин дә ике-өс кило алһаңсы, аҡсағыҙ барҙыр.

– Ҡайҙа, ти, ул, Ғәҙелбаныу еңгә, беҙҙә ниндәй аҡса булһын. Юҡ шул.

– Уф Алла, беҙгә лә бер һарыҡ мулыраҡ шул, яртыһын һатыу мотлаҡ. Аҡсағыҙ булмаһа ла, көтәсәккә бер-ике кило ал, ит үлсәнгән, әле бер кемгә лә бирмәгәнбеҙ. Кинйәбикә, балаларың һурпа тәмен онотмаһындар. Эйе, эйе, беҙгә кил, арыураҡ ерен алып ҡайт.

– Әллә шул, әле аҡса юҡ.

– Ярар, ярар, яйы сыҡҡас бирерһегеҙ. Биктимер ҡарт һеҙҙе белә, көтәсәккә бирергә рөхсәте булыр. Әйҙә, минең менән бергә, алып ҡайт.

Минең әсәй тиҫкәреләнеп торманы, тиҙ генә ҡатаһын кейеп, Ғәҙелбаныу әбей артынан сығып китте. Күп тә үтмәне, әсәй ашъяулыҡҡа төрөлгән ит киҫәге алып ҡайтты. Тиҙ генә усаҡҡа ут ҡабыҙҙы, ҡаҙанда һыу ҡайнап сыҡмаҫ элек ит сайҡалып, шунда сумырылды. Өй эсе йәмләнде, усаҡта ут янһа, ҡаҙанда ит бешһә, өйҙә йәм өҫтәлә, күңел күтәрелә. Ҡаҙан ҡапҡасын япҡан әсәйем, тәҙрәгә күҙ һалғас:

– Аһ-аһ, Ғәҙелбаныу инәйең йүгереп киләсе. Тағы ниндәй йомошо бар икән?

Ғәҙелбаныу инәй ишектән бик ашығып инде. Иң башта усаҡҡа, ҡаҙан яғына күҙ һалды.

– Һай! Кинйәбикә, әллә һин билдәмәне ҡаҙанға сумырып та өлгөрҙөңмө?

– Сумырҙым шул, көтөп тораһы юҡ, ашарға бешереү ваҡыты еткән, ә ит оҙаҡ ҡына ҡайнарға тейеш.

– Уф, Кинйәбикә! Беләһең бит инде Биктимер ҡартты. Бар, йүгер, ти, ҡаҙанға сумырып өлгөрмәгәндер, ти. Билдәмәне кешегә бирмәйҙәр, ахмаҡ, ти. Нишләйем икән, билдәмәне алып ҡайтырға ҡушты. Ә һиңә бер алғы ботон бирергә риза. Нишләйбеҙ?

– Һуң... нишләйбеҙ? Белмәйем, ҡара, ҡаҙан ҡайнап сыға.

Әсәй ҡаҙан ҡапҡасын күтәрә биреп:

– Ҡара, һурпаһы ла сыға башлаған. Билдәмә бит, майлы.

– Ай эттәгенәһе-е-е... – Ғәҙелбаныу инәй ауыр итеп һуланы ла урындыҡтан күтәрелде. – Бына бит, үҙ башыма бәлә, ул хәҙер билдәмә өсөн ике-өс аҙна битәрләп йонсотор инде. Уф Алла! Ашамағаным билдәмә... – тип сығып китте.

Эйе шул, билдәмә беште, ә беҙ көлөшөп билдәмә ашанык, һурпаһы ла бик тәмле булды. Биктимер ҡарттың һуйған ите татлы була,тип кешеләр юҡҡа һөйләмәйҙәр.

Шулай ҙа беҙ Биктимер бабайҙы, һаранырак кеше икән, тип уйлап ҡуйғайнык. Юҡ шул, ҙурая төшкәс, Биктимер бабайҙы йыш күрергә тура килде. Тәртип яратҡан кеше, һәр нәмәнең ҡәҙерен, урынын белеүсе кеше. Билдәмә менән бәйле мәҙәктең дә үҙенсә мәғәнәһе барҙыр, моғайын. Ғәҙелбаныу инәйҙе ҡаҙанға төшкән ит артынан юҡҡа ебәрмәгән ул, һаранлыҡ түгел, ә ит йолаһы. Башҡорттар ит бүлеү тәртибен бик яҡшы белгән. Күрәһең, был мәҙәк «онотторға ярамай» тигәнде аңлатҡан. Ә беҙҙең заманда ит ашау һирәкләнде, хакимдар “ас халыҡ – тыңлаусан” тигән уйҙа булды.

Биктимер бабай өйөнән йыраҡ түгел, Һәләүек яры аҫтында, бик таҙа һыулы ҡойо бар ине. Әптек ауылының юғары осонда йәшәүселәре был ҡойонан бик әүәҫ файҙаланды. Ҡарт ҡойоно шул тиклем бөхтә ҡараны. Ситтәрен таш менән бурап, тирә-яғын таҙартып торҙо.

Бабай донъя ҡуйғас, был ҡойо ла әкренләп юҡҡа сыҡты, тирә-яғы сүп-сар менән тулды.

Эйе, билдәмәнең ҡәҙерен белергә лә, ашай белергә лә кәрәк икән шул.

## Ҡала юлы

*«Фәлсәфә һатма!» тигән һүҙ фәлсәфә түгелме ни?*

**Шәйехзада Бабич, «Ҡитға»**

Ишембайға барыу Әптек халҡының көндәлек хәстәренә әүерелде, һәр кем икмәк мәсьәләһен Ишембайҙа хәл итә, бигерәк тә яҙғы ваҡытта икмәккә барыусылар күп. Икмәк алыу өсөн кешеләр аҡса етерлек: күптәр ҡап һуға, таш сығара, бәғзеләргә колхоз эше эш түгел.

Ишембайға барыу Ташлығырҙан башлана, таш ташыусы машиналар йөрөгән көн булдыниһә, таш өҫтөнә ултырып китәһең, таш ташыусылар булмаһа, йәйәүләп Сәлихкә бараһың, «ҡул күтәреп», үтеүсе машинаға ултырып китәһең. Ҡайһы ваҡыт машина кузовына ифрат та күп кеше менеп ултыра, автобус тигән нәмә юҡ. Ишембайға етер алдынан шоферҙың төшөргә һорауын бер кем дә ишетмәй. Һәр кем ваҡ аҡсаһыҙ юлға сыҡмай, машина ҡала эсенә кешеләр менән инмәй.

Араны йәйәүләп үтеү, магазиндарын айҡап сығыу — беренсе эш. Магазиндар бер-беренә оҡшаш, таҡтанан эшләнгән, йәшелгә буялғандар; икмәк магазины алдында һәр саҡ халыҡ күп, сират. Икмәк булһа — оҙон сират. Иң ҡыйын ваҡыт: ҡала халҡы ауылдан килгәндәрҙе яратмай, кәмһетергә тырыша, кемдең икмәк үҫтергәнен белергә теләмәй, имеш, барыһын да партия ғына бирә. Ысынлап та, «колхозник» һүҙе Бөтә Союз күләмендә «дурак» һүҙенә яҡынайтылғайны. Минеңсә, ауыл халҡы ҡаты көрәштә кәмһетелеүҙән өҫкә сыҡты, әммә ҙур юғалтыуҙар кисерҙе.

Икмәк сираттарында кәмһетелеү һүҙҙәре генә яңғыраманы, күп тапҡыр йоҙроҡтар күтәрелде, танауҙар ватылды. Шулай, ауыл халҡы аптырашта ҡалырға яратманы, йоҙроҡҡа ҡаршы таш менән дә яуап бирә белде, әсе һүҙгә лә әсе яуап бирелде: «Беҙ эшләмәһәк, һеҙ ас йәшәр инегеҙ». Сират баҫып икмәк алһаҡ, шатланып ҡайтып китә торғайныҡ, ә сират етмәһә, ҡунырға ҡалдыҡ. Ҡуныу урыны һайлау ҡыйын... Ишембай баҙары эргәһендә дүрт ҡатлы ике йорт бар, йоҡлар ваҡыт еткәс, юғары ҡатҡа менеп йоҡлайбыҙ, йәшәүселәрҙең асыулы һүҙҙәренә яуап бирмәйбеҙ. Икмәкһеҙ ҡайтыу юҡ! Иртәнге сәғәт дүрттә, ҡала халҡы йоҡонан тормаҫ элек, беҙ икмәк магазинына киләбеҙ, үҙ сиратыбыҙҙы алабыҙ. Төрлө хәйлә ҡороусылар ҙа булды. Байрамғол бабай, ғәҙәттә, сиратһыҙ алды. Ул һуҡыр ролен ныҡ килештереп үтәне, «слепой» һүҙен «слупой» тип әйтә торғайны. Беҙгә көлөргә генә ҡала.

Ҡалаға килгәс, үҙем өсөн генә ҡыҙыҡлы маҡсатым бар: мин күҙәтергә яратам, бигерәк тә баҙар ҡапҡаһы төбөндә, һыра һатҡан урында, «Закусочная» тиеп яҙылған павильонда. Һораныусыларҙың ғәҙәте ниңәлер мине үтә ныҡ ҡыҙыҡһындыра, мин уларҙың һүҙҙәрен, йырҙарын отоп алырға тырышам, юҡ, күҙәтеүҙәр минең башта ғына тороп ҡалмай, күргәндәрҙе малайҙарға һөйләйем, ә малайҙар йотлоғоп тыңлай. Ишембайҙа миңә бигерәк тә Петька тигән аҡылға зәғиф кешенең тәртибе ҡыҙыҡлы күренә. Бына ул «Закусочная»ға инә, мин — уның артынан. Эскеселәр алдында — стакандар менән араҡы, һыра, ашамлыҡтар. Петька һәр кемдән ҡул һуҙып һорай, уға ашамлыҡ бирәләр, ә эсергә биреүсе юҡ, бына ул, уйламаҫтан, берәйһенең стаканын эләктереп ала ла “һә” тигәнсе тамағына һалып та ҡуя. Петькаға эләгеп тә ала, ә ул күнеккән, туҡмауҙарҙан ҡурҡмай. Ә тәғәмханала эсеүселәрҙең күбеһе — шул уҡ ғәрип-гөрәбәләр. Бына Петька баҙар ҡапҡаһы төбөндә ултыра, һәр үткән кешегә ҡулын һуҙып, бер һүҙҙе ҡабатлай: «Подайте, люди, Христа ради». Биреүселәр һирәк, килеме булмағас, Петька ҡыҙа башлай, ҡайһы берәүҙәрҙең балағынан эләктереп тартып та өлгөрә, тибелеп тә ала. Ләкин тәртибен үҙгәртмәй.

Бына ҡапҡаға матур кейенгән бер ҡатын яҡынлашып килә. Петька ул ҡатынға ла ҡулын һуҙа, иркенләп үтә алмаһын өсөн юл уртаһына шыуып ултыра, ә ҡатын ялтаныбыраҡ, тиҙерәк үтергә тырыша. Петька, ул ҡатындың хәйерһеҙ үтергә тырышыуын аңлап, лас иттереп ҡаҡырыҡ менән төкөрөп өлгөрә. Уф Алла, ул ҡатындың түҙөн күреү мәҙәк түгел, ҡатын ни эшләргә белмәй, ҡаҡырыҡ юбканан әкренләп аҫҡа ағып төшә. Ғибрәт күренеш...

Ишембайға барған һайын бер стакан морс эстем. Лимонад тигән эсемлек юҡ ине әле. Бер көн морс эсергә киоск алдына килеп баҫтым, һатыусы миңә лә кешеләр эскән шыйыҡлыҡты һалып бирҙе. Ниңә ҡиммәтерәк, тип тә уйлап өлгөрҙөм, эсә башланым, бик тәмһеҙ күренде, аҡса түләнгәс, тәмһеҙ булһа ла эсеп бөттөм. Эсеп бөткәс, күңелем болғанды, башым әйләнде, үҙемде ниндәйҙер ҡыҙыҡлы хәлдә күрҙем, аҙаҡ аңланым: был һыра икән. Һыра эсеүселәр ул ваҡытта күп түгел ине әле.

Уҡыған саҡта беҙҙе бер нисә тапҡыр Ишембайға экскурсияға алып барҙылар, Сталин исемендәге завод цехтарында йөрөттөләр, ТЭЦ-ҡа ла индерҙеләр, Ағиҙел аша һалынған яңы күперҙе лә күрһәттеләр. Партия һәм хөкүмәт хәйерселеккә бер ни тиклем дә иғтибар итмәне, ә Ишембайҙың данын таратыр өсөн күп тырыштылар. Ә беҙ Ишембайға... үҙебеҙгә тейеш икмәкте барып алыу урыны тип ҡараныҡ.

## *Калита*

*Күктә Алла,*
*Ерҙә иблис,*
*Мин – малай.*

**Шәйехзада Бабич**

Һәр быуын балаларының уйыны була. Хәлбүки, ниндәй генә тормош шарты булмаһын, йәш балалар ниндәй генә етешһеҙлектә үҫмәһен, бала-саға уйнамайынса үҫә алмай, сөнки уйын – һәр бала өсөн киләһе тормоштоң күренеше.

Һәр уйын, киләһе тормоштоң моделе булараҡ, кемдең кем икәнлеген асыҡларға тейеш. Шулай, уйын уйнап балалар үҙҙәренә юл башлаусылар һайлай, һәр уйын үҙенсә лидерлыҡҡа сығыуҙы ҡеүәтләй, талап итә.

Уйын уйнаған һәр бала өҫтөнлөккә ынтыла, ә уйын, көндәлек тормош кеүек, рәхимһеҙ, һәр баланың холҡон, тәртибен, физик етешһеҙлектәрен, аҡыл ҡеүәһен асып һала. Бала үҙенең сифатын үлсәй алмай, ә күберәк ваҡыт үҙен башҡаларҙан өҫтөнөрәк ҡуя, сөнки, дөйөм алғанда, кеше заты үҙе баланы хәтерләтә; эйе, ул үҙен һәр заттан өҫтөн ҡуя.

Беҙҙең бала саҡта уйындар ифрат төрлө ине, ябай булһалар ҙа, физик йәки аҡыл яғынан теүәллек талап иттеләр. Уйындар күмәкләшеп эш итергә лә өйрәтте.

Әгәр ҙә күмәк уйында кемдер үҙ мәнфәғәтен өҫтөнөрәк күрһәтергә тырышһа, уның командаһы өҫтөнлөгөн юғалта.

Әптек ауылында, яҙ еткәс, тау баштарында ҡар ирегәс, «туп уйнау» башлана. Туп уйнау урыҫтарҙың “лапта”һына оҡшаш. Уйын тау башында урын билдәләүҙән, һыҙыҡтар һыҙыуҙан башлана. Һыҙыҡтар һыҙылғас, ике команда башлыҡтары һайлана. Башлыҡтар абруйлыраҡ, физик яҡтан көслөрәк булырға тейеш. Башлыҡтарҙың хоҡуҡтары тиң. Башҡа малайҙар парлана, һәр ике малай физик яҡтан тигеҙ үҫештә булһын, юғиһә, ике команданың береһе көслөрәк йәки көсһеҙерәк булыуы ихтимал. Һәр ике малай, ситкәрәк китеп, үҙҙәренә исем һайлай. Исемдәрҙе ике малайҙың береһе генә уйлап таба. Әйтәйек, ул малай әйтә: «Мин сүкеш, һин ураҡ?» – ти. Был ике малай башлыҡтар алдына килеп баҫа. Һорауҙы исем атамаған малай бирә: «Кемгә сүкеш, кемгә ураҡ?» – ти. Башлыҡтар сиратлап яуап бирәләр, пар һайын алышыналар. Шулай итеп, малайҙар, икешәрләп килеп, ике команданы тултыралар.

Команданың тейешле һаны юҡ, күмәгерәк булһа, күңеллерәк уйнала.

Уйынды башлар өсөн таяҡ сөйөлә. Өҫкә сөйөлгән таяҡ ергә бер башы йәки буйы менән төшә. Кем варианты төшһә, шул команда уйынды байҙар ролендә башлай, ә икенсе команда – көтөүселәр ролендә. Шартты һайлаған башлыҡ таяҡ

сөйә алмай, тимәк, икенсе башлыҡ таяҡ сөйөп, үҙенсә төшөрһә, маҡтау яулай, ә командаһы «байҙар» була. Туп һуғыуҙан уйын башлана. Туп нindәй ҙә булһа мал йөнөнән уҡмаштырылып яһала. Эйе, яҙғы көндәрҙә аттың ҡойолған йөнөн оҙаҡ итеп ҡулда ыуалаһаң, йоп-йоморо, еңел туп килеп сыға. Йөндән эреләнгән туп булмаһа, сепрәктән тегелгән, эсенә еңел йөн-фәлән тултырылған туп та бара.

Нишләйһең, беҙҙең заманда һауа тултырылған резина туптар булманы.

Туп һуғыу башлана. Көтөүселәрҙең береһе – туп биреүсе, ҡалғандары, таралышып, уңайлы урын һайлай. Туп биреүсе сираттағы “бай”ҙың алдында туп сөйә, туп таяҡ менән көтөүселәр яғына һуғыла, тупты алыҫҡараҡ һуғыу мөһим, һуғыусы тупҡа өс тапҡыр таяғы менән тейҙерә алмаһа, командалар ролдәрен алыштыра – “көтөүсе”ләр “бай”ға әйләнә. Әгәр көтөүсе тупты ергә төшмәҫ элек тотоп алһа – шул уҡ хәл, ролдәр алышына. Әгәр йүгереш араһын үтеүсе байға көтөүсе туп бәреп тейҙерһә, ролдәр алышына, һәр тупҡа һуғыусы «бай» йүгереш араһын үтергә тейеш. Был уйында һәләтлек, сослоҡ, тиҙлек хөкөм һөрә. Ҡыҙыҡлы, сәмле – судья тигәндең кәрәге лә юҡ. Һәр команда үҙенең уңышлы һуғылған тубы өсөн үҙ өйөмөнә бер бәләкәй генә таш һала, мәрәй һанау юҡ.

Ә уйын бөткәс? Эйе шул, хәлдән тайғансы йәки ҡараңғы төшкәнсе уйнайбыҙ. Ә ҡайтыр алдынан таш өйөмө күберәк булған команда аҙ өйөмлө команданы тырышып-тырышып мыҫҡыллай. Приз шул.

Ә иртәгәһенә? Икенсе көн кисәге команда булмай. Бына шулай, үҙгәреш көн һайын, шуның өсөн даими ҡапма-ҡаршылыҡ юҡ, был бик ғәҙел уйын, ышанығыҙ. Уйын ваҡыт менән сикләнмәй, туҡтар өсөн теләһә нindәй сәбәп ярай. Эйе, ҡайһы саҡта кемдең дә булһа: «Мин асыҡтым, ҡайтам», – тигән һүҙе лә уйынды тамамларға мөмкинлек бирә.

Ғәҙәттә, уйын күңелле, шау-шыу менән үтә, “харамлашыу” тигән һүҙ күп ишетелә, аңлашыла: һәр кем – үҙе судья. Харамсыл малайҙарҙы яратмайҙар, шуның өсөн «сәбәп» эҙләүселәр һирәк.

Ҡайһы ваҡыт был уйында ҡыҙҙар ҙа ҡатнаша, уйын күңеллерәк үтә. Малайҙар үҙҙәрен күрһәтергә тырыша.

Бына шулай, беҙ «спорт» һүҙен дә белмәй инек әле, туп уйнау – беҙҙең өсөн күңел асыу. Шулай булды.

Ә ҡар иреп бөткәс, уйындар һаны артҡандан-арта. Таяҡ тотоп уйналған уйындарҙың барыһын да минең өләсәй бер һүҙ менән атай: «мәтәл». Ул минең «мәтәл» уйнарға йөрөгәнде яратмай, һәр кем эш эшләргә, йомошҡа йөрөргә тейеш, имеш.

Ҡар бөткәс, тау башында туп уйнау кәмей, ә йәйен туҡтатыла, сөнки урамда, тау башына менмәйенсә, мәтәл уйындарының теләгәнен уйнарға ярай. Күрше малайҙар менән бура, ҡыйыҡ, дүңгәләк ҡыуыу, чижик тип аталған уйындарҙы уйнаныҡ. Городки (бура) уйнарға ла өйрәнеп алдыҡ. Ә шулай ҙа беҙ йышыраҡ “ҡыйыҡ” уйнаныҡ.

Ҡыйыҡ – иң ябай уйын, урамда уйнала. Тигеҙ урында дүрт мөйөшлө һыҙыҡ һыҙыла. Дүртмөйөштөң һәр яғы ярты метрҙан артыҡ түгел, ә уртаһында таяҡ башы һыйырлыҡ соҡор. Уйындың иң кәрәкле нәмәһе «ҡыйыҡ» тип атала ла инде.

25 сантиметр самаһы оҙонлоғондағы таяҡ киҫәге, ике башы ҡыйыҡлап, киҫелә. Ныҡ ағастан яһала: һәр саҡ һуғыла торған нәмә. Һәр уйынсының ҡулында бер метр самаһы оҙонлоғондағы таяҡ. Был уйында башҡа нәмә кәрәкмәй. Уйын башлаусы ҡыйыҡты уңайлы итеп дүртмөйөш эсенә һалып, алғы башына таяҡ менән һуға. Ҡыйыҡ өҫкә сөйөлә, бына шул өҫкә сөйөлгән ҡыйыҡҡа уйынсы тағы нығыраҡ һуғырға тейеш. Ҡыйыҡ алыҫҡараҡ осһон өсөн. Икенсе уйынсы иһә – «көтөүсе». Көтөүс,е ҡыйыҡ төшкән урынға баҫып, ҡыйыҡты баштағы дүртмөйөшкә ырғытырға тейеш. Әгәр ҡыйыҡ дүртмөйөш эсенә төшмәһә, уйынсы,

ҡыйыҡҡа яңынан шул уҡ ысул менән һуғып, ҡыйыҡты алыҫҡараҡ оҙатырға тырыша. Ҡыйыҡ һуғыусының «ҡулы» (тайм) көтөүсенең ҡыйыҡты дүртмөйөш эсенә ташлауы менән тамамлана, ә ҡыйыҡ һыҙыҡҡа эләкһә, көтөүсе ҡыйыҡты дүртмөйөштән бер нисә аҙымда билдәләнгән һыҙыҡтан ырғыта.

Һуғыусының таяҡ менән ҡыйыҡҡа һәр бер һуғыуы һуғыусы файҙаһына бер мәрәй тәшкил итә. Ҡыйыҡтың башына һуғып күтәреп, тағы бер һуғып алыҫҡа осороу — ике мәрәй. Ҡайһы бер малай үҙенең оҫталығы менән маһайып, һауалағы ҡыйыҡҡа биш-алты тапҡыр ҙа һуғып өлгөрә – мәрәйҙәр тиҙерәк арта. Шуныһы ла бар: ҡыйыҡ ергә төшһә, һуғырға ярамай. Ә яҡындан көтөүсе эште тиҙ бөтөрә. Ҡыйыҡ дүртмөйөш эсенә төшкәс, «ҡул» алышына – көтөүсе һуғыусы була. Әгәр бер уйынсы мәрәйҙәрен һөйләшелгән һанға еткерһә, уйын туҡтатыла, мәрәйҙәр айырмаһы иҫәпләнә. Отолған уйынсы мәҙәк шарттарҙы үтәргә тейеш. Мәҫәлән, отолоусы дүртмөйөш тирәләй һыңар аяғы менән һикерергә тейеш, һикереүҙәр һаны мәрәйҙәргә тигеҙ, ә еңеүсе һикереүсенең арт һанына төрткөләп алырға хаҡлы. Отолған уйынсы мыҫҡылланырға тейеш.

Аслыҡ йылдар, бигерәк тә яҙғы йәмле көндәр, буш ҡорһаҡ менән үтте, ә бала саҡта барыбер уйнағы килә. Беҙ йүгерештек, отоштоҡ, еңештек, бәхәсләштек, әммә бирешмәнек.

Төрлө уйындар уйнаныҡ, үҙебеҙ уйлап тапҡан уйындар ҙа булғыланы, ә бына береһе нығыраҡ хәтеремдә тороп ҡалған, был — «чике» уйыны. Был уйын өсөн минең кеҫәмдә һәр саҡ өс тинлек йөрөнө. Эйе шул, был уйынды уйнағанда, бәреү өсөн һәр саҡ өйрәнелгән аҡса булырға тейеш. Уйнар өсөн күберәк ваҡыт мин малайҙарҙы үҙебеҙҙең өйгә саҡырҙым, уйнау ҡулайлы, әрләүсе юҡ, ә минең өсөн бигерәк ҡулайлы: һәр бүрәнә яҡшы таныш. Стенаға бәрелгән тин ергә төшкәс, самалайһың: кемдекенә яҡын, бармаҡ ҡарышы менән үлсәйһең, әгәр ҡарышың ике баҡыр араһына етһә, һин оттоң. Әгәр тинең тегенең аҡсаһына сыҡылдап тейһә, был хәл «чике» була ла инде, тимәк, һин икеләтә оттоң.

Күберәк отҡан малайға «Калита» ҡушаматы бирәләр, булған бит хан заманында Иван Калита – аҡса йыйыусы, тарихтан беләбеҙ. Бына шулай. «Калита» миңә лә йыш эләкте, тырышлыҡ бушҡа китмәй. Бармаҡтарын тырышып һуҙыусылар-ҙы «харамсыл» тиҙәр, мыҫҡыллайҙар. Минең был уйынды ихлас уйнауҙың төп сәбәбе – файҙаһында, уйын бөткәс, отоп алған аҡсаны тиҙ генә иҫәпләп алам да магазинға йүгерәм, һәр саҡ йөҙ грамм прәниккә йә печеньегә етә, кәнфит тә алғылайым. Ә бер ваҡыт балыҡ консерваһы ла алдым, дуҫым менән ашаныҡ, бик тәмле булды.

Уҡый башлағас, беҙ шашка уйнарға ла өйрәндек, уны үҙебеҙ яһап алдыҡ. Һуңғараҡ шахмат уйынын өйрәндек, тағы үҙебеҙ яһаныҡ.

Шахмат мине бигерәк тә ҡыҙыҡһындырҙы, дәреслеген эҙләп ҡараным, таба алманым. Урта мәктәптә уҡығанда ла әлеге шахмат менән мауыҡтыҡ, ә теорияһын табып булманы. Ә бына ғәскәри хеҙмәттә ҡыҙыҡлы хәл булды. Өсөнсө йыл хеҙмәт иткәндә Ашхабад госпиталенә эләктем. Бик шәп госпиталь, йәмле урында урынлашҡан.

Эйе, стена аша, айырым палатала, генерал Күсимов та һаулығын төҙәтте, үҙем күрҙем. Госпиталдә шахмат уйнаусылар күп, мин дә уйнаным. Ә бер ваҡыт ҡаршыма пижама кейгән кеше килеп ултырҙы ла:

– Кем булып хеҙмәт итәһең? – тиеп һораны.

– Радиолокацион станцияла өлкән оператормын, – тинем.

– Ә кемдәр менән шахмат уйнағаныңды беләһеңме?

– Ҡайҙан беләйем, погондары юҡ.

– Мин капитанмын.

– Бик мәслихәт.

– Ә һин үҙеңдең полковник Максимов менән уйнағаныңды беләһеңме?

– Мин нисек беләйем, үҙе әйтмәгәс.

– Һин шуны бел: ул – корпус политуправлениеһы начальнигы, шахмат буйынса корпус чемпионы, мастерлыҡҡа кандидат. Ә һин уны һәр саҡ отаһың, ә уға шул тиклем ҡыйын, хафалана, төндә йоҡлай алмай. Һәр икенсе партияңды отторһаң булмаймы?

– Отһон, мин ҡаршы түгел. Мин поддавки уйнарға яратмайым.

Бына шулай, капитан минең менән башҡа һөйләшмәне. Эх, әгәр уҡыған саҡта шахмат китабын тапҡан булһам, мин дә чемпионаттарҙа уйнаған булыр инем.

Ә минең иң яҡын дуҫым Сынтимер армиянан беренсе разрядлы футболист булып ҡайтты, ә беҙ ауылда футбол уйнаманыҡ, туп уйнаныҡ. Барыбер спорт.

Һәр кемдең ғүмеренең бер өлөшө уйынға бирелгән күрәһең, эйе, уйын – тормоштоң бер өлөшө, пәйғәмбәрҙәр ҙә уйындан ситтә ҡалмағандар. Оләләрҙың да, ҡарттарҙың да уйын менән мауығыуы билдәле. Ә бәғзе берәүҙәр бар ғүмерен уйындың билдәле бер төрөнә бағышлай.

Шулай булды: минә үҙем яратҡан уйынды һайлап алырға яҙманы, мин шундай ваҡытта йәшәнем, әммә бала саҡтағы уйындарҙы шатланып иҫемә төшөрәм.

Эх, замана! Иҫ китерлек ысынбарлыҡ. Мәктәп һүҙе: «Беҙ коммунизмға барабыҙ». Имеш, беҙ – донъяның иң алдынғы иле. Ышанғы килде. Беҙ ышандыҡ, һәр кем үҙенең алдынғылығын күрһәтергә теләй.

## Комсомол

Һәр кемде ике йөҙлө булырға өйрәтеү – беҙҙең дәүерҙә тормош ҡағиҙәһенә әйләнде. Был эш иң беренсенән уҡытыусыларға йөкмәтелде. Ике йөҙлөлөккә өйрәтеү өсөн киң ҡолас йәйгән ойошма ла булды, был, әлбиттә,– комсомол.

Комсомолдың иң беренсе маҡсаты — һәр бер йәш кешене комсомол сафына инергә өндәү. Шул уҡ ваҡытта комсомол һәр кемгә «комсомол ағзаһы булыр өсөн өлгөрмәгәнһең, тырышлығың етмәй» тигән баһалар бирә.

Комсомол етәкселәре һәр саҡ йәштәрҙең береһен дә ситтә ҡалдырмаҫҡа саҡырҙы, шул уҡ ваҡытта комсомолға йәштәрҙең аңлыларын ғына һайлап алырға өндәне.

Беҙҙең йәшлек йылдары. Белмәйем, булдымы икән ул комсомолдан ситтә ҡалыусы йәш кеше? Әгәр булһа, ихтимал, ниндәйҙер етди сәбәп менән генә.

Комсомол сафындағыларҙың сифаты, уларға булған талап бик аңһат аңлатыла. Үҙем быға миҫал. Мәктәпкә килгәс, күрәбеҙ: уҡыусы булыу ғына етмәй, ә пионер ҙа булыу кәрәк икән, һәр мәктәптә пионер ойошмаһы бар. Эйе, һеҙҙе тиҙҙән пионерға алабыҙ, тип балаларҙы «эшкәртеү» башлана: имеш, пионер башҡа балаларҙан өҫтөнөрәк, абруйлыраҡ. Шуныһы аптырашлы: мин был айырманы һиҙмәнем.

Ярар инде, пионерға алманылар, галстугым да булманы, дәрестәрҙең дә күберәген ҡалдырҙым. Алманылар, ә мин «алығыҙ» тип өндәшмәнем, сөнки минең өсөн барыбер, галстук таҡмай ҙа йәшәп була, ысынлап та, нимәгә ул алама кейемгә галстук?

Ә бына комсомол йәшенә еткәс, икенсерәк һөйләшеү китте. Һәр кем комсомол сафына ынтылырға тейеш икән. Ә комсомолдың пионер ойошмаһынан айырмаһы ниҙә? Уйлап тораһы ла юҡ: пионер галстук таға, үҙен билдәле ҡағиҙәлә тота, ә комсомол ағзаһы устав нормаһын үтәй, кеҫәһендә билет йөрөтә һәм взнос түләй. Бына шул взнос – ике йөҙлөлөк билгеһе, сөнки сабыйға ла аңлашыла: ил төкөрһә – күл була. Икенсе төрлө әйткәндә, комсомол ағзаларының һаны күберәк булһа, йыйылған взнос аҡсаһы ла күберәк.

Ун дүрт йәшем тулыр-тулмаҫ комсомолға индем. Ниңә индең, тиеп һораһалар, белмәйем, нимә тип яуап бирер инем. Дөрөҫө, был һорауға алдашмайынса яуап биреүсе булмағандыр, сөнки мин генә түгел, күптәр үҙҙәренең комсомолға ниңә кереүен белмәне.

Шуныһын ғына әйтә алам: был турала күп уйланым, шәхес булараҡ, системанан ныҡ интегеү кисерҙем, был система мине иҙеп кенә туйманы, ә бөтөнләй юҡ итергә тырышты.

Комсомол иһә — был системаның бер өлөшө, шулай булғас, минең ролде йылан ауыҙына ашыҡҡан баҡа менән сағыштырып була.

Юҡ, мин баҡа түгел, комсомолға өгөтләү һөҙөмтәһендә лә барып инмәнем, үҙ теләгем менән индем. Шуныһын да әйтәйем: зыян эшләү ниәте миндә бер генә тамсы ла булманы. Бында иң ҙур сәбәп — минең күпте белгем килгәнлектән; урамда йөрөп йәки өйҙә ултырып, китап, гәзит-журнал уҡып, кино ҡарап барыһын да белеп булмай. Донъя серҙәрен белеү өсөн донъяның һәр мөйөшөн һәрмәп, тотҡолап ҡарарға кәрәк. Эйе, мин шулай тырыштым, минең алда күп юл юҡ, булғанын һайланым. Комсомолға Сәлих мәктәбендә уҡығанда алындым, ә комсомол эшендә ҡатнашлығым булманы, эйе, мин бары — ғәҙәти взнос түләүсе.

Этҡол мәктәбендә мине, ниңәлер, һанға һуҡтылар, һәр йыл мин үҙебеҙҙең класта групкомсорг булдым. Унынсы класты тамамлағас, үҙемдең ауылда, Салауат Юлаев исемендәге колхозда, эшләй башланым. Мине колхоздың комсомол секретары итеп һайланылар, йәғни тәғәйенләп ҡуйҙылар, бына шунда инде мин комсомол эшенең серҙәрен аңлай башланым.

Колхоз ике ҙур ауылдан тора, комсомол ағзалары етерлек, взнос йыйыу ғына — үҙе бер эш. Йыйылыштар үткәрергә кәрәк, башҡа эштәре лә етерлек. Дөйөм әйткәндә, комсорг эше байтаҡ ваҡыт ала, ә комсомолдың «ваҡыт — аҡса» тигән термины юҡ. Тимәк, бушҡа иҫәр кеше генә ваҡытын түгә.

Эйе, был — комсомол аксиомаларының береһе, рус телендә — «искать дураков». Минең кеүектәр, әлбиттә, табылып тора, һәр колхозда комсорг була. Ә уйлап ҡараһаң, был хәлдең икенсе яғы ла бар, ни тиһәң дә, күп етәкселәр комсомолдан сыға, комсомол үҙенә күрә — мәктәп, һәр комсомол башлығының беренсе хәстәре — ағзалар һанын арттырыу. Минең алға ла был һорау килеп баҫты. Нишләйһең, миңә лә Әптек малайҙарын район үҙәгенә комсомол билеты артынан алып барырға тура килде. Ярай әле, үҙемдең бәләкәй саҡта әкиәттәремде тыңлаған малайҙар булды, уларҙы күндереү ҡыйын түгел ине. Комсомолға район бюроһы ала, бюрола халыҡ-ара хәлдәр тураһында һорашалар, ә күберәк һорауҙар комсомол уставы тураһында. Алла түҙемлек бирһен, малайҙар һорауға яуап биргәндә, көлөүҙән тыйыла белергә кәрәк. Эйе шул, мәҫәлән, минең йәштәш Иҡсан, белеме дүрт кластлы, биргән һорауҙарҙы яуапһыҙ ҡалдырмай, ә яуаптары йығылып көлөрлөк.

Шулай, Иҡсан өсөн халыҡ-ара хәл бик ябай: беҙҙең яҡлылар — немец яҡлылар, башҡалар юҡ. Әгәр беҙҙең яҡлы илдең аталышы ҡыйын әйтелә икән, тимәк, был ил дә немецтар яҡлы, шулай, насар исемле ил беҙҙең яҡлы булырға тейеш түгел.

Бюро ағзалары Иҡсанға устав тураһындағы һорауҙарҙы баштан уҡ туҡтатты, көлөргә лә мөмкин түгел. Уның ҡарауы, Иҡсанға колхоз эштәре тураһындағы һорауҙар хуп күренде, яуаптары түҙәрлек, ә барыбер көлкөһөҙ булманы. Ул ваҡытта колхоздарҙа өҫтәмә түләү уйлап тапҡайнылар — радио шуны һөйләй, гәзиттәр өҫтәмә түләүҙе маҡтап яҙа. Был түләү тураһында Иҡсанға ла һорау бирҙеләр, ә Иҡсан фермала эшләй, өҫтәмә түләү алғайны. Эйе шул, уға өҫтәмә түләү итеп бер сусҡа бәрәсе биргәйнеләр. Ләкин алған бәрәсе, сирле булыу сәбәпле, бер нисә

көндән һуң үлде, колхоз һау бәрәстәрҙе «өҫтәгеләр»гә генә бирә.

– Эйе. Мин өҫтәмә түләү алдым, – тине Иҡсан. Ә үҙе көләп ебәрҙе, үлгән бәрәс тураһында ине хәбәр, был турала мин дә беләм, минең дә көлгөм килә, тыйылам. Ә бюро ағзалары төпсөнә:

– Бәрәс ҙур инеме? Нисә кило? Һин был түләүгә шатмы?

Иҡсан ни әйтергә белмәй, көлә, ярар, көлгәс ни, тимәк, шат.

Бына шулай, Иҡсанға комсомолдың кәрәге юҡ, әммә ул билет алырға килгән.

Бюро ағзаларына Иҡсан кеүек ағза кәрәк түгел, ә һан өсөн кәрәк. Мин дә Иҡсандың комсомол эшендә ҡатнашмаясағын яҡшы аңлаһам да, өгөтләнем, районға алып килдем. Иҡсан билет алды, ә уның кеүектәр аҙ булманы.

Комсомол тураһында төрлөсә һөйләп була. Аптырарға түгел, һәр кем үҙенсә уйлай. Ә мин? Дөрөҫөн әйткәндә, комсомол минең күҙҙәремде асты, комсомол өйрәтә белде.

1957 йыл, декабрь. Беҙ Өфөгә комсомол кәңәшмәһенә килдек. Мин бында күпте белдем, күпте ишеттем. Пушкин урамындағы Министрҙар Советының ҙур залы, ашханаһы, филармониялағы концерт – эйе, беҙҙе ихтирам иттеләр. Ә иң мөһиме Нуриев сығышын тыңлау булды.

Алдамайым, был кәңәшмәнән һуң минең комсомолға ҡарашым үҙгәрҙе, күрәһең, Нуриев кеүектәр ышанмағандарҙы ышандыра beләләр. Тимәк, комсомол – кәрәкле ойошма.

Шулай, ғәскәри хеҙмәткә алынғас та, мин айырым часта комсомол секретары булып һайландым. Ярар, был турала икенсе урында, икенсе ваҡытта.

## Армияға китәм

Ун һигеҙ йәшем тула, һәр егет өсөн елкендергес мәл, минең өсөн донъя серҙәре асыла башланы. Сабый сағымда минең бер кемгә лә кәрәгем юҡ ине, алты йәшем тулғас, атай-әсәйгә ныҡ кәрәк була башланым. Өйҙә минең өсөн эш күп. Ун ике йәш тулғас, колхозға кәрәклегем асыҡланды, колхоз эшенә ҡуша башланылар. Бына ун һигеҙенсе йәшем китте, аңлашылды: мин хөкүмәткә лә кәрәк икән, хәрби комиссариат минең хеҙмәткә яраҡлыҡты белергә теләне, повестка ебәрҙе.

Тәүге комиссия минең күҙәтеүсән күҙгә барыһын да асып һалды. Бына ҡайҙа икән ул медицина тиеп аталған әкәмәт. Аҡ халат кейгән бәндәләр минең һәр ағзамды ентекләп тикшерә. Мин ҡаушап төштөм. Бер генә иҫән-һау ағзам юҡ кеүек, һин ғәскәри хеҙмәткә ярамайһың, тиерҙәр кеүек. Миндә бер генә теләк: армия сафына китергә! Сәбәп бар: миңә һәр кем, яҡындарым да, хеҙмәткә ярарлыҡ түгелһең, тиҙәр.

Бына хәҙер мин медицина комиссияһы алдындамын, минең хәлде асыҡлаған ваҡиға үҙем менән бергә килгән. Үҙебеҙҙең ауыл малайы Искәндәр йәнәш йөрөй. Искәндәргә лә һорау бирәләр, ә ул бар һорауға ла бер төрлө яуап бирә: «Ильяшов» – үҙенең фамилияһын әйтә. Ильясов икәнлегенде беләбеҙ, тиҙәр, һин шуны әйт, ҡайһы ерең ауырта, шуны әйт, тиҙәр. Ә Искәндәр һаман үҙенекен: «Ильяшов».

Врачтар Искәндәрҙе ятҡырып, туңҡайтып, баҫтырып – төрлөсә һәрмәкләп ҡарайҙар, тикшерәләр. Искәндәрҙән бер һүҙ ҙә әйттерә алмағас, минең аша аңлашалар, эйе, тырыша торғас, сирен дә таптылар. Аңлашылды: Ильясов армияға ярамай, аҡ билет алды.

Ә минең менән һүҙ икенсе төрлө бара, урта белемлемен, комиссия ағзалары күҙендә ихтирам һиҙәм, хәүефле сир ҙә миндә юҡ икән. Китсе, мине хатта һауадесант ғәскәрҙәренә билдәләйҙәр. Нишләйһең, мин шатлығым эсемә һыймай

ауылыма ҡайтам. Ә ауылда мине күргән һәр кеше: «Һин барыбер Өфөлә үтә алмайһын», – ти.

Ниһайәт, декабрь айында минә телеграмма килде, ә мин, белгән кеүек, бал ҡойоп, бишенсе декабрҙә йәштәрҙе ҡунаҡҡа саҡырғайным, оҙатыу кисәһе булды. Иртән, алтынсы декабрҙә, барыһы ла мине оҙатырға сыҡтылар, барыбер Өфөнән әйләнеп ҡайтаһың, тинеләр.

Хәйерсегә ел ҡаршы: ат егеп, Ишембайға юл тоттоҡ, ә Сәлихкә еткәс, көслө буран сыҡты, ярты юлды үткәс, ат барыуҙан туҡтаны, күҙгә бер нәмә күренмәй. Һатыусы еҙнәм: «Барып булмай, ҡайтайыҡ,» – ти.

Мин алға сыҡтым, атты етәкләп юлдан атланым, эйе шул, ҡайтыу юлына ат етеҙ атлар ине, көлкөгә ҡалғым килмәне. Көҫәпҡолға еткәс, буран кинәт туҡтаны. Еҙнәне оҙатып, автовокзалға йәйәүләп киттем. Бына һиңә мә: буран юлды күмгән, автобус Стәрлетамаҡҡа бара алмай. Бер генә автобус бирҙеләр. Тимер юл станцияһына киттем. Стәрлетамаҡта тағы комиссия үттем, ә кисен төнгө поезд менән Өфөгә китергә кәрәк.

Үҙем кеүек бер малай менән танышып алдым, поезда йөрөгәне юҡ икән. Ә мин поезд менән Өфөгә комсомол кәңәшмәһенә барғаным бар. Поезд Өфөгә иртәнсәк килеп етә, шуның өсөн, вагонға ингәс, йоҡлар өсөн уңайлы урын һайларға кәрәк. Мин дуҫыма аңлаттым, беренсе инеп, вагонда уңайлы урын һайлайым, һиңә лә бер урын әҙерләрмен, тинем.

Стәрлетамаҡ вокзалында вагондарға ултырыусылар күп, төртөш, ҡысҡырыш, кем көслө – шул алдан. Иң беренсе керҙем, иң уңайлы ике йоҡлау урыны – өҫтән урындар һайланым.

Халыҡ дөбөр-шатыр вагонға тула. Бына минең кеүек һалдатҡа барыусы бер ҡала егете миңә аҡыра: «Ты, деревня! Слазь оттуда, я там буду спать». Минең яуапты ла көтмәй, үрмәләп менеп килә. Ә мин быйма кейгәнмен, магазиндан алынған, хөкүмәт сығарған быйма, ағас кеүек ҡаты. Теге малайҙың башы күренгәс, быйма менән маңлайына бик йәпле типтем, дөбөрләп иҙәнгә ҡолап төштө. Белмәйем, эш ни менән бөтөр ине, мин – бер үҙем, ҡаланыҡылар бигерәк күп. Тик шул ваҡытта, теге малай тәгәрәп төшкәндә, вагон тәҙрәһен ваттылар, оҙатыусылар икән, ҡаланыҡылар, барыһы ла эсеп алған. Ығы-зығы китте, тимер юлсылар, милиция – тәҙрә ватыу сәбәбен асыҡлайҙар. Асыҡлауҙары шул булды: һәр кемдән берәр һум аҡса йыйып алдылар, зыян ҡапланырға тейеш, беҙҙең иҫәптән.

Өҫтәге урында тыныс, дуҫ менән Өфөгә тиклем йоҡланыҡ. Ә иртән тағы комиссия үтергә, барыһы ла уйламағанса килеп сыҡты: комиссияны бер сәғәттә үттек. Көтөлмәгән хәл, минең алда башҡа комиссия юҡ, аҙ ғына көтәһе һәм... Минең белеүемсә, һалдатҡа китеүселәр Өфөлә бер нисә төн ҡуналар, «һатып алыусы» килгәс, команда менән алып китәләр. Ваҡытыбыҙ бар, әҙерәк күңел асырға кәрәк. Дуҫым менән Өфө урамына сыҡтыҡ, гастрономға инеп, бер ярты алдыҡ, колбасаһы ла булды, кәйефләндек. Бына башҡа командаларҙы автобустарға тейәп алып китә башланылар. Беҙ кәйефләнеп алғас, команда ишеттек: сығырға, теҙелергә! Теҙелгәс, беҙҙе бер лейтенантҡа тапшырҙылар, бик шәп: беҙгә Өфөлә ҡунырға тура килмәй.

Шатланырға өлгөрмәнем, лейтенант атларға ҡушты, беҙгә автобус теймәгән икән, берҙән-бер команда йәйәүләп тимер юл вокзалына барырға тейеш. Эсеп алған килеш атлап барыу минең өсөн сәйер күренде, мин, ҡыйыуланып, лейтенанттан трамвай менән барыуҙы һораным. Лейтенантҡа минең ҡыланыш оҡшаманы, һине насар иҫәпкә ҡуям, тип иҫкәртте. Ә мин, трамвай юлын аша сыҡҡанда, туҡталыштағы халыҡ араһына индем, һуңынан трамвай менән киттем. Бер тапҡыр Өфөлә булғас, трамвай йөрөшө иҫемдә ҡалған, тик, әлеге лә баяғы,

хәйерсегә ел ҡаршы, трамвай юлы ремонтлана икән. Вокзалға барып етеү оҙаҡҡа һуҙылды.

Мин ҡабаланып командамды эҙләйем. Һиҙмәй ҡалдым: таныш булмаған бер кеше бар көсө менән беләгемдән тотоп алды, ниҙер ҡысҡырҙы, шул арала ике милиционер килеп етте. Мине милиция бүлегенә алып киттеләр, был бүлек ул ваҡытта подвалда ине.

Кеҫәләремде тентегәс, армияға китеп барғанымды белеп, сығарып ебәрҙеләр. Аңлашылды: был йүнһеҙҙәргә минең алама кейем оҡшаманы. Нишләйһең, ауылдан армияға бер генә зат та яҡшы кейемен кейеп барманы. Ошо көндән һуң мин тимер юлы вокзалдарында күҙәтеүсән булдым. Ысынлап та, алама кейенгәндәргә милиционерҙар һәр саҡ бәйләнә, тентей, ҡыуа, йәберләй. Был турала мин күпте беләм. Яҙасаҡмын әле, Алла бойорһа.

Милициянан сыҡҡас, мин үҙемдең команданы эҙләнем. Вагонға ултыра башлағандар икән. Лейтенант, мине күреп, йүгереп килеп етте, битемә перчаткаһы менән һуғып маташте, ваҡыты юҡ ине шул, вагон ҡуҙғала башлағайны. Мин армияға киттем.

Лейтенант йәврәй булып сыҡты, һүҙгә бик әүәҫ, ҡала егеттәре менән яҡшы мөнәсәбәт урынлаштырып алды, күптәргә сержант погондары алырға булышлыҡ күрһәтәсәген белдерҙе. Эйе, әле һалдат кейеме киймәгән ҡайһы бер малайҙар үҙҙәрен командир итеп тоя башланы. Лейтенант һалдат анекдоттары һөйләргә лә ярата икән, ә иң тырышып ҡыланған эше — малайҙарҙы купеға йыйып, һалдат йырҙарын йырлау. Эйе шул, Иосиф Кобзон да бит һалдат йырҙарынан башланы, ә хәҙер кермәгән ишеге юҡ, ҡатнашмаған эше юҡ, эйе, эйе, тырышлыҡ таланттан көслөрәк. Ә лейтенант барыбер үҙенең кем икәнлеген күрһәтте, һәр кемгә тәүлек аҡсаһы тейеш ине. Бер тәүлеккә — 26 һум. Бер аҙна самаһы барған өсөн һәр кемгә байтаҡ ҡына аҡса йыйыла. Бер кемгә лә аҡса бирелмәне, йәнәһе, малайҙарҙан ризалыҡ алып, ул аҡсаларҙы юл хәстәренә түләне. Мин, иҫәпләп алғас, лейтенантҡа ризаһыҙлығымды еткерҙем, ә ул миңә асыуын белдерҙе, ярар, һинекен бирермен, тигән булды, бирмәне.

Бер аҙнанан Төркмәнстандың Чарджоу ҡалаһына барып төштөк. Эйе, был Аму-Дарья күпере төбөндәге полк мәктәбе ине. Хәрби ҡаласыҡҡа барып ингәс, лейтенант беҙҙе теҙҙе, бер капитанға рапорт бирҙе лә ғәйеп булды.

Беҙҙең малайҙар ул лейтенантты башҡа күрмәнеләр, ярай әле, бергә йырлап килделәр, иҫтәрендә ҡалғандыр, ә мин лейтенант йырын йырламаным. Шул уҡ сәғәттә беҙгә һалдат кейеме бирҙеләр.

## Тәүге йомғаҡ

*Атланым эҙһеҙ,*
*Тапманым йондоҙ.*
*Үтте йәш ғүмер*
*Ләззәтһеҙ-тоҙһоҙ.*

**Шәйехзада Бабич**

Эйе, бик йыш Бабичтың ошо һүҙҙәрен ҡабатлағым килде. Юҡ шул, уҡып ҡараһаң, Бабич икенсерәк тә яҙып ташлаған:

*Осоноп-осоноп, өҙөлөп-өҙөлөп,*
*Ашҡынып шатлыҡ көтәм...*

Эйе, ишетегеҙ, белегеҙ: кеше заты һуңғы көндә лә өмөтөн өҙмәй, шатлыҡ көтә. Үтте ғүмер. Ә нисек үтте? Ҡыҙыҡлы. Хоҙай һәр кемгә шатлыҡ йәки ғазап

кимәлен үлсәүҙе лә шәхесенә, һәр кемгә, тәғәйенләп биргән. Аҙға шатланғандар күп, күпте аҙ күргәндәр ҙә аҙ түгел.

Был — кешелектең аксиомаһы. Был йәһәттән күптәр баш ватты, мин үҙем дә ситтә ҡалманым, күҙәттем. Кеше заты үтә ҡатмарлы.

Аптыраш: һәр кем үҙенең күргән ҡыйынлыҡтарын күберәк тип һанай. Ни өсөн? Совет дәүере шәхестең эсен тышҡа әйләндереп һалды, күренеүенсә, кеше заты йыртҡыс ҡына түгел, ҡатмарлыраҡ.

Аңлашыла: сталинизм — яфа. Ә яфа ҡорбаны? Ул кем? Һуңынан? Крахмал йыйырға сыҡҡан сабыйға ҡурғашлы ҡамсы менән һуғыусы — репрессияға дусар ителгән кулак. Бына нисек! Тентеү яһап бисә-сәсәнең теңкәһенә тейгән, һөрһөгән, сатан Вася — шул уҡ зат, мөлкәтенән мәхрүм ителеп Әптеккә ҡыуылып килтерелгән. Ә бындайҙар күп, ифрат та күп. Бына мин, утыҙ йәшем тулғас, үҙ еремә ҡайттым, механик булып әлеге совхозға эшкә урынлаштым.

Минең эшселәр үҙ-ара берәүҙе мәҙәкләй. Тегенең бисәһе һыра мискәһендәй йыуан, килбәтһеҙ. Ирҙәр көлә, түшәктә һинең бисәңдән ҡыҙыҡ юҡтыр инде, тип. Эйе шул, ирҙәр теге бисә менән алданыраҡ «әңгәмәләшеп» алғандар икән. «Ҡайҙа ул, мин күптән инде бер ни тоймайым», — тигән теге бисә.

Ә был ирҙең бирешергә теләге юҡ. Ул да — кулак булып ҡыуылып килтерелгән зат:

— Унын ҡарауы, мине, бында килгәс, склад мөдире итеп ҡуйҙылар. Мин күпте татыным. Мәҫәлән, ике ҡатын килде, икмәк һорайҙар. Икмәк өсөн үҙҙәрен тәҡдим итәләр. Улар, тәү башта олораҡты булаштыр, ә йәшерәккә дәртең яңынан тоҡаныр, тинеләр. Ул ваҡытта миндә хәл дә, дәрт тә булды. Ха-ха, ҡатын-ҡыҙҙы мин күп татыным...

Бына шулай. Ә был бәндә икенсе урында, мин ул заманда нык интектем, тип хәбәр таратыр. Күптәр ике йөҙлө. Ысынлап та, раскулаченныйҙың «интектем» тип һөйләргә хаҡы бар. Шулай, совет заманындағы буталсыҡлыҡҡа анализ яһаусы булманы әле. Әптек ауылындағы ҡан эсеүсе уполномоченный, әлеге раскулаченный өйөндә, колхоз иҫәбенән һыйланып ятты. Ә билгеле, ит тураусы ас булмай, кемдең ҡулында — шунын ауыҙында. Ә был ваҡытта астан үлеүселәр бихисап булды. Бына шулай: кеше заты үҙгәреүсән, яңы шартты тиҙ үҙләштерә.

**Парсалар**

*Һәр ҡоштоң үҙ ғәҙәте. Ҡоҙғон ҡарғаға оҡшамаҫ, һайыҫҡан күгәрсенгә оҡшамаҫ. Үҙемсә һөҙөмтә яһаным: һәр халыҡ заты ниндәйҙер ҡош ғәҙәте менән йәшәй. Эйе, башҡорттарҙа һәр ырыуҙың үҙ ҡошо булған. Беҙ — төйләгәндәр. Ә мин һәр халыҡҡа бер ҡош атап бирер инем. Үҙемдең халҡыма, башҡортҡа, ҡарабаш турғайҙы тәғәйенләр инем.*

«Күңелемдә - донъя серe»

2009



**Әлфидә ҠАНСУРИНА**

## Ҡуласа

*«Әгәр ҙә Рәсәй эскелекте туҡтатмаһа,*
*2025 йылға 11 млн. кешеһен юғалтасаҡ».*

**БМО-ның докладынан**

*Ҡулсалағы тейен ише, тибеҙ,*
*Беҙ үҙебеҙ нәк шул хәлдәбеҙ.*
*Айыҡ аҡыл, зур тырышлыҡ һалып*
*Уны көскә әйләндерәбеҙ.*
*Айырмаһы, бәлки, шундалыр ҙа:*
*Хәрәкәтле беҙҙең ҡулсабыҙ.*
*Тигеҙлектә етеҙ елдерһәк тә,*
*Һырлау ерҙә ығыш барабыҙ.*
*«Ҡыҙыу нөктә», террор*
*таштай бәреп,*
*Ҡәйелеп тә китһә ҡуласа,*
*Йәһәннәмгә әллә еттекме, тип,*
*Ирекһеҙҙән, ҡапыл ҡот оса.*
*Тормош булғас, ни ҡылаһың инде,*
*Ағы ла бар, бар ул ҡараһы.*
*Ауырмаҡтай артҡа һөйрәп торор*
*Уғрылары менән харамы.*
*Сәрхуштәре һәм дә наркоманы —*
*Барыһы ла ҡара араһы.*
*Әгәр инде шулар иҫәбенә*
*Артып китә ҡалһа нисбәттәр,*
*Беҙҙең донъябыҙҙың ҡуласаһы*
*Хәрәкәтһеҙ ҡалып, шып туҡтар.*
*Аллам, һаҡла!*

---

*Әлфидә Ҡансурина 1992 йылдың 25 июнендә тыуған. Ейәнсура районының F. Аҡманов исемендәге Байыш урта мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы.*

## Хаҡ һүҙеңә мохтажбыҙ, Аҡмулла!

*«Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» — тиеп*
*Өндәгәнһең беҙҙе хаҡ юлға.*
*Был замандар һинең өндәүеңә,*
*Аҡ һүҙеңә мохтаж, Аҡмулла,*
*Хаҡ һүҙеңә мохтаж, Аҡмулла!*
*Халҡым, бараһың ҡайҙа?*
*Түбәнлеккә*
*Тәгәрәйһең, әллә күрмәйһең?*
*Ҡулда — һыра, тәмәкеңде ҡабып,*
*Әллә шулай хаҡлыҡ эҙләйһең?*
*«Башҡорт — наҙан» тигән һүҙҙәрҙең*
*Беҙ киреһен иҫбат итәйек.*
*Был донъяны белем ҡотҡарыр,*
*Ғилем шишмәләрен эсәйек,*
*Ғилем юлын бергә үтәйек.*
*Аҡмулланың аҡыл һүҙҙәре*
*Килеп еткән беҙҙең заманға.*
*«Уҡыу кәрәк!» тигән һүҙҙәре*
*Килмәйме ни беҙгә таманға?*
*Килмәйме ни беҙгә таманға?*
*Быуаттарҙан-быуаттарға шаңлай,*
*Маяҡ кеүек уныңораны.*
*Туған итһәк һүҙен, юҡ итербеҙ*
*Наҙанлыҡтың ҡара ҡорамын!*
*Аҡ сәлләлә, аҫып төйөнсөк,*
*Әйтерһең дә инде — хаҡ мулла!*
*Быуаттарҙан-быуаттарға йөрөп,*
*Кире ҡайтһаң ине, Аҡмулла!*
*Кире ҡайтһаң ине, Аҡмулла!*

***

*Ялҡытты йәй!*
*Һәм яҙҙы ла*
*Күңел ниңә ятһына?*
*Алыҫтарҙа тороп ҡалған*
*Ҡышҡа ҡабат ашҡынам.*
*Әсе еле, бураны ла*
*Ялҡыта алмаҫ мине.*
*Йәй бысрағынан арынып,*
*Ҡыш сафлығына инәм.*

***

*Хәлһеҙ генә ҡанаттарын елпеп*
*Бер күбәләк ҡунды усыма,*
*Күҙгә елгә баш бирмәҫкә теләп,*
*Бахыр ғынам ҡалай осона.*
*Йән дуҫтары — нәфис сәскәләр*
*Күптән баш эйгәндәр һулышып.*
*Яңғыҙ ҡалған меҫкенкәйҙе йәлләп*
*Күңелкәйем китте тулышып.*
*Ул усымдан ергә осоп төштө:*
*Йәнәһе лә, ғорур үлмәксе.*
*Ҡанаттарын елпене лә тынды*
*Һәм талпынмаҫ булды бүтәнсә.*



**Айзилә ШӘРӘФЕТДИНОВА**

## Йыуанысым

*Ҡыҙымдың һәр һөнәренә*
*Ҡыуаныуым*
*Һинһеҙ генә.*
*Көндәр үтә, айҙар үтә,*
*Йылдар үтә...*
*Өнһөҙ генә...*

*Кешеләрҙең күңелемде*
*Рәнйетеүе*
*Ҡыйып-ҡыйып...*
*Ә мин түҙәм, өнһөҙ түҙәм*
*Күҙ йәштәрем*
*Саҡ-саҡ тыйып.*

*Яңғыҙлыҡтың, һағыштарҙың*
*Үҙәгемде*
*Өҙөүҙәре.*
*Ҡыйын, ҡыйын, шундай ҡыйын*
*Өҙөлөп тә*
*Көтөүҙәре.*

*Ярай әле, күңелемдә*
*Ҡайтырыңа*
*Өмөтөм бар.*
*Нисек түҙә, нисек түҙә*
*Ғүмерлеккә*
*Юғалтҡандар?!*

*Һәр бер көндө өмөт менән*
*Сабыр ғына*
*Һуғарыуым...*
*Һинһеҙ генә һинле булып*
*...Ҡыуаныуым...*
*...Йыуаныуым...*

***

*Белмәйем дә: был ғүмерем*
*Әллә оҙон, әллә ҡыҫҡа.*
*Наҙҙарыңды йәлләмәсе,*
*Йәлләмәсе мин — ҡырыҫҡа!*

*Йәлләмәсе, һинһеҙ, иркәм,*
*Йәшәүҙәрем бер ни түгел.*
*Яңғыҙ йәнем моңдаш тапмай,*
*Йәтим генә, күрсе, күңел.*

*Йәлләмәсе, йәндәремә*
*Бары тик һин, һин кәрәкһең.*
*Наҙға сарсап, наҙға туймаҫ*
*Күңелемә һин терәкһең.*

*...Үкенмәм дә, ғүмерҙәрем*
*Булһын оҙон, булһын ҡыҫҡа.*
*Тормошомдо яҙҙар итеп,*
*Бер наҙ булһаң мин — ҡырыҫҡа!*

## Һөйөүҙән йырҙар ҡала

*Һин алыҫ та, һин яҡын да,*
*Йөрәккенәм ялҡында!*
*...Йырҙар яҙам икебеҙҙең*
*Иң саф һөйөү хаҡында.*

*Күптәрҙе ҡауыштыра ла*
*Һуңынан айыра яҙмыш.*
*Кемдәрҙең йәре ҡалмаған*
*Үкенес булып яңылыш?*

*Һин булмаһаң, нисек кенә*
*Йәшәр инем донъяла?*
*Һөйөүҙәрҙән ҡалмай яра,*
*Һөйөүҙән йырҙар ҡала?..*

---

*Айзилә Шәрәфетдинова – Белорет районы ҡыҙы. БДУ-ның Сибай институтын тамамлай.*

## ХӘҘЕРГЕ ШИҒРИӘТЕБЕҘГӘ БЕР БАЙҠАУ

Яңы егерме беренсе быуатта йәшәүебеҙгә лә хәҙер ун йыл тулып килә. Үҙе бер декада. Үткән йөҙ йыллыҡта илебеҙ капитализмдан социализмға революцион юл менән күсеп, яңы йәмғиәт төҙөү тәжрибәһен яһап ҡараны, ләкин ул ыңғай һөҙөмтә бирә алманы. Шуға ер йөҙөндәге илдәрҙең, халыҡтарҙың һыналған йәшәү рәүешенә – социаль алыш-биреш системаһына кире ҡайтырға мәжбүр булды.

Шиғриәтте, ғәҙәттә, кешелек тормошоноң, кеше уй-күңел донъяһының бер поэтик сағылышы, тиҙәр. Шул поэтик көҙгөлә рухи донъябыҙ нисегерәк сағылды икән – шуны күҙәтеп, бер байҡабыраҡ ҡарайыҡсы.

Күҙәтеүҙе күсеш арауығынан, үткән быуат аҙағынан башлайыҡ.

Хәҙерге башҡорт поэзияһының башын үткән быуаттың 90-сы йылдар уртаһынан башлап киткәндә шуларҙы әйтергә мөмкин: был осорҙа шиғриәтебеҙ әүәлге ҡырҡа ғына идея-тематик үҙгәреш-яңырыштарҙан һуң мәғлүм бер эҙгә төшөп, ысындан да яңыса яңырыш, заманынса яңғыраш алып бара ине инде. Бында идея-эстетик, поэтик яңырыштар күҙгә айырыуса ныҡыраҡ ташлана. Жанр формалары ишәйә бара, поэтика төрләнә һәм байыға килә.

Лирик поэзия йылдамыраҡ үҫте: йыр, ода, парса жанр формалары әүҙемләште. М. Кәрим, Н. Нәжми, Ҡ. Даян, Т. Арыҫлан ижадтарында индивидуаль үҙенсәлекле лирик формалар барлыҡҡа килде. Р. Ниғмәти, Ғ. Әмири, Х. Ғиләжев, Ш. Бикҡол поэзияһында публицистик стиль өҫтөнлөк итте. Эпик поэзия үҙенә яңы юлдар ярҙы, яңыраҡ формаларҙы ҡапшаны.

Егерменсе быуаттың икенсе яртыһындағы поэзияла социаль, әхлаҡи, философик проблемаларға иғтибар артыу шиғриәттең тәрәнәйә барышына, ижтимағи күренештәргә, кешенең рухи донъяһына төбәлеш аналитик тенденцияларҙы көсәйтеп ебәрҙе. Былар айырыуса Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш, Назар Нәжми, Муса Гәли, Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин һ.б. күп кенә шағирҙарҙың политраһына эспрессив һәм полифоник сифаттар өҫтәне. Хәким Ғиләжев, Шәриф Бикҡол, Ғилемдар Рамазанов, Әнғәм Атнабаев, Марат Кәримов кеүек шағирҙарҙың нигеҙҙә публицистик стилдәге шиғриәте лирик мотив һәм биҙәктәр менән һуғарылды. Философик һәм мөхәббәт лирикаһы ярым тондар, нескә хистәр, күңелдәрҙе биләр моңдар менән байыҡты. Ҡадир Даян, Абдулхаҡ Игебаев, Яҡуп Ҡолмой һ.б. популяр йырҙары фольклор поэтикаһына яҡынлыҡтары менән характерлы. Тимер Арыҫлан, Сәләх Кулибай, Марат Кәримов, Марсель Сәлимов һ.б. бөтөн бер сатирик типтар галереяһын тыуҙырҙы, юмор һәм сатира жанрҙарына яңы һулыш өрҙө.

Хәҙерге башҡорт поэзияһының граждандыҡ пафосы айырыуса көсәйә барҙы, элек әйтергә мөмкин булмаған уй-фекерҙәрҙе, ижтимағи ҡараштарҙы тура ярып әйтергә, һәр кемде уйландырған, борсоған мәсьәләләрҙе ҡыйыу күтәрергә, матбуғатҡа сығарырға, шиғыр һәм поэмаларҙа яҡтыртырға ирек, иркенлектәр тыуҙы. Һүҙ ирке, әлбиттә, ниндәйҙер анархияны аңлатмай ине. Ул шағирҙарыбыҙҙың

бигерәк тә социаль-ижтимағи мәсьәләләрҙә яуаплылыҡты, иң кәрәкле, абруйлы һүҙ әйтеү бурысын алға ҡуйҙы. Был йүнәлештә айырыуса халыҡ шағирҙары Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев публицистика өлкәһендә лә, шиғриәттә лә үҙ һүҙҙәрен әйтте, заманалар яңырышының ҡатмарлыҡтарын һәм ҡаршылыҡтарын үҙҙәренсә аңлатырға тырышты.

Хәҙер һәр кемгә яҡшы мәғлүм: туҡһанынсы йылдар – хәҙерге быуат башындағы осорҙа илебеҙҙә барған киҫкен үҙгәрештәр, социалистик йәмғиәттән баҙар иҡтисадына, асылда яйлап капиталистик мөнәсәбәттәргә күсештәр айырым хаталарҙы, ғәҙелһеҙлектәрҙе лә килтереп сығарҙы. Дәүләт милкен анһат юл менән үҙҙәренә беркетеп, йылғыр олигархтар көс-һәләт һалмайынса яман байып китте. Ҡулдарында ҡоро ҡағыҙ ваучер тотоп ҡалған күпселек эшсән халыҡ ярыҡ ялғашҡа ултырҙы, өлөшһөҙҙәр, ярлылар һаны артты, пенсионерҙарҙың хәле мөшкөлләнде.

Бындай хаталар, илдәге боларыҡтар шағирҙарыбыҙҙы ла хафаға һалмай ҡалманы. Мәҫәлән, «Күгем тәпәш, офоҡ яҡын…» тигән шиғырында Мостай Кәрим былай яҙҙы:

*Киңәйгән һайын алдымда*
*Йыһандарҙың сиктәре,*
*Ниңәлер арта шомдарым,*
*Ишәйәләр шиктәрем.*
*Ҡарына ямъыр ҡушыла,*
*Ағы түгел аҡ ҡына,*
*Хәҡиҡәттең алтынында*
*Балсығы бар саҡ ҡына.*
*Инде уйсанраҡ бағам*
*Даръялар ағышына.*
*… Бәлки, төшөнә киләмдер*
*Донъялар айышына.*

Шуныһы яҡшы: бындай борсоулы, хәүефле уй-тойғолар әллә ни оҙаҡҡа барманы кеүек. Шағирҙарыбыҙ күпкә уйсанлана төштө, киләсәккә өмөттәр бағланы. Шиғриәттең тоны, буяуҙары тора-бара яҡтыраҡҡа, яҡшыраҡҡа үҙгәрҙе; лирик, элегик, фәлсәфәүи уй-тойғолар өҫтөнлөк алды.

*Беҙ көллөбөҙ һинең балаларың,*
*Егерменсе быуат!*
*Фатихаңды биреп, аҡ юл теләп*
*Киләсәккә оҙат, –*

тип яҙғайны Мәүлит Ямалетдин «Егерменсе быуат менән хушлашыу» шиғырында.

Шулай яйлап хәҙерге поэзияла ил һәм халыҡ яҙмышы, кеше хоҡуғы һәм бәхете, ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек, намыҫ һәм иман һ.б. социаль, милли, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре менән бәйле темалар үҙәкләшеп китте. Шиғриәттең идея-эстетик, фәлсәфәүи кимәле юғарыраҡ күтәрелде. Шағирҙар Ер шарының, кешелек йәмғиәтенең яҙмышын, ил, халыҡ-ара татыулыҡ, донъялар именлеге хаҡында яңы заман рухында күберәк яҙа башланы.

Тәбиғәт күркен, ер-һыу, һауа сафлығын һаҡлауҙы, хатта йыһани глобаль проблемаларҙы кеше уй-күңелдәре сафлығы, айыҡ аҡыл, рухтың һайығып ҡалыуы менән бәйләп тасуирланы, юғары философик материялар хаҡында ла фекер йөрөттө (М. Кәрим, Р. Бикбаев, Х. Назар поэмалары).

Рауил Бикбаев 2006 йылда баҫылған «Заман һәм әҙәбиәт» исемле мәҡәләһендә: «Яҙыусылар – кешеләрҙе яҡтылыҡҡа әйҙәүсе, яҡшылыҡҡа өндәүсе, халыҡтың

рухи ҡиммәттәрен һаҡларға һәм байытырға саҡырылған көс ул. Бөгөнгө көндә рухи ҡиммәттәрҙең баһаһы айырыуса юғары»,– тип яҙғайны. Бына ошо хәҡиҡәтте һәм үҙенең алдына ҡуйған оло маҡсатты Рауил Бикбаев яңы быуатыбыҙ башындағы шиғри өлгөләре менән үҙе лә үтәй килә. «Юлыма фатиха алдым…» тигән шиғырын егерме беренсе быуат башында, ике меңенсе йыл алдында туған халҡынан фатиха алып, шулай оло юлға сығыуын һөйләп торғандай:

*Алтын көҙҙө һағынғайным,*
*Килде бит алтын көҙөм.*
*Алтын һүҙҙе аңдығайным,*
*Ҡапты бит алтын һүҙем!–*

ти ул ҙур өмөттәр һәм оло дәрттәр менән.

Яңы быуын шағирҙарынан, әйтәйек, Хәсән Назар, Мәүлит Ямалетдин, Тамара Ғәниева, Факиһа Туғыҙбаева, Тимер Йосопов, Ҡәҙим Аралбай, Әнисә Таһирова, Гөлназ Ҡотоева һ.б. хәҙерге егерме беренсе быуат поэзияһына яңы темалар, жанрҙар, поэтик биҙәктәр өҫтәй.

Ҙур талант эйәһе Рәшит Назаровтың шиғри балҡышы үткән быуаттың бер сағыу өнө һәм беҙгә булып яңы заманға күсте. «Заман ярып үтте йөрәкте» тигән һүҙҙәре, йондоҙ итеп күккә атҡан йөрәк өнө әле быуындарҙан быуындарға күсер.

Әгәр Хәсән Назар:

*Ә нимә ул шиғыр? Рухты тотор*
*Аҡыл бит ул, моң ул, һынланыш.*
*Барыһынан бергә ярала ул,*
*Барыһынан элек ул – яҙмыш,–*

ти икән, бында шиғриәттең кеше рухында тотҡан урыны, уй-моңо хаҡында ла һүҙ бара.

Ике быуат арауығында хәҙерге башҡорт поэзияһының алтын фондына инерлек байтаҡ яңы поэмалар ҙа донъя күрҙе. Шулар араһынан Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!», «Баҙар балтаһы», Тамара Ғәниеваның «Катын», Факиһа Туғыҙбаеваның «Ҡаңным – Һомайғоштоң ҡәғбәһе», Хәсән Назарҙың «Асманға ашыу», Ҡәҙим Аралбайҙың «Аҡ тирмә» кеүек ҙур поэмалары тарихи осорҙарҙы иңләгән, заманалар менән заманаларҙы тоташтырған, юғары идея-эстетик йөкмәтке менән һуғарылған эпик шиғри әҫәрҙәр рәтендә. Хәҙер беҙҙең әҙәбиәттә шағирҙың үҙ исеменән монолог рәүешендә яҙылған йыйнаҡ поэмалар ҙа йыш күренә.

Хәҙерге поэзиябыҙ жанр, стиль төрлөлөгөнә бик бай. Абдулхаҡ Игебаев, Таңһылыу Ҡарамыш һ.б. шағирҙар ҡобайыр, дастан формаларына ла мөрәжәғәт итә. Сафуан Әлибай, Гөлфиә Юнысова шиғырҙары күберәк йыр стиленә тартым. Шуға ундай текстарға композиторҙарҙың көй-йырҙар яҙыуы ла бик тәбиғи. Ҡәҙим Аралбай, Мәүлит Ямалетдин, Риф Мифтахов афористик мәғәнәле тапҡыр дүрт юллыҡ шиғырҙарҙы ла үҙ күрә, был жанрҙың оҫтаһы итеп танылалар.

Марат Кәримов, Марсель Сәлимовтар юмор һәм сатира өлкәһендә маһирҙар. Салауат Әбүзәр, Тамара Искәндәриә, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Әхмәр Үтәбай, Азамат Юлдашбаев кеүек йәшерәк быуын шағирҙарҙың образлылыҡ, поэтик форма өлкәһендәге ижади эҙләнеүҙәре – ынғай күренеш. Поэзияға хәҙер уйсан, эҙләнеүсән, өмөтлө шағирҙар күберәк килә.

Егерме беренсе быуат поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә бара, заман рухын, уның драмаларын, яңы уй-тойғолар даирәһен тәрәнерәк һәм тәьҫирлерәк тасуирлау тенденцияһы ишәйә.

Ике быуат арауығында поэзияла үҙенсәлекле моңо һәм поэтик стиле менән

айырыуса Тамара Искәндәриә айырылыбыраҡ тора. Уның шиғриәте, үҙе хис иткәненсә, ете даръя, ете ташҡын булып тулҡынланғандай. «Ете даръя» исемле шиғырҙар йыйынтығының баш һүҙендә үҙе былай ти: «Ете тулҡын булып ҡаҡты йөрәгемә был шиғырҙар, ете даръя булып иңемдән ҡосто. Ете күк ҡатына аштым мин уларҙың сал ялына йәбешеп…

Шуға инандым: яҡты донъяла бөтә нәмә тулҡын ҡанунына буйһона. Ер, Күк, Һауа, хатта Ут та. Ваҡыт һәм ара төшөнсәләре лә».

Искәндәриәнең поэзияһында ике быуат арауығындағы ысынбарлыҡ, тормош, рух донъяһы ете төҫтә, ете тулҡында, ете моңда уйнамаҡсы. Уға ярһыу уй-тойғолар ташҡыны ғәмәлдә ысынбарлыҡ, тормош ипкене менән тоташа. Хыялы – даръялар эсендә йөҙөүгә ҡарағанда ер өҫтөндә, тормош, йәшәйеш ипкендәрендә. Даулы, яулы заманда Тамара – әсә кеше – ярһып, шундай оран да һала «Чечня» тигән шиғырында:

*Тән көйҙөргөс уттан бешектереп,*
*Йән туңдырғыс боҙҙан өшөттөрөп,*
*Йән бирҙергес уйҙан күшектереп,*
*Кемдәр һалды ергә балаңды?*
*Мин бирмәйем уға баламды!–*

тип йөрәк өҙгөс һүҙҙәрен әйтергә мәжбүр.

«Һүҙҙәр» тигән шиғырында шағир әсә үҙ һүҙҙәренең йөрәгенән әрнеү булып ташып сыҡҡанын да әйтә:

*Минең һүҙҙәр –*
*Хистәр тулҡынында*
*Ыуалмайса батҡан*
*Балсыҡтандыр.*
*Әйтмәйенсә таштар булып ҡатҡан,*
*Үҙ ваҡытын көтөп*
*Талсыҡҡандыр,–*

тип тә аңлата быларҙы.

Тамара Искәндәриәнең шиғыр техникаһы, ритмикаһы, строфалары ла бик үҙенсәлекле. Ул традицион милли шиғырҙы вағыраҡ юлдарға бүлгеләү, өҫтәмә юлдар ҡушыу йә тағы нескәрәк ысулдар менән шиғыр структураһын яңырта, өҫтәмә поэтик яңғыраштарға өлгәшә. Үҙе әйткәненсә, шиғриәт мускулын уйната, һулҡылдата ала. «Ете даръя» китабының бүлек исемдәре буйынса ғына ла шиғриәтенең идея-тематик һәм мотивтар даирәһен асыҡ тойорға мөмкин: «Көн – ҡуласам», «Изге утта янды бар тараф», «Күк ауазы», «Тиңдәше юҡ йән байрамы», «Көн менән Төн сиге», «Ысыҡта янған ҡояш», «Яҡты аят».

Ә бына йәшерәк быуын шағирәләренән, мәҫәлән, Гөлназ Ҡотоеваның поэзияһы иһә икенсерәк ҡылдан. Унда лирик мотивтар, ҡупшыраҡ поэтик саралар өҫтөнлөк ала. Гөлназ донъяға һоҡланыбыраҡ баға, ҡупшыраҡ лирик тасуири саралар менән оҫтараҡ эш итә («Ай ҡапҡаһы», «Күңел томбойоғо» китаптары).

Йәки бына Салауат Әбүзәр шиғриәтенә күҙ ташлаһаҡ, бөтөнләй икенсе тип шағирҙы күрәбеҙ. Салауат Әбүзәр – ҡырыҫ тәбиғәтле шағир. Уның шиғриәтендә ҡара буяуҙар, киҫкен тон өҫтөнлөк итә.

*Аҡыл-компас йәшерелде,*
*Йондоҙ балҡымай күктән,*
*Күңел елкәндәрем күптән*
*Дауылдар йолҡоп киткән,–*

ти ул бер шиғырында.

Шуғамылыр уның күпселек шиғырҙарында пессимистик уй-тойғолар ҡуйырғылай, үҙ тормош-көнкүреше, булмышы менән ҡәнәғәтһеҙлек ноткалары йышыраҡ ишетелә. Былар, бәлки, йәш кешенең ҡала шарттарында йәшәү ауырлығы, күп миҙгел фатирһыҙ интегеүе кеүек үҙ тормош шарттары менән дә бәйле булғандыр тәү осорҙарында. Ләкин был ҡырыҫ мотивтар 2004 йыл донъя күргән «Туғыҙынсы тулҡын» китабында ла дауам итә. Ул яҙмышҡа, донъяға һуҡраныу тоно менән өрөтөлә.

Хисмәт Юлдашев шиғриәтендә хәҙерге замандың ҡырыҫ һәм шаҡтай ҡатмарлы күренештәре Себер шиғырҙары шәлкемендә ләүкеп алды. Ысынбарлыҡ ҡырыҫ, донъя ҡатмарлы: быңдай шиғырҙар ҙа – заманалар һулышы.

Тимер Йосоповтың «Быуаттар араһында» тигән шиғырында ла һағайыусан мотивтар ишетелеп ҡала:

*Әсе йылдар ҡағылмаһын*
*Йөрәгем яраһына,*
*Йолҡонмаһын, килеп ингәс*
*Быуаттар араһына.*

Ут-нур образы Тимер Йосопов шиғриәтенә үҙенсә бер йылылыҡ һирпә. Ул йә ерҙе йәшәтер ҡояш булып балҡый, йә игендәрҙе бешерер киске нәжәғәй булып ялтырай, йә тыуған йорт һәм әсә усағылай булып күңелдәрҙе йылыта. Уның йөрәккә ҡабынған ялҡын, батырҙар иҫтәлеген хәтерләткән мәңгелек яныр ут, һөйөү уты кеүек әллә ни хәтле бүтән мәғәнә айыштары, образдары бар. Йөрәктә, усаҡта ут яна икән, тормошҡа ул электр нурҙары булып күскән икән, кеше йәшәй, тормош бар яҡтылышы, яҡшылығы менән дауам итә. Уның «Усаҡ яна» тигән шиғырҙар китабы ана шундай нурлы мотивтарҙан хасил.

Тимер Йосопов поэзияһының иң яҡшы өлгөләре йәшәү, тормош, Тыуған ил һәм халыҡ тураһында тәрән уйланыу, ватансылыҡ тойғоларын йырлау менән характерлы. Ул шиғыр һәм поэмаларында ауыр яу йылдарындағы, тормоштағы фажиғәле хәл-ваҡиғаларға ла йыш мөрәжәғәт итә. Уның лирикаһында нескә тойғололоҡ граждандлыҡ пафосы менән тығыҙ үрелеп бара.

Тимер Йосопов – баҙыҡ тауышлы лирик шағир. Уның шиғриәтенә моңһоуыраҡ мотивтар, бер ни тиклем ҡырыҫлыҡ, саңҡыуыраҡ өн-тауыштар, һаранырак шиғри төҫ-биҙәктәр хас. Күрәһең, былар шағирҙың ярым етем үҫкән бала сағы, ауыр һуғыш йылдары, уның ҡырыҫ осорҙары, тормошонда кисергән ҡыйынлыҡтар менән тығыҙ бәйле.

Байтаҡ ҡына шиғырҙарынан, поэмаларынан үткән замандарыбыҙҙың әскелтем һауаһын, ер-һыуҙарыбыҙҙың ярым ағыулы еҫ-ҡоҫтарын да тойорға мөмкин. «Ҡоштар тубы» поэмаһында яҙғанса, «эскән генә һыуым фенолды ла, әй, ағыулы кискән күктәрем» тип хафаларға төшкән саҡтары ла бар. Радиацияланған Мейәс буйҙары, ағыуланған Арғужа күлдәре, «Маяҡ»тағы атом шартлатыуҙары ла килеп инә уның әҫәрҙәренә. Шағир үҙен хаҡлыҡ, ғәҙеллек өсөн көрәшсе итеп тоя.

*Көнөм дә бар, өнөм дә бар,*
*Һүҙ әйтергә сарам бар,*
*Майҙандарьа сығам әле,*
*Алышырьа самам бар,–*

тип тә ебәрә ул.

Бөтә донъяны, йәмғиәт тормошон, заманаларҙы, тарихты, туған халҡының яҙмышын яңыса, яңы күҙлектән байҡай, баһалай ул. Башҡорт халҡының үҙ тыуған ерендә һаман йыш ҡына ҡыҫылып, ҡыйырһытылған саҡтарын уйлап өҙгөләнә. Ил, тел яҙмышы борсолдора шағирҙы... «Был донъяның ҡайғы-

шатлыҡтары барыһы ла миңә ҡағыла»,– тип тә үрһәләнә. Ошо йәһәттән Тимер Йосоповтың шиғриәте башҡорт әҙәбиәтендә Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев исемдәре менән бәйле ҡыйыу гражданлыҡ поэзияһы традицияларын үҫтерә, үткер публицистик, социаль-фәлсәфәүи стиль ағымын көсәйтә. Ил, халыҡ яҙмышы, милләт хәстәре, замана мәсьәләләре үҙәкләшә. Поэтикаһында кинәйәлек, символ, һүҙ уйнатыу, тел сарлау саралары көсәйә.

Факиһа Туғыҙбаеваның поэтик офоҡтары китабынан китабына киңәйә бара. Әсәгә, балаға һөйөү тойғолары, мөхәббәт хистәре Тыуған иленә, халҡына, уның күренекле шәхестәренә һөйөү, дан йыры булып киңерәк ҡолас ала. Башҡортостан, туған халҡы тураһында уйланыу шағирәнең төп темаһына әүерелә.

«Эй яҙмышым минең – Башҡортостан» тигән шиғыры шуның бер шиғри аккорды һәм тасуири аңлатмаһы кеүегерәк яңғырай:

*Башҡортостан,*
*Һине аңлау өсөн*
*Далаларың кеүек киң күңелле,*
*Йылғаларың кеүек моң-һағышлы,*
*Урмандарың кеүек мең балҡышлы,*
*Ҡаяларың кеүек бейек, серле*
*Булыу кәрәк,*
*Ерем – Башҡортостан!*
*Башҡортостан,*
*Һине аңлау өсөн,*
*Илкәйем тип, ярһып ҡылыс болғап,–*
*Дауам иткән шулай нисә быуат,–*
*Һинең менән бергә яу сабырға,*
*Үлдем тигәс, ҡабат терелергә,*
*Урал батыр булып әүерелергә кәрәк,*
*Эй яҙмышым минең, Башҡортостан!*

«Уян, халҡым!» шиғырында ул оран рәүешендә башҡорт халҡын, республика халҡын суверенитет өсөн көрәштә иң алғы сафҡа баҫырға саҡыра.

*Минең оран яңы оран түгел,*
*Ул бит – Салауаттың ораны,*
*Ул – Бабичтың илгә һуңғы һүҙе,*
*Ул бит – Вәлидиҙең фарманы.*
*Азатлыҡ тип, йәнем баш күтәрә,*
*Ҡара ҡандар тулы бит уртым.*
*Ваҡыт етте! Ғорурлығың ҡайтар,*
*Бәхетеңде ҡайтар, башҡортом!*

Былдай юлдарҙа шағирәнең үткән ҡаһарманлыҡ традицияларын иҫкә төшөрөүе лә, азатлыҡ өсөн көрәштең ни тиклем мөһимлеге лә аныҡ әйтелгән. Аҙаҡтан Факиһа Туғыҙбаеваның Бабичҡа махсус «Тәүбә» поэмаһын, Салауатҡа «Яуап көнө» поэмаһын бағышлауы был традицияларҙы эпик формала киңәйтеп һәм тәрәнәйтеп һүрәтләү күренеше ине.

«Ҡыңғырау» поэмаһында Туғыҙбаева, Уралда атом бомбаһы шартлатҡас, Силәбе башҡорттарының күпме фажиғә кисереүен ҡеүәтле набат – утлы ҡыңғырау ауазы итеп еткерә:

*Йөрәгемде ҡыңғырау итеп ҡоям!*
*Мин тойғанды тойһағыҙ икән,*

*Шулай булмаһа –*
*Мәғәнәһе юҡ тормошоңдоң!*

Шағирәнең поэзияһы тотошлай борсоулы, уй-тойғолар, һағыштар, оло кисерештәр, тетрәнеүҙәр донъяһы кеүек. Ул шатлыҡ-һөйөнөстәрҙе, һөйөү-яратыуҙарҙы башҡаларға йырларға ҡалдырып, үҙенә күберәк моң-һағыштарҙы йыйғандай.

*Үҙ-үҙемде еңдем мөхәббәттә,*
*Йәндә – байрам, алҡыш.*
*Йырҙарымда күккә осто еңеү,*
*Миндә ҡалды һағыш.*
*Бөтөн донъям – һағыш,*
*Һағыш,*
*Һағыш,–*

ти икән, был, тимәк, һис юҡтан түгел.

Әммә уның үҙе өсөн дә, шиғриәте өсөн дә тормош – ҡайғы-шатлыҡтар, һөйөү-нәфрәттәр, яҡшы-яманлыҡтар айырылғыһыҙ булып аралашҡан фани донъя ул.

*Тик бер тапҡыр килгән тормошто мин*
*Ҡабул иткем килмәй фажиғә тип.*
*Атам-әсәм ҡушҡан исемем дә*
*Ожмахтағы емеш – Факиһа бит,–*

ти ул, ошо фекерҙәрҙе аңлатҡандай.

Тамара Ғәниеваның поэзияһына иһә йәшлек романтикаһы, публицистик пафос, лирик нескәлек хас. Бер китабын «Күңел тауышы» тип атауы ла осраҡлы түгел. Тора-бара уның поэзияһында донъяға киңерәк ҡараш, тарихи ваҡиғаларға мөрәжәғәт итеү, үткерерәк проблемалар күтәреү тенденцияһы көсәйә. Ул үҙен дә йыш ҡына сая характерлы ҡыпсаҡ итеп тоя.

«Илгә һүҙем» исемле шиғырында шағирә үҙенең эске күңел донъяһын, поэтик портретын да күпмелер характерлай кеүек:

*Бәп-бәләкәй буйлы бер ҡатын мин,*
*Теләһәгеҙ – яугир ҡатын булам,*
*Теләһәгеҙ – мин йөк аты булам,*
*Теләһәгеҙ – тойғо-хискә тулам.*
*Башҡортомдоң йәне, усағы мин,*
*Тәсбих тартып илгә ғәм юраусы,*
*Доға ҡылып ергә ҡот һораусы,*
*Моңһоулыҡтан моңло йыраусы.*

Ошоларға бәйле рәүештә, Ғәниеваның поэзияһында күндәмлек, сәсәнлек, әсәлек мотивтары ла ҡеүәтлерәк яңғыраш ала. Уның әсәгә, ҡатын-ҡыҙға бағышланған «Минең донъям» шиғыры үҙе генә лә ни тора! «Донъя минең күҙем төҫөндә: Әсәм, балам, йәрем һыны булып, йылынып йәшәй йәнем эстәрендә».

Тамара Ғәниеваның «Ҡыпсаҡтар» поэмаһы ҡыпсаҡ характерлы ҡатын-ҡыҙ образын, ҡыпсаҡтарҙың данлы һәм ҡанлы-яулы тарихын, боронғо йәшәйеш ҡанундарын, ғүмер ағышын, донъя һағышын, ил, халыҡтар мөнәсәбәтен драматик үткерлеге, ҡырыҫ дөрөҫлөгө һәм күңел йылыһы, болоҡһоуҙары менән төплө тасуирлауы йәһәтенән отошло. Быны шағирә китабына яҙған баш һүҙендә үҙе теүәлерәк әйтеп бирә: «Кеше менән кеше, бәндә менән Аллаһы Тәғәлә, баҡыйлыҡ менән фанилыҡ мөнәсәбәттәре Ергә бик аҙға килеп киткән һәр аңлы кешене уйландыра. Минең дә төшөнгө килә быларҙы һәм үҙемде лә,

бүтәндәрҙе лә борсоған ошо төшөнсәләр асылын шиғри образдар аша эҙләйем»,– ти ул.

Унының «Ҡыпсаҡтар» поэма-эпитафияһын урта быуатыбыҙ тарихына, ҡыпсаҡ тоҡомдаштарыбыҙҙың шанлы һәм яулы тарихи ваҡиғаларына, дала көнкүрешенә арналған лирик, романтик, драматик йөкмәткеле әҫәр тип атап була. Тағы Тамара Ғәниеваның үҙе әйткәнен тыңлайыҡ әле: «Башҡорттоң күңел донъяһы, Йыһан-Ер берҙәмлеген аңлатыуҙағы фәлсәфәле символикаһы, эстетик зауығы, поэтик образдар системаһы, тарих тирмәнендәге осош-ҡыйралыштары, булмышы һәм асылы һоҡландыра, уйландыра мине»,– ти ул.

Ошондай уйландырған етди, йыһани мәсьәләләр хаҡында шағирә «Йыһан» тигән поэмаһын яҙҙы. Был поэма, исеме әйтеп тороуынса уҡ, Ер шары һәм йыһан, кеше һәм космос, яҡын һәм алыҫ, күк һәм һауа, Бөйөк рух һәм илаһиәт, фанилыҡ һәм баҡыйлыҡ, үлем һәм ҡалым кеүек глобаль, антиномик, фәлсәфәүи мәсьәләләрҙе күтәрә, шуларға шиғриәт аша яуаптар эҙләй. Автор үҙе: «Мин фанилыҡ илен үтеп киләм, баҡыйлыҡҡа ғашиҡ хәсиәтмен,– тип тора ла,– кире ҡағам кешелектең, йән – мәңгелек, тигән әкиәтен», – тип фәлсәфәүи мәсьәләне, гүйә, ҡырҡа ҡапма-ҡаршы ҡуя. Бындай тыңғыһыҙ йән күп һорауҙарға ғалимдарҙан, аҡыллыларҙан һәм үҙенән дә яуаптар эҙләй. Тормоштоң, йыһандың ҡырыҫ ҡанундары алдында баҙап ҡалғандай ҙа итә. Тора-бара: «Ҡануны ҡырыҫ хаҡ тәҡдирҙең. Кеше бары сәбәп… кеше – есем, уйы бәйләй рухиәтен Ерҙең, рухиәтен, тимәк, Мәңгелеген»,– тигән фекергә лә килә. Ут, һыу, һауа төшөнсәләрендә лә йыһандың йәшәйеше һәм мәңгелеге хәсиәттәрен таба.

«Арҡайым» дастанында иһә шағирә тыуған ил-ере Уралының, туған халҡының бик боронғо тарихына, төпкөл тамырҙарына баға. Тамара Ғәниева был юлы әҫәрен, күрәҙәсе Тамара Глобаның арий ҡәбиләләрен әллә ҡайҙарҙағы Көнбайыш Европа халыҡтарына бәйле юрауын төрки ырыуылы, боронғо һинд-иран тамырлы туған халҡы менән тығыҙ бағлы икәнен ер-һыу, рух, тәңреселек менән нигеҙләп, төплө бер поэтик бәхәскә көйләй. Боронғо дин, Тамара-Тамарис, быуат-быуат каруандары образ-мотивтары ярҙамында былар инаныслы шиғри һынланыш таба. Был образ һәм мотивтарҙы Тамара һуңыраҡ «Тамарис» драмаһында драматик-трагик ситуациялар аша тағы ла үтемлерәк һәм тәьҫирлерәк итеп күҙ алдыбыҙға баҫтырҙы.

Поэтик жанрҙары ла ишле Ғәниева ижадының: традицион шиғыр, йыр, мәҙхиә, акрошиғыр, әйтеш, поэтик доға, алғыш, бағышлауҙар, поэмалар, дастандар, диалогтар, шиғри драмалар.

Шиғриәт – ул һүҙ сәнғәте. Тамара үҙе әйткәнсә, туған телдең сәнғәт дәрәжәһенә еткерелгән гармоник моңло яңғырашы. Унының шиғриәтендәге аҫыл сифаттар ана шул сәнғәтсә гармоник яңғырашта көйләп, баҙлап торалар ҙа инде.

Хәҙерге шағирәләр араһында Йомабикә Ильясованың ижады үҙенсә бер балҡылышлы. Унының айырылып торған үҙ йөҙө, эске моңо бар. Муса Ғәли яҙғанса, «Йомабикә Ильясова ғына тыуҙырған илаһи донъя бар. Уҡыусыға иң ҡәҙерлеһе һәм шатлыҡлыһы – ошо донъяның уйландыра һәм һөйөндөрә белеү һәләте».

«Бәхет эргәһендә» исемле китабына бирелгән аннотацияла Йомабикә Ильясованың ижад кредоһы аныҡ әйтелгән: «Әҙибә күңел түрендә йөрөткән иң ҡәҙерле хистәрен, уйҙар сәңгелдәгендә бәүелтеп, йөрәк яраларына сихәт бирерлек шиғриәткә әйләндерә. Улай ғына ла түгел, тәү ҡарашҡа үтә нескә, үтә юғары булып күренгән шиғырҙар илаһи көскә эйә: уҡыусының тормошонда таяныс булырҙай ҡөҙрәт бар уларҙа».

«Бәхет эргәһендә» тигән китап исеме үҙе үк уйға һалмалы. Нимә ул бәхет?

Бәхет эргәһендәгеһе ни тағы? Быға автор үҙе аңлағанса яуап биреп тә ҡарай: «Бәхет бит ул – аңлап та, аңлатып та булмай торған төшөнсә. Уны тойорға ғына мөмкин. Ҡайһы саҡ бәхетеңде абайламай ҙа ҡалаһың, ҡоштай осоп та юғала. Ҡайһы саҡ, бәхетемә барам, тип ынтылаһың, ә ул, офоҡ һымаҡ, артҡа сигенә. Бәхет эргәһе – офоҡ эргәһе кеүек ул».

Китаптан шул бәхет мотивтарын, төҫмөрҙәрен эҙләй башлайһың:

*Уңыш бар. Ә бәхет икенсе.*
*Яҙмышты яҡтылы иткәнсе*
*Түгелә мең ҡабат хәләл тир.*
*Йә, Хоҙай, миңә лә бәхет бир.*

Артабан:

*Ҡырҡ йәш… Ҡыҙыҡ йәш икән ул:*
*Ниҙер телеп үтә йөрәкте,*
*Өҙөләһең хыял, ихласлыҡтан –*
*Юҡ уларҙа бәхет ҡөҙрәте!*
*«Улар үҙе бәхет»,– ти ҙә күңел,*
*Тыңламай шул ҡырҡ йәш күңелде.*
*Һәм балҡытмай инде бер ҡатлылыҡ*
*Болоҡһоған яҙмыш күгемде.*

Йәки:

*…Яңы йылдан мөғжизәләр көттөм,*
*Инде бер ни өмөт итмәйем,*
*Булған бәхетемде юғалтмайса,*
*Тыныс ҡына ғүмер итәйем.*

Бындай юлдарҙа шағирәнең бәхеткә ҡарата тыйнаҡ ҡарашы һәм сабыр холҡо ла сағыла. Бәхет ҡошон талсығып көткән саҡтарҙа ла, тандыр ғына бәхеттән иҙерәп алған мәлдәре лә бар уның, Йомабикәгә бәхет – донъяға аҡыллы ҡараш, тулы күңел, мәғәнәле йәшәү төшөнсәһе лә ул.

Йәшәү, бәхет, ғүмер, тормош, ысынбарлыҡ хаҡында уйланыуҙар шағирәне йыш ҡына философик фекерләүҙәр, ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы уй-хистәр даръяһына илтә. Үҙе әйткәнсә, «мәңгелектең хәтәр шаңдауҙары» уның шиғриәтенә лә үтеп инә һәм уның бер төрлө ағышына һәм айышына әүерелә бара. Уның өсөн шиғриәт мәңгелектең бер хәрәкәт күренеше кеүек тә, шуның иҫ-аҡыл китмәле ҡатлаулы яҡтарының, илаһилығының үҙенсә бер сағылышы төҫлө лә. Быға «Булған хәл дә түгел», «Мәңгелек», «Мәңгелек – йылға», «Йәйге хәүефһеҙ күк», «Ҡарҙар яуа», «Мәңгелектән», «Был мәл генә түгел», «Дала» һәм башҡа шиғырҙар матур өлгөләр булырлыҡ. Был мотивтар айырыуса тапҡыр мәғәнәле дүрт, һигеҙ юллыҡтарҙа көслө.

Шул уҡ ваҡытта бындай шиғырҙарға тормошсан ябайлыҡ менән бөйөклөк, ғәҙәтилек һәм ҡапма-ҡаршылыҡ, мәл һәм мәңгелек һыҙаттарының йәнәш һәм аралаш килеүҙәре хас.

*Ниҙер китә ниҙер тыуһын өсөн,*
*Донъя ҡоролған шулай иң элек.*
*Ә ғүмерлек йәшлек бәхетме ни,*
*Мәл үтеүе менән тик мәңгелек,–*

ти икән автор, бында һәммәһе лә айырылғыһыҙ булып бергә үрелгән.

Алла, Хоҙай образының һынлаша барышы, илаһилыҡ мотивтарының поэтик яңғырашы ла Йомабикәнең шиғриәтенә бик тәбиғи рәүештә килеп инә һәм уны эстән биҙәй генә, тиергә кәрәк.

*Ҡайҙа Алла? –*
*Һәр бер һулышта,*
*Яҡтылыҡ ул*
*Беҙҙең булмышта.*
*Ҡайҙа Алла?*
*Ул – беҙҙең янда,*
*Өр-яңынан*
*Тыуырға аңда,–*

тигән юлдарҙы уҡыйһың икән, уларҙың изге Ҡөрьән аяттарынан ингәнен тояһың.

Ысынбарлыҡҡа, тормоштоң үҙенә ҡайтып, мәсәлән, ир менән ҡатын, әсә менән бала мөхәббәте ниндәйҙер сағыу алҡыштарға һәм балҡыштарға һис мохтаж түгел кеүек. Ысын тәбиғи һөйөүҙең яһалма күпертеүҙәргә мохтажлығы юҡ. Был хаҡта Йомабикә ҡалай хаҡлы әйтә:

*Ябай ғына шул һөйөүҙән*
*Тыуған өсөн донъя бөйөк.*
*Ҡояш, йондоҙ һәм ай төҫлө –*
*Сере алыҫ, сере бейек.*

Ул серҙең бейеклеген һәм бөйөклөгөн нисәмә мең йылдар буйы бөйөк шағирҙар ҙа тасуири асып, асыҡлап еткәне юҡ әлегәсә. Етһәләр, ҡыҙығы ла, һәр кем өсөн үҙ сере лә ҡалмаҫ ине.

Йомабикә Ильясова поэзияһы тасуири саралар йәһәтенән һаран. Унда, эмоцияға ҡарағанда, аҡыл, фекер өҫтөнлөк итә. Ул йыш ҡына традицион күренештәрҙең дә ниндәйҙер тәбиғи, әммә бүтәндәр күрмәгән һыҙаттарын тотоп ала белә. Миҫал өсөн көҙ тәбиғәтен, уның төҫөн нисек һүрәтләүен генә алайыҡ. Уның көҙөндә ниндәй генә төҫ һәм төҫмөрҙәр юҡ: ул бойоҡ, илаҡ көҙ, берсә тотош һағыш, берсә моңһоу, берсә ялҡытҡыс ямғырлы, бысраҡ-бысҡылдыҡ. Шул ул ваҡытта ҡояшҡа, тән миҙгеленә ҡарай алтын көҙө, әбейҙәр сыуағы, мул уңышы, тын саҡтары, япраҡ ярыуҙары, сал сыуаҡлы мәлдәре бар. Йәғни көҙ миҙгеленә, аҙналап, көнләп алмашына, төрлөләнә тороуына ҡарата шағирәнең күңел төҫмөрҙәрен дә, уй-тойғоларын да үҙгәртә, һағышландыра, моңайта, уйсанландыра, үкендергәндәй ҙә итә, болоҡһота. Шулар поэтик биҙәктәр, эске моң-һағыштар булып шиғыр юлдарына күсә, төҫ-моң биҙәктәрен төрләндерә: «Бөтәһе лә үтә. Был да үтер, тип йыуата мине Көҙһылыу». Шағирә хаҡлы: «Тыштан ябай ғына күренһәм дә, мин бит моң да, яҙ ҙа һәм көҙ инем». Әҙәби термин менән әйткәндә, көҙ образы, уның миҙгел төҫ-моңдары – поэтикаһының һәм шиғри палитраһының бер көҙгөһө.

Йомабикә Ильясованың иң яратып ҡулланған икенсе объекты – япраҡ. Уның көҙгө һары япрағы, тәбиғәттәге шикелле, унда көҙ менән ишкә ҡуш булып йөрөй. Япраҡтарының ниндәй генә төҫ һәм төҫмөрҙәре юҡ: ул һарыһы, сағыл сөмө, ҡоңғор күге, төрлө төҫлө сыбары, сөмбөлө… Һары япраҡ, япраҡтар яуымы, ергә түшәлеп, аяҡ аҫтында шауҙырлап ниндәйҙер тауыштар сығарып ятыуҙары, көнгә яна-яна, көҙгө ҡырауҙарҙан ҡурыла, төрлө төҫтәргә инә, шиңә, шағирә күңелен донъяның фанилығына, ғүмерҙең төрлө миҙгелдәренә, фәлсәфәүи уй-фекерҙәренә бәйле уй-һағыштарға батыра, шиғриәтен поэтика күҙлегенән күсмә мәғәнәле, философик йөкмәткеле, төҫ-моңдарға ишле, тасуири биҙәкле мотивтар, поэтик төҫтәр, шиғри моңдар менән һуғара. «Шиғриәт тә тәбиғәттең төҫө, мәңгелек хәрәкәте кеүек ул»,– ти Йомабикә бер интервьюһында.

Йомабикә Ильясованың поэзияһы, – нигеҙҙә, медитатив лириканан торған, йәғни тәрән уй-тойғолар, психологик кисерештәр менән һуғарылған ижад.

Унын күпселек шиғырҙары фекер тығыҙлығы, хис-тойғолар гаммаһы, тасуири биҙәктәр уйнауы, төҫ-моңдар төрлөлөгө һәм асыҡ, тапҡыр һүҙ-фразаларға ҡоролошо менән отошло. Шуға унын шиғырҙары һыу буйы оҙон түгел – ҡыҫҡа, шиғри мускулатуралы яҙмалар. Уларҙың күпселеге күләме менән дүрт-биш строфанан артмай. Үҙәктә ике-өс юллы йыйнаҡ шиғырҙар тора. Шуға Йомабикәнең үҙен миниатюр шиғырҙар оҫтаһы итеп танытыуы һис осраҡлы түгел.

Йәшерәк быуындан Гөлназ Ҡотоеваның поэзияһын «Күңел томбойоғо» йыйынтығы буйынса һөйөүҙән, һағыштан туҡылған шиғриәт тип атарға була.

Яңы быуат башында ул саҡта йәшерәктәрҙән Фәнил Күзбәков «Ағиҙел» журналы биттәрендә үҙ тауышын асығыраҡ ишеттерә башланы. Ҡәләме шымарып еткәндәй итте.

*Әй, уй етмәҫ бейеклектең*
*Илаһи бөйөклөгө!*
*Рухи осош-ынтылыштың*
*Камил үҙ төҙөклөгө!–*

кеүек строфаларына ҡарағанда, ул рухи яҡтан да осош, күтәрелеш кимәлдәрен дә самалағандай ине.

Фәнил Күзбәковтың күпселек шиғырҙары көйләп-йырлап торғандай. Шағирҙың халҡыбыҙ ижадына, йыр хазинаһына инеп китеүҙәре лә һис осраҡлы түгел. Унын ҡобайыр, һамаҡ стиленә тартым шиғырҙары ла бар. Ф. Күзбәковтың ижад диапозоны йылдан-йыл киңәйә бара, поэтик багажы һәлмәкләнә килә.

Силәбе яҡтарындағы ҡан ҡәрҙәштәребеҙгә арналған «Урал һырттары күренер» шиғырында ниндәй матур һәм тәбиғи сағыштырыу, метафора, гипербола сараларын оҫта ҡуллана.

*Шаҙраланған һыу өҫтәре*
*Яҙыулы биттәрме ни?!*
*Башҡайыма уйҙар һарый –*
*Айырған күстәрме ни?!*

Шағир, Урал таштарын сағып уй-осҡон сығарғандай, тәбиғәттең, йәшәйештең мәңге йәшәр күренештәренән дә поэтик ут-саҡҡыһын таба белә һәм күңелдәргә еткерә ала. Тимәк, барыһы ла тәбиғәттән, тәбиғи һәләттән килә.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә ике быуат араһында һәм яңы быуат башында сонет жанры бер аҙ ләүкеп алды. Айырыуса Муса Ғәли менән Әнисә Таһированың сонеттарында милли тематика ғына түгел, был жанрҙың милли поэтик үҙенсәлектәре лә сағылды. Башҡорт сонетының үҙгәрәк рифмалашыу тәртибе, яңыраҡ шиғри ҡалыптары барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, Муса Ғәли «Ҡурайсыңдар» исемле егерме сонеттан ойошҡан сонеттар шәлкемендә был ҡатмарлы шиғыр формаһының үҙенсә ирекле бер милли шәлкемен ижад итте. «Сонеттың эске һәм тышҡы һыҙаттары, билдәле шартлылығы алдында мин шаҡтай оҙаҡ уйландым,– тигәйне шағир үҙе.– Шиғыр тыуа һәм ундай шиғриәт әҫәрен «сонет»та, «Ҡурай» һәм «сың» һүҙҙәрен ҡушып, яңы бер ҡушма һүҙ – «Ҡурайсың» тип атаһаң, килешлерәк тә булыр кеүек».

Был «Ҡурайсыңдар» сонет шәлкеме исеме, композицияһы, рифма системаһы менән дә милли үҙенсәлеккә эйә: исемендә үк моң менән шиғыр яңғырашы берләшкәндәй, ҡурайсың шиғырҙары егермегә еткән, шиғыр юлдары теүәл 280, һәр сонет рифмалаш юлдар менән ҡаймаланған, һәр башланмыш һәм тамамланмыш сонет юлы унын аккорд һүҙе, төп мотивы рәүешен алған. Ул юлдар, егерме сонеттан үтә-үтә, шәлкемдең лейтмотивын хасил иткән.

Муса Ғәли сонеттарынан бер миҫал:

*Ҡурайсым, башлап ебәр йырҙы…*
*Килә бер йыр, өҙөлөп тә килә,*
*Килә икән ҡайһы тарафтарҙан?*
*Ҡалҡышамы дала күкрәгенән*
*Йә изгелек сәскән ҡараштарҙан?!*
*Әй, яҡын да был моң, яҡын миңә,*
*Күрмәйемсе үҙем – ҡайҙан килә?*
*Урмандарым миңә бышылдаймы,*
*Елдәр мәллә тауҙан тауға елә?*
*О, йырлай был йәнем, утлы тәнем –*
*Күрмәйһегеҙме ни күҙ-йөҙөмдән?*
*Бер моң көйөк, үҙе мең моң көйөк,*
*Күңелемдән килә, ул – үҙемдән.*
*Башлап ебәр йырҙы, ҡурайсыңым!*

Үҙе йыр-музыкаға һәләтле шағир Мәүлит Ямалетдин ике быуат арауығында шиғриәтебеҙгә үҙенә генә хас уй-хистәр, моңдар алып килде.

Әле үткән быуат аҙаҡтарында уҡ Рауил Бикбаев бер мәҡәләһендә: «Мәүлит артыҡ яңырауыҡ һүҙҙәр, иҫ китмәле буяуҙар менән мауыҡмай, ябай ғына күренештәр, һаҡ буяуҙар аша уҡыусы күңелен арбап ала белә»,– тип шағирҙың үҙенсәлекле яҡтарын билдәләп үткәйне.

Тәүге китабын асып ебәргән шиғыры уҡ бөтөн ижадына инеш, лейтмотив булыр йыр башы кеүегерәк:

*Тыуған яғым гүзәл яҡ булды,*
*Һөйгән малҡайҙарым ат булды,*
*Яман юлда йөрөү ят булды,*
*Күп йырҙарым дәртле, шат булды,*
*Ысыҡ күҙе һымаҡ саф булды,*
*Халҡым күңеле аҫыл таш булды,*
*Рухым аҙығына тат булды.*

Ҡобайыр стилендәрәк яҙылған был юлдарҙан, рәдифле рифмаларҙан поэтик аккорд өндәре ишетелеп торғандай.

Мәүлит Ямалетдин күп кенә шиғырҙарын эпос, легенда, йыр мотивтарына көйләп ебәрергә лә ярата. Үҙе йырсы, музыка оҫтаһы булған шағир поэтик әҫәрҙәрен дә тәрән моң менән һуғара. Бына «Балан» тигән шиғырын тыңлайыҡ:

*Урман моңо – кәкүк ҡайтты инде,*
*Һаҙ баланы сәскә атты инде;*
*Һине осратып минең йөрәккәйем*
*Мәңгелеккә ғазап тапты инде.*
*Бал ҡорттары балға туйҙы инде,*
*Аҡ сәскәһен балан ҡойҙо инде;*
*Йылдар, мәшәҡәттәр күҙ алдынан*
*Төҫ-һыныңды һинең юйҙы инде.*
*Бөгөн төндә ҡырау төштө инде,*
*Һаҙ баланҡайҙары беште инде;*
*Ғазапланыр йөрәк: балан кеүек*
*Бешкән сағың иҫкә төштө инде.*

Тәбиғәт менән кеше күңелен йәнәш ҡуйып, шулай һәр һүҙен, һәр юлын уйтойғо хәрәкәте, ишле яңғырашлы итеп тасуирлау шиғырҙы шау моңға күмә.

Ҡайһы ғына шиғырҙар йыйынтығын уҡып ҡарама, уларҙа башҡорт халыҡ йырҙарынан, ҡобайырҙарынан килгән мотивтарҙы, поэтиканы, туған халыҡтың

моңон, күңел байлығын Мәүлиттең йөрәге тойоуын, үҙ рухы, күңел байлығы менән һуғарып үҙ йырына, үҙ моң яйына әйләндереү оҫталығына һоҡланаһың, үҙең моңға һуғарылаһың. Халыҡсан тасуирлауҙарҙы ул ҡалай оҫта ҡуллана, үҫтерә, тәрәнәйтә белә!

Мәүлит Ямалетдин күп кенә шиғырҙарына эпиграф итеп халыҡ йырҙарынан бер-ике юл ала икән, ул әҫәргә бер поэтик асҡыс, көйләнеш һәм лейтмотив булып әүерелә. Шиғырға йыр мотивы, ритмы, композитор эшкәрткән көй кеүек, бөтә әҫәргә моң өҫтәй, үҙенсә поэтик аранжировка рәүешен ала.

Халыҡ йыры хаҡындағы бер шиғырында ул:

*Ниндәй көслө, тәрән хисле һүҙҙәр,*
*Ниндәй иҫ китмәле шиғриәт!*
*Халыҡ йыры!*
*Һин өлгөһө моңдоң,*
*Һиндә тылсым, һиндә сихриәт,–*

ти икән, был юлдар авторҙың поэзияһын көйләр камертон булып әүерелер үҙ ижадында.

Хоҙай Мәүлит Ямалетдиндән һәләтте һис йәлләмәгән, өймәләмә итеп биргән: ул шағир ҙа, йырсы ла, музыкант та, ҡурайсы ла… Был – үҙе бер феноменаль күренеш. Йәғни Мәүлиттең моң тондарын, уй-хистәр симфонияһын тәрән тойоуы шиғриәтен шунса моң-тондарға көйләй. Бының нескәлектәрен шағир бер шиғырында былай аңлата:

*Мажор менән микор ҡалыбының*
*Айырмаһы ярты ғына тонда.*
*Икеһенән тыуған хис араһын*
*Ҡаплап тора ярты фани донъя.*
*Шул бөтәһе лә бер күңелгә һыя.*
*Шатлыҡ менән ҡайғы ағышының*
*Айырмаһы ярты ғына һүҙҙә.*
*Икеһенән тыуған хис араһын*
*Билдәләрлек үлсәм юҡ ул беҙҙә.*

Бындай миниатюрлы шиғри йәнәшәлек (параллелизм) алымында пластика ла, поэтик симметрия ла, музыкаллек тә, мажор һәм минор тондарҙың контрастлығы ла нескә хәсиәтле.

«Йомортҡаның йөйө юҡ», «Һаумы, ҡобайыр», «Бер тигәс тә…» ише ҡобайырҙарында фольклорҙағыса ҡобайырҙарҙы стилизация алымдары менән дә, йәғни үҙенсә һарнап та, эске рифмаларҙы иркен ҡулланып та заманса яңғыраштарға өлгәшә.

Әйткәндәй, Мәүлит хәҙерге поэзиябыҙҙа борондан килгән һарнау жанры шәкеленә лә яңы һулыш өрөп ебәрҙе. Халыҡ поэтик ижадындағы традицион алғыш, әйтеш, хушлашыу, бәйет, һамаҡ һымаҡ жанр формаларын да моңэстетик маҡсаттарҙан бик оҫта ижади ҡуллана белә. Былар барыһы ла сәсәнлек мәктәбе менән бағлы.

Бына бер шиғыр:

*Ер шары – йәшел тубырсыҡ – йәй көнө,*
*Һап-һары май тумалағы – көҙ көнө,*
*Кипкән ҡорот бер йоморсаҡ – ҡыш көнө,*
*Мөғжизәле бер йомғағы – яҙ көнө,*
*Йәшәйештең бер йомағы – һәр көнө.*

Шағир «Ыҙан» исемле китабында ижадының социаль, рухи, мәҙәни, әхлаҡи,

фәлсәфәүи, этик, эстетик аспекттарын күпмелер дәрәжәлә айырым бүлектәргә туплабыраҡ бирә.

Мәүлит Ямалетдин ижадында боронғо Ҡытай, Иран, Һиндостан классик шағирҙарынан, атап әйткәндә, Цин Цинзиҙан, Кәйе Ибн әл-Мәүләүиҙән, Рудакиҙан, Ғүмәр Хәйәмдан башҡортсаға оҫта тәржемәһе рухи-шиғри ҡаҙнабыҙҙы ғына түгел, уның үҙен дә ошондай илаһи үрнәктәргә таянып үҙ ҡәләмен сарларға, бына тигән робағиҙар яҙырға булышлыҡ итте. Ҡөрьән сүрәләре, хәҙистәр мотивына шиғыр шәлкемдәре яҙҙы, эпик әҫәрҙәр тыуҙырҙы.

Башҡорт әҙәбиәтендә һуғыш йылы балаларына ҡарар бер төркөм яҙыусылар бар. Улай ғынамы, һуғыш башланған 1941 йылда тыуғандары үҙҙәре үк ишле: Ҡәҙим Аралбай, Сафуан Әлибай, Рауил Ниғмәтуллин, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Әнисә Таһирова, Наил Ҡотдосов, Шамил Хажиәхмәтов, Радик Хәкимйән… Хикмәт шунда: был һәм бынан һуңғы байтаҡ йылдар уларҙың психологияһына, рухи донъяһына ғына түгел, ижадтарына ла үҙенсәрәк эҙҙәр һалып ҡалдырҙы, мәғлүм тема һәм мотивтарҙы алғы планға сығарҙы. Был быуын йәшенә ҡарағанда иртәрәк өлгөрҙө. Яу йылдары һәм уның һуңғы шаҡтай ауыр осор уларҙы тиҙ сыныҡтырҙы.

Быны Ҡәҙим Аралбай поэзияһы айырыуса асыҡ сағылдыра. Уның, әйтәйек, «Атай йәшен йәшәгәндә», «Иҫке яралар», «Һалдат гармуны», «Йылытығыҙ йәндәрҙе!», «Аҡ дала әкиәте», «Шәжәрә» ише шиғырҙары, «Таналыҡ тауышы» поэмаһы – быға төп дәлилдәр.

Ҡәҙим Аралбайҙың тормош юлы һәм эш-һөнәрҙәре лә үрнәкле: мәктәп, университет, аспирантура, армия хеҙмәте, шофер, уҡытыусы, журналист, партия эшмәкәре, нәшриәтсе. Былар уның ижадына, поэтик әҫәрҙәренә лә үҙ эҙен һала.

Ҡәҙим Аралбай – дала улы, Хәйбулла районынан. Уның поэзияһында – ошо яҡ дала тәбиғәте, шаҡтай ҡырыҫ шарттар. Геройҙары – уңған дала улдары һәм ҡыҙҙары. Шағир өсөн «дала ҡото – юшан, әсе әрем, етен кеүек йомшаҡ күк юрған». Ағас тигәндәре – йылға буйы талдары, муйыл, баландары икән, далалағы селек һәм ҡылғандары – уйым-уйым дала биҙәге. Төп байлыҡтары – офоҡтарҙан офоҡтарға һуҙылған иген баҫыуҙары, дала киңлектәре.

Уның шиғриәтендә шуларҙың поэтик сағылышын күрәбеҙ. «Таналыҡ тауышы» исемле поэмалар, шиғырҙар, робағыйҙар йыйынтығы – шуның бер йөрәк тауышы, поэтик көҙгөһө төҫлө.

Хәйбулла далаларының бер йәме һәм мәңге тере йәне – Таналыҡ йылғаһылыр, моғайын. Әлбиттә, Таналыҡ Ағиҙел дә, Ҡариҙел ише лә түгел, талғын ғына ағып ятыр кескәй дала йылғаһы. Һәр кемгә үҙ яғының ер-һыуҙары ғәзиз, үҙенсә матур һәм танһыҡ. Ә хәҙерге көндә инде Таналыҡты быуып яһалған һыу һаҡлағыстары кескәй диңгеҙ төҫлө йәйелеп ятыр.

Ҡәҙим Аралбайҙың ғәзиз Таналығы, үҙе әйтмешләй, башҡортса йырлап аға. Таналыҡ ағышының тауышында ата-бабалары көйләп уҡыған Ҡөрьән мәҡам моңдарын да ишетә шағир. Далаларҙы, иген баҫыуҙарын һуғарыр игелекле һыу шул. Шуға «Таналыҡ тауышы» поэмаһының бисмилла һүҙе Ҡөрьән аяты менән башланып, ҡөрьәнсә «амин» һүҙе менән тамамланыуы ла ерле юҡтан түгел.

Бына «Шәжәрә» шиғыры: «Шәжәрә – ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә». Уға, мәҫәлән, Мәмбәт шәжәрәһендә «Мәмбәт бейҙең ҡайнар ҡаны, Ғәбит батырҙың ҡоно, Иҫәнғол тархандың даны» ла теркәлер. Мәмбәт ырыуының бар тарихы ентекле яҙылыр. Шағирҙары Аралбай быны шиғыр итеп тә яңғыратыр, ҡалын ҡулъяҙма шәжәрә тексын айырым китап итеп тә сығарыр.

Ғөмүмән, Ҡәҙим Аралбай поэзияһында тарихилыҡ рухы бик көслө. Шағир йыш ҡына туған халҡының данлы һәм ҡанлы тарихына, уның батыр һәм уҡымышлы шәхестәре тормошона мөрәжәғәт итә («Сапҡын», «Батыр яраһы», «Тарас

менән Ҡарас» поэмалары, «Батырҙар ораны» либреттоһы һ.б.). Унының айырыуса «Аҡ тирмә», «Таналыҡ тауышы» исемле китаптары жанрҙар, лиро-эпик формалар байлығы, ритмик-интонацион төрлөлөк, тасуири саралар, поэтик алымдар ишлеге менән айырылып тора. «Һағышнамә» исемле поэмаға торошло балладаһы утлы-һағышлы уй-тойғолар йомғағы кеүегерәк. Донъялар именлеге, тәбиғәт йәмен, кеше күңелдәрен һайығыуҙан һаҡлау, бар нәмәгә хәстәрле һәм ғәмле ҡараш тураһында уйланыуҙар, болоҡһоуҙар менән һуғарылған ул.

Ә бына Гөлнур Яҡупованың «Әҙәм һәм Һауа» поэмаһы дини-рухани тематикаһы, романтикаһы, аллегорик стиле, боронғо һүрәтләү элементтары менән үҙенә арбай. Шуны аныҡ билдәләргә кәрәк: хәҙерге поэзиябыҙҙа дини-рухани тематика әүҙемләшә бара. Көнсығыш поэзияһына хас был тема һәм рухиәт, илаһиәт рухы үҙенә хаҡлы урынды биләренә өмөт ҙур. Бирһен Хоҙай.

Егерме беренсе быуаттың тәүге ун йылы ла үтеп бара. Илебеҙ күптән социалистик йәмғиәтте уҙған быуатта ҡалдырып, йәмғиәттең иҫке ыҙанына – капиталистик йәмғиәт шарттарына ҡайтты. Шуға бәйләнештә идеологияла, сәнғәттә, әҙәбиәттә лә мәғлүм бер үҙгәрештәр бара. Совет сәнғәтендәге һәм әҙәбиәтендәге социалистик реализм тип йөрөтөлгән ижад методы ла тарихҡа күсте. Хәҙер әҙәбиәттә, сәнғәттә яңы реализмы, романтизм методымы, әллә авангардистик, модернистик метод йә ағымдармы алғараҡ сыға. Бөтә донъя әҙәбиәте хәҙер күберәк шул даирәләрҙә ҡайнай. Был йүнәлештә хәҙерге башҡорт поэзияһында ниндәй үҙгәрештәр, яңырыштар бар һуң?

Егерме беренсе быуат башындағы хәҙерге поэзиябыҙ әүәлгесә традицион ижад булып йәшәп ята. Уға бөтә донъя күләмендә барған поэтик, методологик үҙгәрештәр, модернизм, авангардизм йүнәлештәре тамсы ла ҡағылмай төҫлө. Әлегә был яңы ағымдар айырым тенденция рәүешендә бер-ике йәшерәк башҡорт шағиры ижадында ғына сарпылғылап ҡалалыр ҡалһа.

Шуларҙың береһе – Азамат Юлдашбаев. Ул 2004 йылда «Мәлъяҙмалар» исемендә кескәй йыйынтығын сығарҙы. Ундағы шиғырҙарҙың поэтикаһы, стиле тотошлай модернистик йүнәлешле.

Бына «Бөгөнгө Гефест» тигән шиғырында ни ти ул:

*Аҡһаҡ йән,*
*пеләш аҡыл менән*
*донъя буйлап*
*кеше кәйефтәрен йыям –*
*яңы аллаларҙың яңы өйҙәренә*
*яңы биҙәктәр кәрәк.*

Был кескәй шиғырҙа традицион рифма ла, традицион төҙөк строфа ла юҡ – барыһы үҙенсә, ярым проза, ярым теҙмә. Әммә үҙенсә уйға һала торған, пародоксаль яғы менән уйландыра торған юлдар.

Шунса ҡыҫҡа, тапҡырыраҡ шиғырҙары күп авторҙың. Мәҫәлән:

*Ҡул һуҙымы ара ғына бәхеткә.*
*Нисәнсе йыл үтәм ошо араны.*
*Инде арыным.*
*Шулай ҙа,*
*тағы бер аҙ барам да…*

Ғәҙәти булмаған теҙмә был. Шул ғәҙәтиһеҙлеге, сәйер генә уйҙары менән иғтибарҙы биләй, уйҙарға һала. Шиғырға шул етә.

Тағы бер ике миҫал:

*Соцреализмдан –*
*Сос реализм аша…*
*SOS реализмға...*

***

*Һөйкөмһөҙ көн*
*Йәнде ергә ҡуша ҡыҫа –*
*Өмөтләнеп көткән йәйем ошомо?..*

Был өс юллыҡтар японДарҙың хокку тип аталған ҡыҫҡа жанрҙарын хәтерләтә. Тимәк хокку ҙа башҡортса яңғырарға хаҡлы.

Бына яңы шиғырҙар шәлкеменән йәнә бер нисә миҫал:

*Йәйәндең кереше тартылған –*
*Ул хәҙер балконда кер бауы.*
*Ҡалъяңда – һыңар уҡ.*
*Әлегә бар ҙа ул.*
*Теләһәң – йәшәргә хоҡуҡ,*
*Теләһәң – йәшәмәҫкә…*

Бында иһә уйландырыр үҙенсә бер образлылыҡ ҡалҡып сыға. Алдағы тағы бер-ике строфа:

*Тәмәкең төтөнө – дүңгәләк,*
*Һүнгән лампаъа оса*
*Яңғыҙ күбәләк.*
*Был бисара – ишара.*

***

*Үҙем менән*
*хыял тулы күңел һәм буш янсыҡ,*
*тышта иһә – танһыҡ таң һәм һуңғы ысыҡ.*
*Сыҡ:*
*Яурынына һалып салғыһын*
*Көтә тилмереп ҡара ҡарсыҡ.*

Строфала эске рифмалар, аллитерациялар нисек матур яңғырай. Тимәк, бындай оригиналь поэзия ла йәшәргә хаҡлы.

Көнбайыш шиғриәтенә хас бындай поэтик стиль, үҙенсә бер йүнәлеш кеүек, киләсәктә башҡорт поэзияһында ла, бәлки, нығынып китер.

Хәҙерге поэзиябыҙҙа йәнә Рәйес Түләк «Мең дә икенсе кис…» исемле тос китабы менән поэтик күгебеҙҙә ҡапыл балҡып һүнгән яҡты йондоҙ кеүегерәк кенә булды. Уның шиғриәте заманыбыҙҙы сос күҙәтеүсәнлеге, поэтик стиле менән үҙенсәлекле. Шиғыр һәм поэмаларында модернистик тенденциялар сағыла биреп ҡалды. Хәҙерге бөтә донъя көнбайыш һәм көнсығыш модернистик шиғриәте хаҡында ул: «Улар образдар ассоциацияларын фонтан һымаҡ бөркә, уҡыусыға йә тыңлаусыға үҙ фантазияһына ҙур мөмкинлектәр ҡалдыра»,– тигәйне. Шундай сатлы фекерҙәр үҙенең «Ҡашмау» поэмаһында көслөрәк сарпыла.

Бөгөнгө башҡорт поэзияһы үткән традицияларға таянып, хәҙерге поэтик тенденцияларҙы күҙәтеп, үҙ милли-эстетик үҫеш, күтәрелеш юлын дауам итә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ**.

# *Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала Сыңғыҙ Айытматов көндәре*




*12 – 14 октябрҙә Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айытматовтың ижади мираҫын өйрәнеүгә арналған Халыҡ-ара ғилми конференция үтте. Унда Башҡортостандан БФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисамитдинова менән филология фәндәре кандидаты Гөлназ Ҡотоева ҡатнашты. Америка Ҡушма Штаттары, Рәсәй (Мәскәү, Ҡазан), Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Үзбәкстан, Япония ғалимдары менән бер рәттән улар Сыңғыҙ Айытматовтың һәм башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә мифологик мотивтар, донъя кимәленә күтәрелгән ҡырғыҙ яҙыусыһы ижадының башҡорт рухиәтенә йоғонтоһо хаҡында сығыштар яһаны.*

*Анкара университеты һәм ТЮРКСОЙ ойошмаһы тарафынан ойошторолған был конференцияның программаһына күренекле яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре хаҡында документаль, «Аҡ пароход» нәфис фильмдарын, уның әҫәре мотивтары буйынса Эскешехир ҡалаһы дәүләт театры ҡуйған «Маңҡорт» спектаклен ҡарау ҙа индерелгәйне.*

*Айытматов көндәрендә шулай уҡ Сыңғыҙ Айытматовтың һеңлеһе Роза Айытматова, Зәйнулла Рәсүлевтың бүләсәре, Мәскәү дәүләт педагогия университеты профессоры Әминә Ғәзизова, Абай һәм Мөхтәр Ауэзов ижадтарын өйрәнгән Николай Анастасьев ҡатнашты. Сыңғыҙ Айытматов менән берлектә «Диалог» китабын яҙған, Ҡаҙағстандың халыҡ яҙыусыһы, «Жалын» журналының баш мөхәррире Мөхтәр Шахановтың сығышы ла онотолмаҫ тәьҫораттар уятты.*

*Беҙ бөгөн ғилми конференцияла ҡатнашҡан һәм уның юғары трибунаһынан сығыш яһаған Башҡортостан вәкилдәренең докладтарын уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.*

# СЫҢҒЫҘ АЙЫТМАТОВ ҺӘМ БАШҠОРТ ЯҘЫУСЫЛАРЫ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ МИФОЛОГИК МОТИВТАР*

Сыңғыҙ Айытматов исеме Башҡортостанда күптән инде таныш һәм яҡын исемгә әйләнгән. Хатта күп кенә башҡорттар: "Ул бит минең тормошомдо яҙған, ҡайҙан белде икән, кем һөйләне икән?" — тигән аптыраулы һорауҙар ҙа биргеләйҙәр. Ысынлап та, С. Айытматов геройҙары, уларҙың яҙмышы элекке Советтар илендә йәшәгән һәр кемдең үҙенән, йә туған-тыумаһынан, йә ауылдаштарынан яҙылған кеүек. Әлбиттә, бының сәбәптәре С. Айытматовтың совет кешеһенең яҙмышын ил яҙмышы, уның ҡанлы һәм шанлы тарихы менән бәйләп, дөйөмләштереп талантлы бирә белеүендәлер. Ә инде башҡорттарға, ҡаҙаҡтарға, нуғайҙарға һ.б. элекке совет иленең төрки халыҡтарына килгәндә инде, бының үрҙә әйткән тәүге сәбәбенә С. Айытматовтың фольклорға, мифологияға нигеҙләнеп яҙыуы ла өҫтәлә. Ысынлап та, С. Айытматов әҫәрҙәрендә сағылыш тапҡан мифологик мотивтар, мификлаштырылған персонаждар, урындар, хайуандар, үҫемлектәр бер ҡырғыҙ халҡы өсөн генә түгел, башҡа төркиҙәр өсөн шул тиклем яҡын, сөнки улар олатай-бабаларҙан ҡалған уртаҡ байлыҡ — боронғо мифологик ҡараштарға нигеҙләнгән. Һәм иң ҡыҙығы шунда: ул ҡараштар, сюжеттар, мифологик атамалар бөгөн дә төрки халыҡтарында йәшәй, уларҙың тормошона, яҙмышына тәьҫир итә, яңы быуын формалашыуында ҙур роль уйнай. Миҫалға С. Айытматовтың бүреләр, Болан-әсә кеүек мификлаштырылған образдарын алһаҡ, беҙ уларҙы төрки халыҡтарының барыһының тип әйтерлек мифологияһында осрата алабыҙ, уларҙың бөгөн дә халыҡ тормошонда ҙур роль уйнауын күрәбеҙ. Мәҫәлән, болан мифологияһын алһаҡ, төрки халыҡтарының береһе булған башҡортта болан культы менән бәйле легендалар, йолалар, тыйыуҙар әле лә йәшәп ята. Мәҫәлән, Әйнә һәм Ғәйнә тигән ике бер туғанға бағышланған башҡорт легендаларында Ғәйнә тигән ырыуҙың ата-бабаларын хәҙерге ерҙәренә ике болан килтерә. Был боландар шулай уҡ Убыр ҡарсыҡ тарафынан урланған ҡояшты табырға һәм, уны ҡотҡарып, бөтә донъяны ҡараңғылыҡтан, яман заттарҙан ҡурсалап алып ҡалырға ла ярҙам итә. Артабан инде ҡайһы бер легендаларҙа был боландарҙың матур ҡыҙға әүерелеп, Әйнә менән Ғәйнәгә кәләш булып Ғәйнә башҡорттарына нигеҙ һалыуы һүрәтләнә. Шул сәбәпле болан Ғәйнә башҡорттары өсөн Болан-әсә, Болан-ана, табыныу объекты, Тәү

---

*Хеҙмәт Рәсәй Фәндәр академияһының тарих-филология фәндәрен баһалау фундаменталь тикшеренеүҙәр программаһы сиктәрендә башҡарылды. (Социомәҙәни мөхит менән бәйләнештәге текст: тарихи-әҙәби һәм лингвистик интерпретациялар кимәлдәре.)*



ана, ҡурсалаусы, тотем булып китә. Шуны әйтеп китергә кәрәк: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре тарафынан 2007-2008 йылдарҙа Ғәйнәләрҙә йыйған этнографик, тел, фольклор материалдары ла был фекерҙе раҫлай. "Болан — беҙҙең анабыҙ, уны атырға ярамай," — тигән тыйыу, атҡан хәлдә ҡорбан салып Болан-ананан ярлыҡау һорау, ауырыу баланы болан тиреһенә ураү, тамаҡ сиренә болан һөтө эсереү кеүек ышаныуҙар Ғәйнә башҡорттарында әле лә йәшәп ята. Был инде С. Айытматовтың "Аҡ пароход" әҫәрендәге Болан-ана менән бәйле мифологик мотивтарҙың күп кенә төркиҙәр, шул йәһәттән башҡорттар менән дә уртаҡ булыуын күрһәтә. Ә инде С. Айытматовтың "Йәлләт түмәре" (русса "Плаха") әҫәрендәге бүреләр мифологияһына килгәндә, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, йола, тыйыу, алғыш, ҡарғыш, арбау, им-томдарында, ырыу-ҡәбилә, кеше исемдәрендә бүре культы, бүре мифологияһы ярылып ята. Мәҫәлән, башҡорт легендаларында Бүре-ана, Бүре-башлыҡ, Бүре-юл күрһәтеүсе мотивтары булыуы, күп кенә ырыу атамаларының, шул йәһәттән башҡорт этнонимының үҙенең дә этимологияһы бүре менән бәйле булыуы, ауырлы һәм яңы бала тапҡан ҡатындарҙы, яңы тыуған сабыйҙарҙы һаҡлау, ҡурсалау өсөн бүре үткәрмәһе аша үткәреү, арбау, им-том һамаҡтарында бүрегә мөрәжәғәт итеү, ат ҡарағын табыу өсөн Бүре тарамышы яндырыу йолаһы атҡарыу, Бүребай, Бүрехан тигән кеше исемдәре, бүре араһы, бүреләр нәҫеле, күк бүреләр тигән ара, зат, нәҫел атамалары булыу ҙа, ҡара йүтәл тигән ауырыуға бүре үте эсереү ҙә башҡорттарҙа, башҡа төркиҙәрҙәге кеүек үк, бүре мифологияһының көслө булыуын иҫбатлай. Ә инде башҡорт йәштәренең "Күк бүре" тигән ойошмаһы, "Башҡорт йәштәре иттифағы" тигән ойошманың атрибуттарында бүре булыуы бүре мифологияһының башҡорт тормошонда әле лә ҙур роль уйнауын күрһәтә. Былар бөтәһе лә С. Айытматов әҫәрҙәрендәге мифологизмдың һәр башҡорт өсөн яҡын, аңлайышлы булыуына сәбәпсе. Ә башҡорт яҙыусыларына килгәндә инде, С. Айытматов йоғонтоһо арҡаһындамы, бәлки, яҙыусыларыбыҙҙың, һәр башҡорт кеүек, мифологияға сорналып үҫеүе арҡаһындамы, улар ижадында С. Айытматовҡа яҡын мифологик мотивтар, образдар сағылып ҡала. Быға миҫал итеп М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" тигән әҫәрен килтерергә була. "Был әҫәрҙәге мифологизм ниндәй, уның нигеҙендә нимә ята, нимә менән ул С. Айытматов әҫәрҙәре мифологизмына яҡын, нимә менән айырыла?" тигән һорауҙарға мәҡәләлә яуап бирмәксемен.

М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" исемле әҫәре әҙиптең бик мәғәнәле баш һүҙенән башланып китә. "Был китап — мөғжизәләргә ышаныусан, сәйерерәк, шауҡымлыраҡ, бер ҡатлыраҡ, саяраҡ кешеләр тураһында. Уларҙың көнкүреше беҙ йәшәп ятҡан көндәлек тормоштан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ, саҡ ҡына тылсымлыраҡ, саҡ ҡына фажиғәлерәк. Бер-беренә ҡарата улар ғәҙәттәгенән сыҙамлыраҡ, рәхимлерәк; ғәйепләргә, хөкөм итергә ашығып бармайҙар. Был кешеләр бәхетте лә, әжәлде лә сабырлыҡ менән ҡабул итәләр. Шатлыҡтан туйып һикермәйҙәр, ҡазанан ҡойолоп уҡ

төшмәйҙәр". Ул шулай итеп баш һүҙҙә үк әҫәр геройҙарының беҙгә ҡарағанда сәйер, беҙгә ҡарағанда юғарыраҡ һәм шауҡымлыраҡ кешеләр икәнлегенә иғтибар иттерә. Баш һүҙҙәге *сәйер* һәм *шауҡымлы* тигән һүҙҙәр үк әҫәрҙәге геройҙарҙың ябай ғына кешеләр түгеллегенә, уларҙың ниндәйҙер беҙ белмәгән, аңламаған донъя, көстәр менән бәйле булыуына ишара яһай. Шулай итеп, автор үҙе беҙҙе әҫәрендәге ҡатмарлы, мифологизм менән һуғарылған донъяға алып инә. Әммә был донъя, артабан әҫәрҙән күреүебеҙсә, фантастик донъя түгел. Бында боронғо мифологик сюжет та юҡ. Әҫәр тулыһынса ауыл кешеһенең реаль, көндәлек тормошон, уй-фекерҙәрен, ҡимммәттәрен һүрәтләүгә ҡоролған. Мәҫәлән, әҫәрҙең тәүге бүлегендә яу яланында ятҡан ауыр яралы һалдат кисерештәре, уй-фекерҙәре һүрәтләнә. Туптар шартлауы, яралы кешенең "йән тетрәткес ғазаплы, әрнеүле" үлем алды һуңғы ауазы, яралы һалдаттың үлмәҫ өсөн мороно менән тупраҡҡа һеңә барыуы, уны яу яланынан носилка менән күтәреп алып сығыуҙары кеүек реаль ысынбарлыҡ бәйән ителә. Әммә әҫәрҙәге геройҙың "сәйер" һәм "шауҡымлыраҡтар" араһынан булыуы уның ябай имәнде донъя ағасы, тереклек тотҡаһы, уны йә ағас, йә Оло инәй итеп һаташыуы — былар бөтәһе лә М. Кәрим әҫәрендә реаллек менән тығыҙ үрелеп килгән мифологизм барлығын күрһәтә. Бында беҙ М. Кәримдең бер нисә мифологик мотивҡа мөрәжәғәт итеүен күрәбеҙ. Донъя ағасы, ғүмер ағасы, уның ҡурсалаусы функцияһы, күк менән ерҙе бәйләп тороуы, үлеләр һәм тереләр донъяһын бәйләүе кеүек мифологик мотивтар индереп М. Кәрим кеше һәм үлем, тыуым һәм үлем, фанилыҡ һәм мәңгелек бәйләнештәрен асырға ынтыла. Был йәһәттән М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре үҙе, уның төп геройҙарының береһе Кендек С. Айытматовтың "Аҡ пароход" повесына, уның геройы — саф күңелле, мифтар донъяһында олатаһы менән йәшәгән һәм аяуһыҙ ысынбарлыҡты ҡабул итә алмаған 7 йәшлек малай образына тартым. Ысынлап та, М. Кәримдең Кендек исемле персонажы ла мифология менән һуғарылған донъяла йәшәй. Бөтә ауыл балалары кеүек, уға ла тыуырға ярҙам иткән, ҡурсалаусы, донъяға алып инеүсе, уны танытыусы Оло инәһе булмаһа, Кендек тә, бәлки, үлгән булыр ине, сөнки бәләкәй сағында ныҡ туҡмалып ул да үлә яҙа. Һалдат булып яу яланында ауыр яра менән ятҡанында ла уны шул донъя ағасы — Оло инәй ҡотҡарып алып ҡала. Был йәһәттән М. Кәримдең Кендеге С. Айытматовтағы малайҙан күпкә бәхетлерәк. Уның ҡурсалаусыһы, донъя ағасы — Оло инәйе бар.

Оло инәй М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәренең иң ныҡ мификлаштырылған образы булып тора. Ул —кендек инәһе, ул — донъя ағасы. Донъя мифологияһында, шул иҫәптән төрки халыҡтары мифологияһында ла кендек инәһе, кендек әбейе ныҡ мификлаштырылған образдарҙан һанала. Мәҫәлән, башҡорт мифологияһында Кендек инәһе баланы тыуҙырыусы, ҡабул итеүсе, йән-тәнен формалаштырыусы, ҡурсалаусы итеп һүрәтләнә. Шуға ла ул, бала оҙаҡ күренмәһә, төрлө саралар, арбауҙар ярҙамында баланы саҡыра, тыуымды тиҙләтә ала. "Был имән минең Оло инәйем булып сыға. Уның тирәһендә инде балалар ғына түгел, беҙҙең бөтә ғаиләбеҙ — атайым, Кесе инәйем, ағайҙарым, апайҙарым әйләнә. Хатта бер пар күк атыбыҙ, ике ала һыйырыбыҙ, быҙауҙарыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ, тауыҡ-ҡаҙҙарыбыҙ әйләнә. Шул кеше тирәһендә беҙҙең барлыҡ бәхет-

шатлыҡтарыбыҙ, ҡайғы-хәсрәттәребеҙ, көндәлек мәшәҡәттәребеҙ, өмөт-хыялдарыбыҙ әйләнә — донъябыҙ әйләнә. Минең Оло инәйем ошо әйләнеп торған донъяның үҙәге ул. Шуға күрә тынис һәм хәүефһеҙ баҫып тора. Уның өсөн, әйтерһең, һәләкәт тә, ғазап та юҡ. Йөҙөндә шәфҡәтле йылмайыу..." Кендек инәһе сабыйҙың ир йәки ҡыҙ бала булыуын да хәл итә, ен-шайтан алмаштырмаһын тип тәүге исем — йүргәк исемен бирә, баланың башын, ҡашын, башҡа тән ағзаларын төҙәтә ала, баланың киләсәгенә, өлөшлө һәм өлөшһөҙ булыуына тәьҫир итә ала икән, тигән ҡараштар әле лә һаҡлана. Әлбиттә, ошондай мифологик ҡараштарға сорналып үҫкән М. Кәрим кендек инәһе Оло инәй образын төрки халыҡтарының ҡатын-ҡыҙ, әсә тәңреһе Умай ана бейеклегенә күтәрә. Оло инәй — М. Кәрим әҫәрендә бөтә ауыл кешеләренең кендек инәһе. Ул уларҙы ҡурсалаусы, уларға юл күрһәтеүсе, фатиха биреүсе лә итеп һүрәтләнә. Шулай итеп, М. Кәрим Оло инәй образын мификлаштырып Тәү ана, кешелеккә ғүмер биреүсе тәүге ҡатын, әсә итеп һүрәтләй. Ул — донъяның үҙәге, күсәре, донъя ағасы. Уның тирәләй бөтәһе лә — ололар һәм балалар, мал-тыуар һәм ҡош-ҡорт әйләнә. Сағыштырығыҙ:

*Баҡ, баҡ!*
*Бәпәй килмәй бик оҙаҡ!*
*Баҡ, баҡ!*
*Итермен һине ҡунаҡ!*
*Баҡ, баҡ!*
*Мәмәй көтә бер табаҡ!*
*Баҡ, баҡ!*
*Өмөттө, ҡыйма, зинһар!*
*Баҡ, баҡ!*
*Күрһәтмә беҙгә моң-зар!*
*Баҡ, баҡ!*
*Һәмгелсәктә кем йоҡлар!*

Әҫәрҙә Оло инәй менән бәйле бер нисә сюжет бар. Улар бер-береһен тултырып, мификлаштырылған Оло инәй образын асырға ярҙам итә. Әйтәйек, ул Ҡара Йомағол өйөндә кендек әбей ролен үтәгәндә, уның ябай ғына әбей түгел, ә ҡатын-ҡыҙ Тәңре кимәлендәге Оло инәй икәнлеген беҙ Йомағолдоң Оло инәйҙән: "Малай була күрһен инде, зинһар, тәү бала бит. Мәңге онотмам, инәй," — тип ялбарып малай һорауынан күрәбеҙ. Йомағолдоң шиге юҡ: Оло инәй теләһә малай, теләһә ҡыҙ килтерә ала. Шуға ул буласаҡ улына мифик Аҡбуҙатты тотор өсөн 70 ҡолас арҡан ишеүен дауам итә. Оло инәй менән бәйле мифологик мотивтар уның үлер алдынан бөтә үҙе кендек ҡырҡҡан балаларҙы һәм ололарҙы йыйып хушлашып, бүләк таратыуында ла сағыла. М. Кәрим был күренеште ябай бүләк таратыу ғына итеп бирмәй. Оло инәй образы аша М. Кәрим бүләк таратыуҙы *өлөш, яҙмыш* таратыу кимәленә күтәрә. Башҡорт мифологияһында әйбер аша өлөш, бәхет, ырыҫ, ҡот, шул уҡ ваҡытта ауырыу, боҙом тапшырыу мотивтары киң таралған. Мәҫәлән, туй йолаһында ҡәйнә киленгә таянсыҡ мал биреп, уның өлөшлө, бәхетле, ырыҫлы, таянıслы булыуын теләй. Йәш балаға танышырға барғанда килтерелгән бүләктәр ҙә яңы тыуған баланы өлөшлө итеүгә йүнәлтелгән. Шулай итеп, Оло инәй үҙе кендектәрен ҡырҡҡан балаларының

ҡурсаулы, өлөшлө булыуын тәьмин итергә тырыша. Ошондай эште ауылда тик Оло инәй генә башҡарғанын һыҙыҡ өҫтөнә алып, М. Кәрим Оло инәй образының мификлаштырылыуын тағы бер тапҡыр иҫбатлай.

М. Кәрим Оло инәйҙе мөхәббәттең, ғашиҡтарҙың да ҡурсалаусыһы итеп күрһәтә. Был инде ике ғашиҡ — Аҡйондоҙ менән Мәрәһим мөхәббәтенә, уларҙың үҙҙәренә тел тейҙертмәүҙә сағыла. “Мөхәббәт яҙыҡ түгел. Мөхәббәтһеҙ уйнаш яҙыҡ. Мөхәббәт аҡлата, ярлыҡата,” — ти ул. Уларҙың мөхәббәтенә һоҡланып, ваҡытында бер-береһен таба алмаған яртышар йәндәр булыуына ҡайғырып йәшәй ул. Оло инәйҙең был ике ғашиҡҡа булған мөнәсәбәте бөтә ауылға күсә. Шулай итеп, Оло инәй, төркиҙәрҙең Умайы кеүек, йәш әсәләрҙе, сабыйҙарҙы, ғашиҡтарҙы ҡурсалаусы зат итеп һүрәтләнә. Был юҫыҡта үҙенән-үҙе С. Айытматовтың “Ер-әсә” йә “Әсә яланы” әҫәрендәге Әсә образы иҫкә төшә. Шулай итеп, С. Айытматов һәм М. Кәрим мифологизмы бик яҡын икәнлеге күренә. Уларҙың икеһенең дә әҫәрҙәренең традицион мифологик ҡараштарға нигеҙләнеүе, персонаждарының мификлаштырылыуы, мифология менән бәйле атамалар ҡулланылыуы — былар бөтәһе лә ике әҙиптең мифологизмды һүрәтләү, образдарҙы асыу, дөйөмләштереү, тәрәнәйтеү ысулы итеп ҡулланыуын күрһәтә. Шуның менән был ике әҙип бер-береһенә яҡын. Шул уҡ ваҡытта С. Айытматовтың М. Кәрим мифологизмынан айырылып торған үҙенсәлектәрен дә күрһәтеп китергә кәрәк.

Мәҫәлән, С. Айытматовтың “Йәлләт түмәре” (“Плаха”), “Кассандра тамғаһы” тигән әҫәрҙәрендә бөтөнләй төркиҙәр өсөн ят мифологик мотивтар күҙгә ташлана. Был әҫәрҙәрен һәм башҡа ҡайһы бер повесть, романдарын С. Айытматов христиан, ислам, будда һ.б. мифологияларға нигеҙләнеп яҙған. Был юҫыҡта уны хатта аңламаусылар ҙа юҡ түгел. Әммә, нисек кенә булмаһын, С. Айытматовта был мотивтар бар, улар әҫәрҙең төп фекерен асырға ярҙам итә. Был йәһәттән С. Айытматов мифологизмына русса яҙған башҡорт яҙыусыһы Шамил Хажиәхмәтов әҫәрҙәре яҡын кеүек. Мәҫәлән, уның “Сәғәтте кем туҡтатты?” тигән әҫәре христиан мифологияһындағы кеше үлгәндә сәғәт туҡтатыу мотивына нигеҙләнгән. Был әҫәрҙә яҡшы эшләп торған иҫке сәғәт геройҙарҙың ниндәйҙер яҡындары үлгән һайын туҡтай. Уның туҡтауы минуттары менән теге кешенең үлем ваҡытына тура килә. Шуның өсөн сәғәт туҡтаған һайын геройҙар кемдеңдер үлеүен көтә башлай. Был әҫәрҙең мифологизмы, күреүебеҙсә, М. Кәрим мифологизмынан күпкә айырылып тора. Әлбиттә, бының сәбәбе Ш. Хажиәхмәтовтың милли мөхиттән, традицион мифологик ҡараштарҙан алыҫ формалашыуындалыр, әсә телендә түгел, рус телендә ижад итеп, рус телле әҙәбиәт йоғонтоһо кисереүендәлер, тип фараз итеп була. С. Айытматовҡа килгәндә инде, уның берҙәй традицион төрки мифологияһы менән бер рәттән христиан, мосолман, будда һ.б. мифологияларға нигеҙләнеп ижад итеүен, уның күп халыҡтар мифологик ҡараштарын үҙләштергән, донъя кимәленә һәр яҡлап күтәрелгән яҙыусы икәнлеген күрһәтә.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

---

# СЫҢҒЫҘ АЙЫТМАТОВ ИЖАДЫНЫҢ РУХИ ДОНЪЯБЫҘҒА ЙОҒОНТОҺО

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев Сыңғыҙ Айытматовты, төрки донъяһын тыныс юл менән яулап алған бөйөк төрки, тип атағайны. Ул башҡорт иленә үҙ әҫәрҙәре менән үтеп инеп, халҡыбыҙҙың рухи донъяһына яҡты нурын һипте, ҡабатланмаҫ, тормошсан образдары, гуманистик идеялары менән ошо мөхитте байытты. Башҡорт халҡы уның йөҙөндә рухи туғанын, ҡәрҙәшен күрҙе.

Сыңғыҙ Айытматов үҙе лә Башҡортостанға килгәне була, башҡорт яҙыусылары менән аралашып йәшәй. Был аралашыу бигерәк тә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим менән дуҫлығында асыҡ сағыла. "Ғүмер миҙгелдәре" китабында башҡорт әҙибе: "Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Михаил Дудин, Сыңғыҙ Айытматов, Давид Кугультиновтар менән бергә мин оҙаҡ йылдар дуҫ, татыу йәшәнем. Сәбәбе сыҡҡанда форсат табып, сәбәп булмағанда яй сығарып, бер-беребеҙҙең иленә йөрөштөк, икмәк-тоҙ татыныҡ", — тип яҙҙы[1]. Уның 1971 йылда яҙылған бағышлауы "дуҫ булдыҡ, татыу йәшәнек" тигән яңғырауыҡлы һүҙҙәргә ҡоролмай, ысын ир булып өлгөрөү, ил ағаһы, шағир тигән бөйөк исемгә етешеү хаҡында:

*...Уңыштарым егет итте мине,*
*Баҙынҡы ир итте табыштар.*
*Әммә мине шағир яһанылар*
*Юғалтыуҙар менән табыштар [2].*

1979 йылдың көҙөндә Сыңғыҙ Айытматов Мостай Кәримде 60 йәше менән ҡотларға Өфөгә килә. Шағирҙың ижад кисәһендә ҡатнашып, бер нисә сәғәттән кире оса.

Дүрт әҙәбиәтсенең, бер-береһенә ҡәрҙәш дүрт халыҡтың бөйөк улдары Мостай Кәрим, Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев һәм Сыңғыҙ Айытматовтың дуҫлығы уларҙың бер-береһенең илендә булғанда алған тәьҫораттарында, бер-береһе хаҡында яҙған иҫтәлектәрендә, хаттарында, ваҡытында улар биргән интервьюларҙа сағылыш тапҡан. Татьяна Архангельская менән әңгәмәһендә Мостай Кәрим һуңғы ваҡытта уҡылған әҫәрҙәр араһында тетрәндергәне һәм хәтерҙә ҡалғандары араһынан Сыңғыҙ Айытматовтың "Быуаттан оҙаҡҡа һуҙыла көн" романын атай һәм әҫәргә юғары баһа бирә, "донъяла барған ваҡиғаларға үҙендә яуаплылыҡ тойған бөйөк рәссамдың ҙур әҫәре" тип билдәләй. Ошо уҡ әңгәмәлә үҙенең әҫәрҙәре хаҡында Сыңғыҙ Айытматовтың фекере менән иҫәпләшеүен әйтә[3].

1983 йылда Павло Мовчан менән әңгәмәһендә Сыңғыҙ Айытматовтың



*Мәскәү дәүләт педагогия университеты профессоры Әминә Ғәзизова, Фирҙәүес Хисамитдинова, Гөлназ Ҡотоева, ТЮРКСОЙ ойошмаһы вәкиле Әхәт Сәлихов, социология фәндәре кандидаты Рәфил Аҫылғужин.*

"Буранлы туҡталыш" романын, эске аһәңе, шиғриәте, яңғырашы менән күңелдәрҙе арбар көскә эйә, ти. Уның тәьҫир көсөн юғары баһалай.

...Мостай Кәримдең фатирына ингәс тә, беҙҙе ҙур фоторәсем ҡаршылай торғайны. Унда өс дуҫ кәүҙәләнгән: Рәсүл Ғамзатов, Мостай Кәрим һәм Сыңғыҙ Айытматов. Аҙаҡ был фотоның күсермәһен Рауил Бикбаев ҡырғыҙ ҡәләмдәштәренә бүләк итә.

Мостай Кәримдең вафатына Сыңғыҙ Айытматовтың 2005 йылдың 21 сентябрендә Брюсселдән ебәргән телеграммаһы башҡорт халҡына мөрәжәғәт кеүек яңғырай: "Мин ғүмерем буйы был кешене хөрмәтләнем. Ул миңә яҡын дуҫ ҡына ла, дәүеребеҙҙең әҙәби майҙанында мәшһүр ҡәләмдәш кенә лә түгел, ул бөйөк шәхес ине, XX быуат гуманизмының сағылышы булды. Ул башҡорт халҡы исеменән, поэзия һәм мәҙәниәт исеменән һүҙ әйтергә лайыҡлы булды. Мостай Кәрим башҡорт халҡының балҡыу сағылышы булып ҡала".

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәким менән дә ҡырғыҙ яҙыусыһын дуҫлыҡ ептәре бәйләй. Бер-береһенең ижадына арнап яҙылған махсус мәҡәләләр билдәле түгел, әммә башҡорт яҙыусыһының 70 йәше тулыу уңайы менән сығарылған буклетта түбәндәге юлдар бар, ул рус телендә, һәм мин уны шул килеш килтерәм: "Дорогой Ахияр! Спасибо за книгу. В ней представлены разные стороны твоего дарования: история, башкирская деревня в годы войны, юмор. Привлекают сильные, цельные характеры. С удовольствием прочитал всю книгу, особенно "Куштиряк" — веселый, местами едкий, а в основном очень добрый. Хорошо, что несмотря на суету газетной работы, находишь время для романов и повестей. Обнимаю. Чингиз Айтматов. 1989 г., г. Люксембург."

Бер әңгәмәлә, кемдәрҙе дуҫтарығыҙ тип атарға булыр ине, тигән һорауға Әхиәр Хәким бер нисә яҙыусы араһында Айытматовты ла атай. "Бик күптәнән Сыңғыҙ Айытматов, Олжас Сөләймәнов менән дуҫбыҙ, улар икеһе лә хәҙер — илсе. Айытматов — Бельгияла, Сөләймәнов — Италияла. Яҙ "Литературная газета"ла Сыңғыҙ Айытматов менән ҡаҙаҡ шағиры Мөхтәр Шаханов яҙған "Диалог" китабының исем туйы үткәйне[4]. Ултырышты Андрей Вознесенскийҙың ҡатыны Зоя Богуславская алып барҙы"[5]

Сыңғыҙ Айытматовтың әҫәрҙәре 156 телгә тәржемә ителгән. 1984 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә башҡорт телендә Сыңғыҙ Айытматовтың "Хуш, Гөлһары!" (Әмир Гәрәев тәржемәһе), "Аҡ пароход" (Нәжиб Иҙелбай тәржемәһе), "Беренсе уҡытыусы" (Мәхмүт Уразаев тәржемәһе) тигән өс повесы ингән "Аҡ пароход" китабы баҫылып сыға. 15 мең тираж менән

таралған был йыйынтыҡтың үҙ заманы өсөн әһәмиәтен һөйләп торорға ла түгел. Сыңғыҙ Айытматовты башҡорт уҡыусыһы үҙ яҙыусыһы тип ҡабул итте. Уңың әҫәрҙәре тәрбиә, әхлаҡ китабы булды, унық юғары рухлы, көнкүрештән саҡ ҡына өҫтөнөрәк булған геройҙарына ҡарап кешеләр йәшәргә көс, илһам алды.

Тәржемәселәрҙең әле һаман да Сыңғыҙ Айытматовтың бай ижади мираҫын ситләтеп үтмәүҙәрен билдәләргә кәрәк. Яҙыусының әҫәрҙәренән өҙөктәр, хикәйәләре матбуғат биттәрендә әленән-әле күренеп тора. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында Әхмәр Үтәбай тәржемәһендә "Йәлләт түмәре" романынан өҙөк баҫылды[6].

Лирик хикәйәләр оҫтаһы, юғары поэтика менән һуғарылған драмалар һәм романдар авторы Таңсулпан Ғарипова шәхси әңгәмәләшеү осраҡтарында: "Минең ижадымдың стилен формалаштырыуҙа Сыңғыҙ Айытматов әйтеп бөткөһөҙ роль уйнаны. Халыҡсан тел, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр драматизмы, тормоштоң әсе дөрөҫлөгөн сағылдырыу, юғары шиғриәткә хас көсөргәнеш — мин Сыңғыҙ Айытматов әҫәрҙәренән ошоларҙы өйрәндем", — тигәйне[7].

Публицист, прозаик Мәрйәм Бураҡаева Сыңғыҙ Айытматовтың "манҡорт" һүҙен беренселәрҙән булып телһеҙ, аңһыҙ милләттәштәргә ҡарата ҡулланды, һәм был башҡорт теленең лексик составына бик уңышлы инеп китте.

Прозаик Әмир Әминевты Сыңғыҙ Айытматовтың халыҡ ижадына, мифологияһына нигеҙләнеп яҙыу оҫталығы һоҡландыра, һәм ул был күренештең үҙенең ижадына ла йоғонто яһауын белдерә. Унық менән шәхси әңгәмәләр ваҡытында яҙып алғандарҙан: "Үткән быуаттың 70-80-се йылдарында, бәлки, унан да иртәрәктер ҙә, Латин Америкаһы илдәренең күп кенә яҙыусылары үҙ халыҡтарының мифологияһына мөрәжәғәт итте һәм яңылышманы: бөгөнгө тормош материалы менән мифология мотивтары синтезы иҫ киткес һөҙөмтәләр бирҙе. Был донъя әҙәбиәтендә яңы асыш бәрәбәрендә ине. Миңә ҡалһа, элекке Советтар Союзында ошо йүнәлештә эшләүсе, бигерәк тә һуңғы романдарында, берҙән-бер әҙип Сыңғыҙ Айытматов булды. Халыҡтың аң-фекерен, аҡылын, тарихын, мәҙәниәтен сал боронғонан бөгөнгөгә, бөгөнгөнән киләсәккә ташлау һәм ошо киләсәктә беҙҙе, дөйөм кешелек цивилизацияһын нимә көткәнен, йәшәйештең киҫкен проблемаларын тоҫмаллатыу — бөйөк Сыңғыҙ Айытматовтың төп подвигы. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ яҙыусының ижадын да, ул ҡуйған проблемаларҙы ла әлегә баһалап еткермәйбеҙ"[8].

ЮНЕСКО тарафынан үткәрелгән Мәхмүт Ҡашғари исемендәге хикәйәләр конкурсының региональ этабында еңеүсе булған Гөлсирә Ғиззәтуллина Сыңғыҙ Айытматовтың яҙмышына хәл иткес йоғонто яһауын һөйләне: "1978 йылда Сыңғыҙ Айытматовтың Өфө дәүләт ҡурсаҡ театрында ҡуйылған "Аҡ пароход"ын ҡарағас, шул хәтлем тетрәндем. Ҡулыма ҡәләм алып, спектаклдән һуң тыуған тәьҫораттарымды мәҡәлә итеп яҙып, "Совет Башҡортостаны" гәзитенә алып барҙым. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ошо мәҡәлә буйынса редакциянан мине эҙләп килделәр. Ул ваҡытта университеттың һуңғы курсында уҡый инем. Эшкә саҡырҙылар. Шулай итеп, мин журналист булып киттем — Сыңғыҙ Айытматов көтмәгәндә хыялымды бойомға ашырырға ярҙам итте", — тип хәтерләй ул.

Шағирә, журналист Йомабикә Ильясованың да тәүге мәҡәләләренең береһе "Аҡ пароход"спектакле хаҡында, уны бар иткән театр һәм артистар хаҡында була, һәм ул  үҙ ваҡытында "Башҡортостан ҡыҙы" журналында донъя күрә.

 Журналист Гөлфиә Янбаева 1998 йылда Истамбулда үткән Евразия яҙыусылар һәм журналистар ассоциацияларының осрашыуында Сыңғыҙ Айытматов менән әңгәмәләшеү бәхетенә ирешә. "Башҡортостанға, башҡорттарға ҙур хөрмәт менән ҡарайым. Һеҙҙәге уңыш-ҡаҙаныштар тураһында ишетеп, белеп торам. Президентығыҙ Мортаза Рәхимовты бик аҡыллы сәйәсмән, шәп етәксе итеп беләм.  Мостай Кәрим иһә өлкән ағай, эскерһеҙ дуҫ булды, беҙ әҙәбиәттә һәм сәнғәттә бер рухлы, бер ҡарашлы кешеләр инек. Совет дәүерендәге дуҫлыҡ бәйләнештәре хәҙер килеп юҡҡа сыға яҙҙы," — тип ул мөнәсәбәтен белдерә, пландары менән уртаҡлаша һәм "киләһе быуын беҙҙең эште дауам итергә, милли мәҙәниәттәрҙе үҫтереү өсөн берләшеү юлдарын табырға тейеш" тигән теләген дә әйтә[9].

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев Сыңғыҙ Айытматов менән бер нисә тапҡыр күрешеү бәхетенә ирешә. Оло әҙиптең 75 йәшлек юбилейы алдынан Истамбулда осрашҡанда уны Башҡортостан исеменән ҡотлап, яурынына башҡорт eләне һала. Аҙаҡ, инде Сыңғыҙ Айытматов мәрхүм булғас, 80 йыллыҡ юбилейы айҡанлы Бишкәктә үткәрелгән сараларҙа ҡатнаша[10].

Башҡорт йыртма календарының 2008 йылғы 14 декабрь битендә Роберт Байымовтың яҙыусы хаҡында ҡыҫҡаса белешмәһе бар. "Аҡ яуын" кеүек ғәҙәти ваҡиғаларға нигеҙләнгән ваҡ хикәйәләрҙән башланған ижад романтик лирика менән һуғарылған драматик повестар аша жанр төрлөлөгөнә табан үҫә барҙы. Артабан Сыңғыҙ Айытматовтың үҙенсәлекле прозаһында йәнә "Быуаттан оҙаҡҡа һуҙыла көн", "Буранлы туҡталыш", "Кассандра тамғаһы", "Тауҙар емерелгәндә" кеүек тарих һәм бөгөнгө көн синтезына, ҡатмарлы, драматик фәлсәфәгә нигеҙләнгән күләмле эпик әҫәрҙәре формалашты", — тигән юлдар донъя күләмендә танылған яҙыусының ижад биографияһын күҙ уңынан үткәрә.

Сыңғыҙ Айытматов ижадының  башҡорт мөхитенә театр сәхнәһе аша йоғонтоһо ла ҙур булды.

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт театрында 1965 йылда Сыңғыҙ Айытматовтың "Ҡыҙыл яулыҡлы тирәккәйем" повесы буйынса спектакль ҡуйыла. Режиссеры Рафаэль Әйүпов була. Ошо театр артисткаһы Рәмилә Хоҙайғолова Сыңғыҙ Айытматовтың "Әсә — Ер-Әсә" повесындағы Тулғанай монологын күп йылдар сәхнәнән һөйләп йөрөй.

Башҡорт дәүләт академия театрында 1966 йылда  Сыңғыҙ Айытматов повесы буйынса Лек Вәлиев "Әсә— Ер-Әсә" трагедияһын ҡуя. 1968 йылда "Хуш, Гөлһары!" (инсценировка авторы һәм режиссеры — Лек Вәлиев), 2003 йылда ошо уҡ театр сәхнәһендә "Ҡыҙыл яулыҡлы тирәккәйем" повестары буйынса "Юлдарым — һағышлы моңдарым" спектакле сәхнәләштерелә  (Ю. Оснос инсценировкаһы, режиссеры — Рөстәм Хәкимов). Был спектакль әле лә театр сәхнәһендә ҙур  уңыш менән бара.

Өфө дәүләт ҡурсаҡ театрында әҙиптең "Аҡ пароход" повесы буйынса спектакль ҡуйыла. Режиссеры — Владимир Штейн, инсценировка авторы — Александр Баранов. Кешеләге юғары рух, тәрән тойғолар һәм мәкер

хаҡындағы был спектакль СССР халыҡтарының милли драматургияһы һәм театр сәнғәтенең I Бөтә Рәсәй фестивалендә I дәрәжә диплом менән бүләкләнә. Был баһа бай йөкмәткеле драматик әҫәрҙе уңышлы ҡуйған өсөн дә бирелә.

Сыңғыҙ Айтматов ижады рәссамдарыбыҙҙы картиналар яҙыуға дәртләндерә. Яҡташыбыҙ, Рәссамдар союзы ағзаһы Айгөл Буранғолова С.Герасимов исемендәге Бөтә Рәсәй дәүләт кинематография институтын тамамлағанда имтихан комиссияһы хөкөмөнә Сыңғыҙ Айытматовтың данлыҡлы "Диңгеҙ сите буйлап йүгергән алабай" повесы буйынса төшөрөләсәк анимацион фильмға эскиздарын тәҡдим итә. Уның был диплом эше 16 картина һәм 100 рәсемде үҙ эсенә ала. Шул уҡ 2002 йылда ул ошо эше өсөн XVII Халыҡ-ара ВГИК кинофестивалендә "йәнһүрәт эшләүсе иң яҡшы рәссам" баһаһына лайыҡ була, уның исеме "Рәсәйҙең интеллектуаль ресурстары" сиктәрендә йыл һайын баҫыла килгән "Мәскәүҙең иң яҡшы сығарылышы" студенттар китабына индерелә[11].

Сыңғыҙ Айытматовтың ижадына ғына түгел, уның шәхесенә, биографияһына, туғандарына ҡарата ла Башҡортостанда ҙур ҡыҙыҡһыныу йәшәй. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында Йомабикә Ильясованың яҙыусының һеңлеһе Роза Айытматова менән әңгәмәһе лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята[12].

Шулай итеп, Сыңғыҙ Айытматов ижадының башҡорт рухиәтенә индергән өлөшө сикһеҙ. Ул бер ниндәй ҙә үлсәмгә һыймай, уны тойоп, һиҙеп кенә була.

**Гөлназ ҠОТОЕВА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

**ҺЫЛТАНМАЛАР:**

[1]*Ғүмер миҙгелдәре. Өфө: Китап, 2002. —130-сы бит.*

[2]*Мостай Кәрим. Заманалар. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1982. —104-105-се биттәр.*

[3]*Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. 5-се том. Өфө: Китап, 1999. —570-571-се биттәр.*

[4]*Һүҙ ошо китап хаҡында: Айтматов Ч., Шаханов.М. Плач охотника над пропастью (Исповедь на исходе века): Пер.с каз./ Послесловие В. Коркина. — Алматы: Руан, 1996. —384 с.: фото.*

[5]*Ахияр Хакимов: Из меня можно многое выждать. Беседу вела Альфия Нафикова. // Известия Башкортостана. — 1997, 23 августа. №163.*

[6]*Сыңғыҙ Айытматов. Аҡбара//Башҡортостан ҡыҙы, 2007, №6. — 10—13-сө биттәр.*

[7]*Таңсулпан Ғарипова. Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты. "Бөйрәкәй" романы авторы. Шәхси әңгәмәләр.*

[8]*Әмир Әминев. Шәхси әңгәмәләр.*

[9]*Гөлфиә Янбаева. Донъябыҙ быяла һымаҡ — таш менән киҙәнмәйек уға. Сәйәхәтнамә.*

[10] *Равиль Бикбаев. Эпос новой эпохи.*

[11]*Олеся Серегина. Реальный и мультяшный мир Айгуль Бурангуловой. // БАШвестъ tp://www.bashvest.ru/showinf.php?id=1004912*

[12]*Йомабикә Ильясова. Һоҡландырғыс бәхет йондоҙо//Башҡортостан ҡыҙы, 2000 йыл, №1, 8-9-сы биттәр.*

Ғәли
ИБРАҺИМОВ

# КИНЙӘ

## ТАРИХИ РОМАН*

### III китап

## БҮГӘСӘҮ БАТША ҺАНАТЫ

### Һигеҙенсе бүлек

## Ил батыры

10

Ярҙа аттар юрта. Бик ашығыс, күбекләнеп юрталар. Хужаларын да тир баҫҡан. Арҡала уҡ-һаҙаҡ, билдә ҡылыс, эйәрҙә һөңгө, суҡмар. Кем булыр? Был Ҡаранай Моратов ине.

Уларға башҡорттар осраны. Кама кисеүендә.

### Ҡазанда. Өфөнө алырға!

Батша киткән. Башҡорттар ҡайта. Бында көрәшер өсөн.

Ә 20 июлдә Ҡаранай эргәләренә ҡабат барып етте.

— Ҡайҙа ашығаһығыҙ?

— Батшаға ярҙамға.

— Ул... Йәмәлкә Иҙел аръяғында хәҙер, — һөйләп бирҙе. — Беҙгә бында ла эш етерлек.

— Етер ҙә ул. Караттар быуа быуырлыҡ. Бөтә йорт-илде сүл бүреләре баҫҡан һымаҡ.

Бында Бәхтиәр отряды ғына түгел, Лихачев та бар. Кире Башҡортостанға борола.

Ағиҙел буйына туҡтала. Өфөгә яҡынаят кеүек.

Татарстанда яу һүрелмәне. Йәмәлкә батша килде лә ары китте. Полковник Михельсон килде, ул да олаҡты. Яу дауам итә. Карат отрядтары ваҡ-ваҡ төркөмдәрҙе тотоп алып китә. Ә улар хәҙер ҙур отрядтарға уҡмаша.

---

*Аҙағы. Башы 3–7-се, 9 –11-се һандарҙа.

Ҡанҡай уғлы Бәхтиәр артҡы һаҡта ине. Ул хәҙер бөтә Кама буйҙарын кҮтәрҙе.

Шуран кисеүенә граф Меллин[1] килә ята икән Михельсонға ярҙамға. Кешеләр шуны хәбәр итте Ҡанҡайға. Крәҫтиәндәрҙең 6 тубы бар.

Ҡанҡай уға ҡаршы меңләп кешеһен ҡуясаҡ.

Абдулла Мостаевты. Шунан Лихачевты.

Балыҡ биҫтәһендә һуғыш. Эх, һуңланы, ярҙамға өлгөрмәне.

Бәхтиәр Йөрөйҙә ине. Ул Байләргә лә, Сабаһына ла, Меретеккә лә барып сыға.

**23/VII.** Сафта — 3 мең кешеһе. Ул августа тиклем властарға тынғы бирмәй. Минзәләнән көслө команда ябырыла. Йөрөй (Зюри) ауылында алыш. Бәхтиәр еңелә.

Тағы кеше йыйып ҡала, тағы еңелә. Ҡайҙалыр ауылдарҙа Пугачев манифесына ышаныс нығып ҡалды. Уның указдарына ғына буйһоналар. Макаров, Алексеев отрядтары алпауыттар имениеһын туҙҙыра, аҫа, киҫә. Туптары бар.

Заводтарҙа крәҫтиәндәр: “Петр Федорович ҡыйралһа, тағы ғәскәр йыйыр”, — тиҙәр. Өмөт һүнмәй. Үҙҙәре уҡмаша, үҙ эшен эшләр, тиҙәр.

Мамадыш яғында бер отряд хәрәкәт итә. Йәнә — Рождественский заводы крәҫтиәндәре. Усман Тимеров[2] отряды, Герасим Иванов[3] отряды.

Ҡаранай отряды ҡайтып китте. Ҡыҙрас Муллаҡаевтың яуызлығын белә. Тоторға итә, яуыз. Июлдең икенсе яртыһында Ҡаранай — Ағиҙел буйында. Өфөгә барырға, Ҡәнзәфәрҙе күтәргә тейеш.

Ә Әлибай... ҡуҙғалмай. Ҡаранайҙан сапҡындар килде, Ҡәнзәфәрҙән... Яуға сыҡ, тиҙәр. Ә былар, беҙгә нишләргә, тип ҡул ҡаушыра.

Ул хәйләләп оҙата. Ләкин халыҡ тынмай. Ут яна шул, дөрләй, һүнерҙәй түгел. Уның кешеләре араһында ла йөрөйҙәр икән. Яугирҙары әҙерләнә. Ҡорал-яраҡтарын аҫып алғандар, аттарға атланғандар.

— Һеҙ ҡайҙа йыйындығыҙ?

— Яуға!.. Бөтә халайыҡ күтәрелгән.

— Таралығыҙ!

— Юҡ. Шундай саҡта беҙ ҡасып ятайыҡмы? Һин бармаһаң, үҙебеҙ китәбеҙ.

— Кем алып бара?

— Берәй ҡор башы табылыр әле...

Булыр булырҙан. Заманы! Былтыр Стәрленән киткәс, анау малай — Салауат артынан эйәрҙеләр. Быйыл яҙ тағы китә яҙҙылар. Әлибай үҙе бергә барырға мәжбүр булды. Бармай ҡара, ҡулдан ысҡындылармы, бөттө. Унан ни: “Йәнеңме, малыңмы?” — тиеүҙәре бар.

Әлибай хәйлә менән:

— Голицын китһен... Ҡазанға китмәксе. Унан Рылеев ҡуҙғала. Шул саҡ беҙ ҡуҙғалырбыҙ. Донъя...

Ә үҙе уйлана, үкенә. “Юҡҡа ҡатнаштым. Юҡҡа баш ҡаҡтым, Кинйәгә, Салауатҡа эйәреп. Хәҙер анау йолҡоштары ла тыңламай. Баш-баштаҡ. Тиҙерәк баш йырырға... Юғиһә, бөтәһе юғала. Уларға көн юҡ, дәғи Бүгәскә лә, бағый Кинйәгә лә... Тотоп тегендә бирерҙәр берәй ерҙә, ә бында – Ҡаранай менән Ҡәнзәфәрен, тегендә — Салауаты менән Юлайҙы. Батыршаны Сөләймән тотҡан, ярлыҡаш аҡсаһын алған. Быларға ла ярлыҡаш тейеш. Нисек тә аҡланырға кәрәк...”

Ҡәнзәфәр байтаҡ көс йыйҙы. Тик Өфөгә ҡуҙғала алмай. Ваҡыты ундай түгел.

— Ас ҡорттар солғаны, ҡорттар...

Быныһын да ул боронғоса, мишәрсә әйтә. Бүреләр солғаған шул. Ҡайҙа ҡарама — карателдәр. Ҙур-ҙур командалары. Шулар араһында үҙе сиреү менән уҙа,

---

[1] *Меллин Владимир — граф, секунд-майор.*
[2] *Усман Тимеров – б.к. полковнигы.*
[3] *Герасим Иванов – б. к. полковнигы.*

кәрәкмәгәндә осрашмаҫҡа тырышып, ваҡ-төйәгенә ябырылып, ҡыйратып үтә. Күптәр, көстәре ҙур. Тәүҙә Пугачев артынан ебәрмәҫкә тырышып, Голицынды ҡаманылар, дәррәү ябырылдылар. Ул туҡталырға мәжбүр булды. Өфөгә ябырылыу ҡалып торһа, ҡала бирһен, Пугачев үтһен... Ә хәҙер бына унын китеүен көтөргә кәрәк. Шул көнөндә генә китмәй, көсөн барлай, туплай. Бик ныҡ ҡына туҡмалды шул.

Әйҙә, китер әле... Ҡәнзәфәр Бәләбәй яҡтарына үтте. Бына Ермолкино. Ҡунырға кәрәк.

Карателдәр ҡыҙырып йөрөй. Уларҙан бигерәк — һатлыҡ йортауайҙар. Ҡыҙрас Муллаҡаев яҙҙан бирле аңдый.

Депутат Гавриил Давыдовты апрелдә тотоп бирҙе. Вәлит Торновты оҙатты. Баҡалыламы, Нуғайбәктәме. Кемдәр генә ҡалманы. Хәҙер миңә ҡаныға, мөртәт.

Бөгөлмәгә, Кожинға барырға ниәте хыянатсының. Ҡыҙрас хаин Усаевтың эҙенә төшөп ала. Бәләбәй өйәҙендә сыуаш ауылы Ермолкинола һаҡҡа сыуаштар ҡала. Төндә тағы бер команда пәйҙә була. Барыбер башҡорттар тип, сыуаштар үткәрә. Эйе, башҡорттар. Ҡыҙрас үҙе күренмәй. Бер мәл шау-шыу ҡуба.

Ҡәнзәфәрҙе эләктерәләр. Бөгөлмәгә оҙаталар, бығаулап. Полковник Кожинға. Унын иң яҡын ярандары: Иван Алексеевты[1], Мүсәкәй Юнеевты ҡулға ала.

Яугирҙары ваҡ-ваҡ отряд булып унда-бында тарала.

Шунда күҙ алдында иптәштәрен аҫалар, үҙен — Ҡазанға (4 август 1774 й.). Ҡамсы менән язалау, допрос башлана.

Ҡыҙрасҡа 100 һум ярлыҡаш бүләге бирелә, өҫтәүенә, түшенә алтын миҙал тағыла. Әҙ тигән кеүек ҡарай теге.

— Тағы тот. Тағы алырһың.

— Кемде? — тип әйтер ине, әйтмәй, былай ҙа белә, һәм Кожин өҫтәй: — Потемкин ҡуша.

Кинйә, Салауат, Юлай, Ҡаранай, тағы... Күптәр бар икән әле.

Был ваҡытта 18/VII Ырымбурҙағы, Ҡазандағы ике Йәшерен комиссия бер ителә. Начальнигы итеп генерал-майор Павел Потемкин билдәләнә.

Ырымбур — Өфө юлында генерал Фрейман ғәскәрҙәре. Стәрле, Табын ғәскәр менән тулды. Яңынан-яңы роталар, полктар ағыла.

Ә Ҡыҙрасҡа тағы "эш": Салауатты, Ҡаранайҙы тоторға!

Бер үк халыҡ, ырыуҙар башҡа-башҡа булһа ла. Ҡыҙ биреп — ҡыҙ алып бергәбергә йәшәлде. Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек ептәре лә бар, бер табында булған саҡтары ла. Бергә көрәшкән саҡ та булды. Хәҙер шул кешеләрҙең береһе азатлыҡ-ирек өсөн көрәшкәндә, икенсеһенең үҙ мәнфәғәте, икенсеһенә ҡылыс күтәрә, ул ғына түгел, һатлыҡ йән булып, мәкерле рәүештә ана шул миҙалға, көмөш тәңкәләргә, ҡанға мансылған аҡсаға ҡаныға.

Бер Ҡыҙрас ҡына түгел, Яныш балалары, Мерәҫ балалары, Балтастар, Әлибайҙар... Күптәр. Яуызлыҡ та аҙ булмай.

Баштар киҫелә, ҡан ҡойола. Ғәзиз йәнтөйәк ҡанға мансыла.

## 11

Салауат һауыҡты.

*Салауатҡай ҡылысын ҡулға алды.*
*Халайыҡтар яуға ҡуҙғалды...*

Салауаттың уй-ҡарашы Өфө яғында. Күҙе лә, үҙе лә, хәрәкәте лә. Алай менән йөрөп ҡайта.

Усаевтан хәбәре юҡ. Үҙе ебәргән сапҡындар буш ҡайта.

Ҡаранай киткән. Әлибай — хыянатсы. Усаев аптырай.

---

[1]*Алексеев Иван – Ҡазан өйәҙе Колуши ауылы крәҫтиәне.*

Тимәк, ул Йомала түгел. Шунда, Ҡобау тирәһендә, көтәлер. Бында ла атаһы йортауай. Лабау-Эҫем буйҙары – Башҡорт Ҡобауы биләмәләре. Яңыраҡ Сыуаш Ҡобауы төйәкләнде.

Улар яуға саҡлы ылау бирә ине. Иглин баярына ҡамсы күтәрһәң дә, ярҙамдары бар. Хәҙер отряд булды. Берҙә Суя[1] батша тип тормайҙар.

Салауат атаһына:

— Мин теге яҡты, Бөрө юлын, ҡарап ҡайтайым. Иҙебайҙар ни хәлдә?

Бара. Абыҙ тауы. Уҡашлы йылғаһында. Иҙебайҙы күрә. Улар әҙер. Юлдарҙа яталар. Берәй яҡтан карателдәр килһә...

Ҡайта. Хәбәр юҡ.

Борсолалар:

— Әллә көтмәйбеҙме?

Юлай:

— Ярамай. Унда — Голицын янарал. Ҡәнзәфәр мулла ла шуны көтә, буғай.

Яугирҙар күнеле күтәренке. Кемдер йыр һуҙа:

*Болғадир булған, һай, Салауат,*
*Яулап алыр Оло Ҡыштауҙы...*

Ҡышлау ғына түгел, ҡала, ҡәлғәле Имәнҡала бит. Алаһы бар, тип уйлай Салауат.

Алайҙарын яҡын килтерҙеләр. Атаһы менән икәү генә түгел хәҙер. Байтаҡ старшиналар бар, төрлө иләүҙәрҙән.

Улар ҙа Өфөнө алырға яҫҡына. Салауат тынысландыра. Ә атаһы менән генә ҡалдымы — үҙе лә борсола.

— Әсешеп ятабыҙ бында. Хәбәр юҡ.

Атаһы тыныс. Улын тынысландыра.

— Буш ятабыҙмы? Юҡ! Бөтә Себер даруғаһын тотабыҙ. Силәбе яғында — Юламан менән Баҙарғол. Тиреҫ яғында – Батырҡайҙар... Сирмештәр. Көньяҡта — Һеләүһен. Бында — беҙ. Оло Ҡатау өҫтөндә дәү йоҙроҡ, бел.

— Йоҙроҡ аҙ. Алырға кәрәк Оло Ҡатауын. Екте аҙ күрһәтмәне Өфө.

— Алырбыҙ, насип булһа.

— Ах, мин алһаммы!..

— Беҙ ҙә... буш ҡуйманыҡ Өфөнө. Өфө ҡамауҙа.

Уға саҡлы Өфө күпме ҡамауҙа торҙо. “Граф Чернышев” тотто. Аслығын, яфаһын күрҙе. Михельсон килеп ҡотҡарҙы. Яугирҙар еңелде. Ләкин Оло Яу еңелмәне, Өфөгә тынғылыҡ бирмәнеләр. Көрәш уты Чесноковка тирәһендә генә яна ине. Уны һүндерергә тип өрҙөләр. Ул урынынан күсеп таралды. Эйе, Оло Яу йәйелде. Уты тирә-яҡҡа сәселде. Хәҙер бөтә ерҙә дөрләй. Ут дарьяһы Өфөгә лә тынғы бирмәне. Бигерәк тә Михельсон киткәс. Июнь айында полковник Якубович[2], Өфө тирәһенә сығып, боласыларҙы баҫтырып йөрөнө.

Һөжүм туҡтамай. Өфөнө һаҡларға генерал Голицын корпусы тәғәйен. Ырымбур тирәһендә лә эше күп.

Салауат Пугачев менән Камаға киткәс тә тынғы бирмәнеләр. Бер отряд — Бөрө яғынан, ә Юлай Аҙналы — Ҡобауҙан. Ул, ихтимал, улым ҡайтҡансы Өфөнө алып торайыҡ, тигәндер.

Аталы-уллы Юлай менән Салауат, һөйләшеп-кәңәшләшеп, нисек барырын самалап алдылар.

“Йөрөй торған Себер юлынан барыу яйһыҙ. Унда Кенәз кисеүен һаҡлайҙар”,

---

[1] *Суя (сыуашса) — самозванец.*
[2] *Якубович Александр Яковлевич — Малороссия казактарының полковнигы.*

— ти атаһы. Атаман Губанов булған саҡ булһа... Хәҙер ана тегенән, боронғо юлдан, хәрәкәт итеү ҡулайыраҡ.

Эйе, Салауатҡа ла оҡшай: «Бынан Ҡариҙел туғайына барып төшәһең. Аблай урманы ҡыҙырымы. Унан — Аҡназар кисеүе. Хан заманынан ҡалған. Атта кисеп сығып була. Шунда Хан тауына — Нуғай ҡалаһына күтәрелеп була. Ә аҙаҡ Тораҡол туғайынан сапҡын йөрөтөп була. Ҡәнзәфәрҙәр – Нуғай ҡапҡаһынан, беҙ Соҡолоҡ (Суталаҡ) йылғаһын сығабыҙ ҙа Себер ҡапҡаһынан бәреп инәбеҙ».

Салауат күҙ алдына килтерә: «Күсем ейәндәре Тәүке, Аблай». Ах, китһен ул уйҙар. «Унан Дудкин кисеүе. Стрелец — Антон Дудкин башлаған. Петр батшаның атаһы Алексей заманы...» Ах, тағы уйҙар.

Хәйер, унда барғас, асығыраҡ күренер. Эш үҙе дөрөҫөн әйтәсәк.

— Көпә-көндөҙ!

Юлай:

— Төндә яҡшы. Казактар: “Ярты ай – беҙҙең яҡты ҡояш”, — тиҙәр.

— Беҙ бара торайыҡ, — ти Салауат.

Атаһы:

— Дөрөҫ булырмы?

— Юҡ шул. Саманы һиҙҙереү булыр. Унда ҡеүәт аҙ түгел.

Өфөлә полковник Рылеев ғәскәре тупланған, полковник Шепелев полкы ла яҡын, Голицын корпусы ла.

Салауаттың кешеләре ҡайта. Ҡәнзәфәрҙең тотолғаны хаҡында хәбәр. “Их, һантый... Ҡыҙрасҡа ышана, йортауайҙар йыя, йәнәһе. Белмәйме, бай старшиналар яуға ҡаршы. Әлибайға, Ҡыҙрасҡа хат яҙа, йәнәһе. Халайыҡты йыйырға кәрәк...”

Атаһы:

— Эйе, ялпы, саруа икегә бүленде. Ике тараф. Ҡапма-ҡаршы.

Салауат хәбәр ала. Ярҙамһыҙ. Туҙына. Бына һиңә йыясаҡ Ҡоролтайы. Башына етте, штурм булмаҫ. Һөйләшәләр (бында старшиналар һәм сотниктар бар).

— Өфө беҙгә кәрәкме?

— Кәрәк тә. Үҙебеҙ генә алып булмаҫ.

— Алыу – бер хәл, ҡурғап тотоу – икенсе хәл.

Шулай инде. Көстө унда әрәм иткәнсе, тау-урман араларында карателдәргә ябырылып тороп була әлегә.

Уй... Яныу юғалды, ни бары һөйләшеү (шул исемгә Юлай штабы, Юлай соҡоро, Бағауыл урыны, Юлай тауы атамалары ҡалды).

Дәртләнеп бөткән яугирҙарға таралып китеү ҡыйын.

Йыр:

*Салауат сыҡһа һуғышҡа,*
*Бутап сығыр ине Балтауҙы.*
*Болғадир булған, ай, Салауат*
*Ала алманы Оло Ҡыштауҙы[1].*

Салауат әсенде: “Алырһың былдай тарҡауҙа...”

Шулай ҙа Салауат ҡоролай ҡайтырға баҙманы. Үҙен былтыр бер саҡ Стәрлетамаҡта ҡаршы алып, Кар генералға илтәм тигән капитан Ораҡовты күреп ҡайтырға булды. Һеләүһен зарлана бит, Әлиәне йәберләйҙәр, ти, һабаҡтарын уҡытырға кәрәк.

Барҙы, ҡыйратып китте.

Яугирҙарының да күңеле күтәрелде.

Был Оло Ҡыштауҙы алғанға торош булды йәш боласылар өсөн.

---

[1]*Оло Ҡыштау — Өфө тауы, Өфө.*

## Туғыҙынсы бүлек

*Тарихтың бер генә сәхифәһен дә йыртып ташларға ярамай. Һәм мөмкин дә түгел.*

**Әмирхан Еники.**

1

Волганы сығыу әллә ни оҙаҡҡа һуҙылманы.

Ғәскәр күп түгел. Ылауҙар юҡ. Бөтә йөк эйәргә бәйләнгән дә... Халыҡтың мәрхәмәте, бәлки, өмөт биргәндер Пугачевҡа. Юғиһә, шундай ҙур ғәскәр ҡыйралды, таралды бит. Туптар ҙа, кәрәкле байлыҡ та. Бөтәһе лә.

Иң мөһиме, уның күңеле төшмәне, күңеле һүрелмәне.

"Һинниндәй батша? Тап, булдыр!.." — тип ғәҙәттәгесә үҙен битәрләүҙән башланы. Уның артынан Михельсон етмәй. Алданды. Ул Пугачевты шул болон яғынан үрҙә, Нижегородка тигән кисеүҙә, тотмаҡсы ине. Кәмәләр юҡ. Ауылдар яна.

Ә тегенән хәбәр: "Свияжск янында Волга аша бер команда үткән. Майор Меллин".

100 саҡрым бар. Хәбәр еткерҙеләр. Бында нисек ҡаршылайҙар? Был Илек ҡалаһы түгел, калакул ҡаҡмаҫтар. Башҡорт ере түгел, Салауат ғәскәр теҙеп тормаҫ. Сулман (Кама), Арса түгел, Ҡазан да һәүетемсә, ана, ҡаршы алды.

Ләкин бында ла... Пугачевҡа мариҙар йыйнала башлағайны. Сыуаштар:

— Патька-патша... Әйҙә, беҙгә, Сербюгә, тиҙәр (Цивильск ҡалаһына). Беҙ суҡындырыуға ҡаршы. Ҡуштандарға (байҙарға) ҡаршы...

Тик нимәлер бар.

— Кинзей, бында бик һаҡ бул.

— Эйе.

— Ҡайҙа барырға?..

Берәүҙәр:

— Түбәнгә китәйек, — тиҙәр, — Волганы сығып, Яйыҡҡа ҡайтырға кәрәкмәйме?

Икенселәр:

— Мәскәүгә! — ти.

Ҡысҡырыш... Төркөләшә башланылар. Ҡылысҡа йәбештеләр. Кинйә, Садыҡ, Овчинников, Перфильев араға керҙе... Туҡтанылар. Ләкин һүрелеп тә өлгөрмәне:

— Яттар килде!

Әһә, дошман... Әле ике тараф кешеләре бергә аралашып, аттарына атланды. Ҡыуып ебәрҙеләр.

Ә барыбер кискә тағы ике тарафҡа бүленделәр. Төркөм-төркөм, быш-быш... Һүгенеп тә алалар.

Кинйә:

— Петр Федорович дөрөҫ һиҙенә. Үҙенең тирәһендә – ике төрлө ҡулса. Әлегә икеһе лә яҡлай. Уны үҙ яғына ҡоршарға тырыша. Ә бына бер яҡҡа ят – икенсе тараф дошман күрер. Заговор булыр. Шуға уның уйын белергә тырышалар.

Кинйә һәр ике яҡтың арҡадаштарын тоҫмалланы, тын алыштарын самаланы. Юлда ла, туҡтағанда ла һаҡ ҡыланды.

Бигерәк тә Сағанлытау итәгендә ҡунғанда. Каноньер күле яғы ныҡ. Был яғы — һаҡ.

Уның көсө бар. Ҡырҡлап башҡорт, йәнә крәҫтиәндәрҙе, сыуаштарҙы, мариҙарҙы, татарҙарҙы үҙенә яҡынырак тота.

Пугачев икенсе көндө үк, 18 июлдә, бер туҡтаған урында манифест яҙҙырҙы. Шунда уҡынылар. Ике телдә. Халыҡ байтаҡ ине. Унан күсертеп, ерле халыҡҡа таратты.

“Ирек, бөтәһенә лә ирек. Төрмәнән, зиндандан хәҙерҙән сығарыу. Дәүләт чиновниктарын, хөкөмдарҙарҙы тәртипкә килтереү. Ғәйеплеләрен язалау. Яңыларҙы, намыҫлыларҙы тәғәйенләү, һайлап ҡуйыу.

Купецтар – дуҫ, священниктар – иптәш”.

Бигерәк тә сыуаштарға оҡшай батша өндәмәһе.

— Беҙгә чер-анне (земля-матушка) бир, — тиҙәр.

— Дин үҙебеҙҙеке, Иван Эмбю (Иван Грозный) ҡушҡаны кәрәкмәй.

Свияжск (Зөйә) крәҫтиәндәре лә ставкаға килә.

Элегерәк тә көткәйнеләр. Йәмәлкә батша Ҡазанға юл тотто. Әле лә ҡорал — салғы, һуйыл, уң ҡулда — зәңгәр сепрәк. Уларҙың күҙәтсе маяҡтары булған. Шунан күреп торғандар.

Зөйә тамағы. Түңәрәк тау. Шуның башында ҡалҡыу түбә. Алыҫтан күренә ул. Аҡ батша Иван Грозный һалдырған маяҡты, Ҡазанды алыу өсөн әле лә Меллин шуны ышаныслы күреп сыҡҡан. Ә халҡы Пугачевты көттө. Уны күҙҙән яҙҙырманы. Хәбәр итте. Үҙенә килеп еттеләр Раҡай[1] етәкселегендә.

Пугачевтың уйы асыҡ Кинйәгә. Ләкин Твороговтың, Чумаковтың уйын һиҙемләп булмай... Алға шәйләктәр ебәрәләр. Тик изге уй менән йөрөтәләрме?

Кинйә, уларға белдермәй, алға үҙ кешеләрен ебәрә. Сыуаштар, татарҙар аша хәл-әхүәлде белешеп тора. Бер эштә лә бихәбәр ҡалырға ярамай.

Бер көндө өс разведчик ҡайтты. Творогов ебәргәне, Садыҡ ебәргәне, Кинйә ебәргәне.

Бер-берeһенә әйтмәй ебәргәйнеләр; Пугачевҡа өсөһө лә әйтте.

— Михельсон килә. Арттан төшкән. Эргәнән килә. Ҡалышмай.

Пугачев барыуҙы тиҙләтә. Төндә әйтә:

— Ана, күрәһегеҙме? Ул ай — казак өсөн ҡояш ул!

Казактар белә. Төнөн дә яҡшы күрә, урманда аҙашмай, сит-ят ерҙә лә яҙлыҡмай улар. Эҙ менән таба беләләр.

**20/VII** — Ҡурмыш.

**23/VII** — Алатыр.

2

Екатерина II тамам ҡурҡыуға төштө.

Шул Пугачев, тәхетте тартып алам тип, күпме мәшәҡәт тыуҙырҙы! Күпме ғәскәр ебәрҙе... Кар, Бибиков, күпме генералдар, күпме офицер, күпме полктар. Яңынан-яңы ҡорбандар, сығымдар...

Был саҡлы ғәскәрҙе бер дошманға ла ебәргәне булманы ошоғаса. Әгәр ебәрһәң, ҡайһы король генә ҡалтырамаҫ ине.

Инде ҡыйралып бөттөмө тиһә, фетнә тағы ойоша, тағы көс туплай.

Бына тағы... Ҡазан да ҡыйралды бит инде. Ә ул оңҡот Волганы аша сыҡҡан да Мәскәүгә ҡарай килә.

Көн һайын иртән императрица Пугачев хаҡындағы хәбәрҙәр менән ҡыҙыҡһына. Ҡасан килә фельдъегерь, ниндәй депеша менән? Туп-тура килһен. Ете төн уртаһында булһа ла. Тик улар үтә алмай. Асыҡ мәғлүмәт алыу ҡыйын. Разведчикты тоталар. Курьерҙар эләгә. Йә берәҙәк, йә крәҫтиән булып ҡына үтәләр. Сабата, сәкмән, пистолет, суҡмар... Йәнәһе, ул Пугачевтыҡы.

Эләгә. Әйтә:

— Мин Петр батша яҡлы.

Шундай хәбәрҙәр килә.

Бөтә сараһын күргән кеүек тә бит.

Төркиә фронтындағы хәрәкәтте туҡтатты (10/VII–74 й.). Әле яңыраҡ солох

---

[1]*Раҡай Ишмеков (Ишметков) — татар, Красногорск крепосының казагы.*

төҙөлдө, Кючук-Кайнарджа ауылында. Дунай буйында солох.

Баш командалаусыһы итергә һөйөклөһө Потемкинды ебәрһәме? Юҡ, уның туғаны. Булдырыр, ти. Унан килгән рапорттар яҡшы, ныҡ.

Тикшереү. Мәскәүҙә — Йәшерен экспедиция. С. И. Шешковский — обер-секретары. Ҡазандағы, Ырымбурҙағы Йәшерен комиссиялар берләште. Потемкин П. С. — башлығы.

Ә бит һәр ерҙә, һәр полкта мөмкин ойошторорға комиссияны.

Ҡыралар, әсиргә алалар. Язалайҙар. Ут-тимер менән. Екатерина Россия киңлектәрен күҙаллай. Ҡайҙа ҡарама — дар ағастары. Күп улар, бихисап. Ҡамсылар һыҙғыра ҡайҙа ла. Юҡ, шулай ҙа тынмайҙар бәдбәхеттәр.

Батша хөкүмәте Пугачевтың Россия үҙәгенә бәреп кереүенән ҡурҡа. Уның күренеүе генә кәрәк, яу булып ҡайнашып торған крәҫтиәндәр, татарҙар, марҙыуалар, мариҙар, сыуаштар туфан булып Мәскәүҙе баҫыр.

Мәскәүгә ашығыс рәүештә ғәскәр туплана. Дворян ополчениелары. Пугачев башы өсөн — ун мең һум әмер.

Ана бит Ҡурмышҡа килгән, Алатырға еткән. Ҡаршы алалар үҙен.

Михельсон килә. Унан рапорттар яуа. Ҡазандан Панин да, Потемкин да яҙа. Яҙыуҙан ни файҙа.

Уның ишенеке губернатор башы менән Ҡазандан фон Брант та, Ырымбурҙан Рейнсдорп та яҙа. Күпме тотҡондар әйҙәлә, күпме зыян яһалған. Ә яуыз туҡтамай, Мәскәүгә ябырылмаҡсы.

Империя ҙур... Ана, Муром крәҫтиәндәре хәҙер Владимирҙа.

Бына рапорт: Шацктан, Козловтан, Тамбовтан...

Фронттан ғәскәрҙәр күсерә.

Мәскәүгә килә. Бында бер ышаныс юҡ.

Был “чумный бунт”тан ҡурҡты батшабикә.

Әле ҡасан ғына, ни бары ике йыл элек бөтә Мәскәүҙе ваба (чума) ауырыуы баҫҡайны. Урамдар үлектәр менән тулды. Күмеүсе юҡ. Халыҡ китә алмай. Карантин, дауа юҡ. Сауҙагәрҙәр эшләмәй. Аҙыҡ юҡ, аслыҡ. Дворяндар ҡасты.

Екатерина асылын белмәй, белергә лә теләмәй.

Яза, ҡурҡыу, үлеү... Мәскәүҙә генәме, күрше тирә-яҡ губерналарҙа ла... Сиркәү калакулдары ҡағыуҙан туҡтаманы. Даң-доң-даң...

Үләт сире халыҡты ҡырҙы. Халыҡ илай, ауырыуҙар ыңғыраша, ҡарт-ҡоролар ҡарғана. Хоҙайҙан ялбарыу. Етемдәр илауы. Бөтә Мәскәү тоташ бер тауыш менән инрәп торҙо. Был тамуҡ ине.

Халыҡ йөҙәне, аптыраны. Өҫтәүенә, янъял күтәрелде. Набат ҡағып, Кремлгә йүнәлделәр, Спас ҡапҡаһына. Еңелделәр. Бунт бик ҡаты баҫтырылды.

Оҙаҡламай ваба бөттө-бөтөүен. Янъял да баҫылды. Ләкин ул мәғәнә сығырлыҡ тип булмағанға, йүнәлеш юҡҡа ғына ҡапылға һүрелеп тора. Өҫтән ҡарағанда ғына шулай күренә. Ә күкрәктәрҙә үс һүнмәне.

Асыу ҡабарҙы. Бер ҙур сәбәп, бер һылтау ғына кәрәк. Ҡаулан ергә саҡты ғына төшһөн, ләүкер ҙә дөрләп янып китер. Бөтә донъяны ут туфаны баҫыр. Халыҡ үҙ батшаһын көтә. Ә һылтау бар: ысын батша килә. Йәнәһе, мөғжизә менән ҡотолған Петр Федорович.

Пугачев Мәскәүгә яҡыная. Отрядтары Коломнала, Люберецта.

Мәскәүҙең бөтә өтәләгәне көтә. Шулай тиер инде ул, ярлыһы, асы-яланғасы, тиер.

Нисек ул шулай күтәрелә алды? Их, был казактар! Ә бит уның “чудесное спасение” тигән легендаһы шул үлтергән саҡта уҡ һалдаттар араһында таралғайны.

Күпме уйланған, сараһы күрелгән, төшкә инеп һаташтырған. Казак Пугачев... Әллә?.. Самозванецтар (Петр III тигәне) күп булды. Әле лә бар.

Швейцариялағы бер монастырҙа Кирай Романов тигән берәү:

– Мин Анна Иоанновнаның улы, – ти, имеш. Ә былтырлы-быйылғы Польшала бер еврейка Варшава ситендә... Кем, үҙен корчма хужаһының ҡыҙы княжна Тараканова тип йөрөй... Мин — Елизавета Петровнаның ҡыҙы, тәхеткә хаҡым бар, ти икән. Ә, ана, Сербияла Степан Малый ҙа Петр III исеме менән батша булып ултыра.

Екатеринаның шикләнмәгәне элек тә юҡ ине. Улынан да, Никита Паниндан да. Заговор булыр, тип гелән шөбһәләнә, әптәләнә ул.

Кемдер ситтән һөсләтә, ойоштора кеүек. Ул саҡта үҙен тынысландыра алды. Әле инде... Бик үк ҡурҡаҡ йән дә түгел. Бер ваҡыт тәхеткә килгәндә лә артыҡ ҡурҡманы, уныһы онотолдо. Ғүмер буйы иҫтә иртән Петергофтан килеүе. Йонсоп килеү. Юл, саң. Юҡ, Петербургҡа килеү.

Гвардеецтарҙан ант ҡабул итеү (Зимний дворецта). Халыҡ алдына килеү. Алмасыуар айғыр өҫтөндә. Андрей Первозданный орденының таҫмаһы күкрәге аша һуҙылған. Өҫтә — хәрби кейем. Аяҡта гвардеецтар кейә торған ботфорттар. Фавориты Григорий Орлов шул итектәргә испан шпоры беркетте. Гвардеец! Ах, ул саҡтар... Бәхетле ваҡыт, бәхеткә табан һикергән ваҡыт... Юҡ, күккә осҡан ваҡыт.

Юҡҡа ғына ҡурҡынған. Шунан ул иренең шәүләһенән ҡурҡты.

Уныһы инде, өрәктән (призрак) әҙәми зат балалары ғүмер буйы ҡурҡа. Һәр ерҙә, һәр кеше. Ә быныһы бүтән шул.

Ригаға китергә, күсеп китергә! Хөкүмәте, Сенаты ла Ригаға йыйынһындар.

Юҡ, үҙен-үҙе тота белә ул.

— Фронттан... фельдмаршал Румянцевты... юҡ, ҡартты түгел, Суворовты саҡыртырға!

Батшабикә ҡулына ҡауырһын алды.

Дунай буйҙарына “Суворовҡа” тип яҙылған хат менән фельдъегерь елде.

***

Ә Михельсон Пугачев артынан ҡалмай. Ләкин әлегә өҫтөнә ябырылмай. Ситтәнерәк эйәрә. Мәскәүгә табан бергә “шылалар”.

Михельсон эскадрондарындағы карабинерҙар әҙер. Гусарҙары ярһып бара. Изюм, Чугуй полктары ҡуҙып хәрәкәтләнә.

Карателдәргә тағы көстәр өҫтәлергә тейеш.

3

Салауат сәмләнде. Атаһына:

— Барыбер тынғы бирмәбеҙ! Һин завод яғына ҡайт, — тине.

Үҙе Ҡариҙелгә табан юлланды. Иглин баярын туҙҙыралар.

Алыҫ түгел бер нисә алпауыт имениеһы, Ораҡовтарҙың ауылы. Уны ла ҡыйратыу фарыз. Ҡариҙел кисеүе ашаһында ике ауыл бар.

Асыуы бар. Стәрлетамаҡта бик эре ҡыланғайны, атырға хатта пистоль күтәрҙе. Бына хәҙер күтәреп ҡараһын!

Ике ауылда ла капитан Ораҡов та, улы подпоручик та юҡ. Өфө гарнизонында ғәскәр менәндер.

Алаһын алдылар. Яугирҙарҙың иҫәбе — Богородский ауылын да алыу. Салауат ҡушмай: подполковник Иван Губанов төйәге бит. Улар былтыр Өфө воеводаһы Борисовты ныҡ һелкетте.

— Батшаға бағынығыҙ!

Әле лә яу сабырға теләүселәр табылды. Бергә ҡуштылар.

Алда ла ауылдар, утарҙар: Шөгөр ауылы, алпауыт Черников биҫтәһе. Үҙҙәре юҡ, крәҫтиәндәрен:

— Батшаға бағынығыҙ! — тип өгөтләй салауатсылар. Баш эймәгәндәренә һабаҡ бирергә, кәрәк-яраҡтарын алырға йыбанмайҙар. Көс байтаҡ ҙурайҙы, бәҫле генә улъя туплап алдылар.

Твердышевтарҙың Благовещен заводы. Ул да – дошман, күптәнге дошман

ояһы. Ҡыйратып үттеләр. Ҡара абыҙ тауы янынан.

Ауылдарҙа башҡорттар, татарҙар, мариҙар эйәрә. Отряд ярайһы ҙур хәҙер.

Ә Салауат киткәндең өсөнсө көнөнә карателдәр ябырылды.

Алыш. Ҡобауҙа, йылға буйында.

Карателдәр ауылды, мәсетте, мәҙрәсәне яндыра.

Юлай алайы һуғыша-һуғыша урманға сигенде. Халыҡ та унда-бында һибелде.

Йылға буйы, болоно ҡанға мансылды. “Ҡан аҡкан йылға” тиерҙәр һуңынан бер инеште.

***

Мари ауылы. Халыҡ ситкәрәк ҡаса. Үҙҙәренсә изге көн икән. Көнө шундай булһа, улар изге туғайға бармай ҡалмай. Нисек бармаһындар — Киаматты (өлкән алла) хөрмәтләйҙәр. Юғиһә, асыуланып азыл (әжәл) килтерер.

Салауат ауырый.

Ага-пайремда (ҙур байрам Бөрө яҡтарында) Шелыҡ (ғибәҙәт ҡылыу туғайы) сиҙәменә аҡ кейем кейеп баралар. Әүен – иген һуға торған урын. Мариса — шиши. Сар мари — сей мари (суҡынмаған).

Мари әйтә:

— Салауат, алдамайһыңмы? У нас душа и бог — всегда вместе и мы всегда с ними.

Солтан кирәмәт. Бер ауыл янында – өс йыуан ҡайын. Шунда һәр көн усаҡ ҡабыҙыла. Солтан духына ҡорбан салына.

Салауат хаҡында әйтәләр:

— Сакче (алла) кеүек аҡыллы!

— Сакче кеүек яҡшы!

Көнсығыш мариҙары мосолмандарҙан күп һүҙ ала. Үҙҙәренең элекке дине башлығын мулла тиҙәр. Ул мари ҡарт була.

Аласыҡ кеүек (башҡортҡа оҡшатып) һалынған һунарсы ҡыуышы (пережиткаһы), йәй шунда аш әҙерләнә, йәшәйҙәр. (Кудо — шалаш.)

— Батша ҡайҙа?

— Мәскәүгә китте. Тәхеткә ултырырға.

— Беҙҙе онотмаҫмы?

— Оноттомо ни: ер, ирек... Шуны ҡулда тоторға.

Бында отряд бар. Салауат шуны бергә алып китә.

...Бөрөнө үткәс, Салауатты эҙләп киләләр. Уса яғынан.

— Ҡазанды алғандар...

— Унығын беләм.

— Еңелгәндәр.

— Һуғышта бер еңәһең, бер еңеләһең. Эш көрсөктә күренә.

— Эйе. Патша Иҙелде кискән.

— Ана бит, Мәскәүгә киткән. Яп-яҡын.

Салауатҡа ауыр...

“Бында тырышырға. Бына бит көс бар”. Өмөт ҙур. Көнгәр яғынан һәйбәт хәбәр таралды: Тулва башҡорттары, Уса тирәләре бирешмәй.

Екатеринбургтан килгән майор Гагрин шул тарафтарҙа йөрөй.

4

Алда ни көткәнен Пугач үҙе генә тоҫмаллай.

Ә бәғзе ваҡыт яҡшы аҡыл ҡапыл килә. Тәүҙә килмәй, шулай ти халыҡ. Пугачев үҙ хәленә иҫәп бирҙе.

Уға ҡаршы — ҙур ғәскәр. Рәсәй армияһы төрөктәр, пруссактар менән һуғыша, Австрия, Венгрия иҫәпләшә.

Ә унның күҫәк күтәргән крәҫтиәндәре?! Һүҙ юҡ, халыҡ уға эйәрә. Көллөһө бер

була, йәйәүлеһе – йәйәүлегә, атлыһы атлы полктарға ҡушылып һуғыша. Ҡулына ни тотҡан — шуның менән. Күбеһендә һуйыл да һәнәк, балта ла киҫтән.

Яҡшы өйрәтелгәндәр бик аҙ. Ә эргәлә Михельсон — уңайлы урында айыу өҫтөнә ырғырға әҙер барған юлбарыҫ кеүек. М-да, юлбарыҫ, тегендә... Былдай ғына полковник түгел.

Пугачев ҡапыл көньяҡҡа боролорға булды. Шунда Волга, Дон казактарын күтәрһә?! Артта – Терек казактары, ҡалмыҡтар, нуғайҙар бар.

Һәм ул көньяҡҡа ҡайырылды.

Яйыҡ казактары быға шатланды. Улар теләгәнде эшләй ҙәһә Емельян.

Крәҫтиәндәр тороп ҡалды. Ләкин таралмайҙар. Үҙ отрядтары менән урман эсенә инеп, үҙҙәре йүнен үҙҙәре күрергә, көрәшергә самалары. Бәй, улай ҙа көрәшеп була.

Башҡорттар, татарҙар өсөн бик үк күңелле түгел был хәл. Ни булды? Бигүк аңлашылмай.

Кинйә өс кеше ебәрә Волга аръяғына. Кәмәлек, Ырғыҙ башҡорттарынан отряд йыйып, түбәнгә барырға, был яҡты күҙәтеп, һорашып барырға, йорт-илгә хәбәр ебәреп торорға ниәте. Маҡсаты ҙур. Күп кеше кәрәк. Табырҙар.

Алпар ҙа уйға ҡала. Бөтәһе шулай...

Тик юҡҡа киленгән.

— Атаман, әллә...

Һиҙенде Кинйә.

— Һин... Ҡайтырға тиһеңме?

— Унда Салауат бар. Ҡәнзәфәр, Һеләүһен отрядтары көслө. Ана шулар менән бергә-бергә айҡашһаҡ нисек булыр?

Кинйә:

— Ә батша?

Шулай, уға ярҙам кәрәк. Кинйәнең шомланыуын һиҙмәй ҡалманылар.

Творогов Пугачевҡа:

— Кинйә измена яһай. Ябып ҡуйырға итәләр түгелме?

Пугачев һорашып та тормай.

— Үҙем ҡуштым. Армия кәрәк.

Һуңынан һораша. Оҙаҡ һөйләшергә тура килде.

Ал күҙәтеүселәрҙән саҡ ҡына ҡалышып, бер отряд хәрәкәтләнә. Пугачев ундайҙы йә Овчинниковҡа, йә Садыҡ менән Иҙеркәйгә тапшыра.

Шуларҙан арттараҡ, батшаның үҙе янында, бер яҡта — Перфильев менән Кинйә... Кинйәнең атына иғтибар. Аты Алпар киткәндән бирле ишенән ҡалғанға юҡһына. Тәүҙә ара-тирә кешнәп, көттө. Кинйә яңағынан һөйә. Кешнәүҙән туҡтай. Шулай ҙа килгән яғына ҡайрылып-ҡайрылып ҡарай малҡай.

Бөркөт осоп китте. Йырлайҙар:

*Ыласын ҡош* (сизый орел)...

Ат өҫтөндә елеү генә түгел, бөркөт осҡан тиҙлек.

Ҡош та туҡтап-туҡтап үтә алыҫ араларҙы.

**27/VII.** Саранск.

Пугачевты икмәк-тоҙ менән, сиркәү калакулдарын ҡағып ҡаршылайҙар. Бында ла яман түгел икән. Уға — кресло ла тәхет кеүек. Батша булып ултыра. Ике яғында ике яраны. Береһе айбалта, икенсеһе батша булаваһы тотҡан.

Ҡаҙна амбарҙары асыла, халыҡҡа ризыҡ запастары таратыла. Тоҙ бар. Таратылды. Халыҡҡа бик кәрәк. Ҡаҙна аҡсаһы алынды.

Хөкөм. Ҡаршы килгәндәргә хөкөм. Алпауыттар, офицерҙар — дар ағасына.

Яйыҡ атамандары шат.

Бөркөт тағы осоп китте.

**1 августа** — Пензала.
**5 августа** — Петровскта.

Ҡасалармы? Бәлки, ҡасырға кәрәктер, әммә был барыбер дворяндар хакимлығына, Екатерина ебәргән командаларға ябырылыу ине.

Аттар алмаштырыла.

— Атыңды етәккә ал. Кәрәк булыр әле. Уны йонсотма, — ти Пугачев.

Кинйә үҙенең атын етәккә ала. Етәкләмәһә лә бара малҡайы.

Туҡтаған бер ерҙә старосталар ҡуйыла. Хөкөм эштәре атҡарыла, яңылар казак ителә.

Пенза, Сембер ерҙәрендә татарҙар күбәйҙе. Ә Семберҙә башҡорттар килеп ҡушыла. Иҙел аша сығып киләләр. Кәмәлек, Ырғыҙ буйынан.

Бында атаман Иванов[1] хәрәкәт итә ине. Ул Пугачев килер алдынан Сембер гарнизонына ябырылған. Алған, ҡыйратҡан (подполковник Рычков командаһын).

Иванов шул хаҡта Пугачевҡа әйткәс, Кинйә белеште:

— Андрей командаһымы?

Пугачев:

— Беләм. Петр Рычковтың улы.

— Бик йәтеш булған.

— Үҙе ҡайҙа?

Дарға аҫылған билдәһен күрһәтте.

Казактар шулай ат өҫтөндә йылғыр, тиҙ йөрөйҙәр. Шунда серем итеп, ҡалғып[2] баралар. Уларға саҡ ҡына яҡты булһа, юл яҡты. Ҡарбуз телемеләй сирек ай ҙа етә.

Бик һаҡ. Эҙҙе күрәләр. Кем, күпме үткән — беләләр.

Үлән өҫтөндә иртәнге ысыҡ өҫтөндәге эҙ (саҡма) беленә.

Һарытауҙа — Салманов Андрей Михайлович. Секунд-майор, батальон командиры ул.

Бында, Пугачев штабында, атаман Андрей Овчинников, дежур-майор Еким Давилин, полковник Афанасий Перфильев, секретарь Иван Творогов, Кинйә, Садыҡ Сәйетов кәңәш ҡорҙо.

Тылмас хеҙмәтендә – Иҙеркәй.

Алтынсы августа Һарытауҙа Пугачевты иконалар тотоп ҡаршы алдылар.

— Таныш ерҙәр, — тине Пугачев, тирә-йүнгә күҙ һалып (Малыковка — хәҙер Вольск; Покровское ауылы — Энгельс ҡалаһы).

Ҡаршылыҡһыҙ булды. Секунд-майор А. М. Салманов төп ғәскәргә ҡушылды. Пугачев уны полк командиры итте.

Был ерҙәр Кинйәгә лә таныш. Бынау бейеге – Һары тау, тегеһе — Ғәлибаш соҡоро. Тимерселәр, онсолар биҫтәһе атаһына ла электән таныш булған.

Бына әле Бикләшев (Зеленый) утрауына ҡарап үтте. Шуның аша башҡорт сиреүҙәре сыҡҡан, Аҙаҡ[3] ҡәлғәһенә барышлай.

— Әлеге Бикләшев утрауында... — тип күрһәтте лә Кинйә, фекерен әйтеп бөтмәне, сөнки Перфильев:

— Әллә шунан китергәме иҫәбең? — тип бүлдерҙе.

— Юҡ, бирегә сыҡҡайныҡ...

— Ә...

Пугачев та һағайҙы. Шунда улар күрҙе.

— Ана, һыбайлылар сыға.

Кемдәр? Дошман разведкаһымы, вестовойҙармы? Тегеләр башҡорттар ҡарап

---

[1] *Иванов Яков — б.к. атаманы.*
[2] *ҡалғыу – ултырған ерҙән йоҡлап китеү, ойоу.*
[3] *Аҙаҡ — Азов.*

яҡкан кисеүгә төштө.

Алпар сыҡты. Атһыҙ. Аты тегендә. Бер үҙе генә.

— Ҡалмыҡтар юлдашымды алды, мин сумып ҡотолдом.

— Ярай, ҡарарбыҙ.

Кинйә дуҫын ҡаршыланы.

Пугачев:

— Кем? Саксондармы? — тип ҡыҙыҡһынды.

Немецтарҙы, пруссактарҙы шулай атай “батша” бөгзе саҡ. Уларға хөрмәт иткән һымаҡ. Үҙен дә ҡай саҡ саксон тип әйткеләй. Петр Өсөнсө... пруссак бит, ғәйептер шул.

Петровский монастырына бөтәһе төшкө ашҡа йыйналды, Петр батшаның “саксондары” ла байтаҡ күренә.

Эйе, бында немец колонистары күп. Волга буйлап айырым-айырым ауылдар ҙа көн күрәләр. Шул немецтар ҙа ихтилалға апаруҡ ҡушылды.

— О, минең саксондарым!

Пугачев уларға махсус указ яҙҙыртып, немецса ла яҙып, “Peter” тип ҡултамға һалды.

Был “саксундар” бөтә тирә-яҡты белә, һөйләйҙәр. Шунда ныҡлап Төркиә һуғышының нисек бөткәнен ишеттеләр.

Кинйә лә уйланды: “Яңы солох нигеҙендә, и раббы, мәрхәмәтең илә бер әклимендә[1] ҡан ҡойош бөткән. Юғиһә, донъяла әллә нисек. Әҙәм балаһы бер-береһенең йәнен ҡыя. Ҡайтарырҙар, беҙгә ташларҙар. Улы тегендә — атаһы беҙҙең арала булыуы ихтимал. Атаһына ҡаршы улы ҡылыс күтәрә, мылтыҡ ата. Күршеләргә күрше килер, халыҡҡа — халыҡ. Бер үк рустар, бер үк башҡорттар, татары, ҡалмағы... Башҡорттар төрөк һуғышына күп китте. Хәҙер беҙгә ҡаршы ебәрерҙәр. Ҡырым татарҙары ла Россия батшаһы ҡул аҫтына күсә икән. Үҙ хандары ҡала ҡалыуын. Ләкин ситтән ҡуйылмай, ҡатнашмай, Россия әйтеүе менән”.

Бында Пугачевҡа бик күп казактар ҡушылды. Волга казактары — ике йыл элек кенә янъял күтәреп, Федор Богомоловты Петр Өсөнсө итеүселәр. Уларҙан да Пугачев бер полк ойошторол алды. Ҡалмыҡтар ҙа күп.

— Батшаға баш орабыҙ!

— Тоғро хеҙмәт итегеҙ. Ә был, — Алпарҙы күрһәтә, — минең яраным.

Ҡалмыҡтар ергә йығыла.

— Кисер беҙҙе.

— Юлдаш бирегеҙ.

— Бирербеҙ.

— Ел-ямғыр тейміәһен. Ярҙам итегеҙ.

Ҡалмыҡтарға — айырым указ. Уларҙың вәкилдәре менән Алпар ҙа бергә китә. Унын үҙенә лә указ тотторолдо, иҫкәртеү яһалды.

— Шулай ҙа ҡалмыҡтан һаҡлан. Беҙҙән күҙ яҙҙырма. Көс йый.

Теге яҡта — Уфимцов[2], Һарытау казагы. Дуҫтары — малорустар. Шуны көтә. Бер көтөү аттар әҙер тора.

Кинйә Яйыҡ казактарының батшаны шул яҡҡа тартыуын белә. Бармаҡтары үҙҙәренә табан кәкре шул казактарҙың.

Бында байтаҡ туп, йәҙрәләр улъяға алынды. Бик күп мылтыҡ, дары ҡулға төштө.

---

[1]*Әклим (ғәрәпсә) — өлкә.*

[2]*Уфимцов Яков А. — Һарытауҙың (Саратов) отставкалағы полусотнигы, б. к. полковнигы, Һарытауҙа баш командир.*

5

Тағы ҡуҙғалдылар.

Пугачевтың үҙ яҡтары — таныш дала башлана. Ҡомһоу ерҙәр. Шундағы ҡыҙыу ҡыуан ел. Шундағы ҡоштар. Ул йорт-илен һирәк һағына. Бөгөн һағышы бигерәк көслө.

Ғаиләһе бында бара.

Бына йәй көҙгә ауышты, Самсон Сеногной көнө үтеп бара. Иртәләре һалҡынса, ысыҡ төшә. Илья Пророк көнө яҡынлай. Ул баҫыуҙа көлтәләр һанай, йәшен йәшнәтеп ашыҡтыра, шунан ураҡ-салғы ваҡыты тамам, имеш. Август — густоед, тиҙәр шул. “Первый колосок Финогею, последний – Илье в бороду”,– рус халҡы шулай ти.

Быйыл ҡорораҡ йыл. Ә халыҡ батша көтә. Донда ла ҡуҙғалырға итәләр. Тиҙерәк Донға!

Хәбәр алыуынса, Дон казактары атаманы Ефремов та уның яҡлы, тиҙәр.

Электән бунтарь халыҡ шул дондар. Әммә элекке атамандар булдыра алманы. Ә Емельканың даны таралды. Уны “батша” тип бер кем белмәй. Казак! Үҙҙәренеке.

Ефремовҡа ышанысы юҡ. Уны ҡул-аяҡтарына бығау һалып Мәскәүгә оҙаттылар, унан мәңгелек һөргөнгә һөрәләр.

Ә войсковой старшина әле Екатерина фарманы буйынса Пугачевҡа ҡаршы полктар әҙерләй.

**11/VIII** — Дмитриевск (Ҡамышлы). Бында Иҙеркәй Волга аша ҡалмыҡтарға ебәрелә. Пугачев шәхсән ҡуша.

Кинйә Алпарҙы osрата, оҙата дуҫын. Ә был һуңғы күреү, хушлашыу ине.

**17/VIII** — Пролейка йылғаһы буйында Пугачев хөкүмәт ғәскәрҙәрен туҙҙыра.

**17/VIII** — Царицын янындағы һуғыш.

Пугачев бында ла тәүәккәллек итте. Юғиһә, ул ниндәй батша?! Ғәҙәттәгесә, тәүҙә артиллерияны эшкә егә. Унан — “лава”.

Килә башлайҙар. Аттарын яҡтырҙылар. Ҡорһағы ышығына («батовка” ысулы).

Бер төркөм боҫҡонда. Бер төркөм шуның алдынан барып, дошман килгәс, сигенде. Дошман атака яһай. Былар уңай урынға еткәс, боҫҡондан сығып, тегеләрҙе ҡыйраталар.

Дошман килә. Кинйә атлылары ярҙамға ашҡына. Ярай әле, кавалерия менән пехота араһы ҙур түгел ине.

Шунан “Петр III” бер төркөмдө дошман пушкаларына ебәрҙе. Ныҡ аталар, юғиһә. Ҡасманылар. Яҡын барыуҙан зыян юҡ. Пушкаларын батша ҡулға алды, пушкарҙар юҡ ителде.

Шунда уҡ туптарҙы бороп, дошман өҫтөнә ут бөркөттө. Бер флангыла Пугачев атлылары сигенде. Пехота алға сыҡты. Уларҙы ҡыҫҡанда, Пугачев үҙе килеп, яу теҙгенен ҡулына алды.

Хөкүмәт ғәскәрҙәре еңелде.

Бер байраҡ ҡулға төштө. Пугачев ҡарай. Бер офицер әйтте:

— Барон Дельвиг полкыныҡы.

Әһә, был бит Гольштейн полкы. Переворот көнөндә Екатерина еңгәс таратылғайны, бына ҡайҙа...

— Хоҙай үҙе килтереп ташланы. Был полкында күберәк саксондар ине, һаҡлағандар.

Пугачев үҙенең скипетрына баш эйә.

Пугачев был шатлыҡтан чиндар өҫтәне: Овчинниковҡа — генерал-фельдмаршал, Перфильевҡа — генерал-аншеф.

**20/VIII** — Царицынға.

Улы ла шунда бит әле.

Пугачев шат. Кинйә менән икәү генә ҡалғас, һөйләшәләр.

— Әйҙә минең дуҫтың балалары янына. – Батшаның башҡаларға ышанысы юҡ.— Бында бит еңдек!

— Еңдек. Беҙҙеңсә, бының өсөн мәрхәбә! Әммә Михельсон килеп етмәне. Дон казактары булһа, еңер инекме?

Пугачев уйға ҡалды. Ул Кинйәгә булыр-булмаҫ итеп әйтмәҫкә күнеккәйне.

— Улай ҙа була. Еңелгән саҡтар ҙа күп бит. Терекка китербеҙ... — Ярай, “Дон”ға тимәне Пугачев.

— Әллә беҙгәме? Әле башҡортта — көс бөтмәгән. Унда Салауат бар, Юлай бар. Ҡәнзәфәр...

Һуңғыһының Ҡыҙрас тырнағына ҡабыуын белмәйҙәр ине шул.

— Унда һин кәрәк, батшам.

— Эйе, ышаныслы атамандар аҙайҙы. Миңә теш ҡайрайҙар. Һә-әй, күҙ күрер әле.

— Шулай ҙа һаҡ бул!

— Эйе, теге яҡта көс булһын. Идорканы ебәрергә кәрәк.

— Унда — минең сотниктар. Башҡорттар, нуғайҙар бар.

6

Арттан Михельсон ҡалмай. Алда — Әстерхан (элекке Хажтархан) губернаторы. Пугачевтың уйы – Ҡараярҙан уҡ Терек яғына һуҡтырыу.

Тик... Ҡараярға 20 саҡрым ҡалғанда...

Сальников[1] ватагаһы. Завод тиһәң, Хоҙай һаҡлаһын. Бер артель. Балыҡ тоталар. Тоҙлайҙар. Шунда яҡынлашып килгәндә, Овчинников менән Чумаков әрләшеп алды. Уға аншеф та, фельдмаршал да юҡ.

— Яҡташлы булып йөрөйһөң, — ти.

Пугачев туҡтата. Арттан дозор хәбәр итә:

— Ғәскәр килә!

— Михельсон. Бой булыр. — Пугачев ҡуша Чумаковҡа. — Бына һин — командир.

Чумаков сәмле. Баш эймәй, күкрәк кирә.

— Ниңә? Хәҙер үкме?

Ул урын ҡарай... Хәйлә... Етер, һуғыштыҡ. Бер йыл. Ҡазандан һуң да 5 аҙна. Ал юҡ, ял юҡ. Таралырға ваҡыт. Үҙебеҙ таралмаһаҡ... Михельсон таратыр.

Урынды юрамал насарҙан һайлай. Артта — соҡор.

Овчинников күрә, әйтеүе уңайһыҙ. Перфильев:

— Артта соҡор бар, маневрға урын юҡ.

Чумаков:

— Ҡасырға урын кәрәкме? Ҡасмайбыҙ. Шунда Михельсонды батырабыҙ.

Туптар ҡуйҙыртты. 24 туп. Кавалерия, пехота тырым-тыраҡай. Ылауҙар һаҡһыҙ. Ә обоз ҙур ине.

Михельсон артиллерияны киҫте. Алды. Туптар бөтәһе ятып ҡалды. 2 мең кеше йән бирҙе.

Овчинниковты ҡыҫтылар. Полкы ҡыҫылды, ныҡ алыштылар. Пугачев күрә: ярҙамға барырлыҡ түгел. Йырын ашаһы. Үҙен ҡыҫалар. Кинйәнең башҡорттары, Садыҡтың татарҙары уны ике яҡлап ҡурсалай. Батша артҡа сигенә. Үҙ янындағы казактар йығылып бөттө.

Юҡ, Овчинниковтың генерал-фельдмаршаллыҡ ғүмере оҙон булманы (25/VIII үлә). Обозда — Пугачевтың ҡатыны. Улы Трофим, ҡыҙҙары.

[1]*Сальников Михаил — пахотный (поселенный) һалдат, Пенза өйәҙе Сердоба ауылы кешеһе, б. к.*

Пугачев уларға ярҙам итә алмай. Һуғыша-һуғыша ярға табан сигенделәр. Тегеләр тороп ҡалды. Ҡысҡырыш, илаш. Ләкин ишетерлек түгел.

Пугачевтың ҡатыны Софья тилмереп ҡарап ҡалды. Ана, күҙе алдында һуғыша-һуғыша киттеләр. Царицын тирәһенә. Улы Трофим артынса ынтылды. Әсә тотоп ҡалды.

Ҡыҙҙары Аграфена менән Христина ҡысҡырҙылар, иланылар. Әсә уларҙы ҡосаҡлап, ауыҙҙарын усы менән япты. Уларҙы тотоп алып киттеләр. Петербург янына — утрауҙағы Кексгольм крепосына, Пугачевтың йәш ҡатыны — "императрица" Устинья янына — башняға илтеп, мәңгелеккә ябырҙар. Устинья ла, Софья ла, улы ла шунда үлгәнсе торор. Ә ҡыҙҙары...

50 йылдан һуң Пугачев башняһына декабристарҙы — Иван Горбачевский, Михаил Спиридонов һәм Андрей Борятинскийҙы килтерерҙәр. Урын булмағас, ике ҡарсыҡты полиция күҙәтеүенә сығарырҙар. (Утрау — Вуокса йылғаһында, яры — таш ҡаялар).

***

Михельсон императрицаға рапорт ебәрә: "Ҡыйраттым"... Оҙон хат. Ул ғына түгел, Пугачевтан алған бер байраҡты ебәрә. Белә ул, ҙур бүләк — Гольштейн полкының байрағы. Екатерина шатланды ла, борсолдо ла.

Быға тиклем ул Пугачевтың кем ҡотҡоһо менән шулай ярһыуынан төрлөсә шикләнде, төрлөсә юраны.

Йә төрөктәр ҡотҡоһо, йә поляк конфедераттары һөсләүе. Бәлки, тәхет тирәһендә берәй заговор барҙыр? Бәлки, улы Павел исеме менәндер...

Шунан ҡурҡып, Пугачев Мәскәүгә яҡынлай башлағас, батшабикә Ригаға күсергә, ә унан бөтөнләй Россиянан китергә йыйына ине.

Ә бына Гольштейн полкының байрағы килтерелгәс, уны атып ташланы ла, кешеләр киткәс, үҙ алдына йәйеп ҡараны. Сирҡанып, берсә ерәнеп. Артҡа китә, яҡын килә. Өтөр, яндырыр төҫлө. Юҡҡа ғына һаҡламағандар бит.

Полктың командиры барон Дельвиг һаҡлағанмы? Ихтимал. Петрҙың бер әшнәһе... Ах, ҡара йылан. Ике йөҙлө барон... Екатерина, бел: Петрҙы ҡолатҡас, полкты тараттылар.

Нишләп тағы ғәскәргә барып эләккән был байраҡ?

Теге мәлғүн Петр III-нең яҡындарының мәкерле эшеме, әллә Павелдың хөсөтө?

Екатерина губернаторға "Белегеҙ, тикшерегеҙ, белегеҙ!" тигән фарман ебәрҙе.

7

**25-26/VIII** — Волга аша сығыу.

Казактар ҙа, башҡорттар ҙа йылға аша сыға беләләр. Тик Волга киң шул. Аттар йонсоған. Бөтәһенең дә. Арығандар үҙҙәре.

Йөҙәләр. Берәү атының ялына тотоноп өлгөрмәне.

Алда утрау. Шуға саҡ-саҡ еттеләр. Пугачев арыны, уға Кинйә ярҙам итте.

Унда әҙерәк ял алдылар. Казактар ҡоро-һары бәйләне, башҡорттар турһыҡтарына тын тултырҙы. Ләкин Михельсон туптары ата. Тегендә кәмәләргә тейәйҙәр. Батша отрядтан күҙ яҙҙырмай, үҙ отряды менән түбәнләне.

Алпар килеп етте. Бер аҙ кешеһе менән. Аттар — Тумаҡ менән Аҡъял еҫкәнеп алды. Алпар атына Пугачты ултырта. Үҙе атты етәкләй, бүтәндәр ялына тотона.

Бер аҙ халыҡ эйәрҙе. Чумаков, Федулев, Творогов...

Перфильевтың хәле юҡ. Ял итмәй булмаҫ. Аттың хәле юҡ.

Волганы сыҡҡас, ҡалмыҡтар осрай. Кинйә һораша. Иҙеркәй хаҡында — ул бит, ҡалмыҡтар алып киләм, тигәйне. Белмәйҙәр. Быларға йыйыналырға ҡуша Кинйә.

Волганы сыҡҡас, Пугачев Перфильевты көтә. Төн шунда үтә. Перфильев, генерал-аншефы, юҡ та юҡ. Садыҡ Сәйетов та юҡ. Төн буйы бәхәс, кәңәш...

— Терек казактарына барайыҡ. Унда Нуғай урҙалары бар.

Творогов:

— Эйе, унда көтөп торалар ине. Ана бит һинең Дондағылар... нишләтте. — Хәҙер ҡайҙа батша тиеү Пугачевҡа.

Бер нәмәгә тәүәккәллек итә алмай Емельян. Һин ниндәй анпиратор, сараһын тап, тип әйтерлек түгел үҙ-үҙенә. Ҡайҙа ҡотолоу? Ләкин уларға ер йөҙөндә ҡайҙа һуң урын?.. Энә түгелдәр.

— Һин ҡысҡырма! Запорожьеға, — ти батша.

— Үҙең ҡысҡырма. Күп ҡыландың. Һиңә алданып, ошо көнгә ҡалдыҡ.

Творогов Чумаковты тыя, Кинйә Пугачевтың асыуын баҫа. Үҙ-ара өҙөшөү ярамай.

Пугачев Ҡараярға етергә 4 саҡрым ҡалғас, Сальников ватагаһы ҡыйрала һәм Новоузенский далаһына боҫа. Ҡыуырға еңел команда менән полковник Дундуков А. И. (кенәз) төшә — ул бай ҡалмыҡтарҙы ғына ала. Ә Малодербет олоҫо хакимы Ценден[1] Пугачевҡа электән ҡушылғайны.

Һуғыш... Семитринныйҙан үрҙәрәк (Волганың һул яғында). Үлектәр араһында Иҙеркәй тылмас кәүҙәһе шәйләнә.

Арттан ҡыуа Дундук. Уны алдау өсөн Заметайло[2] "әүрәтеп" йөрөй. Пугачевты Оло Үҙәндә тоталар.

— Ә ҡайҙа ҡалмыҡтарың? Ана, Идорка ҡасты бит.

Казактар ҡаршы.

— Сит-ят ерҙәргә бармайбыҙ.

— Ҡайҙа алып бараһығыҙ һуң?

Алдаштырып, үҙҙәре белгән ергә илтәләр Емельянды. Һис юғы Яйыҡ тамағы тирәһендә ҡышлап була. Ундағы Гурьев казактары ситкә типмәҫ. Улар элек-электән баш бирмәҫ, ғорур. Степан Разин да заманында шунда килеп һыйынған.

Яҙ еткәс, йә тағы ҡуҙғалыр, йә ойошоп, берәй тарафҡа күсенер.

**3/IX** — Пугачев күнә. Уны далала йөрөтәләр. "Анфима көнө етте. Уны рустар "когда девкам невеститься пора" тиҙәр. Батша Кинйәгә:

— Атамандар ҡаршы. Кешеләрең беҙҙең менән бармаһын. Ситтән күҙәтеп барһындар. Михельсон менән осрашмаһындар, янтайһындар, — ти. — Уяу һаҡлағыҙ. Элемтә тотоғоҙ.

Кинйә тағы:

— Салауат янына барырға ине, — тип ҡабатлай.

— Тоҙаҡтан ысҡын, — Пугачев уйсан. — Иҙеркәй ҙә юҡ.

— Яйы табылыр. Киткәс...

Волганың уң яҡ ҡушылдығы. Бахтергир артта. Һул тамаҡ — Аҡтүбәне лә үттеләр. Волганың болон яғы.

Кинйәгә Алпар хәлде һөйләй. Бында ғәскәр күп.

Салауат хаҡында хәбәрҙәр таралған. Ул алыша. Бөтә башҡорт ерендә ҡанаты...

**8/IX** — Оло Үҙән.

Ләкин Пугачевтың белмәгәндәре күп ине. Бында Голицын килә, Суворов килә.

— Яйыҡҡа ҡайтабыҙ. Ғаилә янына, ҡасып... — тиҙәр атамандар.

— Улай иткәнсе, бер-берендә тереләй ҡәбергә күмеп китеү хәйерле.

Творогов, Федулев, Бурнов, Железнов, Чумаков... Заговор барлығы күренеп тора.

---

[1] *Ценден (Цеден) – ҡалмыҡ кенәзе.*

[2] *Заметайло (Метлин, Пометайло, Заметаев) И. П. — Волганың түбән яғындағы б. к. отрядтарҙың башлығы.*

— Ҡайтабыҙ. Хоҙай яҙғаны шулдыр.

Казактар күп. Башҡорттар ҙа байтаҡ. Алпар отряды тотоноп китһә, әгәр... Тик үҙ-ара өҙөшөү ярамай. Берәй юлы табылыр.

Уҡмашырға, көтөргә. Пугачевты алдаштырып килтерәләр.

**8/IX.** Хәҙерге Александров (Гай) тирәһе. Пугачевты Оло Үҙәнгә алып баралар.

— Перфильев янында көс байтаҡ бит, килеп етһен.

Ләкин ул юлдан яңылышҡайны. Дала киң. Эҙләйҙәр. Арттан ҡыуа Михельсон.

Алда разъездар Яйыҡтан. **12/IX** – Деркул йылғаһы янында шулар менән һуғыш. Еңелделәр. Юлдаштары менән әсиргә алынды. Яйыҡ ҡалаһына оҙаттылар.

**12/IX.** Перфильевтан Яйыҡта гвардия капитаны С. И. Маврин допрос ала. Шунда беләләр Пугачевтың ҡайҙа икәнен.

***

Яйыҡ атамандары һиҙенә. Пугачевты ябай яугирҙар янына ебәрмәйҙәр, яугирҙар ҙа китә алмай. Бында ябай халыҡ булмаһын, тинеләр. Батша бит. Пугачев та күнде. Кинйә нишләһен.

Пугач бер ҡайҙа китә алмаç хәлдә. Бер урында ла калакул ҡағып ҡаршы алмаçтар.

Кинйә Алпарҙы ситкәрәк ебәрҙе. Унда Һары Үҙән. Туғай. Ҡамыштар, әрәмәлек.

Шулай ҙа үтер. Тирә-яҡта карателдәр эҙе күренә. Үтеп китһен, ти Кинйә.

Пугачев сатыры. Урман сите. Артта һаҙлыҡ. Ҡамыштар. Урман.

Тегеләр ҙә шулай тигән була. Улар инде Кинйәне ебәрерҙәр ине. Һиҙенерҙәр, ти.

Былай ҙа... Ул-был булдымы, Кинйә һыҙғыра. Аты килә. Кешнәй. Тегенән башҡорттар күренә, килеп ябырылырҙар.

Оло Үҙән. Уң яҡ яры. (Хәҙер Александров Гай), шунының төньяҡ-көнбайыш ҡыры.

1**4/IX**. Бер көн казактарҙың бер төркөмө Кинйә янында ҡалды. Икенсеһе Пугачев менән.

Бахчаға (Бағбостанға) алып киттеләр. Ҡауынға. Унда ябай казактар байтаҡ. Улар ҙа Пугачевҡа екһенеп ҡарайҙар.

Чумаков:

— Йә, “ғали йәнәптәре”, хәҙер ҡайҙа барырға итәһең?

— Форпостарға. Гурьевта — орда, Каспий...

— Иван, нисек уйлағаныңды эшлә.

Федулев Бурновҡа[1] ымлай. Тегеләр айман тотоп ала Пугачевты.

— Һеҙ нишләргә булдығыҙ? Хаиндар!

— Молчи, злодей! — Кемдер ҡамсы менән киҙәнә.

— Кемгә ҡул күтәрәһең?

Ҡулын ҡайырып тотоп алалар.

Пугачев ысҡына. Атҡа. Ҡамыштарға ҡасмаҡсы. Творогов менән Чумаков ат өçтөндә. Тоталар. Бәйләргә киләләр. Ҡулын тартып ала.

Бәйләй башлағас, Пугачев Твороговты саҡыра:

— Мә, бәйлә үҙең... Алдан бәйлә. Арттан ярамай. Мин юлбаçар түгел.

Шунан уҡ тура алып китәләр.

Шул арала береһе ҡысҡырып ебәрә. Эргәнән казактар килеп сыҡты. Ә тегендә, Кинйә ҡалған ерҙә, Кинйәнең атына арҡан ташлана. Алып китәләр. Кешнәне. Быуылды.

Кинйә йүгерә. Ҡылысы юҡ.

---

[1] *Бурнов Иван — Яйыҡ казагы, б. к.*

Шау-шыуға биш-алты башҡорт күренде. Ә тегеләр күмәк... Элекке яуҙаштар, Пугачевтың ярандары.

Әҙерләнгәндәр. Күндергәндәр ҡарауылды.

Тотҡанға хәҙер 80 мең һум икән әжере.

Бында уларҙың беше ағастан эшләнгән ситлеге. Яйыҡ ҡаласығына ҡуҙғала кисәге ҡоралдаштар — бөгөнгө дошмандар.

Бына бит... Былтыр һөйләшкәндә Пугачев былдай көндөң килерен дә уйланы. Юл уңмаһа? Уңмаһа, һине хур итмәбеҙ, ат биреп, далаға сығарып ебәрербеҙ, тотоп бирмәбеҙ, тигәйнеләр... Ышан дуҫтарға!

Кинйә янына башҡорттар килде. Ләкин ҡыуа сығыу мәғәнәһеҙ ине.

8

“Против русских в сердцах у нас нет злобы. Нам, башкирам и русским, не следует вести споры и разорять друг друга”.

Юлай менән Салауаттың Ҡатау-Иван заводы эшселәренә яҙған хатынан. 10 сентябрь, 1774 йыл.

Өфө янынан Салауат Бөрө яғына киткәндә, Юлай Әй һыуы башына килә. Себер юлы старшиналары йыйылған. Шулар баш һалырға һүҙ беркетмәкселәр икән. Юлай тиҙ генә бара. Әйҙә, Тимашевҡа барайыҡ, тиҙәр. Коллежский советник Тимашевҡа.

Ҡайһы берҙәре баш һалған. Юлай әрләй. Туҙҙыра. Тыя.

Карателдәр армияһының бөтә хәрәкәте хаҡында хәбәрҙәр Ҡазанға бара, ә унан Мәскәүгә, Петербургҡа китә.

Йәшерен комиссия начальнигы генерал-майор Потемкин П.С. бөтә хәлде белеп тора, Екатерина II-гә рапорт ебәреп ята.

Ундағы хәлдәр, йәнәһе, яҡшы... Волга буйлап та еңеү. Камаға тиклем тынлыҡ... Ә башҡорттар тынмай. Шуны иҫәпкә алып, Бөгөлмә менән Табын араһына полковник Якубовичты ебәрҙем, боласыларҙы ҡырырға приказ бирҙем, ти. Йәнәһе, башҡорттарға өгөт хаттары тараттҡан, октябрь башынаса көтәсәк. Юғиһә, Запорожье казактарын ебәрәм, тип тә өркөтә.

Башҡорт старшиналарына ҡуштым, Ҡыҙрас Муллаҡаевты тағы ебәрҙем: миңә Ҡаранай Моратов менән Салауатты тотоп килтерһендәр.

***

Ә Ҡаранай ҙа, Салауат та тик ятмай. Уларҙың көсө аҙ түгел ине әле.

Ләкин башҡорт ерҙәрен ҡыҙырып бер Якубович ҡына йөрөмәй.

Бер Ҡыҙрас ҡына һатылмаған.

Карателдәр ҙә, һатлыҡ йәндәр ҙә күп. Уларҙың ҡулы йөрөй, эштәрен эшләйҙәр. Улар завод крәҫтиәндәре араһында ла “эшләгән”.

Заводта Юлайҙы тыңлайҙар, оборона ойошторалар.

**15—21/VI**—74 йыл.

Ебәрмәнеләр заводҡа. Юлай хаты.

Нәзе-Петровский заводтарында ла шулай. Унда башҡорттар атакаһы ныҡ, заводтыҡылар, бөтә малын-күсен алып, урманға ҡаса. Заводты башҡорттар яндыра. **(X, XI—74 й.)**

Карателдәре – бер бәлә. Башҡалары ла төрлө яҡлап ҡыҫа, хыянат итеп шашыналар. Элекке яуҙаштар һатлыҡ йәнгә әүерелә. Хәҙер тотоп бирергә уҡталалар ихтилал башлыҡтарын.

Ә заводтағылар? Элек улар нисек шәп ярҙам итте, ысын яуҙаштар булды. Байҙың ҡаҙнаһын, тубын, дарыһын алһаң да, мөгәзәйҙәрен асып, аҙыҡ-түлеген таратһаң да, быға батшаның хаҡы бар, уның өсөн, тиҙәр ине. Завод крәҫтиәндәре, ыһ та итмәй, үҙ ауыҙынан өҙөп икмәген бирҙе, ылау бирҙе, йылы өйөн йәлләмәне.

Быны улар көрәшкә булышыу, ир батша өсөн тырышыу тип аңлай ине. Хәҙер был аңлау юҡ. Батшаның, заводтарҙы һаҡлай алмаһағыҙ, яндырырға, тигән фарманына юл ҡуймай. Быны разбой тиҙәр. Башҡорттан күрәләр. Асыу тоҡана. Үҙ хужаларына, үҙ эштәренә зыян, бәлә-ҡаза, тип уйлайҙар. Шунда байҙар ҡайта, караттарға төйәк була, тип аңламайҙар хәҙер. Был дөйөм көрәшкә хыянат, тиҙәр башҡорттар. Туранан-тура хыянат та бар шул. Заводтағылар карат отряд командирҙарына барып баш эйәләр, төркөм-төркөм ойошоп, уларға булышлыҡҡа баралар.

Крәҫтиәндәр завод тирәләп урҙар ҡаҙыны, имән ҡойма тотто, юлдарға башнялар ҡорҙо, дозорҙар ҡуйҙы. Ылау бирәләр, ям сабалар.

Салауат атаһы янына ҡайтты. Тағы Йыралы ауылында осраштылар. Икәү шул хаҡта һөйләшәләр.

Унда завод управаһын әсир алғандар. Эш боҙалар. Заводтағы эшсе крәҫтиәндәр хужаларынан йөҙәп бөткәйнеләр бит. Хәлдәре ауыр, ҡолдар кеүек. Башҡорттар уларҙы йәлләне. Бергә көрәшкә күтәрелделәр. Еңделәр. Еңелделәр, тағы еңделәр. Заводта кешеләр күп. Крепость итеп нығытып алынған. Туптар бар.

Кារателдәр керҙе, приказчиктар — үҙҙәре бер команда. Крәҫтиәндәр ҙә улар ҡотҡоһона бирелгән кеүек.

— Башҡорттар баҫып алһа, һеҙҙе ҡырып бөтөрөрҙәр, — тиҙәр икән.

Аҙ-маҙ осрашыуҙар, алыштар була.

Заводта башҡорт ир-азаматтары әсир алынғандар. Барып баҫып алып, ҡотҡарып була, әлбиттә.

Салауат күҙәтә заводты. Йүрүҙән буйы. Ҙур таш. Шунда баҫҡан батыр.

— Ҡайҙа, нисек барырға?

Заводты ҡаманылар. Крәҫтиәндәр эскә, карателдәр янына, инде. Ҡапҡалар ябылды.

Салауат ярһығайны. Атаһы, ҡан ҡойош яҡшы түгел, ти.

Эйе, дошман артыр, ә бер килешһәк, дуҫтар ишәйер.

Ҡатау-Иван заводына хат яҙалар.

— Ғәбдрәшиткә әйт, яҙһын.

Ул войсковой писарь, уның эше.

— Үҙем яҙам, — тине.

— Яҙ, улым.

“Беҙ главный атаман Юлай Аҙналы уғлынан һәм бригадирлыҡ эшен адә ҡылғусы главный полковник Салауат Юлай уғлынан һүҙ шулдыр.

Һеҙ Ҡатау заводында командир булып торғусы приказчиктарға һәм ҡарттарға!

Әгәр һеҙҙең кешегеҙ беҙгә тотолһа, беҙләр уны үлтермәйенсә һәм зарур тейҙермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Әгәр беҙҙең кешебеҙ һеҙгә тотолһа, итәһеҙ уны тотҡон һәм бәғзеләрен үлтерәһегеҙ ирмеш һеҙ.

Әгәр беҙләрҙең күңелемеҙҙә уҫаллыҡ булаһы булһа, алла теләһә, һеҙләрҙән артығыраҡ тотоп һәм һеҙҙәрҙән артығыраҡ үлтерер инек. Беҙ теймәйбеҙ — күңелемеҙҙә уҫаллыҡ юҡ!

Әгәр татыулыҡты теләй торған булһаңыҙ, ебәргәй һеҙ Мусабай Бикжән уғлын[1] аралыҡта йөрөп, татыулаштырыу өсөн. Һеҙҙин беҙгә тойолмош ике урыҫтың береһен ҡайтарҙыҡ яҙыу илә. Һәм Мусабай ҡайтып килгәндә кизин, беҙҙең ҡулымыҙҙа ҡалғусы берәүһен дә ҡайтарырмыҙ.

Беҙләр бер-беремеҙ илә спурлашып, бер-беремеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер, көлләмөҙ дә падишаһымыҙ император Петр Федорович третий хәҙрәттәренең ҡоломоздыр һәм беҙләргә һәр даим изге хәбәрҙәре киләлер, указдар

[1] *Мусабай Бикжән уғлы — Өфө өйәҙенең башҡорто.*

арҡылы, уғлы Павел Петровичҡа ҡушылғандыр тип, һеҙләр ҙә анларҙың сәләмәтлеген теләйһеҙ тип.

Изгелек теләгүсе дустыңыҙ главный атаман Юлай Аҙналы уғлы ҡулым ҡуйҙым һәм бригадирлыҡ эшен адә ҡылғусы главный полковник Салауат Юлай уғлы ҡулым ҡуйҙым.

1774 йыл рәжәп[1] айының 15 көнөндә".

**15/IX** заводтағы эшле крәҫтиәндәргә Мусабайҙы, хат тоттороп, илсе итеп ебәрәләр: "Установить союз и жить дружно!"

— Әгәр ҙә ҡарышһалар, шулай тип әйт...

Юлай:

— Хәүефләнмәһендәр. Сиреүҙе артҡараҡ тарттырайыҡ.

Ҡайҙа биш, ҡайҙа ун саҡрымға.

Тегендә береһе:

— Ҡулығыҙҙан килмәй, — ти.

Мусабай Салауат һүҙҙәрен әйтә:

— Беҙҙең Юлай атаман да, Салауат бригадир ҙа быны теләмәй. Әгәр ҙә беҙ Ҡатау заводын харап итергә теләһәк, бөтә стеналар буйына һалам өйөп үрт һалыр инек. Унан ябырылабыҙ. Көс аҙ түгел.

Әйтте Мусабай. Ҡурҡманы. Ул илсе бит. Илсегә үлем юҡ.

Берәү әйтә:

— Улар былай эшләмәҫтәр. Заводта күпме кеше! Уларҙың йорттары, выждандары бар.

Был губернаторҙы, генералдарҙы бик борсоно. Карателдәр ярҙам һорай.

Яҡында полковник Шепелев бар, йәнә подполковник Рылеев бар. Ә уларҙың — үҙ эше.

Заводтан Ырымбур губернаторына ла ярҙам һорап кеше китә. Уныһы ярҙам ебәрә.

Ләкин халыҡ сыға. Һөйләшеүгә. Атаһы ҡала, Салауат китә.

Дуҫтарын йыя.

Йәлдәк ҡалғәһе кешеләре менән килгән.

Ҡошсонан Илсеғол Этҡолов үҙе килде.

— Нишләп бында ятабыҙ?

Эйе, Батырҡай Иткинин да Рылеевҡа ҡаршы һөжүмгә саҡыра. Әбйәлил Ырыҫҡолов[2] та.

Китәләр.

Юлда Зөләйха ҡыуып етә. Бергә барам, ти. Кейенгән бит әле, егеттәрсә ҡоралланған да. Хәҙер йәнәш бара.

Бына, күрһәтәһе ине Балтасҡа Салауат – Зөләйха тигән яугир парҙы.

9

Сапҡын Салауатты саҡырырға килә. Бөрө яғынан.

— Балтас ҡоторона...

Янында – Батырҡай кешеләре. Ҡошсо старшинаһы Илсеғол Этҡолов менән осрашҡандар. Ул үҙе килгән бөтә отряды менән. Ә тегендә Әбйәлилгә ярҙам кәрәк, тиҙәр.

Салауат атаһын был яҡта ҡалдырып, үҙе генә китә. Күнегелгән хәл. Дошман барын ишетә лә бер төбәктән икенсеһенә саба. Ҡайҙа ярҙам кәрәк, шунда ашыға.

Үҙ отрядын атаһына ҡалдырҙы. Ҡошсоһо Баһау ҙа быуайы Сағыр. Әсәһе ҡушҡандыр, һис ҡалмай. Рәхмәт, Сурағол батыр.

---

[1] *Рәжәп — сентябрь айына тура килә.*
[2] *Әбйәлил Ырыҫҡолов — Себер даруғаһы Ҡыр-Танып олоҫо башҡорто, б. к. полковнигы.*

Тағы ҡор йыя. Киләләр. Бынынһы ла күнегелгән.

Ә бына... Зөләйха! Егеттәрсә кейенгән:

— Мин дә барам! — ти, сат йәбеште.

Барһын. Оло еҙнәһе Балтасҡа күрһәтер.

Һөйләшеп баралар. Ҡыҙыҡ.

Рустар ҙа һөйләшеп бара, йырлайҙар:

*Три кольчуги надевал.*

Салауат үтеп китә. Таныйҙар.

— Бына Салаватка үҙе!

Батыр ары үтә. Мариҙар һөйләшеп уҙа.

Ҡариҙелде үттеләр.

Урман ҡыҙырымынан барышлай бер нисә кеше күренде. Ҡастылар. Береһе арттараҡ ҡалып, әйләнеп уҡ атты.

Баһау атыр өсөн бер уҡ алды. Салауат:

— Уҡ әрәм итмә! Шуғамы? — Үҙе ҡыуып китә. Баһау ҙа ҡалмай. Салауат ҡыуып етә теге бәндәне. Ҡамсы менән шыйыра.

— Кем бар? Кем ебәрҙе?

— Старшина.

— Кем бар урыҫтан?

— Рылеев.

Ә, подполковник... Уны үҙенең карабинерҙары менән Фрейман Өфөлә Салауатты тар-мар итергә ебәргән дәһә.

Бөрөгә яҡын, Бөрө һыуы буйында, Салауат сиреүенә Әхмәт Аҡаев килеп ҡушылды. Таныпҡа табан бергә киттеләр.

Был тирә элек-электән ышанысһыҙ. Ана, Әзәк ауылы (хәҙерге Борай районы). Бында Батырша тотолған, старшина Сөләймән Диваев уны властарға бығаулап илтә, ярлыҡаш аҡсаһы ала.

Әле аҙмы ундай “сөләймәндәр”!

Таныпҡа етәрәк ал күҙәтеүселәр Өфө яғынан килгән бер команда хаҡында иҫкәртте.

Салауат 500 кешеһен боҫтормала ҡалдырҙы. Байтаҡ араны уҙҙылар. Тегеләр юҡ.

Этҡол:

— Көтәйек, — ти. — Юғиһә, көс аҙая. Еңелербеҙ.

— Ана шул саҡ еңелербеҙ. Ул бөтә юлды ҡарап тора. Дошманды тотҡарлай. Беҙ ашығайыҡ.

— Ә улар?

— Килеп етерҙәр...

Барып урынлашалар. Борайға яҡын Тимошкинола.

**18/IX.** Салауат Рылеевтың бер командаһына ҡаршы сыға.

Бында, Борай янында, Иван Алексеевтың отрядында ҡатнашҡандар ҡушыла. Ул үҙе, яңы суҡындырылған мишәр, Ҡәнзәфәр менән бергә ине. Уның менән бергә тотоласаҡ аҙаҡ. Ә кешеләре, уның өсөн үс алғандай, ай-һай, ныҡ һуғышты.

Алыш. Салауат ул команданы бөтөрә яҙа. Теге боҫтормаға ҡалдырылғандар килеп ҡушылғас, кәйефтәре күтәрелде.

Тәпәреш ауылы (Нөркә янында).

Мари ауылы. Мариҙар тотонғайны һуғышырға (Иҙебай). Салауат ярҙамға өлгөрҙө. Ҡаршы яҡтың байтағы һәләк булды, 20-ләпте аҫып киттеләр. Бер байраҡ (мариҙыҡы) дар ағасына ҡаҙаҡлап ҡуйыла.

**19/IX.** Иртәгәһенә Рылеев хәбәр ала. Үҙенең командаһы хаҡында Өфөгә — Фрейманға рапорт.

**“19/IX**-ҙә мин үҙемдең ғәскәрҙәрем менән Борай олоҫондамын, минән 25 саҡрым самаһы ара урынлашҡан баҫҡынсы Салауат етәкселегендә яуыз ниәтле кешеләр йыйылыуы хаҡында хәбәрҙәр алып торам...”

Осрашырға ынтыла. Үткән көнгө алышҡа үс алырға яҫҡый. “Бына мин шундай яуыз ниәт менән яһаған һөжүм зарарлы. Мин уларҙан бер ваҡыт та көтмәгән инем”.

Ҡырып бөтөрөргә уйлай. Ашыға.

Нисек һуң? Санкт-Петербург карабинерҙары менән шулай алышырҙар, тип кем уйлаған.

Алыштан һуң Салауат Балтас янына (Нөркә ауылына) килеп урынлаша. 3000 кешелек ғәскәр. Лагерь төҙөп ала.

Тирә-яҡтағы Иман, Уҫман ауылдары унын ҡулында. Ә арыраҡ — Балтас Ҡолойҙоң ауылы. Ә Ҡолой карателдәр яғында. Ул ғынамы? Ҡайҙа барһаң да, береһе — дуҫ, береһе — дошман. Китте үҙ-ара өҙөш, киҫеш. Бөгөндән тотоп бирергә әҙерҙәр.

Бөтә бәләне Салауат өҫтөнә ябырға торалар. Илдә ҡоролоҡ, аслыҡ, сир таралды. Кешеләр ҡырыла. Бөтәһен яуҙан күрәләр.

**22/IX**. Нөркә ауылында һуғыш.

Салауаттың ғәййәр ынтылышы.

Ләкин туптар көслө. Мылтыҡтары, карабиндары мәргән.

Салауат дошман туптарын баҫырға итә. Булмай. Зөләйхаға: “Кит!” — ти. Ә ул ярҙам итә. Уҡ ата.

Туп-тура барып, күҫәк менән һалдаттарҙың мылтыҡтарын бәреп төшөрҙөләр, тартып алып тондорҙолар. Ҡулдар шаҡарыла, тешләшеү, тибешеү... Кемдә ни бар. Шуның менән айҡашыу.

Ҡанға ер мансылды. Һаҙлыҡҡа ингәс, йәшел күрәндәр ҡыҙарҙы.

Батырҙы уратып алалар. Һаҙға ҡыҫырыҡлайҙар. Зөләйханың аты йығыла. Салауат үҙ атын уға бирә. Ул ат та бата. Яугирҙарын һаҙлыҡ аша алып сығып китә.

Байтағы сыҡты ҡоро ярға.

Ә бер өлөшө һуғыша-һуғыша... Уҡтар бөттө. Һөңгө ырғыттылар. Бер аҙ тейҙе. Суҡмар ҙа юҡ, бер ни ҙә...

Һыуға килеп ҡалдылар. Йөҙөп сығырға — теге яҡта ла дошман. Ҡыҫтылар. Ҡоралһыҙ ни эшләйһең, осраған таяҡтарҙы алған булалар. Ул нимә генә инде.

Мылтыҡ төҙәгәндәр. Китһән, атырҙар. Үлмәһәң? Әсир... Тереләй алырға ҡушылғанлығы күренеп тора. Язалау, һуңынан барыбер үлем. Ана, күрҙеләр бит Тәпәрештә. Нисек аҫтылар...

Рәхмәттең бысағы бар. Ҡулына алды. Һуғышырғамы? Язалап, армайҙар үлтерерҙәр... Әле Рәхмәттең үҙ ҡулы нығыраҡ булыр...

Эргәһендә дуҫтары ла шулай үлде. Алтауҙар ине, алтыһы ла.

...Салауаттың бындағы алышта дүрт йөҙләп кешеһе һәләк булды. Яралыларҙың күбеһен алып китә алдылар. Ҡалдырманылар.

Рылеев: “Мине ҡаршы алған енәйәтсе башҡорт Салауат менән ҡаты һуғыш булды. Уның енәйәти өйөрөндә өс меңгә яҡын кеше бар ине. Ҡырҙым, тар-мар иттем”, — тип рапорт тултырасаҡ. Эстән иһә үҙе, ах, булманы, ҡасты, ҡотолдо, тип сәмләнде.

Булманы шул.

Батыр бынан Ҡариҙелгә табан ынтыла. Юл ауыр булды. Ләкин үттеләр.

Зөләйха нисек сыҡҡанын үҙе генә белә. Өҫ-башы батҡаҡ. Бына таҙарҙы. Аттар булды. Ҡылыс бар. Яны бар.

— Һин барҙа ҡурҡыныс түгел миңә, Салауат.

— Эйе... Әйтә инем, йырлай инем: “Өс йөҙ кеше мине ҡамаһа ла, йырып сыҡтым, атым һаҡланы”.

Зөләйха:

— Ә нисек йырлар инең хәҙер?

— Нисекме?.. “Сабайым да тиһәм, алдым һаҙ, атайым да тиһәм, уғым аҙ. Яняҡтарыма ҡараниһәм, йән юлдашҡайҙарым минең аҙ”. Ә бына атым ҡалды.

— Йәл. Була торған хәл. Бына яңы атың булды бит, — тип йылмая Зөләйха.

— Батыр ҡыҙ һин. Хур ҡыҙы! — Салауат һоҡлана.

— Һиңә тип тыуғанмын, һиңә тип үҫтем...

Йәлдәк ҡәлғәһе. Шунда нығыналар. Салауат тағы сиреү туплай, ғәскәр сафтары ҡабат нығына.

...Ләкин бынан һуң Салауат ғәскәре менән әйләнеп Нөркәгә, Балтас ауылына килә алмаҫ.

Йәлдәктәге һуғыш. Унда — казактар. Салауат атаман итеп казак Семен Шеметовты[1] ҡуя.

Тәүҙә Зөләйханың Балтас балдыҙы икәнен берәү таныны.

— Әле дошман булһа ни. Эй, әсирә иткәндер. Йөрөй инде хәҙер, ҡатын булғас.

Зөләйха шат. Ул тәүҙә йәшерҙе. Хәҙер Салауат янында. Батыр ҡатыны. Главный полковник ҡатыны. Быны Йәлдәктә лә, яугирҙар ҙа ғәйеп итмәнеләр. Ундай хәл мосолманда була... Ә батыр кешегә бигерәк тә килешә.

Бында Рылеев отряды ябырылып ҡараны. Зөләйханың да уҡ атып ятыуын күрҙеләр.

Тантана.

Ҡымыҙ табып килтерҙеләр. Ҡурайын да.

Теге кешеләр:

— Юҡ, был әсирә түгел. Ярата.

Зөләйха йырлай:

*Ҡара ғына урман, ҡараңғы төн,*
*Йәшен генә йәшнәй ялтырап.*
*Салауат та батыр йыр йырлаһа,*
*Дошмандары тора ҡалтырап.*

Салауат йылмая. Үҙе ғәжәпләнә. Был бит нәҡ Әминә йырлағанса. Көйө шул. Ҡайҙан белә?.. Әй, был йыландарҙы... Бөтәһен һиҙәләр.

Бер йылдан һуң Йәлдәкте күрер. Үҙе килмәй, бығаулап килтерерҙәр. Екатерина хөкүмәте бындағы Тимошкино, Нөркә, Йәлдәк һуғыштары өсөн Салауаттан үс алыр. Бик ҡаты булыр ул үс.

Батша хөкөмө язаһы... Салауат ҡайҙан белһен? Ә ошонда — етенсе урында — 25 ҡамсы. Ҡыҫҡыс менән унын танау япраҡтарын өҙөр (палач Мартын Суслов). “Маңлайына — “З” (злодей) тамғаһы яндырып, уң яҡ битенә — “Б” (бунтовщик), һул яҡ битенә — “И” (изменник).

Ә бит Ҡолой Балтастың да үс алыуы аяуһыҙ буласаҡ.

Ә уға тиклем әле күрәшәһе бар. Мәгәр оҙаҡҡа түгел.

Мәскәүҙә, 1775 йылдың 4 мартында, Балтас менән осрашыу. Күҙмә-күҙ Ҡолой күрһәтмә бирер:

“Яуыз Пугачев тотолғас һәм һаҡ аҫтында ултырғанда, ә унан ары ундағы бөтә ауылдар тейешенсә буйһондоролғас, шул саҡта ла был Салауат үҙенең яуызлыҡ эшләүҙәренән баш тартманы. Ә үҙе кеүек эшһеҙҙәрҙе йыйып, шул ҡәҙәр киң таралған талауҙар үткәрҙе, хатта унын, Салауаттың, исеме ул урындарҙағы бөтә ерҙәрҙә ишетелеп торҙо”.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһынының күрһәтмә протоколында өҫтәлгән: “Шунлыҡтан уны тотоу өсөн хәрби командалар ебәрелде лә инде, улар менән ул күп тапҡырҙар һуғышты, ләкин ахыр сиктә тотолдо һәм подполковник Аршеневскийға килтерелде».

---

[1]*Шеметов Семен — Йәлдәк казагы, б. к. атаманы.*

10

Яйыҡ. Сағын күпере аша сыҡтылар. Сиркәүҙе һаҡлайҙар. Унынһына һөжүм яһап булмаç.

Таныш урамдар, йорттар.

Былтыр тап ошо көндө, Успенье көнө алдында, Емельян Таллы өмәтенә — Степан Оболяевҡа килгәйне. Бер айҙан батша итеп күтәрҙеләр. Бер йыл буйы батша исемен йөрөттө. Бер еңеп, бер еңелеп һәм тамам ҡыйралып, ошо тимер ситлектә бына тағы килә. Ирек бөттө.

Ана, тегендәрәк Денис йорто. Бына майҙан. Кузнецовтар йорто күренә. Кешеләр ҡарап ҡала. Килтерҙеләр. Уны ла, тотоп биреүселәрен дә.

Яйыҡта допрос.

— Ниңә элек баш бирмәнегеҙ?

— Үҙебеҙ генә Пугачевты тотоп бирергә булдыҡ. Яуыз бит. — Казак атамандары алмашлап яуап бирә.

— Ниңә элек бәйләмәнегеҙ?

— Бәйләр инек. Беҙгә Кинйә ҡамасауланы. Ул... гелән уның янында. Форсат бирмәне.

— Шуға көсөгөҙ етмәнеме?

— Үҙе генә түгел. Аты ҡамасауланы.

— Аты?..

— Эйе... Тәүҙә атын арҡанлап алдыҡ. Шунан ғына көсһөҙләнде.

Маврин иһә Пугачевтың үҙенән һорау ала.

Бында — карателдәр. Башҡалар Яйыҡҡа йүнәлә.

Хәҙергә ер кендеге кеүек хис итә үҙен Маврин.

Кемдәр генә ашыҡмай унда?

Голицын да килә. Бөтә корпусы менән ашыға.

Ул элек тә ашыҡты. Бер саҡ Пугачев, уның ҡулынан шыйылып сыҡҡан һымаҡ, Урал армыттарына инеп киткән. Нисек кенә ашыҡһа ла, Пугачев артынан барып етә алманы. Башҡорттар тотҡарланы, аяҡ салып ҡына торҙолар. Һөрләккән урындан ҡалҡынып, тағы йүгерергә итһә, тағы аяҡ араһына таяҡ тығалар, ул тағы абына. Ул Өфөгә еткән тап 12 июлдә... Пугачев Ҡазанды ала.Ә бит артынан барырға, Пугачевты ул тоторға, ул маҡталырға тейеш! Тик ул 9 августа ғына барып етте Ҡазанға. Шунда ул Пугачевтың Волга аръяғында көньяҡҡа боролоуын ишетте. Әһә, ҡаршыһына сығырға! (Бүре ҡыуғанда ҡатнашҡаны бар.) Юлына сығалар, тик ҡаршыға сыҡмайҙар, таушалмаған көс менән йәнәшәһенә төшәләр. Ул да шулай Волга сыҡмай ғына болон яҡлап түбәнгә...

Голицындың үҙе тотаһы, маҡталаһы, дан ҡаҙанаһы килгәйне. Бәхет урап уҙҙы шул.

Голицындарға гел генә бәхет ҡояшы йылмайып тормай шул. Улар — ҙур нәҫел, Рюриктар нәҫеле, кенәздәр. Ҡайһы ваҡыт улар бик юғары күтәрелде, ҡайһы ваҡыт... Кенәз Василий бер саҡ Софья батшабикәнең яратҡан һөйәре булды. Петр I уға бик асыулы ине. Бөтә Голицындарға ҡара көн килде, аҫылғаны, киҫелгәне лә булды, һөргөнгә лә һөрөлдөләр. Ә императрица Анна Иоанновна заманында тағы өҫтөнлөк алдылар. Тик башҡалар барыбер уларға бик үк юл бирмәне. Тағы аҫыу-киҫеү... Береһен бер ваҡыт (Ҡазанда губернатор заманында) йәшен атты. Шунан тағы... Дәү урында. Батша һарайында. Петр III заманында береһе – Александр Голицын вице-канцлер булды. Уларҙан байтаҡ илселәр, батша кәңәшселәре. Ә был — йәш генерал. Ниндәй йәш! Яҡшы булды. Татищево, башҡорт ерҙәре... Мәңге онотмаç уны. Тик бына үҙе... беренсе булып тоторға кәрәк.

Шулай ашыҡты... Тик беренсе була алманы.

Голицын ғынамы?

Екатерина Суворовты[1] саҡыртҡайны. Ә ул ниңәлер оҙаҡлай.

Панинды вазифаһынан алды Екатерина. Булдыра алманы, тип. Хәҙер Суворов — баш командалаусы. Ул Яйыҡта барып, Пугачевты ҡабул итеп алды ла шәхсән оҙатты Сембергә. Әбей батша ҡушҡанса.

Унан кире килер. Суворов полктары төрлө ерҙәрҙе ҡыҙыра.

Эйе, Суворов Пугачевты ҡабул итте. Сембергә илтергә. Шунда бит элекке баш командалаусы генерал Петр Паниндың ставкаһы. Хәҙер ары — Мәскәүгә алып китәсәктәр яуызды.

***

Әле Пугачев зинданда. Уларҙы ла ҡайҙалыр илтәләр. Күптәр һөргөнгә — Караваев, Горшков, Ульянов... ебәрелде. Тағы кемдәр? Быларын Емельян белмәй. Ә ҡайһы бер ярандары менән армай алдында осрашыуын да, уларға ҡарарға килтерәсәген дә белмәй. Уға әйтмәйҙәр.

Берәүҙәр үсәп, нәфрәт менән күрергә тырышыр, ә ҡайһы берҙәре... Рычков — ғалим, өлкән йәштә. Хәтерендә, Семберҙә үк ишеткәйне, Кинйә әйткәнсә, атаһы ғалим, буғай. Улын үлтергәнгә, йәнәһе, ғәфү үтенһен. Подполковникты — улы Андрейҙы үлтергәндәр. Их, һин, тиер... Күҙ йәше тамыр.

Пугачев һорау алғанда ла, язалау тимерҙәре кейҙергәндә лә күҙҙәренән йәш күрһәтмәҫ.

Бында уға махсус тимер ситлек әҙерләгәндәр.

Ноябрь башында Мәскәүгә етерҙәр. **14/XI** тағы допрос.

Мәскәүҙә оҙаҡ барыр һорау алыу. Ә **31/XII** — йылдың һуңғы көнө. Екатеринаның һуңғы хөкөмө. Хөкөм итеү. Батша хөкөмө. Мәскәү Кремле һарайының тәхетле залында.

Яңы, 1775 йыл етер. 10 ғинуар... Болотный майҙанына ҡара яу булып халыҡ йыйылыр. Эшафотта һынатмаҫҡа кәрәк. Пугачевты армай ҡаршыһына илтерҙәр. Ҡанһыҙ армайҙың аяуһыҙ айбалтаһы өҫкә күтәрелер. Улары алда әле, бик күп көндәр бар быға.

...Ә бөгөн? Халыҡ уны көтә. Рәсәй ҙур, бөтә ерҙә үҙен күреп ҡала алмайҙар... Күргәндәренең күңеле лә Бүгәстең әләгеүенә ышанмай.

Уның тағы килеүенә ышаналар.

Ҡазандан еңелеп ҡайтҡас та... Барыбер ул иҫән, ул килә, тиҙәр. Кама буйҙарына ҡайттылар ҙа йәшеренделәр, унан отрядтарға уҡмаштылар, карателдәргә ҡаршы тороп, үҙ алпауыттарынан, завод хужаларынан үс алалар.

Батюшка – надежда яңы походҡа әҙерләнә... “Хәҙер былай ғына булмаҫ!” — тиҙәр.

Был көндәрҙә генә түгел, һуңыраҡ та...

***

Суворов үҙ юлынан бара. Графтың даны ҙур, хоҡуҡтары ла. Әллә ни саҡлы ғәскәргә баш командалаусы лаһа. Бөтә Уралда, тотош Волга буйында.

Екатерина бик ҙур кампания итеп ҡарай ихтилалды баҫтырыуға. Уның тәхетен һаҡлау — уйын эш түгел. Ә генерал-поручик[2] граф Александр Суворов “уйын” итеп йәшәне был эштә.

Ноябрь, 1774 йыл. Ул Өфөгә килде. Бында власть әһелдәре, уға буйһонған драгундар полкы хөрмәт күрһәтте. Воевода, комендант Мясоедов, генерал Фрейман да.

Суворовты Троицкий соборҙа көтәләр. Ул алдан килә. Септә тартылған каретала. Драгун мундирын кейгән.

---

[1] *Суворов Александр Васильевич – генерал-поручик.*

[2] *Һуңынан — генералиссимус.*

— Мин — баш командалаусының адъютанты, — тимәһенме главком, мутлашып.

— Его сиятельство граф ҡайҙа? — Һорайҙар бынан.

— Ике сәғәттән килер, — ти ҙә китә Суворов шул урамдағы квартираға.

Воевода Борисов, комендант Ағиҙел ярына табан талпына.

Көтәләр, көтәләр – ике сәғәт уҙа.

Килә повозка. Ҡалтыранып рапорт бирәләр.

Деньщигы булып сыҡты.

— Ике сәғәт алда китте его сиятельство. Ҡайҙа икән? Ҡалалалыр...

Аптырашалар.

— Теге адъютантына барайыҡ әле, — ти воевода.

Суворов көләс ҡаршылай быларҙы.

Граф бында төндәрен дә маҙаға тейә: полк аттарын тикшерә.

Уға завод хужаһы Иван Евдокимыч Твердышевтың ҙур һарайы — Большая Казанская урамы[1] — квартира. Ә ул икенсе каретаға ултыра, ә шәхси каретаһына адъютантын ултырта. Теге китте алдан. Һәйбәт кейемдә. Суворов ҡушҡанса. Әйҙә, кәмит күрһәтергә, йәнәһе.

Ҡаршы алдылар.

Граф үҙе бүтән каретала, артта килә. Септә тартылған каретала. Үтеп китте көләп кенә. Үҙе адъютант булып үтә, тегеләр ҡаршы алырға ҡала. Ике сәғәттән генә килә Твердышев һарайына.

Воевода инә. Һөрләгеп, аһылдап Фрейман күренә.

Суворов болдорға сығып, үҙе ҡаршы алды.

Өфөлә 5 көн торғас, граф Саратовҡа йүнәлә.

Хөрмәтте күрһәттеләр, әлбиттә. Лайыҡ ине, хәтерендә ҡалды.

Ә башҡалар йәшәгәндә нисек ине әле? Кар ҙа онотолған. Губернатор Брант та, Александр Бибиков та, Панин да... Панин үлгәндә хатта бер генерал, бер кем йәлләмәй. Екатерина үҙе лә күҙ йәшен һөртмәй.

11

Пугачев:

— Кит, — тине Кинйәгә.

Эйе, китеү кәрәк. Ҡотҡарыу сараһын күрер, тиҙер, аҙаҡ.

Тик... Көсө күпме генә...Ә казактар...

Яйыҡтыҡылар Пугачевтың еңелеүен дә, был яҡҡа сығыуын да беләә. Фетнәсе Творогов, Чумаков хәбәр итте. Бик күп командалар ебәрелде. Генерал Мансуров корпусы, Яйыҡтың үҙендәге полковник Симонов командалар таратты.

Бигерәк тә Перфильев төркөмөн тотҡас, шуларҙан белешеп, далала бар тирәгә Пугачев булырҙай ергә ағылдылар. Көстәре күп.

Кинйәгә дуҫын ҡотҡарыу хаҡында уйлап ҡарарлыҡ та түгел.

Пугачевты алып киткәнде һиҙгәс тә уҡталып ҡарағайны, юҡ...

Их, Кинйәнең Акъялын алып киттеләр. Кешнәй-кешнәй китте. Кинйәгә Алпар атын бирҙе. Тумаҡ юҡһына, кешнәй, тик яуап юҡ Аҡъялдан.

Ҡамыштар араһына киттеләр. Көс наҡыҫ, отряды ҙур түгел. Оло Үҙәндән көньяҡҡараҡ тартылдылар. (Элек Һары Үҙән, Ҡара Үҙән дә тигәндәр.) Бында башҡорттар бар. Байтаҡ ҡына отряд туплап була.

Әстерхән татарҙары. Улар Ҡундрау, Йорт, Едисан, Буджак, Ямбулат кеүек төркөмдәргә бүленгән. Уларҙан да кеше йыйғанда?.. Әлегә улар хөкүмәт яҡлы шул.

Ләкин әлегә был тирәлә ҡалып булмай. Яйыҡ казактарынан, һалдаттарҙан командалар күп йөрөй. Әстерхан губернаторы ғәскәр сығарҙы.

[1] *Әле Октябрь революцияһы урамы, 57-се йорт.*

Кинйә уйлай. Далала дуҫтар барҙыр. Ул Перфильевтың карателдәр ҡулына эләгеүен белмәй, Иҙеркәйҙе лә көтә. Ләкин карателдәрҙән башҡа кемдәрҙеңдер килеп сығыуы ай-һай...

Халыҡ ҡурҡа. Хәбәр итеүҙәре бар. Алпар Кинйә өсөн борсола.

Кинйә менән Алпар кис усаҡ янында әңгәмәләште.

Шул ваҡыт йондоҙ атылды. Икеһе лә күрҙе, күҙ ҡарап оҙатты. Йондоҙ Урал тауҙарына табан сыйылды. Ҡайҙалыр төшөр. Алпарға үҙе лә шуның кеүек тойолдо. Ҡайҙалыр китер, ҡайҙа ятып ҡалыр...

— Һүнде бит, беҙ ҙә шулай...

Кинйә:

— Юҡ әле, янып-балҡып алырлыҡ дәрт бар. Көс тә, теләк тә. Ә һиндә?

— Уныһы бар ҙа, аҙ бит: эшләнмәгән күп эш ҡала.

— Уныһы һәр кемдән ҡала. Үлгәс тә өс көнлөк эш ҡала, тиҙәр. Эшләнгәне бармы? Бар! Башҡалар эшләмәгәнде эшләнек!

— Еңелдек бит!

— Шулай тиһеңме?.. Юҡ, беҙ еңдек... Ана, бар әле, анау тирәкте һелкетеп ҡара... Бер юлы булмай. Ә бер ваҡыт ауыр. Беҙ дер һелкеттек, уның тамырын ҡаҡшаттыҡ. Ай, бик ныҡ ҡаҡшаны ул. Беҙҙең халыҡ үҙ көсөнә ышанды. Әбей батша менән алышып була. Беҙ шуға ышандыҡ. Уның әрмеһе менән һуғышып була. Шуны белделәр. Әбей батшаның хөкүмәте лә шундай. Ай-һай, ныҡ. Ул ғәскәр, ул деүәрәндәре, ул янаралдары. Бер ыңғай ауҙарып булмай. Бына шуға ҡаршы көс барын да күрҙеләр. Бөтә халыҡ бер йоҙроҡ булып төйнәлә алыуын аңланылар. Ә беҙ уны ҡаҡшаттыҡ. Һа-ай, бик ныҡ ҡаҡшаттыҡ! Тағы һелкетергә кәрәк. Беҙ булмаһаҡ, башҡалар. Тәуарих бер быуын халыҡта ғына бөтмәй. Алда ла көн, алда ла йылдар бар. Ҡараһаҡал яуы булды. Унан һуң? Бөттөмө? Батырша күтәрелеше! Шунан, бына бит, беҙ ҡалҡындыҡ. Шулай инде ул тарих арбаһы!

Алпар аңланы. Үлһә лә, саф выждан менән үлергә әҙер һымаҡ. Шулай ҙа...

— Әле һуң?.. Көрсөкмө?

— Юҡ, юҡ, әле абындыҡ ҡына. Тегендә — Салауат. Ә Һеләүһен? Бар бит. Дуҫтар бар.

Уларҙың хәле нисектер... Салауаттан да, Һеләүһендән дә шыш-быш юҡ әле. Бик тиҙ кителде, алыҫ кителде. Һис кисекмәҫтән хәбәрләшеү кәрәк. Үҙендән хәбәр бир, ә унан — көтөү.

Бер-береһен йыуаталар. Унан тағы уйға ҡалып, иҫәп һалалар, тағы бер-береһен йөпләйҙәр.

— Юлдың дөрөҫөн һайларға өйрәндек. Беҙ халыҡты уҡмашырға, ирек яуларға өйрәттек. Үҙебеҙ өйрәндек. Быны беҙгә юғалтырға ярамай. Юҡ, юҡ!

Яйыҡтар төңөлһә лә, ҡалмыҡтар, ҡыр-ҡаҙаҡтар бар бит әле. Батырша яуында ла, һөйләшә торғас, дуҫлыҡ-тамырлыҡ булды.Әле һуң? Нуралы хан менән килешеп булмаһа ни... Дусалы Солтан да аңламаҫ. Ә ҡаҙаҡ шаруаһы, жатаҡтар...

Уларына Алпарҙың өмөтө юҡ, әлбиттә.

— Сиреү бөттө бит, — ти. Күнеккән ҡара яу кеүек ябырылып айҡашҡан элекке олуғ ғәскәргә ишаралай.

— Баш һау бит, — ти Кинйә. — Ул сағында Йәмәлкә батша ла юҡтан ойошто. Беҙ утыҙ мең инек... Бер ваҡыт өс меңгә ҡалдыҡ. Унан — өс йөҙгә... Әле бына һинең менән икәү генә. Иртәгә егерме булырбыҙ. Унан ике йөҙ, ике мең, егерме мең. Шулай ул. Һәр нәмә шулай. Ай ҙа бер кәмеүгә бара, бер артыуға.

Алпар ҙа белә уныһын. Елдән дауыл ҡуба, дауыл да тынып тора. Бер бөртөк бойҙай сәсһәң, ун булыр, йөҙ булыр.

Усаҡ һүнде. Уларҙың яу ҡомары кеүек. Күҙҙәр ҙә йомола. Башҡалар ҙа ятҡан. Һаҡсылар ғына уяу.

Кинйә лә, Алпар ҙа эйәргә баш төрттө. Аҫта эйәр сергеһе.

Ләкин Кинйә йоҡламай. Уйлана. Шулай уҡ ышаныс бөттөмө?

Алпар ҙа йоҡламай икән. Тын алышынан билдәле. Ул да уйлана.

— Тегеләр нисек уйлай? — Ҡамыштар артындағылар.

— Минең кеүек.

— Ә һин нисек уйлайһың һуң?

Бүтәнсә уйлай ине... Үлһәк тә ярай. Йәшәүҙең ҡыҙығы булманы, булмаҫ та, ләкин улай әйтмәне.

— Һинең кеүек.

— Ярай...

Кинйә уйлай. “Беҙ юҡҡа ғына яуға сыҡманыҡ”.

— Беҙ күп нәмәгә өйрәндек. Бергә күтәрелергә. Яҡшыны ямандан айырырға. Ә халыҡ Ҡыҙрастар, Балтастарҙан айырылды.

— Айырылдыҡ та үҙ-ара беректек. Көллө халайыҡтан. Хәҙер башҡорт — урыҫҡа, татар — ҡалмыҡҡа ҡорал күтәрәме?

— Юҡ.

— Әй, хәҙер, урыҫ атаң булһын, билеңдә балтаң булһын, тиҙәрме?

— Кемдәр?

— Ана, беҙҙең яндағылар...

— Юҡ.

— Шулай булғас, беҙҙең был һабаҡты юғалтырға хаҡыбыҙ юҡ. Бына күрерһең, яу бөткәс, әбей батша тынысланып ятмаҫ, яңынан крепостарҙы нығытыр, юлдар һалыр, пушкаларҙың ҙурҙарын ҡойҙорор... Ул ғынамы? Түгел. Бөтә баярҙар уның тирәһенә тупланыр. Рустар ғына түгел. Улар бит еңелеп, күпме байлыҡтарын юғалттылар. Үҙҙәре батшанан шуны һораясаҡтар. Бына Ҡыҙрастар, Ҡолойҙар... Улар тирәһенә йыйыласаҡ. Әле улар бергә ине. Беҙ бөтә башҡорт бергә сыҡтыҡ. Ә хәҙер Ҡыҙрастар беҙҙең яҡта булмаясаҡ. Бына беҙ ҙә йоҡлап ятырға тейеш түгелбеҙ. Байҙар берләшкәс, беҙ ҙә русы, татары, башҡорто менән берләшергә тейешбеҙ. Күрҙек бит, бергә еңелерәк...

Эх, эш күп. Улар офицерҙарын өйрәтергә, уҡытырға тотонасаҡ. Беҙгә лә кәрәк. Был болаһы халыҡ онотмаһын. Хатаны аңлаһын, булғанын һаҡлаһын. Халыҡты уҡытырға, һөйләргә кәрәк. Был эштә йыр ҙа, әкиәт тә, мәҙрәсә лә ҙур эш эшләй...

Ә һин, беҙ бөттөк, тиһең. Юҡ, көрәш туҡталманы, бара ул, яңынан башланыҡ. Бөгөндән үк бара. Ишетмәнеңме, нисек ҡарап ҡалдылар армайға? Нисек ҡаранылар башҡортҡа? Халыҡ йөрәгендә ут һүнмәне, ул яна башланы, дөрләй, ләкин әле ул күмер баҙындағы кеүек аҫта, йәшеренде генә... Ундай тыу аумаһын. Юғарыраҡ күтәрергә тейешбеҙ. Бер төптән булыу – изге эш. Бәлки, беҙ булмабыҙ. Ә байраҡ ҡалһын.

— Ныҡ тороп ул тыу.

Алпарҙың йоҡоһо ҡасҡайны.

— Һин ят әле.

— Ятып ни мәғәнә.

Алпар күккә баҡты. Йондоҙҙар.

Ул йондоҙҙарға ҡарап йөрөргә күнеккән. Әле һуң ҡайһы йондоҙ юл күрһәтер.

Юҡ, әле улар юл күрһәтмәҫ. Әлеге йондоҙ күкрәктә балҡый, бына Кинйә батыр кәңәшенә ҡарап барырбыҙ. Ул эйәртер.

Ә Кинйә уйлай. Иҫәп һала. Әле Яйыҡ казактарына ышаныс юҡ. Башҡорт ерҙәре алыҫ. Ҡыр-ҡаҙаҡтарға киткәндә? Нуралы хан... Һә-әй, юҡ, солтандары ла. Сәйдалы ташланы бит. Урта жузда ла булманы... Унда — Байбаҡты ырыуы старшинаһы Срым батыр, Кәрим дуҫы... Шуларға барырға. Ә унан ҡыр-ҡаҙаҡтар менән Урал аръяғына – Иҙелбаш, Әүжән яғына. Унда Салауат, Баҙарғол... Бер-

беренә бик кәрәк саҡ... Бөтәһе унда – еңеү ҙә, еңелеү ҙә.

*Бары ла үткән, ҡалмаған,*
*Батырын тапҡан ил ҡалған,*
*Батырҙар сапҡан ил ҡалған.*

Кинйә ойоған күҙен асты. Алпар юҡ. “Был киттеме әллә ташлап? Ә тегеләре?”

Китеүҙәре бар, риза булмаһалар, әйҙә...

Алпар килде. Ҡасмаған.

— Тегеләр киткәнме?

— Бөтәһе бында.Әйткән ереңә китербеҙ.

Ҡуҙғалалар. Алпар усаҡты һүндерергә итә. Кинйә:

— Ил күсә тип, усаҡты һүндермә. Башҡа яугирҙар килер.

Китергә! Тәүҙә разведка яһарға Яйыҡҡа табан.

Икенсе көндө бер команда килә. Көс етә.

Боҫҡон ҡороп ҡорал, әсирҙәр алырға. Командирҙы алмаштырыу... Пугачты бирмәҫтәр. Перфильевты, Садыҡты, тағы кем бар әле?

Ҡыйраталар. Ҡорал, аттар ҡулға төшә.

Тотоп алалар бер капитанды, ике драгунды. Бәйләп һалалар.

Яйыҡҡа һыпырталар.

Ҡыр-ҡаҙаҡ тирмәләре. Шул яҡҡа сыҡҡас, капитанды алмаштырҙылар. Перфильев киткән, Садыҡ юҡ... Бына, берәү... Бәхтиәр юғалған, ти.

— Берәү өс кешегә булһа ла батыр...

— Кире ҡайтараһыңмы?

Оҙон ҡолаҡтар. Улар хәтәр ҙә, файҙалы ла. Срым батыр исемен әйтә, Кәрим көтөүсене белешә.

— Беҙ Кәрим адамдары. Еткеҙәмеҙ һеҙләрҙе.

Еткерҙеләр. Кәрим белеп тора, имеш.

— Оҙон ҡолаҡтарың яҡшы хәбәр килтергәндәр.

Кәрим ирәймәне:

— Был ялған донъяла һәммәгеҙ оҙон ҡолаҡ. Изге эш ул. Бына көрәштек, ҡан ҡойҙоҡ, берәм-һәрәм донъянан китәбеҙ. Барсы да үҙ эштәрен башҡаларға тапшырып китә был ялғандан.

Кинйә иғтибарлы.

– Оҙон ҡолаҡ та шулай шул. Хәбәрҙе тапшыра, ваҡытынса илтһә — бурысы үтәлә, икенселәр алып китә. Эйе, көрәштегеҙ. Юлда атығыҙ һөрлөкмәне. Ауылдар янды, йәйләүҙәр тапалды. Балалар етем ҡалды. Әммә бөтәһе үҫә, йәш үлән сыға тора бит. Был әлемдә[1] лә бер адам ғына эште бөтөрмәй, икенселәр бар, — ул бармаҡтары быуынына күрһәтә.

Ә Кинйә риза түгел.

– Юҡ әле, үҙебеҙ көрәште алып китәбеҙ.

– Ай, мең йәшә, Кинже батыр... Срым батыр бар. Шунда барыш кәрәк.

Срым батырға баралар. Унда Туманов, Бәхтиәр...

Хәбәр ебәрәләр Салауатҡа, Һеләүһенгә, Ҡәнзәфәргә.

Ә оҙон ҡолаҡ Кинйәгә бер һөйөнсө хәбәр еткерҙе.

12

Пугачевтың тотолоу хәбәре – императрица Екатеринаға шатлыҡ. Бөтә һарайы тантана итә. Еңдек, злодей бөттө, тиҙәр.

Указдар яҙыла, манифестар таратыла. Карателдәр бөтә илде ҡыҙыра, фетнәсе яугирҙарҙы тоталар, язалар бирелә.

---

[1] *Әлем (ҡаҙаҡса) – ғаләм.*

Ауыр хәбәр Өфө, Екатеринбург яҡтарына ла етте. Ғәскәр башлыҡтары ҡөҙрәтләнә. Бына, хәҙер бөтәһен баҫып була.

Октябрь башында баш командалаусы П. И. Панин башҡорттар өҫтөнә тағы гусар полкын — өстө, пикинер полктарын — икене, йәнә казактарҙы ебәрергә булды.

Пикеттар көсәйтелә. Яугирҙарҙы тоталар. Төрлө урында. Усала — Папав. Ул рапорт яҙа: "Танып үрендә полковник Батырҡай Иткинин. Унда старшиналар күп..."

...Ә Салауат ныҡ әлегә.

Ул Пугачевтың Ҡазанда ҡыйралыуын да белә. Ҡайтыусылар һөйләне. Унан һуңғы хәбәрҙәре: "Волгала ҡыйралған. Тотоп оҙатҡандар". Кинйә лә юҡ.

*Тәҡдиремдә әллә яҙған микән*
*Илем өсөн һуғышып үлергә...*

Бик бошондо ул. Тик ҡоралы ҡулдан бушаманы. Халыҡ бар.

Волганан ҡайтҡандар: урыҫ крәҫтиәндәре, башҡорттар, татарҙар, шунда булған сыуаштар, мариҙар ҙа үҙ күҙҙәре менән күргәндәр ҡыйралышты, ә барыбер, ул киләсәк бында, тип һөйләнәләр. Ҡайттылар ҙа отрядтарға уҡмаштылар, туҡтаманылар. Ә хәҙер, тотоп биргән, тип һөйләһәләр?..

— Ә бүтәнде бит ул... Беләбеҙ, үҙҙәренең бер йүнһеҙен... Ә батша-надежда иҫән, — тиҙәр.

Ә бында һуң... Салауат (атаһы менән), тағы кемдер килгән: Әбйәлил Ырыҫҡолов, Һары Абдуллин Исәттән. Кәңәш ҡоро ойошторалар.

Салауат:

— Йә, иҫәп һалайыҡ. Яу көсөн барлайыҡ.

Юлай:

— Бында көс апаруҡ. Унда фельдмаршал бар ҙаһа, — "Бында һин" тип кенә әйтмәй.

Баҙарғол Юнаев менән Юламан Ҡушаев баш эйерлекме? Юҡ! Атаһы Юлай улар менән хәбәрләшеп тора. Уларға Һары Абдуллин ҡушылған. Ҡыштымда — ҡаты алыш.

Бында Батырҡай, Илсеғол айҡаша. Салауат барып күрҙе: Әбйәлил Ырыҫҡолов, йәнә Ғәйнә олоҫонда — старшина Көсөкбай Абдуллин[1]. Көстө барланылар.

Ҡаранай Моратов та көрәшә.

— Бына бит, юғиһә, ярлыҡаш эстәйек (ғәфү үтенеү) тип баш һалырға самалайҙар.

Салауат:

— Ғәйебе бар кешеләр... илтһендәр. Минең ғәйебем юҡ.

— Эйе, армай ҡулына ашығырға ни әле.

Шулай ҙа күңелһеҙ хәбәрҙәр күп алына. Бер яҡтан үҙҙәре — ана, көньяҡта Ҡасҡын Һамаров баш һалған. Һеләүһенде ҡыҫтай, ти, дошман.

Ә Ҡыҙрас Муллаҡай, Ибраһим Мерәҫов... Юлайға ла хат ылыҡтырҙы. Әлеге шул ярлыҡаш эстәйек... "Һуғышта ла солох". Шуны Юлай әле әйтеп ысҡындырҙы. Бәлки, солох...

Рылеев командалар ебәреп ҡараны, булдыра алманы.

— Юҡ!

Быны бөтәһенән элек баш күтәреүселәр эшен тикшереүсе Йәшерен комиссия башлығы — иң дәү армай, генерал-аншеф, граф Павел Потемкин аңланы. Ул тәүҙә башҡорт халҡына императрица исеменән өндәмә яҙҙы.

Өгөтләй, ҡурҡыта, үлем менән янай һәм өгөтләй. Яза бирәләр.

[1] *Көсөкбай Абдуллин — Уса даруғаһы Ғәйнә олоҫо старшинаһы, б. к.*

Ана, һеҙҙе лә шул көн көтә, ҡатын-ҡыҙҙарығыҙ ҡоллоҡҡа таратыла. Ерҙәрегеҙ алына.

Ул Салауатҡа үҙе хат яҙып, үҙ теләге менән баш һалырға тәҡдим итте.

**29/X — 74 й**. “Хөкүмәткә баш бирмәүҙән туҡтап, үҙ ғәйебеңде үҙең таны һәм беҙгә килеп баш һал. Шулай эшләһәң, ғәфү итәсәкбеҙ. Әгәр был өндәмәнән һуң да баш тартһаң, бер ниндәй ҙә аяу көтмә”.

Ә бит генерал Потемкин яуыҙдың яуызы.

Ошонда, Йәлдәктә, тапшырҙылар өндәмәне. Ләкин Салауат ҡорал ташлап, уға баш һалыу түгел, яуап та бирмәне.

Төрлө халыҡ яугирҙары менән бер булып һуғышалар.

Орандары:

— Беҙгә — ирек!

— Түрәләргә – яза!

“Үҙ илебеҙҙә бөркөт кеүек осабыҙ. Батша шулай тип әйтә торғайны”. Әле Салауат улай тимәй, үҙе әйтә.

## Һуйыл менән һелтәнеп...

— Янды ҡымшанмаçлыҡ итеп аймап тотто.

— Бойҙа аттан йығылып төштөләр, яраланып, тороп ҡалмаç өсөн ат ялына йәбеште. Үҙенеке үтеп китһә, иптәштәре атына менде.

— Һуйыл менән һелтәнеп һуғышыу. Уңлы-һуллы. Үтә, унан урап килә.

Салауатҡа хәбәрҙәр килә: Баҙарғол хәрәкәт итә.

**6/XI.** Исәт провинцияһы воеводаһы Лазарев[1] генерал-аншеф Панинға:

“Баҙарғол Юнаев, Юламан Ҡушаев, Һары Абдуллин — һаман да баш эймәйҙәр...”

13

Буранбикә борсола ла борсола. Йәй көндәре Һеләүһен ҡайтҡылап йөрөй ине. Аҙаҡ Өфө яғына китте. Хәбәрҙәре һирәк килә хәҙер.

Кама буйынан ҡайтҡас, бер ҡайтып китте лә шунан бирле бик һаҡ йөрөй.

Буранбикә, эҙләп китәм, ти. Кейенеп алған. Ҡорал-яраҡтарын аçҡан. Янында ырыуҙаш кешеләре бар.

Ҡәйнәһе ҡойолоп төштө: улының хәлен белмәү үҙенә лә ауыр, тик киленене юғалмаһын, ҡурҡыныс, тип өгөтләй. Быны кире күндереп булмаясағын да белә.

Күҙҙәренә ҡараны. Төпһөҙ һыу кеүек ҡара күҙҙәр.

— Ай, бала, ни хәл ебәрәйем? — ти.

— Бер эҙләп йөрөнөм. Тағы эҙләп ҡайтам, — килене тәүәккәл. Иркәге ҡайтмай йөрөгәндә ҡайһы әйелдең түҙеме етер? – Түҙер хәлдәрем ҡалманы. Эҙләп алып ҡайтайым тинем.

— Ә мин нишләрмен?

Буранбикә уны ҡосаҡлап иланы. Һирәк илай ул.

— Юҡ, ҡәйнәм, китмәм... Яҡын-тирәлә генә йөрөштөрөп киләбеҙ.

Ынйыҡ көн. Тау суҡтарын томан һарыған.

Бағра аръяғына сыҡтылар. Нөгөш өçтөндә лә томан шыйыға. Кешеләр күренде. Таныш түгелдәр, ундайҙы “ҡырғы” тиҙәр.

Боролоп киттеләр. Былар йә Яманһары яманы Кейек, йә тағы шундай, аҙмы ни шуға оҡшаш. Беренсе ҡат түгел, икенсе күреүе. Тиктәçкә түгел, уға ышанһаң, урлап та алып китер. Егеттәр бар. Тегенең күптер. Орош булыр.

Буранбикә әйләнеп китте. Юлда үлән тапалған. Ултырғандар, аттары бәйләп ҡуйылған урын саңдау кеүек. Әйтәгүр, төнөн һағалағандар.

---

[1] *Лазарев Иван Гаврилович — подполковник, Исәт воеводаһы.*

Ҡайта, әйтә:

— Һеләүһенде һағалайҙар.

— Уны ла, үҙенде лә харап итерҙәр. Йөрөмә.

Йөрөмәҫ тә бит... Буранбикә һығымта яһай:

— Батырҙы ҡамауҙан ниндәй дошман туҡталһын?

Йәй үтте. Һеләүһен ҡайтты. Ул хәҙер үтә һаҡ. Төн ҡунырға ла ҡалмай хатта.

Көҙ етте. Әбейҙәр сыуағы. Һыуыҡ ине, йылытты. Торналар торҡолдаша. Шуларҙы хоҙай хәбәрсеһе тиҙәр. Яҙғы көн бәпестәргә тәпәй алып килә, киткәндә ҡалдырып китә, имеш.

Бындағы хәлдәрҙе һөйләйҙәр.

Айым таныштыра:

— Атайыңдың өс дуҫы бар ине, — ти. — Береһе — Яманһары, икенсеһе — Ҡасҡын, өсөнсөһө — Әлибай.

—Ҡушаға тип йөрөгән Әлибай йортауаймы?

— Эйе. Бына шуның береһе яман булды. Улы Кейек был тирәлә сыуала. Бер-бер хәл ҡылыр.

— Әлибай ышаныслымы?

— Ул ни, ҡушаға бит. Ғүмер буйы бер табаҡтан ашап йөрөлдө.

— Ә Ҡасҡын атаман?

— Ул күрше.

— Атайымдың дуҫтары бар. Дошмандары ла күп.

Ҡасҡын быйыл йәй ҙә ныҡ йөрөнө. Тик һуңғы ваҡыттарҙа ғына Әлибай һүрелде. Кешеләрҙе һүрелтә башланы. Яңыраҡ үҙе үк:

— Камаға китәбеҙме, юҡмы? — Уның шулай ике төрлө һорау биргәне бар.

— Беҙгә бында эш муйындан әле.

Унан тағы бер осрашыу. Үҙе үк:

— Таралабыҙмы, юҡмы? — тип ҡыҙырыҡлай.

Атаһы, йорт-ерҙе һаҡла, тип, старшина итеп ҡалдырып, Көҫәпәйгә киҫәткәйне. Ул-был булманы, әле бына старшиналыҡты Тимашев ҡулынан алған. Уның хеҙмәтсеһе хәҙер... Ә бына Нөгөш буйына һалҡын ҡарай. Бындағыларға ҡарата “Кинйә көсөктәре” тип тә ысҡындырған. “Бағый Кинйә, фетнәсе Һеләүһен,” — тиерҙәр.

— Күсенеп китергә кәрәк, — ти Һеләүһен.

— Ҡайҙа?

— Яҡшы ергә күсеүҙән кем баш тартһын? Ә ҡайҙа һуң ул? — Буранбикә уйсан, һораулы ҡарашын төбәй батырға.

Буранбикә үҙ яғына — Ҡарағужаға саҡырыр аҙаҡ. Әммә унда атаһы уҫал Ҡарағужа старшина бар, бармаҫтар.

Кеше бәләгә ҡалһа, борон-борондан әсә яғы ҡәрҙәштәре ярҙам итә. Буранбикәнең балаларын ғына алырҙар... Ә Айымдың ҡәрҙәштәре тейеш. Уларға... Һеләүһен ҡаршы. Айым үҙенең түркененә аяҡ баҫып, һыя алмай. Ни булһа ла, Аҫылбикә түркененә һыйыныу хәйерле. Ғүмер буйы олатайым Арыҫландың, атайымдың дошмандары — юҡ. Кинйәнең әсәһе Аҫылбикә ҡәрҙәштәре ышаныслы.

Әле быйыл ғына уның ҡустыһы Аҫылғужа бабай саҡыра. Яу ваҡыты, ҡурҡыныс. Беҙгә күсеп тороғоҙ, тине. Көйөргәҙе буйындағы йәйләүҙәр тыныс, тип бер нисә ҡат әйтте. Шунда булғанда, бер тау үңере янында йәйләүем, тип күрһәтте.

— Һе, — тине Һеләүһен. Рәхмәт әйтте.

(Күсерҙәр бер ваҡыт. Тик ул ерҙәрҙә тир түгеү, еләгән йыйыу Һеләүһенгә яҙмаҫ. Уның ере ситтәрәк, Ырымбур яғында.)

Юҡ, Айым да ыҡҡа килмәй, китеү яғында түгел.

— Мин... бер ҡайҙа ла китмәйем. Ер-һыу юғала, донъя тарала, нигеҙ бөтә. Атайығыҙ ҡайтҡансы һаҡлайым. Минең ҡәйнәм, Аҫылбикә мәрхүмәне әйтәм, нигеҙҙе һаҡлап ҡалды. Үлде. Китмәне.

Һеләүһен хәтерләй. Бик бәләкәс ине әле. Ҡор яланына күсеп киттеләр. Әле Батша яланы тиҙәр. Шунда китергәме?.. Әсәһе тағы, ҡалам, тиер.

— Өләсәй ҡалып та үлгән бит. — Һеләүһен быны мәғәнә һалып белдерҙе.

— Мин үлермен. Юҡ, беҙ йәшәрбеҙ. Атайың ҡәйнешенә ҡушып китте. Беҙҙе һаҡларға. Йортауай Көҫәпәй бер туған ҡустым да баһа.

— Ул бында тормаҫ.

Айым, әйтергәме-юҡмы, тип торҙо.

— Бер аяғы бында унының.

— Күсеп килергә итәме?

— Юҡ та... Ул йәш кәләш әйттерҙе... Шуныһы.

Эйе, килде... Өлкән ҡатындың улдары тынғы бирмәҫ. Берәһе үрелергә итә. Бында ҡапылға тороп торһон, тип Ҡаран, Танып шишмәлектәре, ҡыуаҡтар буйына йәйләү ҡорорға рөхсәт һораны. Һин сит итмәҫһең, ти. Беҙҙе лә ҡарашам, тине.

Эйе, килде лә бер йәйләү ҡорҙо. Был хаҡта Һеләүһенгә әйтмәгәйне, әле әсәһе иҫләне.

Үҙе лә ул Танып шишмәлегенә иғтибар итмәгән. Төтөн сыға, малдар йөрөй шул.

— Һиңә, шылышып ултыр, тинеме?

— Бәй, ултырырға урын етер ҙә ул.

— Әле етер ҙә ул. Бына ошо урын да етә... — Ул үҙе ултырған бүкәнгә күрһәтте. — Ата-баба ере, ер бына Һәләүеккә, бына быларға кәрәк.

Эргәһендә үҙенең ике улы, үҫеп килгән ҡустыһы. Ул аңланы.

— Юҡ, өләсәй, ерҙе һаҡлайбыҙ. Китһен!

Айым да аңланы.

— Бик ашыға икән... Яҙ көнө Ташлылағы минең ерҙәрҙе заводҡа һатҡан, хәҙер бында үреләә...

Бик ауыр булды был Һеләүһенгә... Тик нимә тиһен әсәһенә... Аңлаймы ни ул унының. Киреһенсә, тыныслыҡ бөтөр.

Һеләүһенде эҙләргә Өфө провинцияһы канцелярияһынан кешеләр ебәрҙеләр. Таба алмайҙар.

Бына шулай торалар ине әле. Һеләүһен ҡайтҡылай. Ҡайҙалыр була. Бик һаҡ.

Бағра артында төтөн сыға, тиҙәр. Аттар кешнәй, ти. Булһа булыр. Томан һарығанда ут яғалар. Унда баҙ өй ҡаҙығандар, тип һөйләйҙәр. Һис кем бармай.

Айыт, тиҙәр. Ҡараҡ, тимәйҙәр. Айыт атаман, тиҙәр. Шунан һаҡлайҙар. Һеләүһен дә шунда, тиме.

Айым:

— Күренеп тора. Ус төбөндәге кеүек күренеп тора бит.

Бер көндө бөтә ауылды карателдәр баҫты. Һеләүһен өйҙә юҡ. Бағра тауынан төшмәнеләр. Айым Һәләүекте, Буранбикәне йәшерҙе. Юғиһә, берәһе киленсәк булып, берәһе малай ғына башы менән һөңгөгә йәбештеләр. Улай ғына эш ҡырырһың. Шау-шыу. Улай-былай үлтермәнеләр. Үҙе лә, Аҫылбикә ҡәйнәһе кеүек, аҫҡа төшмәне. Малды алып киттеләр. Өйҙәр туҙҙырылды. Икәүһе янды. Таралмай һүнде.

Шау-шыу... Ҡысҡырыш. Илаш. Уҡмашып торалар.

Һеләүһен ҡайтһа... Шулай инде. Бер өйгә йыйылғандар. Ҡайғы... Буранбикә менән әсәһе буҙлашып ултыра. Уларҙы тынысландырыу анһат түгел.

— Ҡаным көйөп бара, берәй йотом һыуын килтерсе әле.

— Тамам сарсағанһың, мә.

Бөтәһе тынысланды. Ҡайҙа ул элекке кеүек ҡымыҙ бешеп, ҡаҙылар турап көтөү.

Янғыны, ҡыйралышы кисә булған. Ә бөгөн... Бөгөн Көсәпәй әрнеткән.

— Ниңә яҡламаның? — тине.

— Бағый йортон яҡлашырға минең башым ике түгел, — тип яуаплаған мөртәт.

— Ҡанһыҙ, — тигән уға Буранбикә.– Ҡарғыштан ҡурҡмайһыңмы?

Айым әрләй башлаған туғанын, ә Көсәпәй: “Китегеҙ бынан, — тип ҡыуа икән. – Был ерҙәрҙе таҙартырбыҙ!” — тип тә ҡысҡырған.

Һеләүһен тынысландырҙы. Башҡа сара юҡ. Ерҙән ҡыуырҙар. Малды алырҙар. Унынһы бар әле. Тау араһында. Тик бер ҡайҙа ла тынғы бирмәҫтәр. Үҙенең көсө бик аҙ. Айыт янында биш-алты ғына кеше. Әбеш юҡ, Тайсура ла юҡ. Төмтөк тә, Бағай, Мырым. Мыҡты егеттәр. Ҡасҡын баш һалған. Ҡаранай баш һалған. Салауат алыҫ. Үҙенең дә хәле шәптән түгелдер.

Үткән ҡайтҡанда әсәһе һанай ине Кинйәнең дуҫтарын... Ышана, йәнәһе... Бер туғаны шулай рәнйеткәнде. Улы ғына бар.

Айым:

— И, улым... үлемһеҙ тыуған булһам, ярты ғүмерҙе атайыма бирермен, тигәйнең, тырыштың. Ярҙам... Ярты ғүмерме, әллә, Хоҙай ғына белә. Әҙәм балаһы үлемһеҙ була алмай, һәр кемгә маңлайға яҙған саҡлы ғүмер бирелә. Хоҙай, бирермен, үҙең сараңды күр, тигән.

Сара юҡ.Әле Һеләүһен дала юлдарынан Ырымбур яғына барып ҡайтты, унда баш тығып булмай. Ҡарғалыға, Яйыҡҡа күренергә ярамай. Таныштарына инде. Атаһы хаҡында хәбәр юҡмы, тип белеште.

Уға ярҙам кәрәктер, ул ни тиер. Ер йөҙө иркен, бындай ваҡытта аҙаҡҡы көскә тиклем алышам тигәндә, ҡайҙа ла алышырға мөмкин. Урман араларына ла инәһең, алыҫ яҡтарға ла боҫаһың.

Тик атаһын күреүсе юҡ. Бүгәсәүҙе тотоп алып киткәндәр; Кинйә атаман йәшеренгән. Ҡыр-ҡаҙаҡтар яҡтарына, моғайын.

Һеләүһен үҙе хаҡында әйтеп ҡалдырҙы: бәлки, атаһы үҙе эҙләтер, хәбәр көтөр. Бигерәк тә әсәһе Аҫылбикәнең ҡәрҙәштәренә хәбәр ебәреүе бар.

Ә ҡайтып керһә...

Ул ҡайтып тамаҡ туйҙырып та өлгөрмәне — шашып-көлөп Көсәпәй килеп керҙе. Ҡарап-кинәнеп тора. Һеләүһен:

— Көсәпәй быуаймы? — тип һорай.

— Мин... Мин хәҙер.

— Һаранһың, — тине Айым. Әрләп ташларға, битенә барып йәбешергә әҙер ине. Тик улай ярамауын улы күреп тора. Көс унда. Уның яғында караттар, губернатор, батшабикә үҙе... Шулай ҙа ул ҡалтырап төшмәне, ҡалҡынды. Ҡаршыһына барҙы, күҙҙәренә ҡарап торҙо. Көсәпәй бер ҡалтыранып алды. Башын ситкә борорға итә. Һеләүһен уның ҡаршыһынараҡ күсте. Теге сығып китергә итте, Һеләүһен беләгенән тотто.

— Туҡта. Әле генә мин тип ирәйҙең... Хәҙер... Ҡурҡма. Һеләүһен мулла ла ҡурҡа торған зат түгел... Бына ҡылысҡа-ҡылыс килә алам. Әммә һин иманыңды тапама. Йәберләйһе булма, миңә ҡарата ла яуыз уйыңды ташла. Мин яңғыҙ түгел. Артымда күрмәлекһеҙ нукерҙарым бар. Һиңә ни, бер уҡ та етер. Шуны бел. Хоҙай ләғнәте кеүек һине һағалар!

Көсәпәй белмәһә лә белде.

— Мин ни... Һеҙҙе йәлләп. Ауылды ҡурғыным.

Айым:

— Һин еҙнәңдән ҡурҡып һаҡлаған булдың. Хәҙер алыҫ тиһеңдер. Ҡайтыр бит.

Көсәпәй:

— Ҡайтты, ти.
— Яман һүҙеңде ауыҙыңдан ел алһын. Ҡара эслеһең.
— Мин йәлләп әйтәм. Һеләүһен мулла баш һалһын.
— Эйе, һеҙ ундай эшкә оҫта. Ҡараһаҡал яуынан һуң атайың Алдарбай батыр менән Һәйетбай старшинаны Һамарға илткән.
Ҡаты әйтте. Атайың тигәне – Аптыраҡ. Үҙенең дә әсәһенең атаһы – Аптыраҡ. Әйтмәй булманы шул.
Бының өсөн әсәһе лә йәберһенмәне.
Көсәпәй:
— Илткәндәр инде.
— Эйе, шунда аҫҡандар... Хәҙер миңә әйтәһеңме? Минең ҡулға – һулаҡта, аяҡҡа бығау һалырға итәһеңме? Йә.
— Юҡ, һиңә...
— Миңә еңелергәме? Йә баструк, йә һөргөн, тиһеңме?
— Мин... мин.
— Мин ул һабаҡты беләм. Башыма тай типмәгән. Һаҡлай белермен. Үҙеңде уйла. Мин әйтеремде әйттем.
Көсәпәй китте. Һеләүһен өйҙә ҡалды. Хәҙер кәрәкмәҫ тип, олатаһының ҡамыш көплә һөңгөһөн, көмөш туғынлы түңәрәк ҡалҡанды ҡуйҙы. Ҡылысы, пистолы ғына янында. Быуайыны ҡурҡыр, кеше бәләһе миңә төшәр, тип хатта һаҡлашты.
Әсәһенә, ҡатынына әйтте:
— Бынан китегеҙ. Бынау малайҙар, Һәләүек — улар бит ер вариҫтары. Уларҙы тереләй ашарҙар бында.
Ошондай ауыр көндә ярҙам ҡулы һуҙырға тип Әлибай килде. Айым яңыраҡ ҡына, атайыңдың ышаныслы дуҫы, тип һөйләп торҙо. Ә төҫөнә ҡарау менән аңланы, етмәһә, ҙур ғына ҡор менән килгән.
“Йә инде, бер ҡалаҡтан ризыҡ ейгән дуҫтар” — Айым, һынаған төҫлө, Һеләүһенгә ҡараны. Дуҫты – йөҙөн, дошманды күҙен ҡарап белеп була.
Ә бит ошо көндәрҙә Әлибай барҙы, Панинға саҡлы барҙы. Баш һалды, йәнәһе. Бында килер алдынан Ҡазанға барып баш һалғайны. Ярлыҡарҙармы, юҡмы? Ҡайтты. Икенсе тапҡырға Панин саҡыртты. Панин белә. Әлибай ҙа йәшерә алмай.
Панин:
— Һин унда ниндәй чинда булдың, Пугачевта, тимен?
— Нуғай даруғаһы атаманы.
— Ә элек?
— Нуғай даруғаһы баш старшинаһы.
— Барыбер икән. Ундағы эшең бөтмәгән. Үҙ даруғаңдағы яуыҙдарҙы тотоп килтер. Иң ҙурҙарын. Шунда һин тағы элеккесә эшләрһең. Баш старшина булып.
Кемдәрҙе тоторға икәнен Әлибайҙың үҙенән әйттерҙе: Кинйәне, Салауатты, тағы... Ете яугир атаман — Кинйә Арыҫлановтың улы Һеләүһенде, йәнә бер улы Сөләймәнде.
— Икеһе бер ул! Бер исеме — халыҡса, икенсеһе — китапса Сөләймән. Икеһен дә йөрөтә. Ә бына Ҡотлогилде Абдрахманов...
— Уны килтерҙеләр инде.
Әлибай ғазраилдың уң ҡулы булып ең осонан сығарылды, осло тырнаҡтары тырпайҙы... Элекке дуҫтарының үңәсенә йәбешер өсөн.
Ғазраилдың һул ҡулы ла бар шул.
Ә бит ошондай уҡ “эш”те Ҡаранай Моратовҡа ла ҡуштылар. Шул уҡ кешеләрҙе тоторға ул да вәғәҙә итте. Шунһыҙ иреккә сығып булмай. Тик уның күҙҙәрендә ышаныс күрмәнеләр. Сөнки ул ысын күңелдән вәғәҙә бирмәй ине.
**20/XI.** Ҡаранайҙы Ҡазанға килтерҙеләр. Уны ҡурҡыттылар: язаланырһың, ә Кинйәне, Салауатты килтерһәң — ҡотолаһың.

Уны төрмәгә ябып ҡуйҙылар. Шунда тоттолар (8/XII тиклем), унан Мәскәүгә оҙатылды.

Әлибай килде. Хәл һорашҡан була. Күрмәйме ни үҙе? Кинйә хаҡында һораша.

– Иҫән микән?..

Айым:

— Иҫән ул. Нишләһен, ти.

— Хәбәре бармы?

Айым:

— Ниңә аңдыйһың? Һин, ҡушаға, ти инең, яуҙаш булдың.

Әлибай:

— Булаһың инде. Алдырыр көн — яҙҙырыр.

Айым:

— Әле ҡайҙа ул? Хәбәре булырға тейеш.

Әлибай:

— Ҡайҙан беләйем уны? Кинйә тыңламаны. Халыҡты ҡотортто. Үҙ иләүеңдә йортауай булыу ҙа яраманы уға. Хәҙер, ана, дала ҡамғағы булһын.

Кинйә юҡ. Бурысы үтәлмәне. Ә бына улы бар. Уға йыйынырға ҡуша. Үҙе алып барасаҡ. Сит кеше яманыраҡ булыр.

— Ҡайҙа бығауҙарың?

— Былай барырһың. Аңлай, һөйлә. Ярлыҡаш һора, ҡайтырһың. Үҙем яҡлашырмын.

“Бәлки, шулайҙыр ҙа...”

Айым бер яҡтан инә арыҫлан, балалары өсөн өҙөшкән кеүек. Буранбикә икенсе яҡтан, аҡҡош пары кеүек.

Әле кешеләрен саҡыртты. Айым менән ике яҡҡа тартып алдылар.

Һеләүһен:

— Караттар алып китһә, яманыраҡ.

Буранбикә:

— Юҡ, был яман!

Айым Әлибайға:

— Йә, күңелең булдымы?

Әлибай:

— Үҙеңә шат бул... Янарал килһә.

Һеләүһен элеүле салмаһын кейә.

— Миңә тейә алмаҫтар.

Әлибай кешеләре, гонаһтан ҡурҡып, артҡа сигенә.

— Әсәй, тел әрәм итмә уға. Буранбикә, хуш! Һаҡланығыҙ. Мин ҡайтырмын.

Һеләүһен үҙе ишеккә атлыҡты. Артынан — Әлибай.

Айым:

— Үлемгә алып китте. Үҙе сәнскән төҫлө. Һаҙаҡ тоҫҡар дошман тип белә инекме?

Алыҫтағы дошмандан яҡында дуҫ булып йөрөгәне яман шул.

Һеләүһенде Әлибай алып китте.

Бына шунда ул тағы Аҡбуҙат, Күкбуҙат йондоҙҙары хаҡында йәштән үк хыялында йөрөгәнен хәтерләне. Эйе, үлемһеҙ булһа... Ярты ғүмерен атаһына бирер ине. Уны ла үлемһеҙ итер ине. Был — әкиәт, хыял. Ләкин ул тырышты... Атаһы Рәсәй – Пруссия һуғышында саҡта, үҫмер йәштә генә булһа ла, уның йортауайлыҡ вазифаһына битараф ҡалманы, йорт-ерҙе теҙгендә тотто... Шунан бирле... Бына был оло яуҙа ла... Ә бөгөн атаһы урынына уны хибес иттеләр[1], алып киттеләр. Ул риза.

Атаһы имен торһон, үҙ эшен атҡарһын.

[1] *Хибес итеү (ғәр.) – кешене һаҡ аҫтына алыу.*

14

Зөләйха үлде. Ниндәй шартта? Салауатты ҡотҡарыу өсөн. Бер урында ҡунғанда.

Батыр уны ерләй. Шунан һуң, ошонда ҡамағанда, арттан һалдаттар күренде. Йүрүҙән буйы Көҫәпәй ауылы янында. Моронда саҡ-саҡ тотмайҙар. Аты менән һыуға ырғылды.

Ярҙа атын ебәрә, үҙе ҡойроғона тотоноп сыға.

Ҡайҙа китергә — мәмерйәгәме?

Ноябрь. Ҡар иртә төштө. Һалҡындар башланды. Хәйерсегә ел ҡаршы, әммә хәйер һорашмайҙар. Етем баланың итәгенә ем һалһаң, ел осора. Йылы ҡоро. Аслыҡ. Ә ҡышы? Һалҡыны үҙәкте өҙә.

Яу баҫылды. Айырым-айырым төркөмдәр урман эсендә көн күрә. Уның ише ҡасҡындар ҙа йәшәй.

Ә ышанысль дуҫтар, таяныстар аҙ хәҙер. Илсеғол Этҡолов баш һалды. Батырҡай ҡайҙалыр, хәбәре-хәтере юҡ. Әбйәлил Ырыҫҡолдан бер сапҡын килде. Шунан бәйләнеш өҙөлдө.

Ғәйнә олоҫонда старшина Көсөкбай Абдуллинды тотҡандар. Берәй ергә барып, берләшеү урыны юҡ.

Салауат тирәһендә кемдәрҙер йөрөй. Сит, шикле кешеләр. Әминә лә күреп ҡалған, Гөлбәзир ҙә...

Был хаҡта ҡәйнәләренә һөйләгәндәр. Аҙнабикә һөйөклө улы өҫтөндә мәйет ҡошо — ҡарағош осҡанын тоя. Килендәре генә шуларға бәйле булып, ҡара йылан шикелле, ҡуйынында ятмаһын. Уныһы уғата яман булыр.

Был хаҡта бер ҡайтҡанында Салауатты ла иҫкәртте.

Тикшерәләр. Салауат күҙәтсе ҡалдыра. Берәү килеп китте, Кесе-Табын иләүенән. Артынан тикшереү ебәрҙе. Берeһе Бурлы, Ҡормантау ауылдарына киткән. Унда Ямғур тигән кешегә барғандар.

Ә Ямғурҙың ағаһы — шундағы Дыуан-Табын олоҫо старшинаһы Мөхсин Ғәбдессәләмов.

Икенсеһе подполковник Аршеневский командаһына йүнәлә. Унда иһә башҡорттар бар. Ғәбдессәләмовтар ҙа шундалыр... Шул бәндә Мөхсин генерал Голицын янына барып йөрөй, тиҙәр ине.

Салауат дөрөҫ эҙгә төштө. Барһа барыр инде... Кемдең ҡайҙа барыуын ҡалай итеп белеп бөтәһең...

Ә бит шул Мөхсин бер көндө, Ҡәнзәфәр Усаев тотолғас, уның Боҙаяҙҙағы йортон, малдарын биреүҙе һорап бара ине генералға. Әле генерал Голицын алыҫта. Уның халыҡты ҡырыуы, эйе, былдай ваҡытта хыянат өҫкә ҡалҡа.

Һатлыҡ йәндәр... Шуларҙан бит башҡорт караттары ла бар. Юҡҡа ғына, ҡарат — ҡара эт, тимәйҙәр.

Шунан таныҡтар табыла. Ә армайҙары әҙер. Улары — Өфөлә, Ҡазанда, Мәскәүҙә.

Подполковник Аршеневский Салауат артынан саба.

Салауат бер “тел” алды. Шул һөйләй: подполковниктың поручигы — Лесковский[2]. Ямғур менән Мөхсин бер төркөм сиреү туплап, әле шуның тирәһендә йөрөй. Был отряд гел алдан йөрөй, арттан Лесковский ротаһы төшә.

Юлай:

— Беләм мин уны. Польшала...

Салауат ҡайта. Ҡатындары ике яғында өлтөрәй.

---

[1] *Лесковский — 23-се еңел полевой команда поручигы.*

Әминә:
— Һин барып баш һал... Ярлыҡ алып ҡайт. Ҡотолорһоң...
Салауат:
— Йәлләйһең, уныһына рәхмәт.
Гөлбәзир:
— Юҡ, китергә кәрәк!
Салауат:
— Бынныһы дөрөҫөрәк.
Гөлбәзир:
— Мин үҙем дә китәм.
Әминә:
— Минән башҡамы? — Илай.
Салауат:
— Ә әсәйем нимә тиер? – Икеләнә.
Әсәһе керә. Уға әйтмәйҙәр. Үҙе белә, алдан тоҫмаллай.
— Улым, хәҙер уйларға кәрәк. Былай ҡурҡыныстыр. Атайың менән уйлашығыҙ. Бында күренмәй үҙе.
— Һеҙҙең хәлде белмәй йән түҙмәй.
— Беҙгә теймәҫтәр әле. Бисәләрҙең яу-дауға ни ҡатнашы бар? Үлһәң?
— Үлһә ни...

*Күк ыласындың балаһы*
*Бауҙа үҫә талпынып.*
*Яҡшы атаның балаһы*
*Шәһит үлә яу йөрөп.*

Һуңғы көндәрҙә Салауат атаһының кәйефе юҡлығын тойҙо.
— Йортто һаҡлайыҡ, — ти ҡарт яугир.
Уныһы ярай ҙа. Салауатҡа әсәһе йәл, ҡатындар, балалар... Юлай шул тирәлә урала.
— Юламанды Тимәшәү әсир иткән, – тине хәсрәт менән.
Ә бер көн, йыйнап, ҡартлас штаб ҡағыҙҙарын ҡатыны Аҙнабикәнең ағаһы Бикбулатҡа алып киткән. "Йәшереп, ҡоро умартаға ҡуйырмын",– тип уйлаған шикелле.
— Юламанды Тимашау әсир иткән, — тине Юлай. Ауыр әйтте. Салауатҡа әллә нисек, ҡыйын.

## Юлайҙың баш һалыуы

Аҙналинды ҡамайҙар. Шунан, һөйләшергә тип, коллежский советник Тимашевҡа хәбәр итәләр. Ҡаранай ҙа бирелгән властарға.
— Йә килһен, йә кеше ебәрһен, — тигән Тимашев ярандары.
Старшиналар, уны көтөп тормайынса, тотоп Тимашевҡа илтәләр. Бәйләтмәй үҙен Юлай уҙаман.
— Теймәң! Үҙем барам, тинем! Барам!
**10/XI**. Коллежский советник ҡулында.
Ҡаранайҙы — Верхне-Яицкиға, ә Юлайҙы Өфөгә оҙаталар.
Әллә, эйелгән муйынды ҡылыс киҫмәй, тигәндәре дөрөҫмө? Әйткәндәр бит. Ҡарттар әйткән. Әле абруйҙары булмаһа ла, әйтәләр. Әлибай, Ҡыҙрас инде башты үҙе ҡорал менән эйҙерә, түрәләргә ярар өсөн, тағы ярлыҡаш аҡсаһы аласаҡ.
Ә Ибраһим Мерәҫов, Ҡаранай Моратов һуң?
— Миңә лә әйтәләр, димләйҙәр. Тимашев вәғәҙә итә, – ти Юлай. – Бындағы, үҙебеҙҙеке бит, түрә булһа ла, тамыры, ҡаны беҙгә тартым. Ят ярлыҡмаҫ, үҙеңдеке ташламаҫ. Хоҙай ярлыҡар әле.

## Салауат һуңғы көнөндә

*Атайым да тиһәм, уғым аҙ,*
*Сабайым да тиһәм, алдым һаҙ.*
*Ян-яндарыма ҡарайым тиһәм,*
*Йән юлдашҡайҙарым минең аҙ.*

Атайы ышанды... Их, атай, башың буталдымы, быуының ҡалтыранымы, йөрәгең етмәнеме...

Юҡ, мәрхәмәт юҡ. Сараһы бар. Ун юлдың туғыҙы зинданға илтһә, һис юғы береһе — ирекkә илтә. Таба бел. Арынып сыҡ, хәрәкәт ит. Көсөң барҙа, һулыш алғанда, һуңғы тамсы ҡанға саҡлы көрәш.

Бына шул көндәрҙә, 10 ноябрҙә, Потемкин Екатеринаға ебәрә рапорт: “200 башҡорт старшинаһы баш һалды. 6 боласы старшина ғына тотолмай йөрөй әле”. Шул иҫәпкә ул Кинйә менән Салауатты ла индерә, әлбиттә.

Икенсе көндө үк ауылға бер отряд Салауатҡа һөжүм итте. Ситтәрәк икенсе отряд Юлайҙың да, Салауаттың да ғаиләһен алып киткәндәр. Бөтә йортон, бөтә малын. Бында Шағанайҙың улдары тырышҡан, әлбиттә.

Аршеневский Юлайҙың ике ҡатынын, 9 йәшлек бер улын, Салауаттың Әминәһен дә, Гөлбәзирен дә, ике улын да әсир итеп, Өфөгә оҙаттырған.

## Салауатты ҡулға алыу

Ҡар иртә төштө. Эҙ күренә. Һалҡын. Ауылда тороу мөмкин түгел. Мәмерйәлә. Салауат янындағы кешеләр аҙ, әммә ышаныслы. Генерал Фрейман ғәскәрҙәре. Ҡаратау урманында ҡамайҙар.

Салауат аттарҙы ташлап китергә ҡуша. Һыбай йөрөү мөмкин түгел. Саңғыла китергә кәрәк. Ҡаҙаҡ яҡтарына.

Ҡошсоһо үлде.

Тегеләре?

Ул Байыҡ сәсәнде хәтерләне:

*Бары бөткән, ҡалмаған.*
*Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,*
*Дошманға бысаҡ ҡайраған*
*Бөтмәй торған ил ҡалған...*

Салауатты башҡорттар ҡамап алды. Ҡаратау урманы, Мәндеш тауында. Ҡайһыһы атлы, ҡайһыһы саңғыла. Күмәктәр. Саңғыһы һына батырҙың. Ағастар ауған. Арҡандар ырғыталар. Салауат йығыла. Ҡалҡынырға итә. Күсәк менән һуғыу. Иҫәңгерәй. Бәйләп алалар. Мөхсин кәкерерәк ҡылысын буштан-бушҡа һелтәп ҡарай, эх, уңай. Йәнәһе, ул да батыр.

— Ҡана, бир әле бында.

— Ә-ә! Кем тинең, бағый?

“20 йыл элек Батыршаны старшина Деваев тотторған, быуғаулап алып киткән — Питерға илткән, 1 мең һум ярлыҡаш алған. Һиңә 5 мең һум бирерҙәр. Йыр бар бит был хаҡта. Ырашҡалы көн...Әле лә шундай”, — тип уйлай Салауат.

— Миңә ошо ҡылыс та еткән.

— Уны яулап алырға кәрәк.

Салауатты тәүҙә Аршеневскийға илтәләр.

— Һөйлә бөтә яуызлыҡтарыңды, — ти офицер. Батыр өндәшмәгәс, бата (ҡамсы) һуғалар.

Салауатты тотоп Өфөгә килтерәләр — провинция канцелярияһына. Юлай ҙа унда, тотҡонлоҡта.

Бында Аршеневский ғына түгел, ҙурыраҡтар хаким. Генерал Фрейман, генерал

Мансуров та килә. Воевода Борисов, комендант Мясоедов. Уларҙың тылмастары, армайҙары бар.

Тылмас — Третьяк.

Армай ҡамсыһын килгән көндә үк Салауат татып алды инде.

Салауат тотолғас рапорт: Фрейманға (Өфө), Ырымбурға, губернаторға, аҙаҡ — Ҡазанға.

Йәғни, баш командалаусы генерал Петр Панинға. Граф иһә “Башҡорттарҙың иң ҙур бола башлығын ҡулға алдыҡ”, — тип императрицаға рапорт тултырасаҡ.

Унда — йәшерен эшләй торған олуғ комиссиялар. Мәҫәлән, Йәшерен экспедиция. Оҫта ярғыусылар, ҡанһыҙ армайҙар әҙер тора.

18 ноябрҙә Потемкин Ҡазандан Мәскәүгә күсеп киткәйне. Ул шунан тороп өйрәтеп, күрһәтмә биреп ята хәҙер.

Башҡорттар баш эйһендәр, яңынан болармаһындар өсөн хәйлә кәрәк... Тыныс ятҡандарҙы, ҡабат ҡулына ҡорал алмау шарты менән, йорттарына ҡайтарығыҙ, ти. Ләкин был иҫәпкә яу башлыҡтары, унынса әйткәндә, яуыздарҙы индермәҫкә. Кинйә менән Һеләүһенгә лә, Юлай менән Салауатҡа ла, Ҡанҡай менән Ҡәнзәфәргә лә ирек өмөт итәһе юҡ. Уларға — бығау, конвой, зиндан да баструк. Ҡазанға, Мәскәүгә... Йәһәннәмгә!

15

Торналар үтте.

— Торрыйҡ! Торрыйҡ!

Боронғо Алла хәбәрселәре — торналар. Шулар сыңраһа, туҡтап тыңлайҙар. Яҙ бәпәйҙәргә тәпәй килтерә, көҙ ҡалдырып китә бит шул торна тигән серле ҡош, илаһи йән эйәһе.

Кинйә лә тыңлай. “Хәбәр юҡ берәүҙән дә...”

Һөйләшәләр. Кинйә, Бәхтиәр. Алмаштырып алға ике яугирҙы — Срым батыр, Кәрим көтөүсене ҡуялар.

Ойошорға итәләр.

Ләкин торналар ҙа үтеп бөттө. Көҙ. Ел. Алыҫта. Хәбәр юҡ. Томан. Бынан ел. Ул да хәбәр итмәй. Ҡаҙаҡ ханы отряд ебәрә, солтандар ҡаршы.

Бында ла көс йыя. Оҙон ҡолаҡтар ысҡына — хәҙер далаға. Сарбаздар йыйырға. Бер аҙы башҡорт иленә.

а) Һаҡмар, Яйыҡ араһы. Ҡыҙыл крепосы (ҡәлғәһе). Иҙелбаш. Верхне-Яицкиға, Салауат, Баҙарғол...

б) икенсеһе ауырыраҡ —Нөгөшкә.

Кинйәләрҙән хәбәр юҡ, Салауаттың тотолоуын да, Һеләүһенде тотоп алып китеүҙәрен дә белмәйҙәр.

Байтаҡ ваҡыт үткәс кенә был ауыр хәбәрҙе алып килделәр.

— Йортомдо туҙҙырғандар. Шулай булыры билдәле инде. Минең өсөн улымды алып киткәндәр.

Уларға ярҙамға барырға ине. Юҡ шул әмәле...

— Ил ярҙамһыҙ түгел.

Унда — башҡа Кинйә. Уны ялған Кинйә, дәғи Кинйә тиерҙәр.

***

Был ваҡыт улын Ҡазанға алып киттеләр **(8/XII** саҡлы). Бығауҙарын һалдырмай, килтереп яптылар. Ҡазанда булғаны юҡ ине. Бына ул Ҡазан. Зинданлы Ҡазан. Ҡомаҡлы... Ана, сыйнашып ары-бире үтәләр. Ауыр бығау, зың-зың килеп сылбырҙары һөйрәлә.

Ҡазан төрмәләре тулды. Кремль баҙҙары, монастырь баҙҙары – шығырым. Һеләүһен — береһендә. Ҡәнзәфәрҙе ишетте йәнә. Ҡаранай, Белобородов хаҡында.

Бында Зарубин, Губанов. Шуларға яза (пытка). 12 тапҡыр. 13-сө тапҡыр яфалағанда һөйләй башлай.

“Пытка” тауыштары, ыңғырашыуҙар ишетелә. Ут һәм тимер аҫтында әйтер, тиҙәр. Әйттерергә тырышалар. Һеләүһен белмәй, Ҡәнзәфәрҙе ныҡ язалайҙар.

Ҡаранайҙы, Кинйәне тотоп килтер, тиҙәр. Ул вәғәҙә итә. Күҙҙәре асыулы, ышанмайҙар.

Һеләүһен былар хаҡында аҙ-маҙ ишетә. Үлемдән ҡурҡмай. Уны ла язалайҙар. Бер кемгә һөйләмәй.

— Мин – мулла, — ти, — йәшмен, йәшәге килә. Ғүмерем яңы башланды, ҡапыл өҙөлә...

Бер яҡ ситтән ҡомаҡтар тупырҙап ырбандай. Сыйнайҙар.

Ошо ваҡыт Салауат менән Юлайҙы ла алып килделәр.

Этеп керттеләр. Йығылманы батыр. Ҡул һелтәгәндә, сынйыр конвойға тейҙе. Уһылдап йығылды теге.

Бына допрос. Утлы тимер, ҡамсы...

Тотҡондар күп. Күҙләштереү – очная ставкалар. Белобородовты, Иҙебай Ямбаевты, Ҡәнзәфәрҙе... Көн һайын яңы.

Дуҫтар бер-берен аңлай. Бер-беренә ярҙам итерҙәр ине лә, юҡ шул мөмкинлек.

***

Бер оҙон ҡолаҡ Кинйә батырҙы таныны. Яйыҡ буйына ҡасҡан ҡалмыҡтарҙы йыйып килтереүсе бәндә.

— Кинже молда?! Тәңре бер жай[1] бирҙе беҙгә. Осраштыҡ.

— Бирҙе шул. Был юлы бирмәһен ине.

— Ҡайғырма. Бергә күрәбеҙ яфаны. Бергә үләбеҙ.

— Үлербеҙ!

— Киткәндә, Тоҙанайынды алып житкезәм... Алыҫ тимәс.

Кинйә хат яҙа.

— Ышбу мәктүбне тәғзим менән тапшыр.

Шулай тине. Алып килде. Төҙөнбикә[2] был юлы өс улын, ирен дә алып килгән. Ире ҡарт. Атан дөйәгә[3] атланғандар.

Төҙөнбикә — бит алмаһы алһыу, йөҙө, тауышы яғымлы. Ошондай ваҡытта ла наҙлы бит әле.

Ире ҡаҡҡанды күсе ҡаға.Ә ул ярай белгән. Ире ярата. Күсендә яраталар.

— Ауыр ваҡытта ярҙам булһын. Жаныңды һаҡларҙар.

Төҙөнбикә үҙе лә ҡайтып яу яраҡтары аҫҡан.

— Үҙем башсы булмаһам булмайдыр.

Байтаҡ кеше эйәртеп алып килгән.

— Хәлең ауыр. Тағы алып килдем.

Иркәләй ҙә ала.

Солтан сарбаздары ҡыҫып килә, хан төләңгиттары. Көн батҡансы орош булды. Көс аҙ ҡалды.

— Аҙбыҙ, китер инек тә...

Әлбиттә,Әстерханға табан, Яйыҡ – Иҙел араһына. Ул тирәлә сарбаздар иркенәйә алмаҫ. Хан төләңгиттарының эҙе булмаҫ. Унда — казактар, рустар, ҡалмыҡтар.

Төҙөнбикә лә барам ти.

Ниңәлер ире генә өндәшмәй. Ҡарт буйһона, улдары ҡаршы килә алмай.

Кинйә:

---

[1] *Жай (ҡаҙаҡ) — яй.*
[2] *Төҙөнбикә — Кинйәгә бала сағында ҡолаҡ тешләп әйттерелгән ҡыҙ (1-се китапты ҡара).*
[3] *Атан дөйә — эш дөйәһе.*

— Ауыр, һуғыш эше еңел түгел.

Төҙөнбикә:

— Бына минең балалар. Үҙем дә... уҡ атам.

— Башсы булырға иркәгең бар.

— Ул сал.

— Улың да башсы булыр.

— Булыр.Әле үҙем дә.

Ҡороҡ һала. Тота...

Китәләр.

Төҙөнбикә:

— Һеҙгә ҡымыран кәрәкме? Әҙерләйем.

— Дөйә табырмын — шубат[1] булыр.

Байтаҡ шул бында элек бер заман нуғай урҙаһынан,Әстерхан ханынан ҡалған Ҡундрау, Йорт татарҙары, Едисан, Буджаҡ нуғайҙары. Хәҙер Нуғай татарҙары тип йөрөтәләр. Тик улар ойошорға бик теләмәй. Бер аҙ ҡаҙаҡтар бар.

Үҙән буйҙарындағы башҡорттар әкренләп йыйыла. Нарынҡомда аулаҡ урындар бар. Күлле, һыулы, ҡош-ҡортло.

Ҡамыштар араһы. Ҡыш.

Заметайло менән бәйләнеш булдырҙылар.

Срым батыр Яйыҡты сығып, ҡыр-ҡаҙаҡ араһына сумды. Төҙөнбикәнең ире ауырый. Ә былар бында әле – ял итә. Яҙға йыйылырға кәрәк тәһә.

— Алып ҡайтып ерлә.

Тағы килде.

Ҡаҙаҡ ҡатындары бер йыл илай. Ә ул бер аҙна илаған да килгән.

— Һин бар бит. Нисек илап ултырайым, — ти сая ҡатын батырға.

***

Ел. Иҫә. Геүләй. Ҡотора. Көньяҡтан да, тиреҫтән дә. Унын телен аңлай белергә генә кәрәк.

Ел һөйләр инде...

Һеләүһенде Мәскәүгә алып киттеләр. Ҡаранайҙы ла, Зарубин менән Губановты ла.

Пугачевты язалап үлтергәндә шаһит булһындар өсөн.

**10/I — 75 й.** Бөтәһен дә күрҙе. Мәхшәр. Болотный майҙанда халыҡ эркеүе менән халыҡ. Күҙ йәше. Суҡыныуҙар. Ахыр заман. Ҡиәмәт. Үлем түмәре. Армай айбалтаһы. Һеләүһендең башы буталды, онотто.

Пугачевты килтерҙеләр. Бығауҙары бөтә Мәскәүҙе уятҡан кеүек. Күҙҙәре янып-ҡарап тора. Һәр кемгә. Армай унын иҙеүен һелкә систе, муйынын асты.

...Күҙ алдында... Ҡулына алып, армай Пугачевтың башын күрһәтте. Аяҡтары-ҡулдары тартыша ине әле.

Башҡаларҙы аҫтылар. Максим Григорьевич Шоғаев, Тимофей Подуров, Вәлит Торнов, Афанасий Петрович Перфильев...

Ә Ҡәнзәфәрҙе Балтик буйҙарына мәңгелек каторгаға оҙаттылар. Башҡалар ҡайтарып ебәрелде.

Эх, һаттылар шул... Һатлыҡ йәндәрҙән Иван Твороговты, Чумаковты, Федулевты Лифляндия губернаһына йәшәргә күсерҙеләр. Үҙенә күрә һөргөн. Һөрмәһәләр ни, халыҡ уларға үҙ язаһын бирер ине. Ҡурҡып киттеләр.

**26/I.** Йәшерен экспедиция Өфөгә, Ҡазанға губернатор Мещерский[2] ҡарамағына, килә. Ул Ырымбур губернаторына ҡайтарыла. Һеләүһен, Ҡаранай

---

[1] *Шубат (ҡаҙаҡса) — ҡымыран (дөйә һөтөнән эшләнгән эсемлек).*

[2] *Мещерский Платон Степанович — кенәз, генерал-поручик, Ҡазан губернаторы.*

Екатерина манифесына **(XI — 1774 й.)** эләгә. Йәнәһе, аҫмаҫҡа, үлтермәҫкә... Улар шулай иҫән ҡалды.

Ә Зарубин, Губанов... Уларға хөкөм: баштарын сабып өҙөргә. 10/II Өфөлә — йәнәһе, енәйәт урынында. Халыҡты ҡурҡытыр өсөн, уның башын өҙөп, Ағиҙел ярындағы крепость алдына ҡолға башына кейҙерҙеләр. Кәүҙәһен дар ағасы менән бергә яндырҙылар.

Ағиҙел яры буйындағы боҙ өҫтөндә — йәшерен төрмә, боҙҙан уныһы. Кем шунда ирекһеҙләп ябыла — мәйете аҙаҡ мәкегә һалына.

## Салауат – Юлай

Ошо ваҡытта Салауат менән Юлай Мәскәүгә алып киленде.

Ярғусыға кәрәген әйтмәйҙәр... Икеһенең береһе әйтһәсе, мин ғәйепле, тип, юҡ!

Мәскәүҙә әйтерҙәр әле, тип уйлайҙар...

Юлдар башҡа-башҡа ... Шулай ҙа бөтә Мәскәүҙә, бер күҙ-ҡулда допрос алына. Ҡазанда һөйләгәндәренә ышанмайҙар.

**4/III — 75 й**. Мәскәүҙә — 1-се допрос. Сенатта. Генерал- прокурор Вяземский. Потемкин иһә Сенаттың обер-секретары, халыҡ әйткәнсә, обер палачы.

Очная ставка. Ҡолой Балтасты ла килтертәләр. Күҙләштерәләр.

Ҡолой Салауатҡа үсле, Салауат уны ҡат-ҡат ҡыйратты.

— Алдай, — ти Ҡолой. — Үҙе теләп чин алды Пугачевтан. Яндырҙы, үлтерҙе.

Ҡапма-ҡаршы, күҙмә-күҙ һөйләү.

Быларына ни яза? Екатерина ниндәй хөкөм бирһә лә, үҙ ҡулында. Тик...Әбей батша ҡурҡа. Үлем язаһы бирһә, башҡорттарҙа асыу-нәфрәт тыуыр... Яңынан дауыл ҡубыр. Уға ғәйеп өйөргә, үҙенә ҡарата нәфрәт уятырға кәрәк. Йәнәһе, Салауат ҡына бөтәһенә ғәйепле: кешеләрҙе үлтергән, яндырған, йорт-илде боларҡкан...

Хөкөм Мәскәүҙә булмаһын, әйҙә, үҙҙәрендә уҙһын.

Сенаттың обер-прокуроры кенәз Вяземский Александр Алексеевичҡа ошо юҫыҡта тейешле фарман бирелде.

1775 йыл, 17 март. Уларҙы Мәскәүҙән Ҡазанға оҙаталар, 7 апрелдә Ҡазандан Ырымбурға ебәрәләр.

27 апрель. Ырымбур губернаторы Рейсдорп аталы-уллы батырҙарҙы Өфөгә оҙата. Яңынан тикшереү өсөн.

Юлай менән Салауат 1 майҙа Өфөгә килтерелә. Ағиҙел ҡаршыһындағы Оло Ҡатауға. Уның биләмәһендә – Бала Ҡатау. Ҡала магистратының төрмәһендә тоталар.

1775 й. Пугачев та, уның күп кенә ярандары тотолоп, аҫылған.Ә халыҡ ялпыһы тынмай. Яңы түрәләр тыныс түгел, ҡурҡалар.

Салауатты, Юлайҙы язалайҙар... Барыбер ҡотҡарырбыҙ, тип яҫҡына икән элекке яуҙаштары.

Пугачев ҡотолған, уның урынына бүтәнде аҫҡандар, имеш... Иҫән икән, тағы ғәскәр йыя, тигән хәбәрҙәр йөрөй. Халыҡ ышана. Инде тотонһаҡ, кәрәктәрен бирербеҙ, тиҙәр.

Бында Кинйә бар, тиҙәр. Кемдер хәбәр ташып йөрөй. Үҙен үҙ күҙҙәре менән күргән, имеш. Баҙарғол бар, Һары Абдуллин бар. Яңы батырҙар, яңы Алдарҙар бихисап.

**28/II — 75 й.** Екатеринбургтан Петр Панинға яҙалар: “Ибекан Исергаев тигән башҡорт Баҡтыш ҡарттан ишеткән, Пугачев ҙур команда менән килә икән, имеш. Шуның өсөн бында, был ведомствоны һаҡлау өсөн, яҙ етеүгә ҙур команда ебәрегеҙ.”

Карателдәр темеҫкенеп йөрөй.

**4/III — 75 й**. Верхне-Яицк ҡәлғәһе коменданты полковник Ступишин халыҡҡа өндәмә тарата: “Буш һүҙгә ышанмағыҙ! Ғәйепһеҙҙәр сығыр. Әле Салауат, Юлайҙы тикшерәләр...

Ғәйеплеләр тейешле язаһын алды. Пугачев юҡ. Ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙа яңы ғәскәр йыя тип, бәй, ниндәй ғәскәр, ниндәй Пугачев... юҡ ул.

Кинйә лә юҡ.

Әгәр ҙә һүҙ таратыусы булһа, шунда уҡ килеп әйтегеҙ.

Уны эҙләйҙәр. Мәскәүҙә лә, Петербургта ла борсолалар.”

Ә оҙаҡламай 25 апрелдә губернатор Рейнсдроп Петербургҡа генерал-прокурор кенәз А. А. Вяземскийға рапорт ебәрә:

“Кинйә Арыҫланов Башҡортостандан злодей Пугачев менән бергә китеп, ғәйеп булды, хәбәре юҡ. Белеүсе-күреүсе юҡ”.

***

Ә Кинйә иҫән ине әлегә. Уға хәбәрҙәр килә. Мәҫәлән, Пугачевты язалап үлтереү хаҡында. Башҡаларҙы аҫыу. Салауат менән Юлайҙың унда булыуы хаҡында.

Хәбәрҙәр өҙөк-төртөк, өҙөм-йолҡом... Үҙгәреп-боҙолоп, легендаға әүерелеп салына ҡолаҡҡа.

— Иҫәндәр икән... Батыр торалар. Күрәһе ине үҙҙәрен. Быйндай ваҡытта ярҙам итеп булмай. Һис юғы бер һүҙ менән булһа ла ярҙам итергә, бер һүҙ әйтһәң... Шул да көс-ҡеүәт бирә, тиҙәр.

Үҙенә лә көс килә. Хәбәр булып, моң булып. Йыр булып, рух булып... Йырлайҙар... Бүгәс батша, Салауат батыр хаҡында.

Яҙ. Торналар... Торрыйҡ, торрыйҡ... Гүйә, батырҙың аһ-зарын хәбәр итә. Һауаларҙан хәбәр биреп үтәләр.

Улар килгән яҡтан сапҡын елә. Төндә лә, көндөҙ ҙә... Килә-килә. Тотоп алалар.

Әстерхандан. Кинйәнән.

“Поднимайтесь, когда трава будет о щеколодку. Отсюда двинемся мы с войсками”. Кинйә хаты.

Тоттолар. Хатты алып, Петербургҡа ебәрҙеләр.

Кинйә бар, имеш. Ниндәй тауыш бирә әле! Оран һала!

Бынан һуң уның исемен телгә алырға ла ҡурҡтылар.

Ләкин бындай хаттар бер генә ергә китмәгән бит. Башҡорт ерҙәренең төрлө төбәктәренә, Кама буйҙарына, ҡыр-ҡаҙаҡ йәйләүҙәренә, Урал заводтарына.

Губернатор рапорттар ала.Әле Дим буйынан, әле Ашҡаҙарҙан. Ағиҙел үрендә лә башҡорттар ҡайнаша, тип, Һаҡмар үрендә бола, тип. Юҡҡа түгел.

Тырнаҡлы олоҫонан Кинйәбикә Ракаева, тағы Бикмырҙа Рәжәпов, Кинйә иҫән, тиҙәр.

**6/V — 75 й.** Суворов та Панинға хәбәр итә: “Башҡорттар тауға китә, йыйылалар. Яңы бола булыр”, — ти.

Фрейман да иҫкәртә. Һаҡ булырға ҡуша.

Был тылсымлы. Уға Суворов та рөхсәт итте. Йәш генерал. Шулай ҙа һаҡ. Разведкаһы эшләй. Эше бик данлы түгел. Ләкин ҡушылған эште атҡарырға кәрәк.

Ул Пугачты оҙатты. Күрҙе: Салауат — ҡулда. Быныһын, Кинйәне, тоторға тейешмен, ти. Ҡайҙа, ҡасан? Бәлки, йөҙгә-йөҙ, ҡылысҡа-ҡылыс килергә яҙғандыр.

Һеләүһенде ҡайтарҙылар. Подписка буйынса яңы ергә күсереү булыр.

Ерҙәрҙе Көҫәпәй үҙләштереп бөткән. Һеләүһен ҡайтҡансы уҡ үҙ исеменә күсерергә тырышҡан. Ҡушмаһалар ҙа, бында көн юҡ, ҡапсыҡ аҫып, ил өҫтөнә сығып булмай. Көйөргәҙе буйына ебәрмәнеләр.

Ырымбурға яҡын... Буранбикәнең атаһы Ҡарағужа старшина ҡабул итмәгән.

Әйтелгән урын — Сергеевка ҡәлғәһенә табан, Мерәç ауылы. Ә Айымды башҡа яҡҡа – Кәмәлек, Ырғыҙ буйына – Һеләүек алып киткән.

Һеләүһен варисҭарын һаҡларға тырышҡайны.

Ул шунда төпләнде. Ләкин оҙаҡламай донъя ҡуйҙы.

Әсәһе Айымбикә үҙ ҡанаты аçтына йыйҙы бәпкә кеүек итеп. Ҡарар, үçтерер Айым әсә. Ә Аçылбикә инәйҙең ҡәрҙәштәре уны үҙҙәренсә “Аçыл әсә” тиерҙәр.

Шул Аçыл әсә туплар.

Һеләүек рөхсәт алыр. Атай исеменә ҡағыҙ яҙып булмай. Шәжәрә яҙҙы: олатайы – Арыçлан, уның заслугаһы күп Петр I алдында. Уның даны, уға хөрмәт йөҙөнә ҡайтырға рөхсәт юлланы.

Арыçлан исеме менән илгә ҡайттылар.

Ерҙәр юҡ. Айым әсә үҙ түркененә морон төртөрлөк түгел, ҡәйнәһе Аçылбикәнекенә ҡайттылар.

Көйөргәҙе буйында — өләсәйҙәре Аçылбикә түркене уларҙың нағасыһы — ошонда уларға төйәк. Ауыл ҡорҙолар. Ғәҙәттә, кем тәүге ҡаҙыҡ ҡаға, шуның исеме ҡушылған ауыл йә  йәйләүгә, ә ул атаһы хөрмәтенә Кинйә абыҙ ауылы тип атаны яңы йәнтөйәген.

Йылғаһы  – Көйөргәҙе, ҡушылдығы — Ҡаран. Исламбай тауы янында.

Килмешәк булып киләләр. “Килмешәк өйө ауыл ситендә”. Быларға иң алыç, ситтәге йәйләүгә сығырға рөхсәт бар. Үҙҙәренән йыраҡ, хатта Көйөргәҙе башында.

Әллә ауылмы, әллә уға исемен биргән Кинйәме, әллә шундағы ир-егеттәр, балалар фамилия итеп йөрөткән Арыçлан батырмы оҙон ғүмерле булыр.

Кинйә! Исемкәйе килер йырҙа, шәжәрә булып, килер риүәйәт булып, батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ рухы булып. Йөҙ йыл үтер, йөҙ илле йыл, ике йөҙө лә. Ә батыр рухы һүрелмәç. Рәсәй-илгә ауырлыҡ килгәндә, ситтән дошман ябырылғанда, күкрәк киреп ҡаршы торор ҙа, Арыçлан батыр исеменә, Кинйә абыҙ исеменә тап төшөрмәй, дан ҡаҙаныр яңы быуындар.

***

Салауаттан, Юлайҙан яңынан һорау алыу башланды.

Бөтәһе билдәле бит. Нимә һорарға? Ниндәй яза бирергә... Тик хөкөм бында булһын.

Панин әйтә:

— Салауатты, Юлайҙы үлтереү еңел ул. Ләкин бәләһе ҙур булыр. (Улар изгегә әйләнер, тағы үс тыуҙырыр.) Уларҙы халыҡ күҙелендә үлтерергә кәрәк. Ғүмергә онотһондар.

**5/V.** Өфө воеводаһы янында.

Тылмас Федор Тертьяков ауылдарҙа таныҡтар табып, кәрәкле мәғлүмәт йыйып йөрөй. Салауат эҙенән, уның яу юлдарынан күҙләй, уны күргәндәрҙән, уның яугирҙарынан һораша.

**6/VII.** Салауат эше тамамлана.

**15/VII.** Ырымбурҙа приговор. Рейнсдорп 175 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырыуҙы раçлай.

175-әр ҡамсы... Ҡарап торалар. Һуҡҡан һайын ҡан атылып сыға, хәтерҙән улары сыға. Онотола, йәнәһе. Ләкин әрнеү өçтәлә, үс ҡабара, күңелгә мәңгегә һеңешә.

**2/X — 75 й.** Өфөнән — каторгаға.

2 октябрҙә, Салауаттар Өфөнән киткән көндө, губернатор Рейнсдорп Сенатҡа хат яҙа. Депутат Баҙарғол Юнаевтың депутатлыҡ знагын ҡайҙа тапшырырға, тип һорай.

...Салауат менән Юлай **(29/XI)** тотолоуға теп-теүәл бер йыл тулғас Балтик

ярына баҫа. Улар килгәндә бында Ҡәнзәфәр Усаев, Иван Почиталин, Емельян Тюленев[1] була. Теге мәлғүн Астафий Долгополовты ла, яугирҙар исемен бысратып, әскелтем һыулы диңгеҙ буйына килтергән булалар. Бында... Яфа, каторга эше... Теп-теүәл сирек быуатлыҡ яңы ғүмер. Ғазаплы ғүмер.

Йәй көндәре көньяҡтан ҡыуан ел өрә. Ҡыш көндәре тиреҫтән һалҡын елдәр иҫә. Бер яҡтан — Кинйә хаҡында, икенсе яҡтан Салауат хәбәрҙәре ағылған төҫлө.

Оран елдәре.

Яҙ көндәре торналар ҡайта Уралға, көҙ көндәре башҡа ҡоштар менән улар йылы яҡҡа оса. Эй, торналар...

Уларҙың сыңрауына йөрәк һыҡрауы эйәрә, халыҡ иңрәүе. Йыр тыуа, моң тыуа, хәбәрҙәр тарала, риүәйәттәр тыуа...

Кинйә хаҡында... Иҫән икән... Тик ҡайҙа?

...Яфа ҙур. Тотҡондар таш аҡтара. Бығауы сыңлай Салауаттың. Йырлай, аҙнаға бер диңгеҙ ярында, ташҡа ултырып, ҡурай тарта. Урал яҡтарына оса уйҙары.

Бында риүәйәт кенә түгел. Халыҡ хәтерендә ҡалған, яҡшы һүҙ, риүәйә булған...

Шунда, Яйыҡ менән Иҙел араһында, ҡаты орош булған. Кинйәне айырып алғандар. Уның ярандары бөткән. Бер үҙе ҡала. Икенсе оста Төҙөнбикәне ҡамағандар. Үҙе күрә Кинйәнең хәлен. Үҙе юл яра. Улдары яҡ-яғында... Ире үлә. Кинйәгә барып етә алмайҙар. Ҡылыс аҫтында, халыҡты йырып, алып китәләр. Икешәр атҡа һалып алып ҡайталар.

Ташлы ярҙағы зыяратҡа күмәләр. Ә Төҙөнбикә? Һуңыраҡ... Ҡаҙаҡ ҡатындары илай. "Жоҡтау" тиҙәр. Көнөнә өс тапҡыр иртәле-кисле һәм өйлә намаҙы ваҡытында. Бер йыл буйы иларға — жоҡтарға тейеш.

Илағанда маҡтау, уның эшен, данын, ҡайғыға зарланыу.Әле гел уның батырлығын, үҙенең яратыуын данлай. Ире үлгәс, бер аҙна иланы.

— Иркәгенә нинә аҙ иланың? — тигәндәр тәүҙә.

— Минең ҡаным ҡаҙаҡ түгел, — тигән, имеш, ысын булһа.

— Ә Кинйәгә? Нинә оҙаҡ?

— Ҡаҙаҡ йолаһын һаҡтайым, — тигән, имеш.

— Һин әйеле түгел бит.

— Ҡатыны булһам, ғүмер буйы жоҡтар инем. Уның ҡатыны Айым ғүмер буйы илар, — тигән Төҙөнбикә.

Уның һүҙҙәрен әйелдәр ҡабатлаған, ирҙәр ҙә ҡабатлар булған.

Уның һөйәге лә шунда ҡала, имеш.

Ысынмы, түгелме — халыҡ күңелендә ҡалғаны хилаф булмай.

Легендалар тыуҙы. Ҡурҡып, һаҡланып һөйләнеләр. Хәтер күңелгә һеңеште. Үлмәгән икән, тиҙәр. Тағы яуға киткән, тиҙәр. Берәүҙәр каруан менән китеп барғанын күргән. Унда яңы яуға өгөт тарата, имеш.

Берәй урында яҡшы эш эшләнһә, быны Кинйә эшләй, берәй яҡшы һүҙ булһа, Кинйә шулай әйткән, тиҙәр.

Телдән төшмәй, күңелдән һүрелмәй: ир үлә, даны ҡала шул.

Легенданың үҙ ғәҙәте, үҙ тәртибе. Уның өсөн ер арауығы ла, сиктәр, кәртәләр ҙә юҡ. Ул ваҡыттың сиген дә белмәй.

---

*[1] Тюленев Емельян — Курган биҫтәһенең крәҫтиәне, б. к. атаманы.*

Суфиян
ПОВАРИСОВ

# УМЫРЗАЯ СӘСКӘ АТҠАНДА...

*(Ғәли Ибраһимовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата)*

Кешенең ҡылыҡ-фиғелен, тәбиғәтен, холҡон, эске донъяһын төрлө йәнле һәм йәнһеҙ әйбер-предметтарға сағыштырып асыҡлау элек-электән килә: "арыҫландай егет", "еләктәй ҡыҙ", "фәрештә һынлы ҡатын" һ.б. Ғәли Ғизетдин улы Ибраһимов тураһында яҙырға ҡулға ҡәләм алғас, ниңәлер ҡарҙы тишеп сығып, батырлыҡ һәм матурлыҡ символы булып балҡыған умырзая иҫкә төштө. Ғәли ағайҙың "Умырзая" тигән романы булғанғалыр, бәлки. Дөрөҫ, беҙҙә заяға үткән ғүмерҙе умырзая менән сағыштырыу бар. Минеңсә, был ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәй. Яҙғы ҡарҙы йырып баш ҡалҡытҡан сәскә ғүмере ни эшләп зая булһын! "Подснежник" тип урыҫтар ҙа уйламайыраҡ исем ҡушҡан уға. Француздарҙа – ҡар бырауы, инглиздәрҙә – ҡар тамсыһы, немецтарҙа – ҡар ҡыңғырауы. Матур исемдәр!

Шулай инде: балаға исем ҡушыу ҙа ауыр эш, йәнһеҙ әйберҙәргә атама биреү ҙә еңел түгел. Баланың исеме есеменә тура килһен, йәнәһе. Әйберҙең атамаһы уның аҫыл сифатын төрлө яҡлап асыҡларлыҡ булһын. Ғәли Ибраһимов әҫәренә "исем ҡушҡанда" шул хаҡта ла ныҡлап уйлана торғайны. Романын "Умырзая" тип атау өсөн уға күп баш ватырға, эстетик зауығын ныҡ эшкә егергә, сағыштырыуҙың серле яҡтарын өйрәнергә тура килгәндер. Минең "Яратам һине, тормош!" тигән әҫәремдең атамаһын уның яратмауы шуға бәйләнгәндер, бәлки.

Башҡорт әҙәбиәтенә мин ошо повесть менән инеп киттем, шикелле. Ул "Әҙәби Башҡортостан" журналында (хәҙерге "Ағиҙел") 1963 йылда баҫылды. Ул ваҡытта Хәким Ғиләжев – баш мөхәррир, Ғәли Ибраһимов – мөхәррир ярҙамсыһы, Фәрит Иҫәнғолов сәркәтип ине. Әҫәрҙең донъя күреүенә ныҡлап фатиха биргәнсе Ғәли ағай миңә ике тәҡдим әйтте: беренсеһе – "Яратам һине, тормош!" тигән атамаға ниндәйҙер бер поэтик яңғырашлы исем табыу, икенсеһе – ҡолаҡты һис тә наҙлап тормай торған сәйер фамилиямды (Поварисовты) алыштырыу. Журналист булып эшләгәндә мин, юлдан яҙған ун һигеҙ йәшлек бер ҡыҙҙы эшкә урынлаштырып, йәшәүҙең ысын асылына оло фатихамды биргәйнем. Журналист, педагог шәүкәтлелегем ярҙам иткәндер, бәлки. Уның хаҡында башта "Тормош юлында" тигән ҙур ғына очерк баҫтырҙым. Унан повесть яҙырға батырсылыҡ иттем. Үҙ исеме Мөкәрәмә ине. Әҫәргә Наилә булып инеп китте. Баҡһаң, был "ныйылдаҡ" ҡыҙыҡайҙың күңел

һандығында ифрат гүзәл аҫылташ булған – ул тормошто ихлас ярата икән. Туғыҙынсы синыфта уҡығанда бер тупаҫ уҡытыусының яман һүҙҙәр менән һүгенеүе һөҙөмтәһендә мәктәптә уҡыуын ташлаған. Яҡшы һүҙ – йән аҙығы, яман һүҙ – баш ҡаҙығы, тигәне ошолор инде.

Повестың исемен үҙгәртеү хаҡындағы фекерен Ғәли ағай Ибраһимов Хәким Ғиләжевҡа, Фәрит Иҫәнғоловҡа ла әйткән. Өсәүләшеп гәпләшеп алғас, кәңәшкә үҙемде саҡырҙылар. Мин әле береһенә, әле икенсеһенә ҡарап оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырғас, риза түгеллегемде аңлап, "ярай, шул килеш китһен инде" тине улар. "Поварисов"ты "Варисов"ка үҙгәртеү тураһында уйланырға өс көн ваҡыт бирҙеләр. Мин "Суфиян Варисов" булырға тейеш! Өс көн был хаҡта уйлай-уйлай башым ҡатты. Ике фекер борсой. Әллә ысын яҙыусы булам, әллә юҡ бит әле? Ҙур әҙәбиәт донъяһының алтын ишеген бәләкәй генә ҡулың менән, үҙеңде әллә кемгә һанап, исем-фамилия шәрифтәреңде үҙгәртә-үҙгәртә асыу оҡшаймы: "ҡылтымҡай", "осонҡос" бәндә булып сыҡмайыммы? Быныһы – бер. Икенсеһе шул: был фамилияның, гәрсә мосолман халҡының ҡолаҡ барабанында сәйер яңғыраһа ла, фарсы һәм ғәрәп телдәре ҡатнашлығында яһалған оҙон этимологик тарихы бар. Тәрән тамырлы ҡәүем-нәҫелдәнмен. Был алтын олон тарихи ботаҡтар ебәрә. Ботаҡтар шаулап япраҡ яра. Мин шул япраҡтарҙың береһе булып елберләмәктәмен.

Ошо хаҡта һөйләп бирҙем Ғәли ағайға. Үҙгәртеүҙәр тураһындағы тәҡдимдәрҙе ҡабул итмәүемде ул хуп күрҙе. Кескәй генә инештең дә һуңғы сәфәре диңгеҙ булған кеүек, әлеге "Поварисов" һүҙенә бәйле рәүештә, беҙ уның менән киң тел даръяһына инеп киттек. Баҡһаң, Ғәли ағай ҙа ғәрәп, фарсы телен "нисауа" ғына белә икән. Ул ғына ла түгел, фекер алыша торғас, беҙ төрки телдәр (улар егерменән артыҡ) донъяһына инеп киттек. Һуғыштан һуң миңә ҡырғыҙ балаларын бер йыл үҙ телдәрендә уҡытырға тура килде. Башыңа төшһә, башмаҡсы булаһың, ти. Үҙем дә уҡыным. 1951 йылда ҡулға шәһаҙәтнамә (аттестат) алыу бәхетенә ирештем. Үзбәксә уҡып. Был хаҡта ла һөйләгәс, Ғәли ағай телен шартлатып ҡуйҙы.

Төрки телдәр,– эйе, Урал-Алтай телдәренең бер тармағы. Алтай ғаиләһенә төрки-монгол, тунгус-манчежур, корей, япон телдәре лә инә. Мин инде быны тарих-филология факультетын ҡыҙыл диплом (маҡтанып әйтеү түгел) менән тамамлаусы булараҡ белә инем. Һин белгәнде мин күптән киптереп сөйгә элгән, тигәндәй, Ғәли Ғизетдин улы, кем әйтмешләй, күптән һағыҙ урынына сәйнәгән икән инде быларҙы. Ул хатта ҡытай телен дә алтай теле тармағына индермәксе. Ҙур тел ғалимы һымаҡ фекер йөрөтә.

Һөйләшә торғас, беҙ ҡәрҙәш булмаған телдәрҙең дә капҡаһын ҡаҡҡылай башланыҡ. Ғәли ағай мадьяр (венгр) телен дә яҡшы белә икән. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң миңә Венгрияла ике йыл хеҙмәт итергә тура килде. Мин дә өйрәндем мадьяр телен. Сомбатель тигән ҡалала йәшәнек. Тәржемәсе кәрәк булғанда, алып та китәләр ине үҙемде. Белеү ҡеүәһе нисек булғандыр, шулай ҙа был сит телдә, вата-емерә булһа ла, фекеремде әйтеп бирә ала инем. Тик грамматикаһын белмәйем. Ә бына Ғәли ағай, әйткәндәй, был телде лә төбө-тамыры менән өйрәнгән. Килештәре тураһында ла һөйләй, ҡылымдарын да иҫкә ала, мадьяр теленең синонимдарға (мәғәнәләш һүҙҙәргә) бай булыуын да әйтә. Быны ул мадьярҙарҙың ҡасандыр Урал буйҙарында башҡорт теле менән аралашыуы, бер ваҡыт бынан күсеп китеүҙәре менән аңлата. Бишенсе быуат урталарында Атилланың хәҙерге венгр ерендә үҙ урҙаһын булдырыуы хаҡында ла һөйләне. Тимәк, мадьярҙар боронғо төрки халыҡтар – һундар менән дә аралашҡан. Мадьярҙар теле менән төрки телдең яҡын булыуы шунан килә. Ҡытай теленең генә түгел, мадьяр теленең дә төрки телдәргә ҡәрҙәш булырға тейешлеге тураһында бик үҙенсәлекле миҫалдар килтерҙе Ғәли ағай.

Был – әле лә бәхәсле мәсьәлә. Уны айырым шәхестәр генә хәл итмәй. Нисек кенә булмаһын, Ғәли ағайҙың тел тамырҙары ҡәрҙәшлеге тураһында төплө фекер йөрөтөүе һоҡландыра ине мине. Ниңә яҙам әле мин был хаҡта? Ысынында иһә Ғәли Ибраһимов тел ғалимы түгел ине бит, яҙыусы ине. Ләкин һис тә улай уйларға ярамай. Бына нимә ти Гёте: “Кто не знает чужих языков, не имеет понятия и о своем”. Вольтер һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ: “Знать сто языков – значит иметь много ключей к одному замку”. Башҡорт теле – бай тел. Башҡа телдәргә сағыштырып ҡарамаһаң, уның ысынлап та шулай бай икәнлеген белеп булмай бит. Тел ғалимы ғына түгел, яҙыусы кеше лә бит был хаҡта ныҡ уйланырға тейеш.

Ижадының таңында Ғәли Ибраһимов “Кинйә” кеүек ҙур тарихи роман яҙыу тураһында уйламағандыр. Уйлап башлаһа ла, ул, минеңсә, осланмаған кәбән шикеллерәк булыр ине. Ундай роман-эпопея яҙыр өсөн тәрән белем, фекер йөрөтөү офоҡтарының киңлеге, күркәм эстетик зауыҡ, күп телдәр белеү мотлаҡ. Яҙыусының уға ҡәҙәр ижад иткән очерк, хикәйә, повесть, романдары “Кинйә” өсөн әҙерлек осоро булғандыр. Быға тиклем ул, минеңсә, стиль эволюцияһы ла кисерҙе.

Был романында стиль төҙөклөгө, ысынлап та, башҡа әҫәрҙәренә ҡарағанда юғарыраҡ кимәлдә. Һөйләмдәрҙе уратып-суратып, тышҡы эффектлылыҡ өсөн түгел, йылға буйы оҙон итеп төҙөмәй, башҡорт теленең эске ҡанундарын иҫкә алып, уларҙы халыҡ телмәренә яраҡлаштырырға тырыша. Ләкин улар “примитив” түгелдәр – сәнғәт талаптарына яуап бирерлек. Һүҙлек хазинаһы ла шөкөр ҡылырлыҡ. Һүҙҙәр, һүрәтләү-тасуирлау саралары, мәҡәл-әйтемдәр, фразеологик әйтемдәр донъяһына инеп китһәң, уларҙың әҫәр туҡымаһына яраҡлаштырылып нағышланғанын тойоп шатланаһың.

Әлеге беренсе әҫәрем “Яратам һине, тормош!”ҡа Б. Бикбай, С. Агиш, Н. Мусин, Ғ. Хөсәйенов, М. Ғәйнуллин һ.б. остаздар фатиха биргәйне. Ә бына Ғәли Ибраһимовтың, киң күңелле кеше булараҡ, файҙаһы айырыуса ныҡ тейҙе. М. Горькийҙың әҫәр өсөн өс төрлө үҙенсәлек (тема һайлау, сюжет ҡора белеү, тел байлығы) кәрәк булыу тураһында әйткән һүҙҙәре миңә билдәле ине инде. Шулар өҫтөнә Ғәли ағай йәнә өстө әйтте: талант, белем, хеҙмәт. Былар ҙан тыш тағы ла әллә ниндәйҙәре бар бит әле уның: һүҙ-һүрәт (образлылыҡ), мәғәнә-фекер (идеялылыҡ), хис-тойғо (эмоциональлек).

Дөрөҫ, фекер алышҡанда Ғәли Ғизетдин улының бәғзе кәңәштәре менән килешеп тә бөтмәй торғайным. Ҡайһы бер яҙыусыла һүҙ-һүрәт, фекер, хис-тойғоноң өсөһө лә “аҡһай”. Шуларҙың икеһе булып, береһе генә етешмәһә лә йәки артыҡ булһа ла, әҫәрҙең сәнғәтлелек дәрәжәһе кәмей. “Яратам һине, тормош!”та хис-тойғоноң өҫтөнлөк алыуын әйтте ул. Хәйер, ул осорҙа башҡалар ҙа хис-тойғоно өнәп еткермәй ине. Төшөнкөлөккә бирелеү бәләһе, йәнәһе. Социалистик реализм күңел йомшаҡлығы менән килешмәй, имеш.

Дөрөҫлөк күп осраҡта бәхәстә тыуа. Беҙҙең бәхәс ижади дуҫлығыбыҙҙы һәр ваҡыт нығытып торҙо. Башҡорт дәүләт университетына эшкә күскәс (1960 йыл), мин “Тел шишмәһе” тигән түңәрәккә етәкселек итә башланым. Һәр түңәрәк ултырышына берәй яҙыусыны саҡырабыҙ. Шиғыр, хикәйә, пьеса тикшереүҙәр, һүҙ сәнғәте тураһында ҡыҙыҡлы, мәғәнәле фекер алышыуҙар була. Ғәли ағайҙы йыл да саҡыра торғайным. Бигерәк тә беренсе курстар менән осрашыу ваҡытына. Сөнки үҙҙәре әҫәр яҙырға тип еңһыҙғанып килә, ә үҙҙәре телдең атаһы булған грамматикаға, әсәһе булған этимологияға ҡаш йыйырып ҡарай. Ғәли ағай телдең эске сере, хосусиәте, байлығы, аһәңе тураһында һөйләп шаҡ ҡатыра студенттарҙы. Тел гәүһәрҙәре айырым һүҙҙәрҙә генә түгел, төрлө грамматик сараларҙа, өн-ауаздарҙа ла булыуы хаҡында бик аңлайышлы, мәғәнәле, ябай итеп һөйләй торғайны ул. Уныңса, тел фәнен яҙыусы тел академигы кимәлендә белергә тейеш. Уның шулай икәнлеген “Кинйә” романында раҫланы әҙип.

“Кинйә” өс романдан торорға, йәғни трилогия булырға тейеш ине. Трилогия яҙыу өсөн ҙур түҙемлек, ихтыяр көсө, тәрән белем, аң-даирә, эстетик идеал киңлеге, шуларға оҡшаш күп төрлө аҫыл сифаттар кәрәк. Быны мин үҙ елкәмдә татып белдем. Етмеш йәшем тулып үткәс, Аллаға шөкөр, өс романдан (“Пәйғәмбәр таңы”, “Күктең етенсе ҡатында”, “Ожмахҡа бер аҙым”) торған трилогия-эпопея яҙҙым. Быға тиклем донъя күргән романым, унлап повесым ошо трилогиям өсөн әҙерлек осоро булғандыр. Минән был ҙур тарихи романдарҙы ниңә йәш сағымда яҙмауым тураһында ла һоранылар. Миңә “йәш яҙыусы” тигән исем күтәреп йөрөргә тура килмәне. Фән донъяһына ла, әҙәбиәт майҙанына ла “ҡартайғас” аяҡ баҫтым. Әгәр иртәрәк башлаһам, был романдарҙың кәбәнен ослағанда һәнәгем һынып ҡалыр ине барыбер. Тупаҫ булһа ла, әйтәйем: ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған һымаҡ, кеше тураһында яҙғанда, ниңә әле был гел үҙен килтереп ҡыҫтыра, тимәгеҙ. Ижад кәбәнебеҙҙе трилогия яҙып ослау яғынан беҙ Ғәли ағай менән оҡшаш икәнбеҙ ҙә баһа. Дөрөҫ, ғүмер ҡояшы иртәрәк һүнгәнлектән, Ғәли ағай трилогияһын тамамлай алманы. Әммә кирбес ҡалынлығы “Кинйә” уның был ауыр жанрҙа эшләү мөмкинлеген барыбер раҫлай алды. Ә ҡалғандары уның күңелендә бөткәйне инде.

Хәйер, уға ҡарата уйламайыраҡ тәнҡит уты ысҡындырыусылар ҙа булды. Хәҙерге замандың ялҡау кешеләре ундай ҡалын романдарҙы барыбер уҡымай, йәнәһе. Ләкин был аҫыл әҫәрҙәр ялҡауҙар өсөн яҙылмай. Л. Н. Толстой “Война и мир” эпопеяһын, М. Ауэзов “Абай”ҙы ялҡауҙар өсөн яҙмаған бит. Улар әҙәбиәт майҙанында һәйкәлде шул әҫәрҙәре менән ҡуйҙы. “Кинйә” күтәрҙе Ғәли Ибраһимовты. Шул өс романым донъя күргәс кенә, мин дә үҙемде ысын яҙыусы итеп тойҙом. Ә бит уҡыйҙар, Аллаға шөкөр!

Юлға сыҡһаң, юлдашың үҙеңә ҡарағанда ла яҡшыраҡ булһын, тиҙәр. Ғәли Ғизетдин улы сәфәр ваҡытында халыҡтың ошо әйтеменә лә тоғролоҡло була торғайны. Уларҙың бөтәһен дә мөбәрәк тәсбих төймәләреләй теҙеп сығып булмай. Береһен генә хәтерләйек.

Бер ваҡыт Башҡортостан Яҙыусылар союзы Илеш районында әҙәби лекторий ойошторорға булды. Беҙҙең төп маҡсат – халыҡҡа рухи аҙыҡ биреү, уларҙың эстетик зауығын үҫтереү. Тыумышым шул райондан булғанлыҡтан, мине етәксе итеп ҡуйҙылар. Бер барғанда Роберт Байымов башҡорт әҙәбиәтенең торошо тураһында шаҡтай эстәлекле, ҡыҙыҡлы сығыш яһаны. Унан һуң Ғәли ағай “Кинйә” романының яҙылыу тарихы тураһында һөйләне. Ҙур зал шығырым тулы ине. Тел, әҙәбиәт уҡытыусылары, район зыялылары, етәкселәр... тағы ла әллә кемдәр бар. Әҫәр буйынса фекер алышыу оҙаҡҡа һуҙылды һәм ул шаҡтай йәнле үтте, файҙалы булды. Иң алда прокурор иптәш ултыра. Ул шундай һорау бирҙе:

– Иптәш Ибраһимов, һеҙ бынан ике быуат элек булған хәл-ваҡиғалар тураһында яҙаһығыҙ, әллә күпме кешеләрҙе бер-береһе менән һөйләштерәһегеҙ, уларҙы тыңлап тормағанһығыҙ бит, тимәк, алдашып яҙаһығыҙ, дөрөҫ әйтәмме?

Зал тулҡынланып алды, кемдер көлөп ебәрҙе. Был, беренсенән, беҙгә, яҙыусыларға, әҙәби әҫәр яҙыуҙың серҙәрен халыҡҡа ныҡлап, тәрәнерәк аңлатырға кәрәклекте иҫкәртте, икенсенән, “Кинйә” кеүек кирбес ҡалынлығы романдарҙы ла, хатта сәнғәтсә эшләнелеш мәсьәләһен аңлап бөтөрмәһә лә, барыбер уҡыйҙар икәнлекте аңларға ярҙам итте. Ысынлап та, “Кинйә”не ике йөҙләп кешенең бөтәһе лә уҡыған булып сыҡты. Бер-бер артлы авторға бирелгән һорауҙар ҙа уның шулай икәнлеген иҫбат итте.

Осрашыу башта район үҙәгендә булды. Унан һуң беҙ “Сигнал” колхозына киттек. Иң әүәл ҡунаҡханаға урынлаштырҙылар. Ул ваҡытта мин Өлкә комитет һәм Яҙыусылар союзы ҡушыуы буйынса Илеш халҡы тураһында китап яҙырға материал йыя торғайным. Ауылдарға килеп төшһәк, тиҙерәк бригадаға, фермаға, механизаторҙар янына, мәктәпкә һәм башҡа урындарға ашығам. Был

юлы ла шулай иттем. Ҡунаҡхана хужабикәһе сәй-мәй әҙерләй, ә мин: “Ғәли ағай, һин ҡараштыр инде”,– тинем дә фермаға саптым. Ике-өс сәғәт самаһы йөрөлдө: һорау, төпсөнөү, яҙыу... Эш, эш, эш... Яҙыусы-ҡунаҡтарым да, ашау-эсеү ҙә...– бөтәһе лә онотолған. Унда Ғәли Ибраһимов, Роберт Байымовтан башҡа бүтән шағирҙар ҙа бар ине бит әле. Мине (етәкселәрен) ҡайҙалыр “ҡасып йөрөүҙә” ғәйепләргә мөмкиндәр. Шулай ҙа ундай аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡманы. Ҡайтһам, көлөшә-көлөшә, матур ғына сәй эсеп ултыралар. Ғәли ағай быларҙы ҡыҫтап ашата. Мине күреү менән, һалдаттарса туп-тура баҫып честь бирҙе: “Иптәш бригадир, яҙыусы-ҡунаҡтар сәй эсә, киске осрашыу буласағын иҫкә алып, мәйҙән баш тарттыҡ, тәртип боҙоусы юҡ. Докладывает бригадир ярҙамсыһы Ғәли Ғизетдин улы Ибраһимов”.

Ғәли ағайҙың был шаянлығынан беҙ көлөшөп алдыҡ. Яҙыусылар – мәргән, йор һүҙле кешеләр. Миңә әллә ниндәй атамалар тағып бөтөрҙөләр: “етәксе”, “староста”, “старшина”... Инде килеп, “бригадир” тигән мәрәкә һүҙҙе килтереп һылағандар.

Бер аҙ ял итеп алғас, мәҙәниәт йортона киске осрашыуға киттек. Кисә шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылды. Ҡунаҡханаға сәғәт берҙәрҙә генә ҡайттыҡ. Ашау-эсеү. Күңел асыу. Мәҙәктәр һөйләү. Ләкин мәрәкәләр арьяғында беҙҙе бер ҡәтғи ысынбарлыҡ та көтөп тора икән: Роберт Байымов бөгөн Башҡорт дәүләт университетында студенттарҙан имтихан алырға тейеш. Уға сәғәт туғыҙға ҡайтып етеү мотлаҡ. Тик уға ял итеү өсөн ни бары ике сәғәт ваҡыт ҡалған. Кем уятасаҡ? Мин йоҡламаясағымды әйттем. Ләкин йәш яғынан иң өлкән кешебеҙ Ғәли ағай быға ҡаршы төштө: “Һин, Суфиян, күп йөрөнөң, күп эшләнең, алйығанһың, күҙҙәрең йомолоп бара, үҙең дә йоҡлап китеп, Робертты харап итеүең бар”,– тип мине ял бүлмәһенә ҡыуҙы.

Барыбер рәхәтләнеп йоҡлап булманы. Аҙ ғына серем итеп алғас, һикереп торһам, Ғәли ағай Роберт өсөн яңы сәй ҡайнатып йөрөй. “Ят, ят, Суфиян, Робертты уятыу өсөн ярты сәғәт ваҡыт бар әле”,– ти. Миңә ҡыйын булып китте: “Ниңә әле беҙ, йәшерәктәр, иң өлкән кешебеҙҙе ял иттермәйбеҙ?” Был Ғәли Ғизетдин улына ышанысыбыҙ ҙур булғанғалыр, бәлки.

Икенсе көндө осрашыу мәктәптә лә булды. Ғәли ағай менән колхоз ерҙәрен йәнә әйләнеп сыҡтыҡ. Беҙҙең менән партком секретары йөрөнө. Унан һуң барлыҡ етәкселәр менән махсус һөйләшеү ойошторҙоҡ. Ғәли ағайҙы бик яраттылар. Ул хатта ошонда ҡабат килеп бер ай йәшәргә, бер повесть яҙырға теләген белдерҙе.

Ғәли Ибраһимов кешелекле, ижтиһадлы, сабыр тәбиғәтле, хеҙмәт һөйөүсе шәхес ине. Ул беҙҙең күңелдәрҙә фәҡәт яҡшы хис-тойғолар ҡалдырып китте. Ул үҙ ихтыяжы өсөн генә түгел, бөтә башҡорт әҙәбиәте үҫешен ҡайғыртып йәшәне. “Кинйә” кеүек романдың ижад ителеүе шуға ла бәйләнгәндер, бәлки.

Һүҙҙе умырзая сәскәһенән башлағайныҡ. Шуның менән теүәлләйек әле. Был сәскәнең төрлө милләттә төрлө аталышы булыуы хаҡында ла әйтелде. Уның эске асылы күп төрлө әйберҙәргә сағыштырыла. “Һәр сағыштырыу аҡһай”,– тигән мәҡәл дә бар немец халҡында. “Һәр сағыштырыу дәлилләү була алмай әле”,– ти француз. Умырзая сәскәһенең эске хозурлығын сағылдырыу йәһәтенән ҡулланылған сағыштырыуҙарҙа аҡһауҙың дәлилләү була алмау үҙенсәлектәре лә барҙыр. Мин әле француздарҙың ҡар бырауы тигәненә туҡталмаҡ булам. Ысынлап та, ҡарҙы бырaулап сығып балҡый бит ул. Ғәли Ибраһимов беренсе шиғырын тап шул ваҡытта – умырзая сәскә атҡанда яҙа. Шуға күрә уның үҙен дә умырзая менән сағыштырғым килә. Яҙғы ҡарҙы бырaулап-тишеп сығып балҡыған матур һәм батыр умырзая менән!

# ҮТКӘНДӘРГӘ ҺӘМ БӨГӨНГӨГӘ БЕР ҠАРАШ

*(Башҡорт дәүләт академия драма театрына – 90 йыл)*

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бөгөн – Рәсәйҙә иң ҙур, бай тарихлы, үҙ йөҙө булған милли театр коллективтарының береһе. Уға 1919 йылда бөйөк шәхес Вәлиулла Мортазин-Иманский нигеҙ һала.

Тәүге актерҙары һәм режиссерҙары, драматургтары һәм рәссамдары – башлыса төрлө ҡатлам кешеләре – башҡорт халҡы тарихында ысын мәғәнәһендә иң беренсе профессиональ театр ойоштороу идеяһы тирәһендә бергә туплана. Театрыбыҙ – милли мәҙәниәтебеҙ тарихы ла. Ул милли сәхнә сәнғәтенә генә түгел, ә республикала сәнғәттең башҡа төрҙәре: вокал, бейеү, профессиональ музыканың үҫеш алыуына ла булышлыҡ итә.

1920 йылда уҡ йәш труппаның спектаклдәре бик күп тамашасы йыя. Репертуарҙа М. Фәйзиҙең «Ғәлиәбаныу», Д. Юлтыйҙың «Ҡарағол», Х. Ибраһимовтың «Башмағым», М. Буранғоловтың «Ашҡаҙар» һәм башҡа әҫәрҙәр була.

1922 йылда, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килгәс, театр труппаһы яңы баш ҡалаға – Өфөгә күсә, Өфө дәүләт күргәҙмә театры актерҙары менән берләшкәс, ныҡ ҡына тулылана. Үҙ яҙмыштарын ғүмерлеккә башҡорт сәхнәһе менән бәйләүсе тәүге актерҙар: Б. Йосопова, Т. Рәшитова, Ғ. Ушанов, Ғ. Ҡарамышев, Ә. Зөбәйеров, Ғ. Минһажев, Ғ. Саттаров, Х. Бохарский, Е. Сыртланова-Шляхтина, Ф. Сәмитова; драматургтар: Х. Ибраһимов, М. Буранғолов, А. Таһиров һәм башҡалар.

1921 йылда сәхнәнән дәүләт теле статусын алған башҡорт теле яңғырай башлай, ә әҙәби башҡорт теленә театр 30-сы йылдарға етәрәк күсә. 1924 йылда Башҡорт күсмә театры, йәғни төп труппа янындағы эйәрсән төркөм барлыҡҡа килә, уның эшмәкәрлеге, асылда, мәҙәни-ағартыу йүнәлешендә була.

Тәүге миҙгелдәрҙә театрҙы һәм тамашасыны халыҡтың үткәне, ҡаһарман улдарының бөйөк эштәре хаҡында тарихи сюжеттар ҡыҙыҡһындыра. Бындай ынтылыштар нигеҙендә 30–40-сы йылдарҙа яңы сәхнә стиле – романтик йүнәлеш төҫмөрләнә. 1927 һәм 30-сы йылдарҙа иң оло ваҡиға – Мәскәүҙәге тәүге гастролдәр.

Башҡорт театрының яңы йүнәлешкә, күп яҡлы ижад тарафтарына боролоуында тарихи шәхес, режиссер Мәкәрим Мәһәҙиевтың роле ҙур була (1901 – 1938).

Артабан коллективҡа артистар ҡеүәтле ағым булып килеп ҡушыла. Төрлө йылдарҙа А. Мөбәрәков, Б. Имашев, Ғ. Шамуҡов, З. Бикбулатова, Ғ. Туҡаев, Р. Янбулатова, Ә. Садиҡова, Р. Сыртланов, Р. Фәйзи, С. Сәйетов, Ғ. Сөләймәнов, Х. Ҡудашев, Т. Бикташева һәм башҡа бик күптәр эш башлай.

У. Шекспирҙың «Отелло» трагедияһы театрҙа 1935, 1945, 1954 йылдарҙа ҡуйыла. Донъя классикаһының бөйөк ролен – Отеллоны уйнау бәхете М. Мәһәҙиевҡа, А. Мөбәрәковҡа, Р. Сыртлановҡа тейә.

1935 йылда театр 15 йыллыҡ юбилейын билдәләй һәм «академия театры» исемен ала. Ҡотлау телеграммаларының береһенә бөйөк Всеволод Мейерхольд ҡул ҡуя. Ил тарихындағы, халыҡ тормошондағы 30-сы, 40-сы йылдар ваҡиғаларының береһе лә театрҙы урап үтмәй. 1954 йылда театр юллауы, республика етәкселеге ярҙамы менән Мәскәүҙә А.В. Луначарский исемендәге ГИТИС-та башҡорт студияһы асыла.

***1956 – 1971** йылдарҙа театрҙы мәшһүр режиссер Вәли Ғәлимов етәкләй **(1908 – 1994)**; ошо уҡ йылдарҙа һоҡланғыс талант эйәһе Шәүрә Мортазинаның **(1925 – 2002)**, рәссам Ғәлиә Имашеваның **(1914 – 1995)**, тағы бик күптәрҙең сағыу һәләте асыла.*

***1971** йылда театрға Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры М. Ғафури исеме бирелә.*

***1971 – 1981** йылдарҙа коллектив менән Лек Вәлиев етәкселек итә. Драматург Нәжиб Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша» пьесаһы буйынса Л. Вәлиев сәхнәләштергән спектакль 1986 йылда Сирияла Ғәрәп илдәре драма театрҙарының X халыҡ-ара фестивалендә ҡатнаша.*

***1981 – 1996** йылдарҙа башҡорт сәхнәһенең рухи бейеклеген Рифҡәт Исрафилов ҡуйған спектаклдәр сағылдыра: «Ташлама утты, Прометей!», «Яҙмыштан уҙмыш бар» (М. Кәрим әҫәрҙәре буйынса); «Апалы-һеңлеле өсәү» (А. Чехов); «Бибинур, ах, Бибинур!» (Ф. Бүләков) һ. б.*

***1996-1997** йылдарҙа коллектив үҙенең абруйлы артисткаһы Гөлли Мөбәрәкова ҡулы аҫтында эшләй.*

***1997-1998** йылдарҙа художество етәксеһе Азат Нәҙерғолов була.*

*Яңы быуатты **(2000 йылды)** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры яңыртылған, заманса бинала ҡаршылай, БР Президенты М.Ғ. Рәхимов Указы менән театрҙа күп функциялы дирекция булдырыла. Генераль директор булып мәҙәниәт министры урынбаҫары Гөлдәр Моратова эшләй, ә ижади процесс менән күренекле актер Хөрмәтулла Үтәшев етәкселек итә. Театр режиссерҙарҙы (И. Ғиләжев, Н. Абдыҡадыров, Ф. Бикчәнтәев, М. Рабинович һәм башҡалар) саҡырыу юлы менән эшләй.*

***2003** йылда Рәсәй театр сәнғәте академияһын тамамлап, режиссер һөнәренә эйә булып тыуған коллективына Айрат Абушахманов менән Рөстәм Хәкимов ҡайта.*

***2005** йылда баш режиссер вазифаһына Айрат Абушахманов тәғәйенләнә.*

2000 йылдар башында кисерелгән ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, театр бөгөн үҙ йөҙөн, традицияларын һаҡлап ҡына ҡалмай – уларҙы тағы ла байытып, заманса сәхнә теле, яңы алымдар эҙләү юлында. Быға Рәсәй театр сәнғәте академияһын тамамлап ҡайтҡан йәш көстәр булышлыҡ итте.

Донъя классикаһына, милли драматургияның, халыҡ ижадының иң аҫыл өлгөләренә мөрәжәғәт итеп, уларҙы заманса яңғыратырға ынтылыу – бөгөн бөтә ил театрҙарында киң таралған тенденция. Тиҫтә йылдар буйы үҙ сиратын көткән бөйөк «Урал батыр» эпосы сәхнә күрҙе (Ғ.Шафиҡов, Р. Хәкимов). Милли музыка өлгөһө Б.Бикбай һәм З. Исмәғилевтың «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһының драма сәхнәһендә ҡуйылыуы ла күркәм бер күренеш булды. «Ҡоҙаса» – баш режиссерҙың театрҙың иң мөһим традицияларына тоғро ҡалыуына ишара, икенсенән, труппаның ижад мөмкинлектәрен сағылдыра. Өсөнсөнән, бер нисә быуын тамашасы зауығын ҡәнәғәтләндерерҙәй тормошсан, юморға бай, оптимистик тамаша булыуы менән репертуарҙа үҙ урынын алды.

Туфан Миңнуллиндың “Мулла” драматик хикәйәһенең сәхнә күреүе (режиссеры А.Абушахманов) республикабыҙҙың мәҙәни тормошонда айырым бер ваҡиға булды. Дини-тәрбиәүи темаға яҙылған, замандың сетерекле проблемаларын күтәргән спектакль художестволы сиселеше, сәхнә алымдары, оптимистик идеяһы, теле, тәрән фекере менән театрҙың замандаштарына сираттағы әйтер һүҙе булараҡ яңғыраны.

Һуңғы йылдарҙа театр ҡатнашҡан төрлө кимәлдәге форум йә фестивалдәргә күҙ һалайыҡ. Ҡазан ҡалаһында “Науруз” халыҡ-ара фестивалендә “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәре буйынса ҡуйылған спектакль юғары баһаланды, ә режиссер Айрат Абушахманов “Режиссер дебюты” призына лайыҡ булды. Шулай уҡ театр Истамбул ҡалаһында (Төркиә) асыҡ һауала уҙғарылған “Ялан-театр” халыҡ-ара фестивалендә сығыш яһаны, ә 2006 йылда “Ҡоҙаса” музыкаль комедияһы менән ошонда уҡ (Төркиәлә) уҙған “Башҡортостан көндәре”ндә ҡатнашты. 2005 йылдың көҙөндә уҙған “Танһыҡ яр” халыҡ-ара фестивалендә “Сыңғыҙхандың һуңғы төйәге” (Н. Абдыҡадыров) спектакле иң яҡшы тамаша тип билдәләнде.

2008 йылда май айында М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә Ҡытай Халыҡ Республикаһынан Шанхай драма сәнғәте үҙәге артистары сығыш яһаны. Ә беҙҙең театр, үҙ сиратында, “Ҡоҙаса” музыкаль комедияһы менән Ҡытайға – Шанхай ҡалаһына ошо уҡ йылдың июнь айында барҙы.

Яңы спектаклдәре менән тыуған республиканың ҡала һәм ауылдары тамашасыһын даими таныштырып тороуҙы театр үҙенең иң изге бурысы тип һанай. Баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә, Татарстан Республикаһында, Силәбе, Ҡурған өлкәләрендә, Екатеринбург, Яр Саллы ҡалаларында сығыштар һәр ваҡыт булып тора.

Театр труппаһында бөгөн тәжрибәле сәхнә оҫталары менән бергә М.С. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһының башҡорт студияһында уҡып ҡайтҡан, шулай уҡ З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаған йәштәр эшләй.

**Рәмилә ЙӘҺҮҘИНА.**

## «Ағиҙел»гә хаттар килә

### Мансур Ибраһимов исеме мәңгеләштерелде

2007 йылдың 12 июлендә Учалы районы Мансур ауылында шәжәрә байрамы уҙғарылғайны. Ул ауылдан йыраҡ түгел ҡайынлыҡтың йәшел үлән, сәскәләр менән ҡапланған, хуш еҫле матур аҡланында үтте. Радиолаштырылған сәхнә әҙерләнгән, эскәмйәләр ҡуйылған, тирмә ҡоролған, күсмә сауҙа эшләй, ҡаҙандарҙа итле аш бешә.

Байрамға кеше күп йыйылған. Учалы ҡалаһынан, Өфөнән байтаҡ ауылдаштар килгән. Йылдар буйы осрашмаған туған-тыумасалар байрам башланғансы уҡ бер-береһе менән күрешеп, шатлыҡ кисерә, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Ауылдың тарихы, уға нигеҙ һалыусы Мансур Ибраһимов тураһында минең “Ағиҙел” журналында донъя күргән мәҡәләм кешеләргә ҙур тәьҫир яһаны. Улар өсөн был көтөлмәгән асыш ине.

Мансур Ибраһимов – императрица Екатерина II тарафынан ойошторолған яңы закон проекттары әҙерләү комиссияһының депутаты ла. Батшабикә указында ул документ былай тип аталған: “Комиссия о сочинении нового




*Мансур Ибраһимовҡа ҡуйылған гранит таш янында автор балалар менән.*

уложения”. Комиссияға Рәсәйҙең иң күренекле кешеләренән 564 депутат һайланып, шуларҙан 33-ө – Ырымбур губернаһынан. (1865 йылға тиклем Башҡортостан ошо губернаға ҡараған – **С.Й**.)

Комиссия 1767 йылда Мәскәүҙә, Кремлдең Грановитая палатаһында, 1768 йылда Санкт-Петербургта Ҡышҡы һарайҙа эш башҡарған. 1768 йылдың аҙағында Төркиә менән һуғыш башланғас, хәрби депутаттарҙы һуғышҡа оҙатып, башҡаларын өйҙәренә таратҡандар.

Екатерина II указы менән һәр депутатҡа алтын сылбырға тағылмалы алтын миҙал бүләк ителгән: “Дабы потомки узнать могли какому великому делу они участниками были”.

Депутаттар әҙерләгән проекттар нигеҙендә һуңыраҡ байтаҡ закондар (указдар) ҡабул ителгән. Шуларҙың мосолман халыҡтары өсөн иң әһәмиәтлеһе – 1788 йылда ҡабул ителгән Ырымбур мосолмандарының Өфө диниә назаратын ойоштороу (Оренбургское магометанское духовное собрание в Уфе) тураһында. Указ ислам диненә ҡаршы саралар уҙғарыуҙы тыйған, дин әһелдәренең хәлен яҡшыртҡан. Муллаларҙы мөфтөй указы менән генә тәғәйенләргә рөхсәт ителгән, яңы мәсеттәр һалынған, башланғыс дини мәктәптәрҙең һаны артҡан.

1828 йылдан башлап муллаларға яңы тыуған балаларҙы, уларға исем ҡушыу, никахҡа инеү, үлем осраҡтарын теркәү бурыстары йөкмәтелгән. 1828–1919 йылдарҙа тыуған кешеләрҙең йәше тураһындағы мәғлүмәттәрҙе Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивында һаҡланған ошондай документтарҙан табырға мөмкин. Мосолман руханиҙары ҡазый (судья) ролен дә башҡарған. Уларҙың әхлаҡи ғөрөф-ғәҙәт, йолаларҙы һаҡлау, эскелек, тәмәке тартыу кеүек алама ғәҙәттәргә ҡаршы эшмәкәрлеген дә билдәләргә кәрәк. Үлгән кешеләрҙе һуңғы юлға оҙатыу йолаһы ла руханиҙарҙың ҡатнашлығында башҡарылған.

Шәжәрә байрамында ҡатнашыусылар Мансур Ибраһимовтың исемен мәңгеләштереү тураһында ла һүҙ ҡуҙғатты. Мансур ауыл Советы хакимиәте башлығы В. Хәлитов был мәсьәләне хәл итергә һүҙ бирҙе һәм вәғәҙәһен намыҫ менән үтәп сыҡты. Ул мәктәп эргәһендә Мансур ташынан – граниттан бик матур стелла ҡуйҙырҙы (бейеклеге 2,5м, киңлеге 1 м). Стеллаға гранит таҡта беркетелгән. Уға ошондай һүҙҙәр яҙылған:

*“Мансур Ибраһимов, 1732 – 1816.*
*Ауылъа нигеҙ һалыусы,*
*Екатерина II-нең закон проекттарын әҙерләүсе*
*комиссия депутаты, 1767–1768.*
*Рәхмәтле вариҫтарынан”.*

Шундай һүҙҙәр яҙылған гранит таш Мансур Ибраһимовтың ҡәберенә лә ҡуйылған. 2008 йылдың 12 декабрендә мәктәп эргәһенә ҡуйылған стелланы асыу тантанаһына мине лә саҡырҙылар. Митингыла уҡыусы балалар, уҡытыусылар, ауыл Советы депутаттары, ауыл кешеләре, ҡала һәм район мәғариф идаралығы башлығы А. Мәхийәнов ҡатнашты. В. Хәлитов һәм мин стелланың лентаһын киҫеп, уны ҡаплаған япманы шыуҙырып төшөрҙөк.

Сығыштар, ҡотлауҙар булды. Уҡыусы балалар яҙ еткәс стелланы уратып сәскәләр ултыртасаҡтары, уларға һыу һибеп үҫтерәсәктәре тураһында белдерҙе. Мәктәп музейы яңы экспонаттар менән тулыландырылды. Митинг, бигерәк тә уҡыусы балалар өсөн, онотолмаҫлыҡ байрамға әүерелде. Уны Учалы ҡалаһы телевидениеһы ла күрһәтте.

Мансур ауылында йәшәгән кешеләрҙең күбеһе – Мансур Ибраһимовтың тоҡомдары. Мин улар, шулай уҡ ауылда йәшәгән барлыҡ кешеләр исеменән

арҙаҡлы бабабыҙҙың исемен мәңгеләштереү өсөн ҙур хәстәрлек күрһәткән Варис Хәмитовҡа журнал аша оло рәхмәтемде еткергем килә.

**Сабир ЙЫҺАНШИН,**
**Мансур Ибраһимовтың алтынсы быуын тоҡомо,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**

## Кем икән ул Ҡараһаҡал?

Мине был рецензия-хатты яҙырға Әхмәтгәрәй Йәнғәлиндың «Һуңғы башҡорт ханы йәки Аҡай –Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш» тигән күләмле мәҡәләһе этәрҙе ( «Ағиҙел», 2009, № 9-10). Минеңсә, был бик шәп мәҡәлә: автор хәҡиҡәтте эҙләп бер кем алдында ла бил бөгөп, тәғзим позаһында тормай. Ундай мәҡәләгә ҡаршы килһәң дә, уны ҡеүәтләп яҙһаң да оят түгел.

Минең иғтибарымды ике нәмә йәлеп итте. Беренсенән, автор башҡорт ихтилалдарына (болаларына тип яҙһа, урынлыраҡ булыр ине кеүек) ҡарата яҙған ҡайһы бер тарихсыларҙың рус хөкөмдарҙары политикаһын йомшартып күрһәтеүен тәнҡит итә. Һәм бик урынлы: ҡайһы берәүҙәр башҡорттарҙың юғалтыуҙарын кәметергә, хатта үҙ-ара юғалтыуҙарҙы тигеҙләргә маташа. И. Аҡманов «ике яҡтан да (рустар яғынан да, башҡорттар яғынан да, йәғни) хәтһеҙ ҡорбандар булған» тип яҙа. Ә бит рустарҙың (император ғәскәрҙәренең һ.б.) ҡорбандары һәр ваҡыт сағыштырғыһыҙ дәрәжәлә әҙерәк булған. Ҡараһаҡал болаһы ваҡытында башҡорт яугирҙары хәрби эшкә өйрәнгәнлек, ҡорал-яраҡ йәһәтенән рус регуляр ғәскәрҙәренән бик тә ҡалышыу өҫтәүенә, һандары яғынан да 4-5 тапҡыр әҙерәк булалар. Бында ниндәй «ҡорбандар тигеҙлеге» тураһында һүҙ булырға мөмкин?

Ошо моментты яҡтыртҡас, Ә. Йәнғәлин, башҡорт историографияһында беренселәрҙән булып тиерлек, «нишләп һуң, көстәр тигеҙһеҙлеген, боланың өмөтһөҙлөгөн күрә тороп, башҡорттар яуға сыҡтылар икән» тигән һорауға килтерә (асыҡтан-асыҡ әйтмәй). Һәм, асылда, шуға яуап та таба: Ҡараһаҡал – ҡот осҡос хәтәр авантюрист һәм провокатор булған! Ул ярһыған ҡара төрки халҡын өҫтөртә белгән.

Ә. Йәнғәлин был хаҡта үҙенең нигеҙле фараздарын бәйән итә. Уның фараздарына өҫтәп, мин ул яҙмаған (бәлки, белмәгәндер) ҡайһы бер факттарҙы әйтәһем килә. Ҡараһаҡал башҡорттар араһында ғына түгел, ҡаҙаҡтар һәм алтайҙар араһында ла «болағай, боласы» булып йөрөгән. Уның ысын фамилияһы Краснощеков икән. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ул Мәскәүҙәме, Петербургтамы йәшәгән, ти. Был мәғлүмәттәр алтай телендә Горно-Алтайскиҙа баҫылып сыҡҡан «Алтай кеп-куучындар» (1994) тигән китапта Шона, Шуна тураһындағы риүәйәттәр айҡанлы килтерелә. Шона, ҡаҙаҡса Сона – уның күп һанлы лаҡаптарының береһе. Был хаҡта Ә. Йәнғәлин да яҙа.

Краснощеков, күрәһең, төрки телдәрен һәм ҡайһы бер ислам ҡанундарын да үҙләштергәс, башҡорт, ҡаҙаҡ, алтайҙарҙың еңел ышаныусанлығын да уйлап, үҙен «Аҡ батшаға ҡаршы көрәшеүсе», «кирәмәт эйәһе» итеп күрһәтеп йөрөгән. Уның иҫәбе ике тарафлы булған: бер яҡтан, ул «Аҡ батша» хәрбиҙәре, шымсылары менән дә бәйләнеште өҙмәгән, икенсе яҡтан, әгәр берәй төрки халыҡтың ихтилалы уңышлы булһа, хан булыуҙан да баш тартмаҫ ине. Үҙәк Рәсәйгә ҡайтҡас, Краснощековтың «хеҙмәттәрен» онотмағандар, ләкин герой итеп тә күрһәтмәгәндәр булһа кәрәк.

Уның кеүек авантюристар тарихта осраштырғылай. Боронғо фарсы дүзде «самозванец» Муканна йөҙөн йәшереп, аҡ пәрҙә ябынып йөрөр булған. Ҡараһаҡал да шулай ҡыланған. Кем белә, ул рус шымсылары күрә ҡалһа, танымаһындар тип шулай иткәндер…

Ғөмүмән, дүзделек итеүселәр – мөтәмәһдиҙәр, мөтәнәбиҙәр, мөтәшаһлар боронғо мысыр замандарынан бирле иҫәпләһәң – йөҙҙәрсәләр. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре уңышлы идара иткәндәр, һәләтле хөкөмдар була алғандар һәм уларҙы, хатта, алдауы беленгәс тә, мыҫҡыл итмәгәндәр. Мәҫәлән, серб батшаларының береһе шундай «дүзде»ләрҙән булған. Атаҡлы Григорий Отрепьев та аҡыллы ғына идара иткән, әгәр православныйҙарҙан ҡатын алған булһа (уға тәҡдим итеп ҡарағандар), кем белә, яңы династия башлаусы булыр ине. Ә бына дүзде Пугачевҡа тәүҙән уҡ өмөт йылмаймаған.

Әхмәтгәрәй Йәнғәлин XVIII быуаттағы башҡорттарҙың һандары мәсьәләһенә лә ҡағыла. Петр Беренсенең уңышлы һуғыштары һөҙөмтәһендә бик көсәйеп киткән Рәсәйҙең идарасылары һәм төрлө патриоттары Себерҙе һәм Ҡаҙағстанды колонизациялау пландары, хыялдары менән яна. Тик колонизациялау юлында хәҙер (ике быуат элек татарҙар торған шикелле) башҡорттар тора. Ә. Йәнғәлин мәҡәләһендә лә характерланған Иван Кирилов, Артемий Волынский кеүектәр: «Башҡорттар артыҡ күп, уларҙың һанын кәметергә кәрәк!» – тип оран һала. Шулай итеп, дөрөҫөн генә әйткәндә, наҙанлыҡ ҡараңғылығында ҡалған башҡорт халҡы өҫтөндә дәһшәтле дауыл уйнай башлай. Дошмандар белемле, ҡоралды, мәкерле, хәйләкәр һәм күп һанлы. Башҡорттар белемле идарасыларға бик мохтаж булалар, быны һиҙәләр. Һәм беренсе осраған «белдекле»гә һарылалар…

«Башҡорттар артыҡ күп һанлы» тигән циник һүҙҙәр уйға һала. Мин был хаҡта «Мираҫ» журналында бер яҙған инем инде. Күпме булғандар һуң улар? Күп ҡабатлап тормайынса, шуны ғына әйтәһем килә: ул осорҙа – XVIII быуаттың 30-сы йылдарында башҡорттарҙың һаны ярты миллиондан да кәм булмаған. Был хаҡта яҙған хәҙерге тарихсылар башҡорттарҙың һанын да, уларҙың ҡорбан булғандарының һанын да шаҡтай кәметеп күрһәтә.

Башҡорттарға ҡарата тулы мәғәнәһендә геноцид саралары күрелгән. Ә. Йәнғәлин мәҡәләһенән дә күренә:барса мал-тыуарҙы һуйып-сәнсеп бөтөрөү, торлаҡтарҙы ғына түгел, иген-баҫыуҙарҙы яндырыу, тапатыу һ.б., әсир ҡатын-ҡыҙҙарҙы, балаларҙы һатып таратыу, әсир башҡорттарҙы Ырымбур ҡәлғәһен һалырға, Балтик диңгеҙе буйҙарына һөрөү – былар барыһы ла башҡорттарҙың һанын кәметеү, мөмкин булһа, береһен дә ҡалдырмау өсөн эшләнелгәне көн кеүек асыҡ. Рус империяһына тоғро ҡалған башҡорттар ҙа йыш ҡына язаға дусар ителгән бит!

Башҡорт балаларын баҫтырыуҙа актив ҡатнашҡан һәм хәлде бик яҡшы белгән В. Н. Татищев үҙ осоронда ғына башҡорттарҙың «дүрттән өс өлөшө ҡырылды» тип яҙған. Ә бит башҡорттарҙы ҡырыу В.Н. Татищев вафат булғас та тағы ярты быуат дауам иткән.

Рус ғәскәрҙәренең был хәйерһеҙ эштә күрһәткән ғәйрәттәренә таң ҡалырлыҡ: улар, мәҫәлән, Инйәр буйлап күтәрелеп, һәр ике – Оло һәм Кесе Инйәрҙең сығанаҡтарына ҡәҙәр тауҙарға менеп, башҡорттарҙы эҙәрлекләгәндәр. Ул урындарҙа хәҙерге заманда ла йөрөү хәтәрле. Ғөмүмән, рус ғәскәрҙәре бөтә Көньяҡ Уралдың тау-урмандарын бер ҡат «тарап» сыҡҡандар.

Шуныһы иғтибарға лайыҡлы: ярай әле, әсир башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын һәм балаларын тик (йәки башлыса) татарҙарға (бер әҙәм йәнен бер ат бәйәһенә)

һатҡандар икән. Ихтимал ки, ул ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар үҙҙәре йәки империяға лояль башҡорт башлыҡтары шулай инәлеп үтенгәнгәлер. Хәйер, ҡатын-ҡыҙҙарҙы «охочий» урыҫтарға һатыу ҙа тыйылмаған.

Инде тағы Ҡараһаҡал (рус документтарында ул «Карасакал» тип яҙылған) мәсьәләһенә ҡайтайыҡ. Ни эшләп уның исеме башҡорт фольклорында ыңғай ҡараш тапҡан һуң? Быға иң тәүге яуап шул: сөнки уны яҡындан белеүселәр, ваҡиғаларҙың шаһиттары шунда уҡ ҡырылып, таралып бөткәндәр. Һуңынан уны белеүселәр бик аҙ ҡалған, булғандары ла күп һөйләмәҫкә тырышҡандар. Башҡорт сәсәндәре өсөн ул абстракт «халыҡ яҡлаусыһы» булған, шундай герой халыҡҡа кәрәк.

Икенсенән, Ҡараһаҡал үҙе лә үҙе тураһында, хәҙергесә әйтһәк, героик имидж, ореол тыуҙырырға тырышҡан. Уның тураһында алтай фольклорында, ҡаҙаҡтарҙа ҡалған риүәйәттәр Ҡараһаҡалдың «кирәмәт эйәһе» булып күренергә теләүенә шаһит.

Айыҡ аҡыл менән уйлап ҡарағанда ла Ҡараһаҡалдың хәтәр һәм яман авантюрист булыуы һиҙелә: ул үҙе тураһында төрлө ерҙә төрлөсә һөйләп (Ә. Йәнғәлин мәҡәләһендә был хәл асыҡ яҡтыртылған), башҡорттарға «бына һеҙгә ярҙамға минең ғәскәрем (төрлө һанда, 80000-гәсә) киләсәк» тип алдай. Йә, халыҡ алдында яуаплы булған ысын юлбашсы шулай ҡыланамы ни? Ысын юлбашсы массаларға реаль хәлде аңлатырға тырышыр ине.

Ә. Йәнғәлин шул осорҙағы белдеклерәк, тәжрибәлерәк башҡорт башлыҡтарының Ҡараһаҡалға башта уҡ шикләнеп ҡарауҙары тураһында ышандырырлыҡ факттар килтерә.

Тағы шуны ла әйтергә кәрәк: XX быуаттың 30 – 40-сы йылдарында башҡорт яҙыусылары, фольклористик мотивтарға эйәреп, Ҡараһаҡалды «халыҡ геройы» итеп күрһәтә, һуңыраҡ, тарихи әҙәбиәтте өйрәнеберәк яҙғандары ул осорҙағы башҡорт халыҡ хәрәкәтенең төп юлбашсыһы итеп бөтән кешеләрҙе күрһәтә.

**Рифғәт ӘХМӘТЙӘНОВ,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**
**Бөрө ҡалаһы.**

## Моңһоу көҙ хәтирәләре

Был иҫтәлекте яҙырға тотонғанда, күңелдең болоҡһоуы тәбиғи: сафтар һирәгәйә бара. Замандаштар берәм-берәм мәңгелеккә күсә...

2008 йылдың ноябрь айында яҙыусы һәм журналист, Почет Билдәһе ордены кавалеры, алсаҡ һәм асыҡ күңелле Әмир Сәлимгәрәй улы Гәрәев та беҙҙе ҡалдырып китте. Уны яҡындан белгән, аралашҡан ҡәләмдәштәре өсөн ауыр юғалтыу булды был. Үҙем Әмир һәм Фәниә Гәрәевтарҙың ғаиләһе менән 1955-1956 йылдарҙан уҡ таныш инем.

Тормош юлдашым Ғилемдар Рамазанов “Совет Башҡортостаны”на мөхәррир итеп тәғәйенләнгәндә, улар икеһе лә ошо гәзит редакцияһында эшләй ине. Бербереһенә тартылған ике йәш йөрәктең ҡауышыу юлында етди ҡаршылыҡ бар икән... Тымыҡ океан флотында хеҙмәт итеп ҡайтҡан моряк үҙенән шаҡтай өлкән йәштәге (тупаҫ әйткәндә) ҡатын “тоҙағына эләккән” була. Ул йылдарҙа ғаилә мөнәсәбәттәре юғары власть органдары тарафынан да күҙәтелә ине. Йәштәрҙең бер-береһенә булған ҡайнар тойғоларын һиҙемләгән мөхәррир ирем уларға ярҙам итеү сараһын күрә. Йәштәр ғаилә ҡороп йәшәй башлай. Был

мөхәббәттең илле йылдан ашыу дауам итеүенә, бәхетле тормош кисереп, ҡыҙҙары Зиләгә, улдары Әнүргә ғүмер биреп, аяҡҡа баҫтырыуҙарына шаһит булдыҡ.

Әммә Әмир менән ныҡлап танышыуым уның “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире булып эшләгән ваҡытында булды. Әҙәбиәткә һуңлабыраҡ килгәнлектән, һәр кешенең фекере минең өсөн оло әһәмиәткә эйә ине. Әмир Гәрәев ижадымды иғтибар менән күҙәтеүселәрҙең береһе булараҡ, ихлас баһа биреп, күңелде йылытырлыҡ фекерҙәр әйтеүе рәхмәт тойғоһо булып күңелдә йәшәй. Әйтәйек, 2001 йылда “Ғүмерем баҡсаһы” тигән китабым сығыу айҡанлы нәшриәткә барғайным, унда Әмир Сәлимгәрәй улын осраттым. Ҡайтыр юлға сыҡҡас, йүгерә-атлай мине ҡыуып етте лә:

– Китабыңды алдым, автографы ла булһын инде, – тип миңә үҙенең ручкаһын һондо. Нәшриәт рәшәткәләре эргәһендә ихлас күңелдән автограф яҙҙым.

Фатирҙарыбыҙ ҡаланың төрлө райондарында булғанлыҡтан йыш осраша алмаһаҡ та, күңелдәребеҙ яҡын булды. Ғаиләләребеҙ араһындағы йылы мөнәсәбәт һәр саҡ дауам итте.

1973 йылдың йәйендә Матбуғат йортоноң ҙур залында Ғилемдарҙың илле йәшлек юбилейына арналған кисәлә лә бергә булдыҡ, бик матур мәлдәр кисерҙек. Ҡәләмдәше, ижадташы Ғ. Рамазановтың вафатынан һуң да ҡайғымды еңеләйтергә тырышыуҙары, хәлемде белешеп, йылы һүҙҙәр менән йыуатыуҙары онотолмай. Әмир Гәрәев Ғ. Рамазанов хаҡында бик йылы яҙылған иҫтәлеген дә баҫтырып сығарҙы. “Дүрт мөхәббәт” тип атала ул: Ғ. Рамазановтың “Дүрт мөхәббәт” тигән шиғырын мәҡәләнең исеме итеп алған. Ошо шиғыр нигеҙендә шағирҙың шәхесен, донъяға ҡарашын, ғаилә мөнәсәбәттәрен асыуға өлгәшкән.

2006 йылда мин уларҙы түңәрәк йәшемә арналған табынға саҡырҙым. Бик ҡыҙыҡлы, тәрән мәғәнәгә эйә булған бүләк килтергәндәр: “Ч” хәрефенә башланған һүҙҙәрҙән туҡылған шиғырҙар йыйынтығы ине ул. Фамилиямдың “Ч” хәрефенә башланыуына ишара, шаҡтай ҡыҙыҡлы, уйландырырлыҡ китап миндә матур иҫтәлек булып һаҡлана. Унда яҙылған ҡотлау һүҙҙәре бик тиҙ үтеп киткән ғүмер юлдарына алып ҡайта...

Әмир Гәрәевтың вафатын ишетеү бик ауыр тәьҫир итте миңә. Шағирә Әнисә Таһирова менән уны һуңғы юлға оҙатырға барҙыҡ. Ул инде беҙҙе күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Иҫән сағында әйтелмәй ҡалған һүҙҙәр күңелде өйкәй.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, үлем берәүҙе лә ситләтеп үтмәй. Һәр кем үҙенә бирелгән ғүмер юлын үҙенсә үтә, яҙмышына яҙғанды кисерә. Хәтерләүемсә, Әмир Сәлимгәрәй улы кешеләргә ҡарата мәрхәмәтле, ярҙамсыл булды. Әйтәйек, ауылдашы, Бөйөк Ватан һуғышының беренсе группа инвалиды, яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллиндың хәләл ефете Зөләйха апайҙың һүҙҙәре хәтеремә килә (улар йәйҙе Ишембай районы Әрмет ауылында үткәрә ине):

– Әлдә Әмир туғаныбыҙ бар. Беҙҙе һис тә хәтеренән сығармай, Өфөнән ҡайтып төшөү менән хәл белешергә килә, Өфө яңылыҡтары менән таныштыра, һәр төрлө ярҙамынан ташламай, – тигәйне ул.

Беҙгә, хәҙергә иҫәндәргә, үткәндәрҙе һағынып, киткәндәрҙе юҡһынып йәшәүҙән башҡа йыуаныс юҡ. Ғүмер юлдашы Фәниәгә һаулыҡ, сабырлыҡ теләйек. Ә “тельняшкалы әҙип” Әмир Сәлимгәрәй улы Гәрәевтың яҡты рухы беҙҙең йөрәк түрендә йәшәйәсәк. Мәңгелеккә киткәндәрҙең урыны йомшаҡ, йәндәре тыныс булһын.

**Фәниә ЧАНЫШЕВА.**

# Дәүләт уҡытыусыны күтәрһә...

«Ағиҙел»дең 7-се һанында (2009 йыл) Өфө сәнғәт академияһы профессоры Мәжит Алкиндың «Юғары мәктәптә белем сифатына идара итеү кризисының сәбәптәре» тигән мәҡәләһен ҙур иғтибар менән уҡып сыҡтым. Юғары, урта һәм түбәнге белем өсөн әлеге кризис шарттарында уртаҡ булған бер проблема бар: уҡытыуҙы илдә барған процестарға нисек яҡынайтырға һәм яҡшыртырға? Бер яҡтан ҡараһаң, тиҙ хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе урап үтергә тырышабыҙ, иҫке ҡалыптар буйынса йәшәйбеҙ һәм эшләйбеҙ һымаҡ. Мәжит Алкин бик мөһим булған белем алыу проблемаларына, белемде арттырыу, ғилми-тикшеренеү программаларын заман талаптарына яраҡлаштырыуға, уҡыу системаһын һәм процесын яҡшыртыу мәсьәләләренә иғтибар итеп китә. Ҡыҫҡаһы, уҡытыусының белеме һәм дипломы заман талабына тап килергә тейеш.

40 йыллап уҡытыу эшендә эшләгәс, миңә автор ҡуйған проблемалар яҡшы аңлайышлы. Хәҙер байтаҡ кешеләр дипломы буйынса эшләй алмай, сәбәбе: йә эшләргә ҡыйынһына, сөнки белеме самалы, өҫтән-мөҫтән генә уҡыған. Бына шундай диплом алыусылар күбәйгәндән-күбәйә, дипломдың ҡәҙере бөтә башланы, конкуренция юҡ. Ҡайһылар юғары белем тураһында дипломды белем өсөн түгел, ә кеше араһында абруй булһын өсөн ала, шул арҡала эштең сифатына зыян килә. Әлеге ваҡытта мәғариф һәм мәҙәниәт алдында торған проблемаларҙы төплөрәк хәл итеү буйынса саралар күрелә. Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев мәктәпкә ҡағылған бер сығышында: «Советтар Союзында белем биреү системаһы, уҡыусыларҙың белеме юғары кимәлдә ине, быны сит илдән килгән шәхестәр, белгестәр юғары баһаланы. Беҙгә хәҙер әлегә тиклем йәшәп килгән мәғариф системаһының яҡшыһын, заман талабына тап килгәнен, файҙалыһын ҡулланыуҙа ҡалдырырға, ә етешһеҙ яҡтарын үҙгәртергә, алдынғы илдәр тәжрибәһен ҡулланырға кәрәк», – тигәйне.

Шуныһы ҡыуаныслы: республикабыҙҙа уҡыу учреждениеларына яңы биналар ҡоролоп, улар техник-йыһаздар, компьютер менән тәьмин ителә. Ремонт, реконструкция эштәре күп бара, яңы заманға ярашлы мебелдәр, янғынға ҡаршы системалар ҡуйыла. Былар барыһы ла бушҡа эшләнмәй, күп сығымдар талап итә. Үҙәктән алыҫ районддарҙа (Хәйбулла, Ейәнсура, Баймаҡ, Әбйәлил, Балаҡатай, Ҡыйғы, Дыуан, Ҡариҙел, Асҡын) социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса күп эштәр башҡарылды. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда тыуым да арта башлап, бында мәктәптең, яңы һалынған мәҙәниәт учреждениеларының роле лә ҙур. Тимәк ауыл йәшәйәсәк, ауылға иғтибар арта, өмөт һәм ышаныс йәшәтә бит кешене.

Рәсәйҙә белемдең сифатын яҡшыртыу өсөн Берҙәм дәүләт имтиханы (БДИ, русса – ЕГЭ) индерелде. Был «батыусы һаламға йәбешә» тигән кеүек инде. БДИ системаһын ҡулланыу алдынан бәхәстәр күп булды, төрлө ҡараштар тыуҙы, әммә «өҫтә» ултырған ағайҙар үҙҙәренсә хәл итте, йәнәһе, БДИ мәғарифта тамырланған ришүәтте бөтөрөүгә ярҙам итә, имтихандар ғәҙелерәк үтер һ.б. Мәскәү башлығы Юрий Лужков, байтаҡ ҡына ректорҙар, мәктәп директорҙары, уҡытыусылар БДИ-ны хупламаны. Бер сығышында Ю. Лужков, был киләсәктә ғилем системаһына зыян ғына килтерәсәк, тип тә әйтергә мәжбүр булды. БДИ-ны хуплаусылар, йәнәһе, уға тиклем мәктәп тамамлағандар бер-ике айҙа ике-өс тапҡыр имтихан тапшырып сәләмәтлектәре ҡаҡшай, һаулыҡтарына зыян килә һ.б. тип аңлатырға маташты.

Ниңә ул уҡыусы институтта биш йыл буйына имтихандар тапшырмай ҙа көйөнмәйме ни? Кем был фани донъяла борсолмай ғына уҡып сыҡҡан да кеше булған? Барыбыҙ ҙа быны үттек, уның ҡарауы, алған дипломыбыҙҙың ҡәҙерен

беләбеҙ. Үтеп киткән ҡабул итеү имтихандарынан һуң, киреһенсә, БДИ коррупцияны, алдашыуҙы, ғәҙелһеҙлекте арттырҙы, тип әйтә башланылар. «Комсомольская правда» гәзитендә, БДИ-нан һуң Мәскәү юғары уҡыу йорттары Кавказ яғынан килгән абитуриенттар менән тулды, тип яҙҙылар. “Шул тиклем абитуриенттың БДИ-ҙа сағылған балдары белеменә тап киләме икән?” тигән һорау тыуа. Ә белемдәрен тикшереп булмай, сөнки был – ҡағиҙәне боҙа. Әлбиттә, артабан кемдең кем икәне уҡыуҙа беленәсәк, ҡайһыһы уҡый алмайынса китәсәк, әммә улар яҡшы уҡыусыға тәғәйенләнгән урынды биләне бит. Үҙәктән ситтә ятҡан юғары уҡыу йорттарында, техникум-колледждарҙа ошо арҡала уҡыусылар етешмәй, сөнки ҡулында БДИ булған абитуриент, белеме бармы-юҡмы икәнлеген ҡарап тормай, баш ҡалаға ынтыла.

Элгәре юғары уҡыу йорто булһынмы, уртамы – мәктәптәрҙә йөрөп үҙҙәренә абитуриент йыялар, кемдең уҡырға киләсәген алдан беләләр ине. Алдынғы ауыл мәктәптәре менән ошондай бәйләнеш насар инеме ни? Алкин әйтеп китеүенсә, хәҙерге система ил тураһында хәстәрләй алырлыҡ, белемле кешеләр тәрбиәләргә мөмкинлек бирмәй. Тимәк, имтихандарҙы түгел, ә уҡыу процесын үҙгәртергә, мәктәптәрҙе компьютер һәм башҡа йыһаз-техника менән тәьмин итергә, бигерәк тә уҡытыусыға ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Уҡыусы имтихан биреү өсөн генә уҡымай, ә белем өсөн уҡырға бурыслы, уның донъяға, иленә, халҡына ҡарашы дөрөҫ формалашырға, белем алыу туҡтауһыҙ процесҡа әйләнергә, алған белеме тормош ҡанундарына тап килергә тейеш.

Хәҙерге көндә уҡыу-уҡытыуҙы яҡшыртыу, минеңсә, күҙәтеү органдарына ғына ҡайтып ҡала, методкабинеттарҙың барлығы ла һиҙелмәй. Ә контроль органдарының эше уҡыу учреждениеларында Мәскәүҙән, РОНО-нан, ГУНО-нан төрлө комиссиялар ебәреп, уҡытыу эшен, институт йәки мәктәптең матди базаларын тикшереп, протокол яҙыуҙан ары китмәй. Был эштең файҙаһы ла күренмәй, киреһенсә, уҡытыусылар үҙҙәренә ҡарата ышанмаусылыҡ, кәмһетеү кисерә, ижади эшләүгә урын ҡалмай. Уҡытыусының эше – ул профессор булһынмы, кем булһын – комиссияның береһе китеп, икенсеһе килгәнсе дауам итә. Уҡытыусылар, үҙ сиратында, һәр комиссияға ҡулайлашырға, юҡты – бар, ҡараны аҡ итеп күрһәтергә тырыша. Бындай осраҡта уҡытыусының балалар, ата-әсәләр менән күңел биреп эшләүе кемгә кәрәк? Уҡытыу эшендә йылдан-йыл ҡағыҙ яҙыу арта, уҡытыусының ярты ғүмере шул ҡағыҙҙар менән үтә, ә ғаиләһен ҡарарға ваҡыты ла ҡалмай. Ҡағыҙҙарҙың йөкмәткеһе хәрефтән-хәрефкә юғарынан ҡуйылған ҡалыпҡа тап килергә тейеш. Әлбиттә, быныһын да белергә кәрәктер, әммә төп эшкә зыян килергә тейеш түгел. Дәүләт чиновниктары үҙҙәренең кәрәклеген ҡағыҙҙарға сумып күрһәтергә тырыша – башҡаса улар бит эшһеҙ ултырасаҡ.

Йыш ҡына уҡыу йортона килгән комиссияларҙың ваҡыты файҙалы эш менән түгел, ә берәй иркенерәк кабинетта ҡунаҡ булыу (банкет), етәкселәргә маҡтау һүҙҙәре ишеттереү, күстәнәстәр алыу менән тамамлана. Миңә, йырсы булараҡ, шундай мәжлестәрҙә бер нисә тапҡыр булырға тура килгәйне. Комиссия артынан комиссия килә, ә эш элеккесә дауам итә. Комиссиялар, яңыса эшләргә өйрәтәбеҙ, тип юғары органдарға отчет бирә, формализм көсәйә. Ҡайһы бер комиссияла уҡытыу эшенән алыҫ торған ағзаларҙы ла күрергә тура килә. Әлбиттә, бөтә комиссияларҙы ла бер ҡалыпҡа һалып булмай, мин үҙем күргәндәре тураһында ғына яҙам. Минеңсә, был комиссиялар эшмәкәрлеген уҡытыу эшенә яҡынайтып, файҙалы яҡҡа үҙгәртергә кәрәк. Әле, тормош ауырайған һайын, комиссиялар күбәйә.

Уҡыусылар ҙа аптырай, уҡытыусыбыҙ комиссия алдында нисектер үҙгәреп китә, беҙҙең менән үҙен икенсе төрлө тота ине, ти. Шулай итеп, ике төрлө

стандарт – ике йөҙлөлөк барлыҡҡа килә. Мин 15 йыл директор булып эшләнем, инде һигеҙ йыл пенсияла булһам да, әле лә эшләйем. Башҡорт теле уҡытылған башланғыс кластарҙа ҡумыҙ, фольклор түңәрәктәре алып барам. Һәр уҡытыусының эшен, кәйефен, уның эшкә ҡарашын  күреп торам. Күбеһе, бигерәк тә оло  йәштәгеләре, ысын күңелдән бирелеп эшләй. Ләкин уларҙан зарланыу һүҙҙәрен йыш ишетергә тура килә: мәктәптә хәл көсөргәнешле ҡурҡытыуға (шантаж), комиссияларҙың уҡыу йортонда йыш булыуына, эш хаҡының аҙлығына, ялға, ғаилә проблемаларына ваҡыт етмәүгә, тыңламаған балаларҙың күбәйеүенә зарланалар. Ҡайһы берҙәре эш хаҡы етмәү арҡаһында өҫтәмә: техничка, тәрбиәсе һ.б. эштәргә егелергә мәжбүр була. Сөнки квартира, коммуналь хеҙмәттәр хаҡы йылдан-йыл  арта. Шуға күрәлер ҙә уҡытыусыларҙың ҡайһылары эш хаҡы күберәк килгән риэлтор, бизнес, сауҙа кеүек башҡа эшкә күсергә мәжбүр. Әлбиттә, ундай эште лә әҙерләп ҡуймағандар – кемгә нисек эләгә. Ҡайһы бер уҡытыусылар, эше булһа, бөгөндән китер инем, ти.

Ата-әсәләр уҡыуҙа балаларға ярҙам итмәй, нисек уҡыуын тикшермәй. Күп кенә балалар ваҡыттарын урамдарҙа йөрөп уҙғара, тәмәке тарта, тартмағаны бик һирәк. Ҡарау етмәгәнгә подъездарҙа төнгө 12-гә тиклем һыра эсеп  ултыралар, әшәке һүгенәләр. Ошондай етешһеҙлекте күреп, «ҡарауыл" тип ҡысҡыраһы  килә. Ҡайҙа барабыҙ  был фани донъяла, ҡайҙа  килеп туҡтарбыҙ? Ҡайһы бер атайҙар мәктәпкә килеп аяҡ та баҫмай. Шундай шарттарҙа эшләүе уҡытыусыға бик ауыр. Эскелектең, наркоманияның йылдан-йыл көсәйеүе уҡытыу, тәрбиә эшенә бик ҙур зыян килтерә. Шул айҡанлы хәҙер  мәктәптәрҙә ауыр холоҡло, тәртипһеҙ балалар  күбәйеп, уларҙы уҡырға йәлеп итеүе  ауырлаша, махсус кластар арта, балалар колонияһында үҫмерҙәр кәмемәй.

Уҡытыу эшенең абруйы булмау сәбәпле, уҡытыусы әҙерләгән уҡыу йорттарына башҡа уҡыу йортона инә алмағандар килә: ваҡыт уҙғарырға, армияға эләкмәҫкә. Барыбыҙға ла мәғлүм: уҡытыусының эше ныҡ ауыр; дәрес биреү, уҡытыу процесы ауыр түгел, сөнки уҡытыусы шуның өсөн уҡыған, ә уҡытыу тирәләй барлыҡҡа килгән атмосфера ауыр. Уҡытыусының эшен еңеләйтергә тырышыу әле лә бик һиҙелмәй, тел сарлауҙан ары китмәй. Мәктәптә ремонт барһа, уҡытыусыларҙы мотлаҡ йәлеп итәләр: йәнәһе, тиккә аҡса алып ятмаһын. Эшкә ҡыуғансы, бәлки, уҡытыусыларҙы берәй файҙалы курсҡа йөрөтөргә кәрәктер. Ҡыҫҡаһы, бахыр уҡытыусы, эш хаҡын алам тип, ниндәй генә кәмһетелеүҙәр күрмәй. Пенсия йәшендәгеләрҙе, етте, быйыл  һуңғы йыл эшләйһең, тип ҡурҡыталар. Ризаһыҙлыҡ күрһәтеү хәүефле, сөнки эшһеҙ ҡалыуың ихтимал, үҙ-ара тәнҡитләшеү бөттө. Педсоветтар ҡурҡытыу органына әйләнде, кешенең фекерен һорау юҡ, уҡытыусылар педсоветта бер-береһен яҡларға ҡурҡып ултыра. Профсоюздарҙың ҡәҙере бөттө,  ахыры, уларҙың эше лә, теше лә күренмәй, премия бүлергә генә оҫталар. Ә бит профсоюздың төп эше – хеҙмәтсәндәрҙе яҡлау, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу, коллективта яҡшы атмосфера булдырыу. Ҡыҫҡаһы, дөрөҫлөк өсөн көрәшергә, кәмһетелгәндәрҙе яҡларға.

Хеҙмәт хаҡы аҙ булыу  арҡаһында юғары әҙерлекле педагогик кадрҙар эштән китә, йәштәрҙән алмаш булмау был коллективтарҙың олоғайыуына килтерә. Дәүләттең социаль-иҡтисади һиммәттәре араһында педагог хеҙмәтенең арзан баһаланыуы йәштәрҙең тармаҡҡа ынтылыуын тотҡарлай, тип яҙа Алкин. Мин әле уҡытыусының эшенән китеп, кире ҡайтҡанын осратҡаным юҡ. Киреһенсә, элек ниндәй ҡыйынлыҡтар, кәмһетеүҙәр кисереп, бушҡа эшләп йөрөгәнмен, тип ебәрәләр. Сөнки  хәҙер байлыҡ беренсе урында тора, аҡсаң юҡ икән, дәрәжәң кем булыуға ҡарамаҫтан, һинең ҡәҙерең юҡ. Совет заманында уҡып сыҡҡан педагогтар хәҙер пенсияға китә, ә йәштәре йә  яраҡһыҙ булып сыға, йә ауырлыҡтарҙан ҡурҡып, башҡа эшкә күсә: эш хаҡы ҡәнәғәтләндермәй. Һөнәрен яратып эшләгәндәр йәштәр араһында бик аҙ.

Кемдеңдер мәҡәләһендә мин: «Отношение к учителю показывает, на каком уровне цивилизации мы живем», – тигән юлдарҙы уҡығайным. Әйтәйек, Скандинавия илдәрендә уҡытыусы бик юғары исем, теләһә кем уҡытыусы булып эшләй алмай, сөнки конкуренция ҙур. Улар күп ваҡытты балалар менән берәмләп эшләп уҙғара, шуның өсөн дә унда уҡытыусы менән уҡыусы араһында аңлашыу, бәйләнеш яҡшы. Беҙҙә лә уҡытыу эшенең стимулын үҫтерергә кәрәк, шул саҡта конкуренция ла буласаҡ, эшкә лә конкурс менән генә аласаҡтар. Эшен ташлап сит илдәргә киткән юғары белемле уҡытыусылар, фән кандидаттары, докторҙар, кире ҡайтыр. Был мәсьәләлә беҙ дүрт-биш йыл эсендә алға китергә тейешбеҙ, сөнки йәмғиәт яҡшы яҡҡа үҙгәрһә, мәктәп тә артта ҡалмаясаҡ.

М. Алкин хаҡлы: был мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеү өсөн күп кенә интеллектуаль һәм капиталь сығымдар кәрәк. Әгәр дәүләт лайыҡлы киләсәк әҙерләргә теләй икән, сығымдарҙы йәлләргә тейеш түгел, сөнки улар һуңынан файҙа булып әйләнеп ҡайтыр.

**Ризуан МӨХӘМӘҘИЕВ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған**
**мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

## Яҙылайыҡ!

Яҙғас, алыҫтаныраҡ яҙайым әле. Буй үҫтереп, беҙҙе ир ҡорона еткергән быуаттың икенсе яртыһынан. 60-сы йылдарҙың башы. Ул заманда тау аша беҙ йөрөп уҡыған Толпар (Ғафури районы) мәктәбенең һәм ауыл китапханаһының да уҡырлыҡ китаптары ҡыртышына тиклем уҡылып, таушалып бөткән. Яңыларын килтереп беҙҙе шатландырырға, ниңәлер, бер кем дә ашығып тормай. Айына бер тапҡыр килеп торған «Пионер» журналы ла танһыҡ ҡандырып уҡырға етмәй.

Шулай, мин 6-сыны тамамлағас, йәйгелеген төрткө (һуҡыр сысҡан) тотоп йыйған хәләл аҡсама «Ағиҙел»гә яҙылдым. Уны ҡышын класташ малайҙар менән журналдың һәр номеры теткеләнгәнсе уҡый инек.

Киләһе йылынан беҙҙең бәләкәй генә Һуйыр-Айыс (Белорет районы) ауылына унлаған дана килә башланы. Беҙҙең кеүек үҫмерҙәргә лә оҡшағандыр, баҫмаың тиражы ла ул йылдарҙа ҙур ине.

Журналды ҡулыма, әйткәнемсә, тәү башлап 7-селә уҡығанда алғайным. Хәҙер инде алты тиҫтә йыл да йәшәп ташланды. Шул саҡтан алып «Ағиҙел»дән айырылғаным булманы ла шикелле, теүәл генә хәтерләмәйем. Хатта әрмеләрҙә йөрөгәндә лә бер нисә номер йыйылып, посылка менән килеп торҙо. Хеҙмәттәштәрем – төрлө милләт вәкилдәре. Мин – башҡорт. Посылка килһә, тегеләр тиҙерәк уны ҡутарып, тәм-том эҙләү яғын ҡарай. Ә мин, үҙемә килгәнен асып, тыңҡыслап тултырылған гәзиттәр араһынан «Ағиҙел»де эҙләйем. Посылка менән килгән нәмәләр араһында минең өсөн шунан да ҡәҙерлерәк нәмә юҡ. Уның менән миңә туған телем килә, тыуып-үҫкән ерҙәремдең йылыһы менән моңо килә бит. «Ағиҙел» минең өсөн ғүмерем буйына күңелемде, йәнемде туйҙырыусы рухи аҙыҡ булды.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, миңә юғары белем алырға насип булманы. Шулай булһа ла, мин «Ағиҙел»де, ул мине ташламаны, уҡытты, аңымды үҫтерҙе. Тормошта үҙ юлымды, лайыҡлы урынымды табырға ярҙам итте, тиһәм, һис бер хата булмаҫ.

Пенсияға сыҡҡас та, 2007-2008 йылдарҙа Екатеринбургҡа терәлеп торған бер ҡалала, заводта мастер булып эшләп алдым. Ул тарафтарҙа Башҡортостандың

төньяҡ райондарынан элегерәк күсеп килеп, хәҙер ваҡытлыса, йөрөп эшләүселәр ҙә бихисап икән. Татарса һөйләшеп, күптәре үҙҙәрен татармын тип йөрөй. Мин яйлап уларҙың ҡайһы райондан икәнен, ауылдарын һорашып белешәм. Һуңынан маңҡорттарына башҡорт икәнен аңлатам. Улар аптырап:

– Ағай, барыһын да ҡайҙан беләһегеҙ? – тип ҡыҙыҡһыналар ҙа, – мәктәптә тарих уҡытып ҡына йөрөмәй…– тип тә ебәрәләр.

– Төрлө сәбәптәр менән тел үҙгәрһә лә, ҡаныңда булған башҡортлоҡто, һатып торған төҫ-ҡиәфәтеңде юйып ташлап булмай бит,– тием. Килешәләр.

Ниңә мин был турала төпсөрләп яҙып ултыра тиһегеҙ? Сөнки мин «Ағиҙел»дә даими баҫылып килгән «Башҡорт ауылдары тарихын» һәр саҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барҙым. Ауылдарыбыҙ, күренекле шәхестәребеҙ тураһында үҙемә күрә ентекле, бай мәғлүмәт алдым.

Милләтте күтәргән данлы шәхестәребеҙ тураһында, «Ағиҙел»дә ысынбарлыҡҡа тап килгән, тулы мәғлүмәттәр әленән-әле сыға килеүе бик һәйбәт. Юҡһа, милләтте данлай алырҙай шәхестәребеҙҙе тартып алырға ғына торалар.

Аҡылы беҙҙең аңыбыҙҙа, даны илебеҙҙә булған Мостай Кәримдең ҡайһы милләт вәкиле икәнен дә аңлатырға тура килгеләне ҡайһы берәүҙәргә… Бер саҡ Мәскәүҙән шылтыраталар. Баҡтиһәң, америкалы татар кешеһе ҡунаҡханала, бар ғәләм халыҡ алдында Мостай Кәримдең бөйөк шағирлығына баҫым яһап, унан татар шағиры әүәләп маҡтана икән. Минең таныш, ғилми дәрәжәгә эйә булған кеше лә, өҙөп кенә уға ҡаршы ҡуйырлыҡ бер дәлил дә таба алмаған, ғүмерен сит-ят ерҙә, ситтәр өсөн эшләп уҙғарғас. Ярҙам өсөн, тиҙ генә Мостай Кәримдең Ғайса Хөсәйенов төҙөгән шәжәрәһе менән, уның үҙенең ташҡа баҫылған «мин башҡорт булдым һәм булып ҡаласаҡмын» тигән һүҙҙәрен ебәрҙем.

Тарихыбыҙ ысынбарлығын, дөрөҫлөктө «Ағиҙел»дән алып башҡаларға еткерә алыуыма шатмын.

Әлбиттә, ул хәҙер 45 йыл элек мин ҡулыма алған журнал түгел. Олпат. Бай йөкмәткеһенә торошло күләме лә зауығыңа ярашлы материалын һайлап уҡырлыҡ.

Үҙем әлеге ваҡытта М. Кәримдең көндәлектәрен ҡат-ҡат уҡып һөйөнәм. Булған, булды, әле лә булыр тип, башҡортта, фарсыларҙың Хәйәме кеүек, төбөнә төшөп еткеһеҙ аҡыл һандыҡтары.

Арыу-талыу белмәй тарихи дөрөҫлөк юллаусы Рәүеф Насировтың яҙмаларын яратып уҡыйым. Көтәм. Быйылғы 9-сы номерҙа бирелгән Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлиндың «Башҡорт ханы – Ҡараһаҡал» тарихы тетрәндергес. Һыҡтай-һыктай уҡыным. Бер һүҙе лә түшәмдән алып йә бармаҡ һурып табылмаған.

Тик, ни өсөн бауын быуып, халҡыбыҙҙы зар илатҡан иҫ киткес ваҡиғаларҙы беҙ, башҡорттар, ғына уҡып һыҡтарға тейеш әле, тип уйлайым. Үҙебеҙгә – фәһем, башҡа халыҡтарға ғибрәт итерлек тарихты ни өсөн ҡаса-боҫа ғына үҙ ҡаҙаныбыҙҙа бысмырлатабыҙ? Фәтүәһе ҡайҙа? Урыҫ телле уҡыусыға еткерә торған «Бельские просторы» журналы, йә булмаһа «Ватандаш» өс телдә сыға лаһа.

Шағирҙар күп, тик уҡыусылары ғына юҡ, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Шиғыр – хикәйә йә повесть түгел шул ул. Әҙ яҙып, күпте әйтә белеү кәрәктер, уҡымлы булһын тиһәң. Үҙемә ҡалһа, һәр береһен уҡыйым. Күңелгә ятырҙайын эҙләйем, тапҡырлайым. «Баҙар балта»һынан һуң Рауил Бикбаевты уҡымайса ҡалдырмайым. Тамара Ғәниеваны үҙ итәм. Уның көслө поэмалары, шиғырҙары, берҙәй үк публицистикаһы ла оҡшай. Мөнир Ҡунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһен дә ихлас уҡып сыҡтым. Яҙыусыһында илһам, уҡыусыһында өмөт һүнмәһен, тип ҡуйҙым Мөнирҙең киләсәген күҙаллап.

Минең ише ғүмерен заводта үткәреп, ҡулдары ҡатҡан кеше лә шиғри һүҙҙе

яратҡас, яҙыусыһы булһа, уҡыусыһы ла мотлаҡ табылыр. Ҡулдары ҡатһа ла, йөрәктәре ташҡа әйләнеп бөтмәгәндер әле.

Әҙәби жанрҙар араһында шиғриәт иң өлкәнелер, моғайын. Шуға ҡарамаҫтан, меңәр йылдар дауамында уның төбөнә кем төшөп еткән һуң? Ул мәңге асылып бөтмәҫ сер донъяһылыр, бәлки. Бөйөк Мостайыбыҙ әйткәнсә, зинһар, «күп һыҡтамағыҙ, сеңләшмәгеҙ» генә…

Мин яҙыусы ла, тәнҡитсе лә түгел. Шулай булғас, «Ағиҙел»де буйлауҙы ла туҡтатырға кәрәктер. Тик әйтәһе һүҙҙәрем әйтелмәй ҡала кеүек. Журнал – минең ғүмерлек юлдашым, тигән фекерҙе еткергәйнем булһа кәрәк. Юлдаш өсөн борсолған саҡтар ҙа килеп сыға, юҡһа, ниндәй юлдаш ти ул.

Дүрт меңдән ашыу… Ойошмаһында 230-лап ағзаһы булған ҙур Яҙыусылар союзы өсөн, етмәһә, журналды ойоштороусылар исемлегендә беренсе булып (матбуғат өсөн яуаплы түрәләре менән) Республика Хөкүмәте торһа? Һанмы ни был… Әйтер һүҙем тираж тураһында икәнен дә аңлағанһығыҙҙыр.

Әллә журнал редакцияһы үҙе лә уҡыусыларын биҙҙерәме? Ауыр замандарҙа туҙға яҙмаҫтайҙы ташҡа баҫып. Уҡыусының аңына барып етмәҫтәй, етһә лә һыймаҫ ғилми фараздар менән ялҡытты. Мин Й. Солтановты күҙ уңында тотам. Ул фаразлағанса, ярты донъя – башҡорт, тик ниңәлер «Ағиҙел»дең уҡыусылары кәмей бара.

Минең кеүектәр ултырып та, ятып та, аяҡ өҫтө баҫып та уҡырҙар ине. Нисек башҡаларҙы йәлеп итергә?

Әҙерәк кенә һандар менән эш итеп ҡарайыҡ.

Республикабыҙҙа нисәмә мең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы бар? Китапханаларҙы, мәктәптәрҙе бергә ҡушайыҡ. Сөнки тап шунда нәфис әҙәбиәткә һөйөү уяна. Башҡорт телендә сыҡҡан барлыҡ гәзит, журнал редакциялары хеҙмәткәрҙәрен дә шуттан сығармайыҡ. Башҡорт телле журналистар менән меңләгән йәш һәм танылған яҙыусыны ла «мотлаҡ»тар исемлегенә индереп, 20000 самаһы уҡыусы булырға тейеш, фактик 4100-ҙө лә ҡушып. Ап-анһат ҡына килеп сыҡты кеүек. Мин үҙем дә ышанып бөтмәйем быға. Шулай булғас, яртыһынан баш тартып 10000 ҡалдырһаҡ, ҡапылғара ярап торор ине. Әллә быныһы ла хыялмы?

Яҙылайыҡ, дуҫтар! Район гәзиттәре лә мең ярым тиражы менән шул уҡ хаҡ менән тигәндәй сығарыла, ҡыйбатыраҡ булмаһа?

«Ағиҙел» – беҙҙең рухи шишмәбеҙ! Быны иҫтән сығармайыҡ. Ниңә уны тамсылайбыҙ, ҡуш ус тултырып эсмәй? Зиһенебеҙ яҡтырып китерлек итеп…

**Мансур ҺИҘИӘТОВ,**
**элекке металлург.**
**Белорет ҡалаһы.**

**РЕДАКЦИЯНАН**: *Журнал уҡыусы, беҙҙең ҡарашҡа, фәһемле фекерҙәре менән уртаҡлаша. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ журналды күберәк таратыу хаҡында? Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ…*

## «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2009 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### ● СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Байымов Роберт.** Каруан килә Бағдадтан. Тарихи-документаль роман. ....1-2
**Бәҙретдинов Сәлимйән.** Аҡҡош ауаҙы. Хикәйә. ....3
**Ғиззәтуллина-Ғайсарова Гөлсирә.** Төшлөктәге төш. Хикәйә. ....2
**Ғиниәтуллин Талха.** Тыуған тупраҡ. Хикәйә. ....6
**Ғирфанов Түләк.** Митинг. Хикәйә. ....7
**Даянова Тәскирә.** Мөғжизәгә ышанам. Хикәйә. ....4
**Зиганшин Камил.** Джамбо, Африка! Дөйәнән төшә – "Тойота"ға менә бәҙәүи. Аргентина – күңелдәрҙе арбар ил. Көләс Непал тупрағында. Сәйәхәтнамә. ....9–11
**Йәнбирҙина Зөбәржәт.** Хирург. Хикәйә. ....2
**Кәримова Рәйсә.** Ҡунаҡ. Хикәйә. ....4
**Ҡунафин Мөнир.** Тәңре өрөк ҡапҡанда. Хикәйә. ....3
***Лушников Леонид***. Тауҙарҙа һыналған дуҫлыҡ. Повесть. ....8
**Мурсиев Заһит.** Ҡыпсаҡ ораны. Хикәйәт. ....10
**Мусин Ноғман.** Ҡала себене. Хикәйә. ....6
**Низаметдинов Замир.** Ҡайтауаҙ. Хикәйә. ....5
**Нурғәлиев Ишғәли**. Ҡарабаш турғай. Повесть-яҙмышнамә. ....11-12
**Салауат Әбүзәр.** Ҡиәмәт. Хикәйә. ..5
**Тимершин Рәдиф**. Сәйер кеше. Хикәйә. ....8
**Хисамов Ғәлим.** Аһура Мазда. Роман. ....4-5
**Яҡупова Гөлнур.** Ҡатындар. Трилогия. Ҡыҙ бала. Беренсе китап. ....7-8


### ● ШИҒРИӘТ


**Алтынбаева Зөһрә.** Ҡайҙа минең Таһирым?! Шиғырҙар. ....1
**Бикбаев Рауил.** Хазина. Поэма. ....10
**Бәхтейәр.** Һорағың киләлер. Шиғырҙар. ....4
**Ғәләүетдинов Сәрүәр.** Атайыма. Шиғырҙар. ....12
**Ғәниева Тамара.** «Үтәләйгә һуға был осор…» Шиғырҙар. ....12
**Закиров Мөхәммәт.** Таныуҙары ҡиммәт. Шиғырҙар. ....1
**Зөфәр Вәлит.** Шул уҡ атай йорто… Шиғырҙар. ....2
**Илбаев Мөхәммәт**. Батырҙар. Поэма. ....3
**Инсур Артур.** «Мин – йөрәкмен Ҡояш күтәргән…». Шиғырҙар. ....6
**Йосопов Тимер.** «Мәңгелектең керпек ҡаҡҡанындай, шундай ҡыҫҡа икән ғүмерҙәр…» Шиғырҙар. ....7
**Камил Фазлый.** Мәктәп. Шиғырҙар…2
**Кинйәбулатова Кәтибә**. Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй… Шиғырҙар. ....1
**Ҡотоева Гөлназ**. «Күңелдә яңы моң тирбәлә…». Шиғырҙар. ....8
**Күсмәева Мәрйәм.** Күперленең гәлсәр шарлауығы. Шиғырҙар. ....4
**Ҡәҙим Аралбай**. Аҡмулланың шиғри шишмәһе. Шиғырҙар. ....8
***Лилиә* Һаҡмар.** Өфөмә йыр. Шиғырҙар. ....11
**Мифтахов Риф.** Сабыйҙар бишеге өҫтөндә. Поэма. ....9
**Муса Сиражи.** Былбыл һәм халыҡ моңо. Шиғырҙар. ....2
**Мәүлит Ямалетдин.** «Аһ, ул төндөң сағыу балҡыштары…» Шиғырҙар. ....5
**Нәзиров Марис.** «Бала саҡтан бирле һүрәт күрәм, илһам ғазаптары кисерәм…» Шиғырҙар. ....7
**Радик Хәкимйән.** «Эй, был тормош!..» Шиғырҙар. ....11
**Рамай Ҡаһир.** Ҡояш – усаҡ. Шиғырҙар. ....5
**Рауил Шаммас.** Тарих битен асып. Шиғырҙар. ....11
**Рәмил Йәнбәк.** «Уйҙар урап алды ҡабаттан…» Шиғырҙар. ....9
**Рәшит Шәкүр.** Скрипка моңо. Хикәйәт. ....5
**Сирусина Лена.** «Йөрәк ҡағыуҙарын ауырыу итмә…» Шиғырҙар. ....6
**Суфияров Фәрит.** Яҙмыш ҡулындамын. Шиғырҙар. ....10
**Сәғиҙуллина *Лилиә*.** Беҙ уйнаған уйындар. Шиғырҙар. ....12
**Таңһылыу Ҡарамыш.** Шағир. Шиғырҙар. ....6
**Туғыҙбаева Фаҡиһа.** Ҡан хәтере. Шәлкем. ....4
**Фәтих Сайфран.** Мөхәббәтең менән… Шиғырҙар. ....3
**Харрасова Фәндидә.** Ҡапка төбөндә… Поэма. ....2

**Шафиҡова Кәүсәриә.** «Ҡулымда – аҡҡош ҡаурыйы…» Шиғырҙар. ….7
**Әсхәл Әхмәт-Хужа**. Парсалар. …...8
**Әсәҙуллина Әлфиә.** Күңелемдә Хоҙай йәшәй. Шиғырҙар. ..............….........3

● СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Зарипов Хәкимйән.** Ҡуш йөрәкле егеттәр. Комедия. …............................9

● ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Гәрәева Гөлфирә.** Хәҙерге прозала «аң ағышы» ….................................................6

● ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Вахитова Айһылыу.** Боҙҙар булып аҡтарылыр күңел. …..................................9
**Ғайсина Фәнирә.** Башҡорт фольклорында «төш күреү» мотивы. .............…8
**Ғәниева Тамара.** Шағирһыҙ милләт буламы? ....................................................1
**Күзбәков Фәнил.** Саялыҡ. …...............2
**Ҡунафин Ғиниәт.** Уйсан да, хиссән дә, моңсан да шағирә *(Гөлфиә Юнысова ижадына бер ҡараш)* ..............................…8
**Таһирова Земфира.** Башҡорт хикәйәләрендә – пейзаж. .............................…8
**Хөсәйенов Ғайса.** Хәҙерге шиғриәтебеҙгә бер байҡау. ..................................12
**Хәбиров Әнғәм.** Үҙенә тоғро шағир *(Марат Кәримовтың яңы быуат башындағы ижадына бер ҡараш)* …......................1
**Хәбиров Әнғәм.** «Беҙ бит әле һалдат улдары…» *(Әхмәҙин Әфтәхтең һуңғы йылдарҙағы шиғриәтенә бер ҡараш)* ....…6
**Хәбиров Әнғәм.** Яуланған үрҙәр баһаһы *(Нәжибә Әминева шиғриәтенә бер ҡараш)* ….......................................................11
**Хәмиҙуллина Флүрә.** «Сыбар шоңҡар» романында милли идея сағылышы. ...7

● ШИШМӘЛӘР

**Амангилдин Дауыт.** «Ерем, илем, телем, йырым!» …......................................6
**Ғаязов Әлфис.** Йәйғор буйлап. Шиғырҙар. .............…........................8
**Кашапова Зөһрә.** Эй, Аҡмулла! Шиғырҙар. ...................................................6
**Кашапова Зәлифә.** Күңел ҡанаттары. Шиғырҙар. …......................................6
**Ҡотлогилдина Рәзилә.** Илдә тыуған ил инәһе. Мөнәжәт. ...........….........6

● ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Ғиззәтуллина Рәшиҙә.** Башҡорт, ҡурай һәм йога. …..............................................1

● ПУБЛИЦИСТИКА

**Алкин Мәжит.** Юғары мәктәптә белем сифатына идара итеү кризисының сәбәптәре. ...................................................7
**Арыҫланов Нурамбәк.** Рәсәй Федерацияһы төбәктәренең иҡтисади үҙаллылығы мәсьәләләре. ...............................…6
**Вахитов Фәрит.** Шайморатов генералдың тыуыуына 110 йыл тулыу айҡанлы. .........................................................…8
**Ғабдрахманов имам Ғарифулла хажи.** Ике шәйех. ….....................................6
**Дәүләтбирҙина Тәнзилә.** Тарих биргән һабаҡ *(Башҡортостан Китап палатаһы ойошторолоуға 80 йыл)* ….............1
**Дәүләтшин Рафаэль.** Рәсәй мосолмандарының беренсе съезы. …....................4
**Йыһаншин Сабир.** Алтын Йондоҙ ни өсөн бирелмәгән? ....................................4
**Йәнғәлин Әхмәт-Гәрәй.** Һуңғы башҡорт ханы йәки Аҡай – Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш. …...............................9-10
**Карамов Сәләхетдин.** Уҡылмаған хат. ................................................................2-3
**Күзбәков Фәнил.** Милли мәғариф: төп бурыс – шәхес тәрбиәләү. ..............9
**Кәлимуллин Рәшит.** Ҡала фатиры – атай нигеҙе түгел. ...............................…4
**Ҡотлоғәлләмов Марсель.** Икмәгебеҙҙә ниңә әрем тәме? ..................................7
**Матюшин Сергей.** Исламда дөрөҫ туҡланыуҙың файҙаһы тураһында. ….8
**Насиров Рәүеф.** «Башҡорттар исеменән…» ......................................................7
**Нәбиев Хәмит.** Йылдар аша тапты рухы тынғылыҡ. …....................................1
**Саҙриев Миҙхәт.** Мәғариф философияһы. …...................................................3
**Ситдиҡова Гүзәл.** Ислам – Рәсәйҙе һаҡлашыр нигеҙ ташы. ......................…8
**Хажиев Ризван.** Көрәшкә ҡоролған тормош. …..................................................1
**Хисамов Хәким.** Улар беренселәр булды. ….....................................................4
**Хужин Мәхмүт**. Баҙар шәүләһе. ....…3
**Хужин Мәхмүт.** Һин – миңә, мин – һиңә, йәғни коррупцияның тамырҙары ҡайҙа, уны ҡоротоп буламы? ................6

**Хужин Мәхмүт.** Елкә менән алға ҡарамайҙар. ....................................................8
**Хужин Мәхмүт.** Насар ғәҙәт – төҫ түгел. ........................................................11
**Хужин Фәйруша.** «Ватан өсөн, Сталин өсөн, алға!» ..........................................5-6
**Шәрипов Фәнил.** Ҡаңлылар байрағы аҫтында. ....................................................3

## ● БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

### Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 75 йәш

**Марсель Ҡотлоғәлләмов.** Изге хистәрең йылыһында ҡойона тыуған илкәйең. Очерк; **Абдулхаҡ Игебаев**. Башҡортостан Президенты. **Ирек Кинйәбулатов**. Хәҙер беҙҙе донъя таныны. **Рәмил Йәнбәк**. Күгәрсенем. **Рәйес Түләк.** Президент Рәхимовҡа – шиғырҙар. ..................2
**Ғүмәров Сәлимйән.** Мәғарифҡа арналған ғүмер *(Ғалим Әхмәр Аҙнабаевҡа 75 йәш).* ........................................................5
**Ирек Кинйәбулатов.** Офоҡтарҙа аҡ түбәләр тора... *(Әхмәт Сөләймәновҡа 70 йәш).* ........................................................3
**Ханнанов Рәсих.** «Әй буйына ҡайтам әле...» *(Ризван Хажиевҡа 70 йәш).* ..........9

### *Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл*

**Бикбаев Рауил.** Илһамлы ижад юлында. ....................................................3

## ● БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Ус төбөндәге Йыһан *(Булат Рафиҡовтың тыуыуына 75 йыл тулыу айҡанлы).* ..........................7
**Гәрәева Гөлфирә.** Саңҡыны бөркөт булып *(Әмир Чанышевтың тыуыуына 100 йыл).* ........................................................1
**Ғәбиҙуллин Самат.** Кешеләрем! Шиғырҙар. ................................................10
**Кинйәбулатов Ирек.** Ярһыу ғүмер, ярһыу ижад *(Ғәзим Шафиҡовтың тыуыуына 70 йыл).* .......................................9
**Ҡәҙим Аралбай.** Һамар башҡорттарына. Шиғыр. ..........................................2
**Ҡәҙим Аралбай.** Шағир урамы *(Самат Ғәбиҙуллиндың тыуыуына 70 йыл).* ......10
**Мостафина Рәмзиә.** Әҫәрҙәре – тере шишмәләр *(Баязит Бикбайҙың тыуыуына 100 йыл).* ..............................................1
**Мәмбәтова Гөлйемеш.** Туҡ буйы – тыуған яғым *(Сөләймән Муллабаевтың тыуыуына 85 йыл).* ...............................10
**Нәҙерғолов Миңлеғәли**. Мәғрифәт саҡсылары *(Атаҡлы ғалим һәм әҙип Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуыуына 150 йыл тулыу уңайынан).* ............................1
**Өмөтбаев Рамаҙан.** Тәүге мөхәббәт. Хикәйә. ................................................4
**Өмөтбаев Рауил.** Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы *(Рамаҙан Өмөтбаевтың тыуыуына 85 йыл).* ..............................................4
**Таңһылыу Ҡарамыш.** Моңдоң йәне – мөхәббәт *(Рәмзилә Хисаметдинованың тыуыуына 60 йыл).* .................................5
**Таһирова Земфира.** Ҡабатланмаҫ ижад донъяһы. ....................................10
**Рәйес Түләк.** Миҙгелдәр. Шиғырҙар. .....................................................................10
**Хөсәйенов Ғайса.** Ялҡынлы ижади мираҫ *(Рәшит Нигмәтиҙең тыуыуына 100 йыл).* ....................................................2
**Шаһиев Рәүеф.** Ижади маһирлыҡ *(Күренекле ғалим, педагог, атаҡлы фольклорсы Марат Минһажетдиновтың тыуыуына 75 йыл).* ...........................................5
**Шәйхулов Нурислам.** Ҡаҙ бәпкәләре һары икән... Хикәйә. .........................2
**Шәрипов Сабир.** Мөләйем әҙип ине... *(Нурислам Шәйхуловтың тыуыуына 80 йыл).* ...........................................................2
**Әлибаев Зәки.** Заман йырсыһы *(Мөслим Мараттың тыуыуына 100 йыл).* ....5
**Әминев Әмир.** Дуҫ тураһында һүҙ *(Вил Ғүмәровтың тыуыуына 60 йыл).* ...4
**Әхмәр Үтәбай.** Ауылдашым *(Рәйес Түләктең тыуыуына 50 йыл).* ....................10
**Юлдашева Тамара.** Башҡорт зыялыһы *(Әхиәр Хәкимдең тыуыуына 80 йыл).* ......................................................................8

### «Ағиҙел» ҡунағы

### *Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһына – 25 йыл*

**Кәбир Аҡбашев.** Тынғыһыҙ ижад усағы. **Салауат Рәхмәтулла, Тимер Ниәтшин, Кәбир Аҡбаш, Рәшит Заһиҙуллин, Земфира Муллағәлиева, Асия Басирова, Рәйлә Нәҙерғолова, Рәшиҙә Шәмсетдинова, Әксән Хәлилов, Рима Ғәлимова, Рита Фәтҡуллина, Кәрим**

**Булат, Фәрит Әхмәтов, Артур Булатов, Ғәлиә Ғәлиәскәрова, Рәсим Шәфи-Рәхмәт.** Шиғырҙар. **Флүрә Сәлимова.** Ерҙе һатмағыҙ! Уйланыу; **Әмир Ҡотлозаманов.** Фәрештә. Хикәйә; **Риф Дәминев.** Һуҡ бармаҡлы бейәләй. Хикәйә-хәтирә; **Рауил Галин.** «Йырла, улым…»; **Тимербулат Мөхәмәтҡолов**. Аптырамай. Уймаҡ хикәйәләр. ..........................9

## ● ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғафаров Әхмәт.** Салауат Юлай улы. Тарихи монография. …...............6
**Ибраһимов Ғәли.** Кинйә. Тарихи роман. III китап. Бүгәсәү батша һанаты. ......................................................3 – 7, 9 – 12
**Иҙелбаев Мирас.** Салауат хаҡында тәүге тарихи монография. …......................6
**Ильясов Ғәли.** Таштар. Шиғырҙар. ….....................................................................3
**Поварисов Суфиян.** Умырзая сәскә атҡанда... ......................................................12
**Шәриф Бикҡол.** Ҡайтаралһам әгәр. Шиғырҙар. …......................................5

## ● САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Кәримов Марат.** Ҡыҙыл калейдоскоп. Хикәйә. …..............................................3
**Мар. Сәлим.** Сатирик пенсия-ха сы-ха-ха! Автопародия. ....................................1
**Әҡбәров Закир.** Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар. Лимонлы ришүәт. Алтын туйҙағы ғауға. …...............................................8
**Әминев Марат.** Туҙан. Ултырыш. Еңгә һөтө. Ураҙа. Юморескалар. Ир һүҙе. Скетч. …..................................................4

## ● СӘНҒӘТ

**Ғирфанов Түләк.** Халыҡ рәссамы. …10
**Ғәйнуллина Таңһылыу.** Ижады яҡты, ғүмере бәхетле. ......................................4
**Ғәниева Тамара.** Ижад офоҡтары. ….5
**Йәһүҙина Рәмилә.** Һыуғояр – ижадсы билгеһе. ...................................................2
**Йәһүҙина Рәмилә.** Үткәндәргә һәм бөгөнгөгә бер ҡараш *(Башҡорт дәүләт академия драма театрына – 90 йыл)* ..........12
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Йондоҙло ижад. ........................................................6
**Әсфәндиәрова Клара.** «Рухы көслө халыҡ – еңеүсе». …...................................5
**Янышев Фәнис.** Наҙ өләшеүсе рәссам. …...................................................................2

## ● ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Яҡтылыҡ. …....1
**Вәлиев Ильяс.** Мостай Кәрим ижадында тәбиғәт. ...............................................11
**Докучаева Алла.** «Был донъяла тауҙар бар сағында…» .........…............................3
**Кинйәбулатов Ирек.** Аҡ шишмәнең тынмаҫ тауышы. ….................................3
**Яҡупова Гөлнур.** «Аҡ юл!» тиеп бышылданы остазым. …..............................3

## ● ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Ильясов Малик.** Мөхәббәт кәмәһе. Уймаҡ хикәйәләр. ............….........9

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл**

«Һөйҙөм, һөйөлдөм. Моғайын, бәхеттең олғашыуы ошолор…» .................10
**Сыңғыҙ Айытматов, Михаил Алексеев, Давид Кугультинов, Иосиф Кобзон, Ренат Харистың** халыҡ шағиры хаҡында әйткән фекерҙәре. .................10
**Мостай Кәрим**. Үҙемә өгөт. Шиғырҙар. ......................................................10
**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. ….10

## ● ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Ахмедов Магомед.** Бөркөтлө тауҙар илендә. Шиғырҙар. …........................2
**Романов Борис.** «Кемгә, ҡасан тейер был сәғәҙәт?..» Шиғырҙар. ….................4
**Шакир Сәлим.** Уҡыусыма. Шиғырҙар. …......................................................7

## ● БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА

**Рахманғолов Сибәғәт.** Яңы үрҙәргә. *Мәләүез.* ….................................................8
**Фәйрушин Мәғсүм**. Нефтте Камалай ағыҙҙы. *Нефтекама.* …...........................3

## ● РЕСПУБЛИКАНЫҢ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫ

***Башҡорт дәүләт университетына – 100 йыл***

**Марат Зәйнуллин.** Беҙ – бәхетле халыҡ; **Рәмзиә Бикәнәсова.** Университеттың беренсе проректоры; **Зәки Әлибаев.** Ғалим. Етәксе. Педагог; **Илшат Янбаев.** Фән һәм әҙәбиәт юлында. …...............11

● **МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ**

**Янышев Фәнис**. Тауҙар ҙа уны һағына. ………5
**Янышев Фәнис**. Әҙәбиәткә һәйкәл. .10

● **«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ**

*«Күңелемдә – донъя сере»*

**Бүләков Фәнил.** «Күңелемдең ҡылдарына…» Шиғырҙар. ………3
**Ғәлләмова Зилә.** «Юлыңа сығырға ҡыймаҫмын…» Шиғырҙар. ………6
**Иҡсанов Мөнир.** Сәйерлек. Шиғырҙар. ………7
**Ишбулатов Илгиз**. Мин – осар ҡош. Шиғырҙар. ………2
**Ишемғужина Айгөл**. Көҙ. Шиғырҙар. ………6
**Күзбәкова Гөлдәр.** Һин – татлы ғазабым. Шиғырҙар. ………10
**Ҡансурина Әлфидә.** Ҡуласа. Шиғырҙар. ………12
**Ҡарағужина Зөлфирә.** Бикембәткә. Шиғырҙар. ………1
**Мусина Гөлназ.** Ныҡ булырға саҡырыу. Шиғырҙар. ………5
**Сафин Айгиз.** «Бер ҡасан да осмаҫ инем…» Шиғырҙар. ………3
**Солтанов Морат.** Төнгө элегия. Шиғырҙар. ………10
**Сөләймәнов Ринат.** Яҙ. Шиғырҙар. ......5
**Хәсәнова Рита.** Юғалтма. Шиғырҙар. ………11
**Шаммасов Алмаз.** Ҡыҫалар… Шиғырҙар. ………6
**Шәрәфетдинова Айзилә.** Йыуанысым. Шиғырҙар. ………12
**Яҡупова Ләйсән.** Йән – күбәләк. Шиғырҙар. ………2
**Яҡшыбаева Гөлнара.** Ленараны йоҡлатҡанда. Шиғырҙар. ………7

***Рәсәй Федерацияһы яҙыусыларының XIII съезынан сығыштар***

**Бикбаев Рауил.** Ғәмдәрҙе берләштереп. ………6
**Ганичев Валерий.** Дуҫлыҡ тыуҙырған хазина. ………6

***Башҡортостан яҙыусыларының дөйөм йыйылышынан***

**Рауил Бикбаев.** Уртаҡ хәстәрҙәр бергә туплай; **Хәсән Назар.** Әҙәбиәтебеҙҙең йөрәге; **Сабир Шәрипов.** Быуындар бәйләнеше нығынһын; **Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Күпмелер алға барабыҙ шикелле; **Рәдиф Тимершин.** Көлгән кеше – күркәм; **Рәшит Сабит.** Ышаныс менән йәшәнек; **Наил Ғәйетбай.** Пьеса йыйынтыҡтары юҡ! **Факиһа Туғыҙбаева.** Икһеҙ-сикһеҙ күңел яҡтылығы; **Владимир Денисов.** Бергәлеккә ни етә; **Айҙар Хөсәйенов.** Тәржемәләү үҙенсәлектәре; **Фәнил Күзбәков.** Маҡсаттарыбыҙ изге һәм бер үк! Сығыштар. Башҡортостан Республикаһы яҙыусыларының 2008 йыл йомғаҡтары буйынса дөйөм йыйылышы резолюцияһы. .......5

***Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала Сыңғыҙ Айытматов көндәре***

**Хисамитдинова Фирҙәүес.** Сыңғыҙ Айытматов һәм башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрендә мифологик мотивтар. **Ҡотоева Гөлназ.** Сыңғыҙ Айытматов ижадының рухи донъябыҙға йоғонтоһо. ………12

**КИТАП КӘШТӘҺЕ**

**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Милли батырыбыҙға рухи һәйкәл. ………7

● **«АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2009 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ**
12

● **«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ**
1, 6, 12.

● **ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ**
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9, 10, 11, 12

● **2009 ЙЫЛҒЫ ЮБИЛЯРҘАР.**
1

***

12–14 ноябрҙә республикабыҙҙа «Пермь крайы башҡорттарының мәҙәниәт көндәре» шаулап үтте. 2007 йылда башҡорт ырыуҙары Мәскәү батшалығына үҙ ирке менән ҡушылыуҙың 450 йыллығы айҡанлы БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығының махсус проектын ғәмәлгә ашырыуҙың дауамы һәм сағылышы ине ул. 2008 йылда Өфөгә Силәбе өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ килеп ҡайтты, былтыр – ырымбурҙар. Проект халҡыбыҙҙың милли үҙаңын тергеҙеү, туған телде һаҡлау, милли мәҙәниәтте үҫтереү һәм илдең төрлө төбәктәрендә йәшәгән милләттәштәребеҙ менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштырыу маҡсатын ҡуя.

Пермь крайында Ғәйнә ырыуы башҡорттары борон-борондан йәшәй. 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса унда 40,7 мең башҡорт теркәлгән. Күплеге буйынса милләттәштәребеҙ урыҫ, татар һәм коми-пермяктарҙан ғына ҡалыша. Барҙым, Октябрь, Чернушка районадарында улар күберәк йәшәй. 2006 йылдың апреленән крайҙа башҡорттар ҡоролтайы, 9 районда уның бүлектәре эшләп килә. Чернушка ҡалаһында «Кама буйы башҡорттарының телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү үҙәге» асылған. 2008 йылдан «Пермь башҡорттары» гәзите нәшер ителә.

Мәҙәниәт көндәренә күршеләрҙән 150-нән ашыу кеше килгән. Улар араһында дәүләт власы органдары вәкилдәре, ғалимдар, эшҡыуарҙар, Пермь, Чернушка, Уса, Куеда ҡалалары һәм Барҙым, Октябрь районадарының башҡорт ижади коллективтары вәкилдәре бар. Ошо айҡанлы Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында крайҙың халыҡ кәсебе оҫталары, үҙешмәкәр рәссамдарҙың хеҙмәттәре, милли аш өлгөләре, башҡорт телендә нәшер ителгән китаптар күргәҙмәһе асылды.

Крайҙың мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте белгесе Е. Шумкова фекеренсә, был сараға яҡшы әҙерләнгәндәр, традиция киләсәктә лә лайыҡлы дауам иттереләсәк. «Башҡортостанда Пермь башҡорттары мәҙәниәт көндәре үткәреү тураһында хәбәр башҡорт халҡын ҡуҙғытып ебәрҙе, – тине урындағы ҡоролтай башҡарма комитеты рәйесе Р. Мөхәмәтйәнов. – Уға әҙерлек Ғәйнә башҡорттарының милли тамырҙарын, традицияларҙы һаҡлап ҡалыуын, үҙ мәҙәниәтен ҡәҙерләүен күрһәтте. Чернушка ҡалаһындағы «Оран» үҙәге базаһында фольклор коллективы эшләй, балалар башҡорт телен өйрәнә».

13 ноябрҙә баш ҡалала Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты «Пермь башҡорттары: тарих, ысынбарлыҡ һәм рухи үҫеш перспективалары» тип аталған «түңәрәк өҫтәл» уҙғарҙы. Уның эшендә дәүләт эшмәкәрҙәре, Ҡоролтай советы ағзалары, ғалимдар һәм матбуғат саралары вәкилдәре ҡатнашты. Һөйләшеүҙе башҡарма комитет рәйесе Р. Аҙнабаев алып барҙы. Фекер алышыуҙа БДУ тарихсыларынан Р. Йосопов, М. Ҡолшәрипов, Н. Ҡолбахтин Ғәйнә башҡорттары тураһында белешмә бирҙе, уны боҙоп күрһәтергә маташыусыларҙы фашланы. Пермь крайынан урындағы башҡорттар тураһында киң мәғлүмәт менән тарих фәндәре докторы А. Черных, милли мәҙәниәттәрҙе һаҡлау буйынса башҡарылған эш хаҡында край хакимиәте белгестәре һ.б. сығыш яһаны. Фекер алышыуҙарҙа туған телде уҡытыу проблемалары әүҙем күтәрелеп, уны хәл итеү өсөн эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлек кәрәклегенә иғтибар йүнәлтелде.

Башҡортостанда Пермь башҡорттары мәҙәниәт көндәре урындағы сәнғәт оҫталарының гала-концерты менән тамамланды.

***

Өфөлә "Башҡортостан Республикаһының 2009 йылдағы иң яҡшы китапханаһы" конкурсы уҙҙы. Бишенсе тапҡыр уҙғарылған был сара З. Вәлиди исемендәге Милли китапхана, БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Мәғариф министрлығы берлегендә ойошторолдо. Конкурстың төп маҡсаты – мәҙәниәт, мәғлүмәт һәм ағартыу үҙәге булараҡ, республика китапханаларының ижади инициативаһын үҫтереү. Һөҙөмтәлә республиканың 23 китапханаһы еңеүсе тип табылды, тағы 12-һе дипломант дәрәжәһенә эйә. Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев сарала ҡатнашыусыларға тәбрик һүҙе әйтте:

– Конкурсты йомғаҡлағанда, беҙ китапхана системаһын, уның матди-техник базаһын үҫтереү буйынса алып барған эштәрҙең һөҙөмтәһен дә барланыҡ. Еңеү яулаған 23 китапхана – уңышлы эшмәкәрлектең миҫалы.

***

БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Туймазы ҡалаһы хакимиәте ойошторған «Оҙон көй-2009» V төбәкара башҡорт йыры конкурсында Башҡортостандан, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән 130-ға яҡын кеше ҡатнашты. Йыр бәйгеһе өс йәш категорияһына бүленде: 16 йәшкә тиклемгеләр, 16 йәштән 60 йәшкә һәм 60 йәштән өлкәндәр. Конкурстың гала-концертында Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев та булды. «Оҙон көй-2009» конкурсының төп бүләген Балтас районынан Рәзидә Әхмәтова яуланы. Сарала ҡатнашыусы иң йәш башҡарыусы Рушана Әбсәләмоваға ете, ә иң олоһона – Иглин районынан Хәфизә Әбшәриповаға 86 йәш.

**Ҡотлайбыҙ!**

Рәсәй Федерацияһы Президенты Д.А. Медведев Указы менән Башҡортостан республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Бикбаев Рауил Төхвәт улы Почет ордены менән наградланды. Был юғары наградаға күренекле шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре илебеҙ мәҙәниәтен һәм сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне һәм күп йыллыҡ һөҙөмтәле эшмәкәрлеге өсөн лайыҡ булды.

Башҡортостан Республикаһы Президенты указдары менән яҙыусылар, шағирҙар, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзалары:

Назаров Хәсән Мөҙәрис улы – «Башҡортостан Республикаһында фиҙакәр хеҙмәте өсөн» отличие билдәһе, «Һәнәк» журналы редакцияһының әҙәбиәт бүлеге мөдире Мифтахов Риф Фәйзрахман улы Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһы менән бүләкләнде; Ғиззәтуллина Гөлсирә Мирза ҡыҙына «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде; Әлибаев Сафуан Әфтәх улы, Кинйәбулатова Кәтибә Кәрим ҡыҙы, Ноғоманов Борис Миңлеғәлим улы, Солтанов Йыһат Әҙеһәм улы, Хисамов Ғәлим Афзал улы Башҡортостан Республикаһы Президентының Рәхмәт хаты менән бүләкләнде.

***

Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

Башҡорт халҡының мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыуға һәм артабан үҫтереүгә булышлыҡ итеү, ватандаштарыбыҙ менән иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе киңәйтеү маҡсатында III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын 2010 йылдың июнендә Өфө ҡалаһында үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

***

Башҡорт дәүләт университетының ойошторолоуына 100 йыл тулыу уңайы менән ошо уҡыу йортон тамамлап, Башҡортостандың халыҡ шағиры исеменә, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булған әҙиптәр менән осрашыу үтте. Кисәне башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы

Марат Зәйнуллин асты һәм университетта белем алып хөкүмәтебеҙҙең юғары бүләгенә лайыҡ булған байтаҡ шәхестәрҙең исемдәрен атаны. Ҡунаҡтар – филология фәндәре докторы, академик Ғайса Хөсәйенов, «Истоки» гәзитенең баш мөхәррире Александр Филиппов, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йософов, шағир Ирек Кинйәбулатов, прозаик Таңсулпан Ғарипованың сығыштары илһамлы, фәһемле булды. Кисәлә бер нисә китабын сығарып өлгөргән 5-се курс студенткаһы Кристина Андриянова, «Шоңҡар» әҙәби-ижад берекмәһе ағзалары Фәйез Харрасов, Резеда Шәрифуллина, Зарина Бағышаева, Миңзәлә Асҡароваларҙың шиғыр уҡыуҙары ла алҡыштарға күмелде. Студенттарҙың йыр-бейеүҙәре лә кисәгә йәм генә өҫтәне.

***

Шағирҙар – Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, «Шоңҡар» журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев, «Йәшлек» гәзитенең яуаплы сәркәтибе Мөнир Ҡунафин Ейәнсура районында әҙәби осрашыуҙарҙа ҡатнашты. Улар үҙәк район китапханаһында, Ейәнсура башҡорт гимназияһында, Сирғол һәм Ибрай мәктәптәрендә булды. Осрашыуҙарҙа әҙәбиәт, бөгөнгө башҡорт матбуғаты, йәмғиәттә зыялыларҙың роле хаҡында ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә әңгәмәләр ойошторолдо, шиғырҙар уҡылды.

***

6 ноябрҙә Мәләүез районында Булат Рафиҡовтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған саралар уҙҙы. Тәүҙә Б. Рафиҡов исемен йөрөткән Корнеевка дөйөм урта белем биреү мәктәбендә митинг булды, әҙиптең бюсына сәскәләр һалынды.

Көндөң икенсе яртыһында Мәләүез ҡалаһының мәҙәниәт һарайында хәтер кисәһе үтте. Унда Мәләүез районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Зөфәр Зиннур улы Иҫәнов сығыш яһаны, Б. Рафиҡов исемендәге район премияһын әҫәрҙәренең өс томлығын, башҡа китаптарын сығарғаны һәм ижадын пропагандалағаны өсөн әҙиптең ҡатыны, журналист Лина Рафиҡоваға тапшырҙы. Унан әҙиптәр Ҡәҙим Аралбай, Ғиниәт Ҡунафин, Әмир Әминев, ҡыҙҙары Гөлсәсәк, Гөлназ, ейәне Булат, шулай уҡ Б. Рафиҡов исемендәге район премияһы лауреаттары, район башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Юнир Аҙнағолов һ.б. яҙыусы һәм йәмғәт эшмәкәре тураһында һөйләне, хәтирәләре менән уртаҡлашты.

Сығыштар район һәүәҫкәр артистарының сығыштары менән аралашып барҙы. Мәҙәниәт һарайының фойеһында яҙыусы ижадына арналған стенд ҡуйылғайны, Б. Рафиҡов һәм башҡа башҡорт әҙиптәренең китаптарын һатыу ойошторолғайны.

***

Күренекле башҡорт шағиры Самат Ғәбиҙуллиндың (1939 – 1997) тыуыуына 70 йыл тулыу, әҙиптең “Шаңдаҡ” исемле күркәм китабы сығыу уңайы менән Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғолда әҙәби-мәҙәни саралар уҙҙы. Тәүҙә йәмғәтселек вәкилдәре әҙип оҙаҡ йылдар хәбәрсе булып эшләгән, “Баҙал” ижад берекмәһен етәкләгән “Таң” район гәзите редакцияһы бинаһына беркетеүле мәрмәр таҡтаташҡа сәскәләр һалды. Митингыла сығыш яһап, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Юлай Манапов мәрхүм ҡәләм оҫтаһының яҡты һынын күҙ алдына баҫтырҙы. Мәҙәниәт йортондағы ҡәҙер һәм хөрмәт кисәһен инеш һүҙ менән район хакимиәте башлығы урынбаҫары Венера Вәлиева асты. Сәхнәнән ҡурай моңо, илһамлы йырҙар, аһәңле шиғырҙар, бағышлауҙар яңғыраны, Самат Ғәбиҙуллиндың ҡәрҙәштәре һәм ҡәләмдәштәре, ветерандар сығыш яһаны. Юбилей сараларында Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбай, “Шаңдаҡ” китабын төҙөүсе шағир Зөфәр Вәлит, “Ағиҙел” журналы вәкиле, яҙыусы Сабир Шәрипов ҡатнашты. Фойела китап sауҙаһы ойошторолдо, автографтар бирелде.